**Йыһат Солтанов**

# ШӘЖӘРӘЛӘР



**Өфө – 2014**

# ҮҪӘРГӘН БАТШАЛАР ШӘЖӘРӘҺЕН БАРЛАУ

Ҡомартҡының төп нөсхәһе XIX быуат аҙағында хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Йәнсура районы Байыш ауылы муллаһы Муса хәҙрәттә һаҡланған, Өмбәт ауылы кешеһе Әхмәтшәриф Абдуллин тарафынан башҡарылған күсермәһе 1954 йылда уның улы Ғибарҙан Н.Т.Хәсәновҡа юлығып, Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел, әҙәбиәт институтына тапшырылған. Заманында этнограф Р.Ғ.Кузеев уның 3 битлек өҙөгөн генә файҙаланыуын иҫәпкә алмағанда, был бик мөһим документты ғалимдарыбыҙ иғтибарһыҙ ҡалдырған...

"Үҫәргән тәүәрихе"ндә Үҫәргән-башҡорт батшаларыбыҙҙың "донъя яратылғандан уҡ" быуын-быуын һуҙылып килмеш шәжәрәһе күргәҙмә һабаҡ рәүешендә бирелә (унда башҡорт тарихының һәм бөтә кешелек донъяһы тарихының бик күп серле һорауҙарына яуап бар). Баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле был хазинабыҙ тулы килеш (ошо авторҙың аңлатмалары менән ҡуша) матбуғатҡа тәүге тапҡыр сығарыла:

## Үҫәргән тәүәрихе

**1. Ишек. — 2. Уның улдары: а) Афрасиаб** бин Ишек, **б) Күриң** бин Ишек. — **3. Фаридун** бин Күриң. — **4. Уның улдары: а) Мөслим, б) Алсаҡ Айран, в) Түрәҡан Фәкфәдәр. — 5. Ҡаф** бин Түрәҡан Фәкфәдәр. — **6. Уның улдары: а) Круз** (Һарт иленең батшаһы, Геродоттағы *Крез*: б.э. тиклем 560-546[1]) һәм уның улы **Таһмәнә Сәбиб; б) Ҡавәб. — 7. Бәширмин** бин Ҡавәб. — **8. Сам Сиуар. — 9. Ңал Ңаман. — 10. Бәһлеүән Рөстәм. — 11. Уның улдары: а) Сәһрәб Ширсуан** һәм уның улы **Бөрзин (Бөрйән) Нирул** һәм уның улы **Тамыр; б) Мануҗуһр** бин Ирани Таһманиб. — **12. Нәвҙар** бин Мануҗуһр. — **13. Ңаб** бин Пузар. — **14. Ғикбад. — 15. Кииксарув** (Мидия батшаһы, Геродоттағы *Киаксар:* б.э. тиклем 625-585). — **16. Аҡҡар Әййүб** бин Киаксарув. — **17. Кәштә** бин Әййүб. — **18. Әсфәндиәр. — 19. Баһуман. — 20. Уның улдары:** ***Драб бин Баһуман*** (уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ); **Лоҡман** (Лоҡман-хәким – бөрйәндәрҙең бабаһы. – Й.С.). **— 21. Тағиб** бин Лоҡман. — **22. Хан Суғар. — 23. Хан Баҡи. — 24. Уның улдары:** ***хан Сәнкүм*** (уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ), **Башыҡара** бин баҡи. — **25. Хан Ҡантур** бин башыҡара. — **26. Хан Турғай. — 27.**

[1] Быуындарға йәйәләр эсендәге аңлатмалар — автор□ы□ы, ә тырна□тар эсенә алынғандары һәм ундағы бит һандары — "Ү□әргән тәүәрихе"нән.

**Хан Байҡу-тархан** (Майҡы-бей, 1207 йылда Сыңғыҙ-хан урҙаһында булған). — **28. Хан Байандар** (Сыңғыҙ-хандың Ҡытайҙы һәм Манчжурияны яулауында сәрғәскәр булып әүҙем ҡатнашҡан, һуңынан Башҡортостанда татар-монголдарға ҡаршы көрәш башлыҡтарының береһе). — **29. Ауыл Сәхәү-хан...**

Инде килеп баяғы киҫәтеүле (аҫтына һыҙып) торғоҙоп ҡалдырылған саталарҙы айырым сиратлап барлайыҡ:

***20. Драб бин Баһуман*** (Баһуман шам[2]... “Улы юҡтан әҙәм алып тәрбиә ҡылып, Көннур ҡыҙын уға бирҙе; һыуҙан табылғаны өсөн *Драб* тип исем ҡуйҙы; үҙенән һуң шам булды; Искәндәр Йунан унан тыуҙы, тиҙәр”. — “Үҫәргән тәүәрихе, 35-се бит. Беҙҙең өсөн бында Драб батшаның бәпес сағында “һыуҙан табып алыныуы” тураһындағы риүәйәт бик фәһемле — был хәл уның ысын-ысындан үҫәргәндәр бабаһы булыуын күрһәтә, сөнки үҫәргәндәрҙең легендар бабалары *Үҫәргән (Саргон)* да, *Көн-би* ҙә, *Муса (Моисей)* ҙа, *Жик-Мәргән* дә ана шулай “һыуҙан табып алынған”дар. Үҫәргән әсәләре иһә ҡыҙыҡһынып төпсөнөүсе бала-сағаларына әлегәсә, “бәпесте һыуҙан табып алып ҡайттым”, тип аңлата). — **21. Уның улдары: а) Искәндәр Сәхиб Юнан** *(Александр Македонский)* һәм уның улы **Бурач** *(бурасы)*, уның улы **Фуч Батамуч** *(батмуссы)*, уның улы **Дәүҡиануч** *(дәүбүресе;* “был Дәүҡиануч ғайәт залим ине, аҡыл эйәләре унан ҡасып... мәмерйәләргә керҙеләр, — шуның менән мәшһүрҙер”. — 35-се бит); **б) Ашиҡ** бин Драб (“был Ашиҡ ун йыл шам булды, Искәндәрҙе тәхеткә ултыртҡанда Ашиҡ кескәй ине”. — 35-се бит), уның улы **Ашҡан** бин Ашиҡ (“был Ашҡан һарыҡ йылында шам булды, Дарийҙы Искәндәр харап ҡылғанда Ашҡан кесе ине, Арғын-бей көслө түгел ине. Искәндәр донъянан киткән йылда Римға һөжүм итте, тар-мар ҡылды”. — 35-се бит), уның улы **Һәрмүз** бин Ашҡан, уның улы **Наржа,** уның улы **Алтаф,** уның улы шам **Баһрам,** уның улы **Нәзир Жорд** шам (“Нәзир-йорт шам 20 йыл шам булды, бер мең йөҙ һигеҙгәсә (?), тиҙәр; ғайәт залим ине, үҙ ырыуы харап итте”. — 37-се бит), уның улы **Баһрам Күр; в)** ***Сасун*** ***(Сәсән*** нәҫелле батшаларҙың бабаһы йәғни Тура [Тора] таулы ***Туран иленең*** [Башҡортостандың] шанлы батшаһы ***Бәк-сәсән*** ул, б.э. II быуатында йәшәгән. *Сәсән тоҡомдары [сасанидтар]* б.э. III-VII быуаттары һуҙымында тәхеттә ултырғандар, улар дәүләте хәҙерге Төрөкмәнстан, Афғанстан, Иран, Әрмәнстан, Грузия, Әзербайжан ерҙәрен иңләп урынлашҡан һәм ғәрәптәр яулап алғанға тиклем йәшәгән. Тулыраҡ мәғлүмәтте “Хәтерхитаб”ымдың икенсе томының “Бөйөк Ҡошан” тигән бүлегендә бирҙем). — **22. Бабсаҡ** *(Папак) бин Сасун.* — **23. Артыш-ир** *(Ардашир,* 224-240 йылдарҙа батша; “Бүре-Өфө-өй”өн — Парфияны һәм “бүре-әсә” — фарсы

[2] Шам — батша.

илен һ.б. яулап алып, <u>Туран иленә</u> [Башҡортостанға] ҡаршы тороусы <u>Иран илен</u> төҙөгән ("Дәүләтебеҙ Бөйөк Ҡошан" тигән хеҙмәтемдә ҡарағыҙ). "Үҫәргән тәүәрихе"ндә әйтелә: "Ардашир утыҙ йыл шам булды, *фарсы* вә *гак* вә *лаш* илдәре уның ҡулы аҫтында ине... Бер вәзире бар ине, Шабурҙың анаһын, йәғни үҙенең ҡатынын, шуның менән боҙоҡлоҡ эшләүсе тип һанай башламыштыр һәм шул Шабурҙың анаһын ҡәлғә диуарынан ташлап, ҡанлы кәлйәмәгә әйләндермештер". — 35-се бит). — **24.** Шам **Шабур** (339-372 й.й. "шам Шабур утыҙ йыл шам булды". — 35-се бит). — **25.** Шам **Фируз** (Пероз, 459-484 й.й.). — **26.** Шам **Ҡыуат** (Ҡубад, 488-496 һәм 499-531 й.й. "шам Ҡубад 23 йыл шам булды, *Фирдәүси* хөкөмөнөң заманында ине". — 39-сы бит). — **27. Уның улдары:**

**1)** шам Ҡыуат улы **...нау...н,** уның улы **Жуанир,** уның улы **Шәһриар,** уның улы **Мирза-алып,** уның улы **Һәрмуз** (*Хормозд III,* 457-459 й.й.), уның улы **Тиауач,** уның улы **Жабин;** һәм йәнә Жуанир менән бер туған (**Ба)һрам,** уның улы **Ғам,** уның улы **Сиавуш. — 28. Ғали-хан** бин Сиявуш. — **29. Ташбуға-хан. — 30.** Хан **Суман. — 31.** Хан **Күсләк. — 32.** Хан **Айтуп. — 33.** Хан **Тимерил. — 34.** Хан **Байкә. — 35.** Хан **Ылаусы. — 36.** Хан **Байсиуб. — 37.** Хан **Ҡара. — 38.** Хан **Арғырд. — 39.** Хан **Ҡол-алып. — 40.** Хан **Байжума. — 41. (..?). — 42. (..?). — 43.** Хан **Турмали. — 44. Турғай Сәхин. — 45. Тумаул Мәргән. — 46. Дуинбиан. — 47.** Хан **Буртан. — 48.** Хан **Буян. — 49. <u>Туҡан-хан</u>** (Үҫәкәй улы Темәсйән-Сыңғыҙ-хандың йәш сағында *Туҡанда — Арҡайымда* торғандағы ләҡәбе; Көнсығышҡа "монгол далаларына" китеп, көс-ҡеүәт туплағас, тирә-яҡ дала халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар, уны йыһангир *Сыңғыҙ-хан* итеп күтәрәләр). Әйткәндәй, атаҡлы йыһангирҙәребеҙ Сыңғыҙ-хан, Йеҙекәй, Аҡһаҡ Тимерҙәрҙең Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән сыҡҡанлығы беҙҙең замандарҙа Ҡаҙағстанда йәшәгән Ҡорбанғәли Юнысовтың шәжәрәһендә лә раҫлана: "Идегей, Тимур и Тимучин-Чингизхан восходят к одному общему предку, которого звали Кайдада. У Кайдады был сын Байсункар, от которого было девять сыновей. От потомков старшего сына Нотакына родился Кадаркай -- отец Эмира Идегея. От потомков третьего сына Кайдады родился Эмир Тимур. От потомка четвертого сына родился Тимучин, избранный ханом, под именем Чингизхан"... Инде килеп "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге баяғы **Туҡан-хан (49)** шәжәрәһенең дауамы: **50. Уның улдары: а) Жужи-хан** *(Яусы);* **б)** хан **Ҡабил** бин Туҡан; **в)** хан **Ҡрыл** *(Кейек)* бин Туҡан, уның улы хан **Ҡотби; г)** хан **Тули,** уның улы хан **Хулукәтули** бин Түли, уның улдары хан **Ҡуян,** хан **Турғай,** хан **Байду, Абғай-хан;**

**2)** шам Ҡыуат улы **Нуширван Ғәҙел** *(Хосров I,* 531-579 й.й. "Нуширван... 20 йыл шам булды, уның шаһлыҡ ҡыры: Төркөстандың мәшриғенән Һиндостан мәғрибенәсә уның хөкөмөндә булды". — 39-сы бит). — **28. Бируз** бин Нуширван Ғәҙел (*Хосров II,* 628 йылда үлгән). — **29. Шырау-ир** (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628-632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер

артлы *ун батша* алмашына. Йездегирд III [632-652 й.й.] тигән берәү тәхетте биләп алғас, ***сәсәндәр*** нәҫеленән булған был <u>*Шырау-ир*</u> үҙенең алыҫ бабаһы ***Бәк-сәсәндең*** тыуған еренә — ***Туран иле Башҡортостанға*** ҡасып ҡайтып, сал ***Көн-Өфө*** [*Тура]* ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***"Туран Дархан"*** тигән батшалыҡ *ләҡәбе дәлилләй*. Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең **Дары** исемле данлы бүләһе Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы <u>*Өфө*</u> тәхетендә ныҡынған һәм **"Туран Дары-хан"** батша *ләҡәбен* алған, шунан һуң уның нәҫелдәре *лә* быуындан-быуынға <u>*"дары-хан" —*</u> <u>***тархан***</u> *ләҡәбен* йөрөтөп, башҡорттоң *тархандар ҡатламы* барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡарт-картатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере 50 [25+25=50] йыл ятҡанлыҡтан, Туран Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). — **30. Шәһриәр. — 31. Аршир. — 32. <u>Туран Дархан</u>** *(баягы Туран Дары-хан,* йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, ***Көн-Өфө — Тура*** ҡуш ҡалаһында). — **33. Жәзир Жир. — 34. Әбү Алсаҡ** ("Алсаҡ-ир бер заман Баратурз дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөкәтле һәм Искәндәр-сафиуллаға тиң хан ине". — 58-се бит). — **35.** Солтан **Ғоҫман** бин Әбү Алсаҡ (Ғоҫманлы төрөк империяһы солтандарының бабаһы). — **36.** Солтан **Жәләлитдин. — 37. Әҙһәм. — 38. <u>Баба Төкләҫ-бей</u>. — 39. <u>Трә (Тура)</u>** бин баба Төкләҫ (*Тура-хан,* XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының *Түбәнге Тирмә* ауылы эргәһендә әлегәсә һаҡланған, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI-XII быуаттарға ҡарата — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-се бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе *Ҡыҙрас Муллаҡаевтан* заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, 372-373-сө биттәр] яҙып алғанса, "хан Тура бин баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк ***Өфө*** ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған"). Иғтибар! -- Үҫәргән тәүәрихендәге батшалар шәжәрәһенең дөрөҫлөгө хәҙерге заман Ҡаҙағстан кешеһе -- баяғы Ҡорбанғәли Юнысов төрлө сығанаҡтарҙан һоҫоп алып төҙөгән һәм атабәҙ Әҙәм менән анабыҙ Һауанан башланмыш шәжәрә менән дә раҫлана (әммә унда ҡайһы бер исемдәр боҙоп яҙылған, ә ҡайһылары төшөп тә ҡалған -- шулары бында йәйәләр эсендә Үҫәргән тәүәрихендәгесә төҙәтеп яҙыла): **66. Әбделхаҡ (34. Әбү Алсаҡ). 67. Осман (35. Солтан Ғоҫман). 68. Джалялетдин (36. Солтан Жәләлитдин).** Бер быуын төшөп ҡалған **(37. Әҙһәм). 69. Бабатюкляс (38. Баба Төкләҫ-бей). 70. Термя (39. Тура-хан). 71. Каранчи (40. Ҡаҙансы). 72. Самакай (41. Ҡарадә Ҡиә). 73. Кадаркай (42. Ҡотло Ҡиә). 74. Идегей ( 43. Йедек -- Йеҙекәй).** Күренеүенсә, башҡорт батыры Йеҙекәйҙең дә, Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡ Тимер кеүек үк, ниндәйҙер татар-монгол ҡәүеменән түгел, ә Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән

сыҡҡанлығы беҙгә бәйле булмаған башҡа сығанаҡтарҙан да дөрөҫләнә. Инде алынған шәжәрәне Үҫәргән тәүәрихендәгесә дауамлайыҡ: **40. Уның (Тура-хандың) улдары:** __*Бәрҙебәк солтан бин Тура*__ йәки __*Нармуйынлы Бәрҙебәк*__ ("Үҫәргән тәүәрихе", 53,57-се биттәр. Уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ) һәм **Ҡаҙансы** бин Тура. — **41. Уның улдары: Ислам Ҡиә** бин Ҡаҙансы, __**Карадә Ҡиә бин**__ __**Ҡаҙансы**__ ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән". — 54-се бит; уның нәҫелдәрен айырым алып дауамларбыҙ), — **Ду(ҡ)с(а)ба (Туҡсаба)** бин Ҡаҙансы ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба-хан заманында Буйат-бей — бей ине", — 54,62-се биттәр; шәжәрәне күсереүсе был урында "Ду(ҡ)с(а)ба"ның ике хәрефен — йәйәләр эсендә күрһәтелмеш "ҡ" һәм "а"-ны яңылыш төшөрөп ҡалдырған; шуға күрә дөрөҫө "Туҡсаба" булыр). — **42.** __**Мүйтән-бей**__ бин Туҡсаба — **43. Шаҡмал** бин Мүйтән. — **44. Бүзәк** бин Шаҡмал ("Туҡан-хан заманында бәк булып, хөкүмәт ҡылыр ине". — 60-сы бит). — **45. Йор-уҡ (Жеруҡ,** "Туғрил-хан заманында бәк булып, хөкүмәт итер ине". — 60-сы бит). — **46. Мәңҡут** ("Үзбәк-хан заманында (1290-1341) бей ине һәм тәғрифендә булған халыҡтарға хөкүмәт итер ине". — 60-сы бит). — **47. Урал** бин Мәңҡут ("Урал тапҡан Урал-бей", тирҙәр ине, Жанибәк-хан [һәм Бәрҙебәк-хан] заманында бей булып, хөкөмәт итер ине". — 60-сы бит. Халҡыбыҙ тарафынан ошондай оло баһаға ирешкән бейебеҙҙең эшмәкәрлеге тураһында аныҡыраҡ мәғлүмәттәр һаҡланмауы үкенес). — **48. Анжан-бей** бин Урал ("Нармуйынлы Бәрҙебәк заманында бей булды, хөкүмәт ҡылыр ине". — 62-се бит). — **49. Буйат-бей** ("Туҡсаба-хан[3] заманында бей ине", — 62-се бит). — **50. Арбан-бей** бин Буйат-бей ("Арбан — Туҡтамыш-хан заманында бей булып, хөкүмәт ҡылды һәм, ғәҙел булып, унан һуң еренә *Алгыш Сурабан углы* бей булды, тиҙәр". — 62-се бит). — **51. Сарыбаш-Мәргән** (урыҫ баҫҡынсыларына ҡаршы 1661-1667 й.й. башҡорт ихтилалын етәкләүсе Һары Мәргән шуның исемен ләҡәп итеп алған булһа кәрәк). — **52. Сурабан-бей** ("был Сурабан-бей башҡорт халҡы исеменән [кенәз Бикбау] Иван Василичкә[4] барып баш һалғанда инабат өсөн мәҙкүр ханға [Яуыз Иванға] аманат итеп бирелгәнлегенән һуң Ҡазан шәһәрендә хан хозурында беренсе йыл торғандан һуң вафат булмыш; һәм шул Сурабан тере заманында шәһәре Ҡазандан татар халҡынан ҡатын алмыштыр, *күгәрсен* тигән ырыуҙан; ошо Сурабандың нәҫеле (мәҫәлән, беҙҙең заман Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов) *Күгәрсен*[5] тигән исемдә мәшһүрҙер". — 64-се бит). *Сурабан-бей улдары:* **Алғыш** ("Туҡтамыш-ханға бей булған Арбан-бейҙән һуң уның ерҙәренә бей булды; ә Арбан-бейҙең атаһы Буйат-бей Туҡсаба-хан заманында бей ине". —

---

[3] Был исемде күсереүсе яңылыштырған: "Туҡкужа-хан" (Туҡтамыш-хандың атаһы) тип төҙәтеп уҡырға кәрәк.

[4] Урыҫ батшаһы Яуыз Иванға.

[5] Хәҙерге Башҡортостандың *Күгәрсен* районының исеме шунан.

62-се бит); **Тимер Ҡара Буға** (“хан Көсөк заманында бей ине”. — 62-се бит);йәнә лә шул Сарыбаш-Мәргәндең улы **Сарыш-бей** (“Сарыш-бей Ҡасим-хан [ул 1524 йылда үлгән] заманында бей ине. Унан һуң Тура-хан[6] заманында бей булып хөкүмәт ҡылды”. — 64-се бит). — **53. Аҡмасуҡ** бин Сарыш-бей. — **54. Туҡмасуҡ.** — **55. Тәтегәс-бей** бин Туҡмасуҡ (Юрматы ырыуы шәжәрәһенән: “Тарих туғыҙ йөҙ ҙә етмеш икелә [миләди 1558 йылда] рамаҙан шәрифтең һигеҙенсе көнөндә вафат булды *Тәтегәс* баба”. [Башкирские шежере. Уфа, 1960; 31-се бит. Артабан: Тәтегәс-бей шәжәрәһе]. Юрматы бейе рәүешендә билдәле булған Тәтегәстең исемен Үҫәргәндәр шәжәрәһендә күреп аптырарға ярамай: Юрматы, Ҡанлы, Бөрйән, Түңгәүер, Күбәләк-Тиләү һ.б. ырыуҙарҙың Үҫәргәндән саталанып сыҡҡанлығын яҙғайныҡ. Әйтәйек, үҫәргәндәр табынған Көндөң (Ҡояштың) тулыраҡ исеме ***әсәр-Көн-матер*** *[шәре-ҡан-матур]* әйтелеп, шуның ҡыҫҡараҡ өлгөләренән *әсәр-Көн —* ***Үҫәргән,*** *әсәр-мәте[р] — сәрмәте [сарматы],* ***Юрматы*** һәм шулай уҡ *әсәр-ҡанлы [Үҫәргәнле]* тигәндән, яртылаш ҡыҫҡарып, ***Ҡанлы*** этнонимдары хасил булған. Шулай уҡ Үҫәргән батшалар шәжәрәһе [Геродоттағы “царские скифы”] шәхестәрен, Үҫәргәндән тыш, башҡа ырыуҙарға ла бей итеп ҡуйғандарын онотмайыҡ, мәҫәлән, Барын-Табын ырыуының бейе — үҫәргәнле Майҡы [Байҡы]-бей). — **56. Тәтегәс-бейҙең улдары: Ҡушай Ҡыуат** бин Тәтегәс һәм **кенәз Бикбов (Бикбау)** бин Тәтегәс булмаҡ. — **57. Кинйә** бин Бикбау кенәз. — **58. Уның улдары:**

**I. Әлебай** бин Кинйә, уның улы **Ураҙ-Өмбәт,** уның улы **Туғанаш,** уның улы **Яппар,** уның улы **Балсыҡ,** уның улы **Сәғит Зүрәт Жүдәк;** йәнә лә шул Әлебай улы **Теләү-Өмбәт,** уның улы **Азатҡул,** уның улы **Аҙғул,** уның улы **Шәриф,** уның улы **Әлмөхәммәт,** уның улы **Боҫҡон,** уның улы **Йылҡыбай,** уның улы **Байыш;** һәм йәнә лә шул Теләү-Өмбәт улы **Булаҡ,** уның улы **Бурағул,** уның улы **Бесәнсе,** уның улы **Яҫауыл Аҡбулат...**

**II. Ҡуңғырбай** бин Кинйә, уның улы **Түлебай,** уның улдары **Илембәт, Килдеғол, Ғайан, Ҡусҡар, Атлан** һәм дә мәҙкүр **Йәнсура** (исеме менән Башҡортостандың хәҙерге ***Йәнсура*** районы аталған, ләкин рәсми ҡағыҙҙарҙа *“Ейәнсура”* тип яңылыш яҙылып йөрөй). Шуларҙан:

**1)** *Ҡусҡар улдары*: **Аҡъйән** бин Ҡусҡар, **Бикташ** бин Ҡусҡар, **Аҡбут** бин Ҡусҡар, **Ағурҙа** бин Ҡусҡар;

**2)** *Атлан улдары:* **Ураҙ** бин Атлан, **Тутаз** бин Атлан, **Мәһди, Атҡужаҡ, Ерәнкәй, Аҡҡужа** һәм Аҡҡужаның улдары **Күҫәкҡол, Бүкәнбай;**

Атлан улы *Ураҙҙан* тыуғандар: **Муса** бин Ураҙ, **Әхмәт** бин Ураҙ, **Ҡәйүал** бин Ураҙ, **Ҡоләхмәт, Ғибадәт,** Ғибадәт улы **Имам;** һәм йәнә лә шул Ураҙ улы имам

[6] Тура-хан (икенсе) — 1524-1565 йылдарҙа *Өфө-Тура* ҡуш ҡалабыҙҙа тәхетләнмеш Исмәғил Хайрас кенәздең һәм уның улы Хаҡназар-хандың ләҡәбе.

**Ғәбидулла,** уның улдары: имам **Ғиззәтулла,** имам **Рәхмәтшафиҡ,** имам **Мөфәз** бин Рәхмәтхафиз (Ғәбидулла)...

**3) __Йәнсура__** *улдары:* **Исхаҡ** бин *Йәнсура,* уның улы **Балъяҡшай** бин Исхаҡ; **Ҡустыбай** бин *Йәнсура,* уның улы **Илбай** бин Ҡустыбай; **Мәҡсүд** бин *Йәнсура,* уның улы **Аҙнабай** бин Мәҡсүд; **Тимербай** бин *Йәнсура,* уның улы **Миңлебай** бин (Тимербай); **Тимербулат** бин *Йәнсура,* уның улы **Бикташ...**

Урыны ожмахта булғыры Муса хәҙрәт күсереп ҡалдырған был бөйөк шәжәрәбеҙ, ундағы төрлө дәүер төрлө-төрлө батшаларыбыҙҙың исемдәренән үк асыҡ күренеүенсә, ысынлап та Геродот яҙған "батшалыҡ итеүсе скифтар"ҙың (үҫәргәндәрҙең) батшалар шәжәрәһе булып тора. Был юлдарҙың авторының ата-бабалары һөйләп ҡалдырыуынса, боронғо хан урҙаларының береһенең баш ҡалаһы булған һәм Үҫәргән башҡорттары йәшәгән *Сәнкем-Биктимерҙең* (ул ауыл хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ районына ҡарай ине) *солтандар* (хәҙерге Солтановтар) нәҫеленән ҡасандыр бер заман "һыу башы яғына" (Башҡортостандың хәҙерге *Йәнсура* районына) килен булып төшкән бер һылыуыбыҙ, ата йортонан "бер ниндәй ҙә мал алмай, шул артынан биреләһе мал урынына *эт тиреһенә яҙылган шәжәрәне* һорап алып киткән" — Муса хәҙрәт тап ана шул "эт тиреһенән" күсереп яҙғандыр, бәлки, үҙенең ошо "Үҫәргән тәүәрихе"н... Был шәжәрәнең ҡиммәте йәнә шунда: *__бик күп ауылдарыбыҙҙың һәм нәҫел фамилияларыбыҙҙың ундагы ҡайһы кеше исеменә туп-тура бәйлелеге күренә.__*

Ошонда тағы бер мәсьәләне асыҡлап китеү зарур — бөйөк Туҡтамыш-ханыбыҙҙың ҡартатаһының атаһы *__"Нармуйынлы Бәрҙебәк__"тең* атаһы ысынында кем булғанлығын; сөнки сығанаҡтарҙың береһендә *лә* беҙ уны таба алмайбыҙ, ә был "Үҫәргән тәүәрихе"ндә иһә ул шаҡтай күҙгә салынып ярылып ята; тик, шәжәрәне быуындан-быуынға күсереп ҡалдырыусыларҙыңмы береһенең яңылышыуы арҡаһындалыр, мәсьәлә буталып ҡалған; әммә ошо буталсыҡты сисерлек бәғзе мәғлүмәттәр "тәүәрих"тең үҙендә *лә,* фарсы сығанаҡтарында *ла* етерлек.

"Тәүәрих"тәге был буталыштар Сыңғыҙ-хандың беҙгә билдәле өлкән улы Яусының нәҫелдәр ебендәге **__Үзбәк улы Жанибәк-хан__** (батшалыҡ итеүе 1341-1357) шәжәрәһен (55-се бит) теркәгәндә ебәрелгән. Беренсенән, унда ысынлап та Жанибәктең улы булған *Бәрҙебәк* (батшалыҡ итеүе 1357-1360) яңылыш рәүештә уның ейәне итеп — йәғни Жанибәк улы Үсәктең (Көсөктөң) улы итеп күрһәтелгән (57-се бит). Икенсенән, Жанибәк улы Үсәктең (Көсөктөң) улы булырға тейешле *Сәйед-Әхмәт (Сәйдәк)* һәм уның нәҫелдәре *Ҡасим-хан* (1524 йылда үлә) һәм уның улы *ХАҡназар-хан* (Аҡназар-хан тип тә йөрөтөлә, 1524-65 йылдарҙа батшалыҡ итеүе билдәле) теркәлмәй ҡалдырылған. Өсөнсөнән, "Өфөнөң һуңғы батшаһы булған" (П.И. Рычков) һәм XII быуатта йәшәгән *Тура-хан (Трә бин баба Төкләҫ),* ныҡ

яңылыштырылып, унан байтаҡҡа һуңыраҡ бер осорҙа (1524-1565 й.й.) боронғо Тура-хан баш ҡалаһы Өфөлә ултырып хакимлыҡ ҡылмыш Сыңғыҙ-хан нәҫелле икенсе бер "Тура-хан" — баяғы *ХАҡназар-хан* менән буталғанлыҡтан, шул боронғо Тура-ханыбыҙ унан һуңғы заманалағы Жанибәк бүләре Ҡасим-хандың улы итеп һыҙыҡсалап беркетелгән, ә беҙ уның, баба Төкләҫ улы Тура-хандың, әлеге Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге 39-сы быуынды биләүен беләбеҙ. Дүртенсенән, Жанибәк улы *Бәрҙебәк-хандың* улы итеп яңылыш күрһәтелмеш *Ишем-хан* да ысынында баба Төкләҫ улы Тура-хандың (Трә бин баба Төкләҫтең) улы булырға тейеш, сөнки уның нәҫелдәренең (мәҫәлән, Ҡазан ханлығына ҡаршы аяуһыҙ көрәшкән *Айсыуаҡ-хандың*) ысын башҡорт хандары икәнлеге рәсми тарихтан уҡ билдәле. Өҫтәүенә, Жанибәк улы *Бәрҙебәк,* атаһы Жанибәк-ханды үлтереп тәхеткә үрләгәс, бөтә ағай-энеләрен һәм уларҙың нәҫелдәрен (хатта имсәк балаларына тиклем), береһен-бер ҡалдырмай, төп-ҡыра үлтереп бөтөрә, үҙенән дә нәҫел ҡалмай һәм, тарихсылар Ғаффари һәм Аноним Искәндәр яҙыуынса (Тизенгаузен, 129,211-се биттәр), Сыңғыҙ-хан нәҫеленең был тармағы ошо урында ҡырт-өҙөлә. Һәм Жанибәк-ханға һәм уның нәҫелдәренә ҡағылышлы сығанаҡтарҙа бынан башҡа Бәрҙебәк исемле шәхес юҡ. Тимәк, "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге (53-сө бит) *"Бәрҙебәк солтан бин Тура"* — Туҡтамыш-ханыбыҙҙың ҡартатаһының атаһы ***"Нармуйынлы Бәрҙебәк"*** тап үҙе булып сыға һәм уны беҙ үҙебеҙҙең ошо Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге тейешле урынына теркәйбеҙ:

**39.** **<u>Трә (Тура)</u>** бин баба Төкләҫ (Тура-хан, XII быуат). — **40. Уның улдары: а) Күсем-хан** бин Тура-хан, уның улы **Ишем-хан,** уның улдары **Туғым-хан** һәм **Айсыуаҡ-хан,** Айсыуаҡ-хан улы хан **Эйәле,** уның улы хан **Туҡай,** уның улы хан **Жиһангир,** уның улы хан **Иләй,** уның улы хан **Вәли солтан Баһадир хан,** уның улы **Ҡаиб-хан; б) Бәрҙебәк-солтан** бин Тура йәки **"Нармуйынлы Бәрҙебәк"** (бөйөк Туҡтамыш-ханыбыҙҙың бабаһы, XIII быуатта йәшәгән был солтан, аталары Тура-хандан ҡалмыш Өфө тәхете өсөн бер туғаны Күсем-хан менән үҙ-ара талашып, үҙе яҡлы бөрйәндәрҙе эйәртеп, Каспий диңгеҙе буйындағы Сыңғыҙ-хан нәҫелдәре хакимлыҡ ҡылмыш Маңғышлаҡҡа[7] — "Төркөстандың Үсәк [Көсөк] ханына һыйынып ҡасты"; Туҡтамыш-хандың атаһы Төкҡужаның ни өсөн "Маңғышлаҡ гөбөрнаторы" булыуының сере ана шундалыр. Был хаҡта "Үҫәргән тәүәрихе"ндә (57-се бит) ҡиммәтле мәғлүмәт бар: "Бәрҙебәк йылдар аша саманан ашты, тора-тороп Яҫы ташта Күсем-хандың уғландарын үлтерҙе. Үлтерелгән уғландарҙың бабалары башҡорт халҡы ине (Тура-хан бин баба Төкләҫтең һәм уның нәҫелдәренең ысынлап та Үҫәргән (башҡорт) икәнлегенә тура ишара. —

[7] Маңғышлаҡ — Мең-ҡышлаҡ, йәғни Үҫәргәндән сataланмыш мең һаҙаҡлы Урҙас-бейҙең (Мең ырыуының) ҡышлау урыны.

*Й.С.*). Улар халҡының бик атаҡлыларынан ине. Улар ғәскәр менән Бәрҙебәк-солтанды үлтермәк өсөн хөсөт ҡылдылар. Шул саҡ Бәрҙебәк-солтан Төркөстанға Үсәк [Көсөк]-ханға һыйыныу өсөн ҡасты, [Үсәк-хандар] — Жанибәк-хан улдары инеләр. Ҡасып барғанда [күрҙе]:Һаҡмар һыуында бер төркөм башҡорттоң үҙенең бәге [бейе] бар ине, *Ҡасынҡы сала-бәк*[8] тип ләҡәпләрҙәр ине, данлыҡлы ине, халҡы *мәсәкле*[9] ине. Унан солтан-Бәрҙебәк һыйыныу үтенде һәм *Ҡасаҡ сала-бәк* уға хуш күңеллелек күрһәтте. Күсем-хан бәктәренән илсе килеп, Бәрҙебәк-солтанды талап иткәнендә, [сала] халҡы ризалыҡ биреп [уны] йәшерҙеләр һәм алып ҡалдылар. *Ләкин* Бәрҙебәк-солтан эт холоҡло ине: күпселек йәмәғәт уның иҫенә *лә* кермәне. Бер көн уға *Ҡасаҡ сала* әйтте: минең солтаным, һеҙ анаулары-был халыҡҡа ҡатышманығыҙ, беләм сәбәбен, тине. Солтан-Бәрҙебәк: йөрәгем этйән түгел, аңһыҙҙан был халыҡ мине ҡатил итер [үлтерер], тине. Ҡасаҡ сала-бәк уға үҙ халҡынан бер данлы әҙәмдең Субъямал тигән ҡыҙын никахландырҙы. Ирәүән Ҡасаҡ сала-бәкте Бәрҙебәк-хан сәрғәскәр итеп, халҡы уға ризалыҡ бирҙе... Был Бәрҙебәк-солтан яҡшылыҡ ҡәҙерен белмәҫ кафырҙай ине, башҡа хаталыҡтары *ла* суҡтыр [күптер]".

Был атаҡлы "Ҡасынҡы сала-бәк" *ләҡәпле* бабабыҙҙың атаһы **<u>Яуынсы Яҫауыл</u>** "Күсем-хан заманында уның эргәһендә *яҫауыл* булып хеҙмәт иткән, тиҙәр", — 66-сы бит; тимәк, бабабыҙ был *Яуынсы Яҫауыл* Себер ханы Күсем (XVI быуат) заманында йәшәгән; уның алты улы — **Арынбай, Аҡбай, Күкбай, Сураҡара, Атҡара, Алҡара** ("был алты уғыл *Яуынсы Яҫауылдың* кесе ҡатынынан ине". — 66-сы бит). Йәнә *лә* ике улы: **а) Ҡасаҡ сала-бәк** ("Ҡасаҡ сала-бәк ошбу үҙенең башҡорт халҡына бәк булып, Тора-хан улы Бәрҙебәк ["Нармуйынлы Бәрҙебәк". — **Й.С.**] халыҡ башлығы булып торған шул үҙ солтанатында[10] ярлыҡанмыштыр". — 66-сы бит), уның улы **Йыуашбай,** уның улы **Сураш; б)**

---

[8] Ҡасынҡы сала-бәк (йәки ҡасаҡ сала-бәк) — "ҡасыныу салаһы (селоһы) бәге (бейе)" тигән һүҙ, ул иһә Василий кенәз (Яуыз Ивандың атаһы) ғәскәрендә хеҙмәт иткән атаҡлы *Яуынсы Яҫауыл* бабабыҙҙың улдарының береһе ("Үҫәргән тәүәрихе"; 66,69-сы биттәр). Был "Ҡасынҡы сала" тигән исемле һәм *Ҡаса* — хәҙерге *Ҡаҫмарт* йылға тамағындағы боронғо ауылдың урыны *"Иҫке ҡый"* һәм иҫке зыяраты хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районындағы *Һунарсы* һәм *Сәнкем-Биктимер* ауылдары араһындағы *"Ҡамышлы ҡолаҡ"* тигән төбәктә. Заманында унда, татар-монгол яуҙарынан Каспий диңгеҙенә табан ҡасып китеп барышлай, бөтә Башҡортостандың батшаһы *Муйтән-бей* (баба Төкләҫ улы Тура-хандың бүләһе) ыҫтан ҡороп *ҡасынып* ятҡан (ә бер улы шунда ерегеп ҡалған), шуға күрә *лә* был ер-һыу *"Ҡасынҡы"* аталған, имеш. Шуға күрәлер инде, ҡарттарыбыҙ "Сәнкем-Биктимер ауылы борон *Муйтән-бейҙең баш ҡалаһы булган"*, тиеп һөйләрҙәр ине.

[9] Мәсәкле — Үҫәргән тәүырыуының башбабаһы Шүлгәнде тыуҙырмыш *"Мәсәк-аба"ға* (Машаҡ-тауға) табыныусы. Был Үҫәргәндәрҙең борон торған ерҙәрендә шул "Мәсәк-аба"ға бәйле *Москова* (Башҡортостандың хәҙерге Дүртөйлө районында), *Мәскәү* (Усалы районында) ауылдары һәм алыҫ көнбайыштараҡ *Мәскәү (Москва)* йылғаһы менән *Мәскәү (Москва)* ҡалаһы ҡалған (ул ҡала кенәз Юрий Долгорукий тыуыуҙан күп быуаттар элек үк булған).

[10] Алтын Урҙаның Башҡортостан солтанатында.

**Үҫәргән,** уның улдары: **1) Юламан** (“ҡунаҡ[11] халҡының бабаһы”. — 66-сы бит), уның улдары **Ҡоҙаш, Ситкәй; 2) Килдеш** (аҡжаҡ[12] халҡының бабаһы”. — 66-сы бит), уның улы **Юнай,** уның улы **Көсөкнисә; 3) Субғужа,** уның улы **Мүскә; 4) Байғужа** (“айыу[13] халҡының бабаһы”. — 66-сы бит), уның улы **Ҡаҙаҡбай-бей,** уның улы **Ҡаръяу-бей...**

Бәрҙебәк-солтандың (XIII быуат) заманында уҡ ҙур ҡасаба булмыш шул *Ҡасынҡы саланан* артабан *Сәнкем-Биктимер, Һунарсы, Солтанбай, Ырыҫкол* һәм *Яңауыл (Яңы Ғафар)* ауылдары бүленеп сыҡҡан. — **41. Ҡиас-хан. — 42. Туҡ-хужа-хан. — 43. <u>Туҡтамыш-хан</u>** (“Туҡтамыш-хан маҡәме [төп йорто] *Сирмешән [Сәрмәсән], Ҡармасан* буйында ине һәм ул йәнә *Иҙел — Яйыҡ араһында* сәхрә тарафында *Үҙән[14]* һыуында булды һәм уның һыуы әсе булғанлыҡтан, саҡ сыҙаны, тиҙәр. Ул ваҡытта яҙ һыу ташҡанда алып ҡалып, бер сула тормош иттеләр: шунда хан йортоноң ҡибла тарафында бер шәре-хауыз[15] бар ине, яҙ көнө ҡаҙып һыу ебәрерҙәр ине; һыуы татлы булғаны өсөн шул хауыздың ҡибла тарафында ябыулы бинанан *Мәсет-һарай* төҙөнө, хозур шәһәр булды[16]. Һуңынан **<u>Йедәк[17] бәк</u>** менән араларында һуғыш-ҡырылыш булғас, ул ерҙән китеп, *Сирмешән [Сәрмәсән]* һыуында йорт тотто, <u>*ҡәбере шундалыр*</u>; ул ҡорбандыр — *Йедәк [Йеҙекәй]* уғынан ул тәхет кисте, тиҙәр”. — 53-сө бит. Тимәк, бөйөгөбөҙ *Туҡтамыш-ханды*, уның тыуған һәм һуңғы торған төйәге *Сәрмәсән*, ә анығырағы — шундағы <u>*Төйләнь*</u>, йылғаһы буйына һөжүм ҡылып, икенсе бер бөйөгөбөҙ *Йеҙекәй батыр* үлтергән). — **44. Уның улдары: Жәләлитдин, Сәғидалитдин, Ҡадирбирҙе, Хаҡбирҙе** (һ.б. күптәр)...

Эйе, башҡорт халыҡ эпосында Туҡтамыш-ханды “затһыҙ хан” тип, Аҡһаҡ Тимерҙе (“Сатмыр-хан”ды) ла “затһыҙ тыуған” тип атау (“Ватандаш” журналы, 1997/2; 55,71-се биттәр) ул дәүерҙәге хакимлек ҡылыусы йыһангир Сыңғыҙ-хан нәҫелдәре күҙлегенән ҡарағанда бик ғәҙел һәм урынлы, сөнки әйтелгән шәхестәр икеһе лә, ысынлап та, “затлы” Сыңғыҙ-хан нәҫеленән түгелдәр, Туҡтамыш-хан үҙе гәрсә, Аҡһаҡ Тимерҙән айырмалы булараҡ (ул башҡорттоң *барлас* ырыуынан), был донъяға Сыңғыҙ-ханды ла бирмеш баяғы бер үк *Үҫәргән-Бөрйән* ҡәбиләһенән булһа ла...

---

[11] Ҡунаҡ (кинок) — кәнтәй эт, йәғни эткә табыныусы “нуғай”.

[12] Аҡжаҡ (аҡ-жаҡы) — аҡ Шәке йәғни аҡ әсә-бүре, йәғни аҡ бүрегә табыныусы көнбайыш (биләр) үҫәргәндәре.

[13] Айыу — айыуға табыныусы төньяҡ-көнсығыш (саха-яҡут) үҫәргәндәре.

[14] Үҙән йылғалары хәҙерге Саратов өлкәһендә башланып, Ҡаҙағстанға ағыла.

[15] Хауыз — һыу йыйғыс соҡор, хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы тарихҡа билдәле *Ҡоро-күл* булырға тейеш.

[16] *Мәсет-һарай* ҡалаһы — Туҡтамыш-хандың Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһы.

[17] Йедәк — *Йеҙекәй (Едигей)* батырыбыҙ.

Йәнә килеп Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге айырым алып дауамлар өсөн алдараҡ киҫәтеп һәм аҫтына һыҙып ҡалдырып торолған бәғзе быуындарҙың нәҫел бауҙарын һуҙыуҙы дауамлайыҡ:

__*24. Хан Сәнкүм.*__ **— 25. Ғри. — 26. Сәмар. — 27. Тим. — 28. Сәғди** бин Тим. — **29. Ҡағб. — 30. Гру** бин Ҡиас. — **31. Унының улдары: а) Глб** бин Гру, унының улы **Зөһрә Ғәбид Хәләф,** унының улы **(?)** бин Хәләф; **б) Дарам** бин Гру, унының улы **Ғрам** бин Дарам, унының улы **Ғәбуан** бин Ғрам, унының улы __*Асаман*__ һәм унының улы **Жаир** бин Асаман...

Был __*Асаман*__ — *Асамандар (саманидтар)* дәүләтенең (875-999 й.й.) батшалар шәжәрәһен башлаусы уҙаман бабабыҙ ул. Был дәүләт Урта Азияла (баш ҡалаһы *Бохара*) урынлашып, X быуаттың тәүге яртыһында Мавереннахр, Хөрәсән, Төньяҡ һәм Көнсығыш Иран илдәрен үҙ эсенә ала, уға Хорезм, Систан, Горган (Үҫәргән), Табаристан (Мазендаран) илдәре буйһоноп йәшәй. Иң мөһим ҡалалары Бохара, Сәмәрҡәнд, Нишапур, Мәреү, Ургенч, Ғират, Бәлх, Ғазни булып, *Асаман* батшалар һарайында Рудаки, Әл-Фараби һ.б. шундай аҫыл заттар ижад иткән. Ул дәүләт Хазар, Иран, Болғар, Ҡытай, урыҫ илдәренә һәм, әлбиттә, Башҡортостанға сауҙа каруандарын йөрөткән...

Ҡалды инде __*41-се быуын — Ҡарадә Ҡиә бин Ҡаҙансы*__ һәм унының нәҫел бауы; **Йеҙекәй** батырға ҡағылышлы бик мөһим был тармаҡты беҙ һуңғараҡ — тәғәйен *Йеҙекәй* тураһында һөйләгәндә барларбыҙ.

Саф башҡорт эпосы "Иҙеүкәй менән Мораҙым" Алтын Урҙа тарҡалғандан һуңғы осорҙарҙа унының айырымланмыш халыҡтары (башҡорт, ҡаҙаҡ, нуғай, үзбәк, ҡарағалпаҡ, татар, төрөкмән) тарафынан уртаҡланып, һәр береһе уны үҙ теленә һәм күңеленә яраҡлаштырғанлыҡтан, ситтәр тарафынан үҙгәйләштерелгән башҡа сифаттар ҡатарында батырыбыҙҙың исеме лә төрлө өлгөләрҙә яҙылып йөрөй: *Иҙеүкәй, Йеҙекәй, Йедек, Едигей, Идигу...*

Был серле исемдең мәғәнәһе, ябай-ялпы төпсөүе (этимологияһы) буйынса барлаһаҡ, унда беҙҙе ҡыҙыҡһындырған һүҙ *"Иҙел"* (ҡоро ер сиге — йылға) менән *"иҙеү"* (күлдәк йырығының сиге — иҙеү) берҙәй күреп аңлатыла:

*Ун ике йорт ырыуға*[18]
*Балам да* ***иҙеү*** *булһын, тип,*
*Илгә килгән дошманды*
*Агиҙелдәй быуһын, тип,*

[18] Ун ике йорт ырыу -- башҡорт халҡының хәҙерге яңылыш яҙып йөрөтөлгән *ете ырыуҙан* түгел, ә *ун ике* төп ырыуҙан хасиллығы эпоста асыҡ әйтелгән.

*Ләкин* был исемдең дөрөҫөрәк әйтелеше *Йеҙекәй* батыр үҙе тере заманда һәм урыҫтар менән яҡын аралашып йөрөгән сағындағы урыҫ йылъяҙмаларына теркәлеп ҡалған — ***Едигей*** (урыҫта “ҙ” хәрефе *лә,* өнө *лә* булмағанлыҡтан, башҡортса *“йеҙ”* урынына *“ед”* яҙылған); шулай уҡ иҫке төркиләштерелгән ғәрәп графикалы башҡорт шәжәрәһендә *лә* был исем, *Йеҙекәй, “әй”* иркәлек ялғауы ҡыҫҡартылып, һәм “ҙ” өнө иҫке төркиләштерелеп, ***“Йедек”*** яҙылып йөрөй (“Үҫәргән тәүәрихе”; 54,56-сы биттәр), был иһә тулыраҡ әйтелешле *Едигей — Йеҙекәй* өлгөһөнөң фәнни дөрөҫлөгөн һәм эпостағы *“Иҙеүкәй”ҙең* фәстереп юрау икәнлеген иҫбатлай. Ә исем нигеҙендә ятҡан *“йеҙ”* тәүге ҡараштa ҡушылдыҡлы һары бутал (латунь) булып күренә, ләкин был улай түгел. Сөнки *“йеҙ”* тип бабаларыбыҙ эсе ҡыуыш (көпшә) һабаҡлы бейек үләнде атаған, *“сей”* тигән ҡамыш исеме *лә* шул “йеҙ”ҙән үҙгәреп килеп сыҡҡан; Үҙәк Азия далаларында һыбайлының яурынына тиңәлерлек дәү булып үҫкән был йеҙ (көпшә) үлән — ҡиммәтле мал аҙығы, ә уның кипкән һабаҡтары эшләпә, септә үреү өсөн ҡулланыла; әҫәрен ғәрәпсә яҙған Мәхмүт Ҡашғари уны *“Алла агасы”* тип атаған (“Советская тюркология” журналы, Баку, 1976/3; 41-43-сө биттәр). Далалағы ҡара (ҙур) урмандай булып үҫмеш был “йеҙ” көпшәне Үҫәргән-башҡорт тоҡомдары “ҡара-дәү ҡыяҡ” (дәү ҡыяҡлы ҙур үлән) тип йөрөткән, хатта үҙенең балаларына *ла* шул үлән исемен ҡушҡан:

**Ҡара Дәү Ҡыяҡ** (шәжәрәләге *“Ҡарадә Ҡиә”,* — “Үҫәргән тәүәрихе”, 54-се бит) — *Йеҙекәй* батырыбыҙҙың ҡартатаһының исеме; һәм шул уҡ сатыр сәскәләләр ғаиләһенән булған, әҙәм балаһының танһыҡ аҙығы итеп ҡулланылған *Төкләҫ* (йөнтәҫ) һәм *молоҡ* (һимеҙ) көпшәле үлән *(балтырған*[19]*, балтырсаҡ) —*

**Төклө Молоҡ Балтырсаҡ Ҡотло Ҡыяҡ** (шәжәрәләге *“Ҡотло Ҡиә”,* — “Үҫәргән тәүәрихе”, 54-се бит) — *Йеҙекәй* батырыбыҙҙың атаһының тулы әйтелешле исеме; фарсы сығанаҡтарында ул *Төкләбай, Балтырсы* (Балтасы) булып йөрөй, ә Үҫәргән шәжәрәләренең береһендә *Молоҡ* итеп яҙылған;

һәм шулай уҡ әҙәм балаһының танһыҡ аҙығы булып ҡулланылмыш *ҡаҡы* (ҡымыҙлыҡ) тигән төкләҫ көпшә —

**Ҡаҡан Төкләҫ** (Ҡаҡы-Төкләҫ) — Үҫәргәндәрҙең киң билдәле бабаһының исеме *баба Төкләҫ* (“Үҫәргән тәүәрихе”, 55-се бит).

Сатыр сәскәле был үҫемлектең һыу буйҙарын яратыусы бер төрө бар, ул “сей” (жиз -- еҙ һүҙенән килеп сыҡҡан), ә күберәген “ҡамыш” (ҡубыш — ҡыуыш, тигәндән) тип атап йөрөтөлә; әммә М. Ҡашғари яҙған “Алла ағасы” кеүек затлы

---

[19] Балтырған (балтыр-кан) — тәүдинебеҙҙәге бер үлән-хоҙайҙың исеме.

үлән-көпшәгә бирелмеш *"йеҙ"* үлән атамаһы башҡорт телендә *лә* һаҡланып ҡалған:

*囗*

*Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды*
***Йеҙ*** *ҡурайҡай итеп тартайым...*

***Таштуғай.***

Тимәк, үлемһеҙ моңобоҙ "Таштуғай"ҙың авторы мәшһүрә Көнһылыуыбыҙ, моғайын, үҙе торған ҡыуан далала *"йеҙ ҡурайҡай"* (йәки *Йеҙекәй* ҡурайҡай) үләне булмағанлыҡтан, ҡулы осондағы нәҙек Таштуғай ҡамышын *"йеҙ* ҡурайҡай итеп" ҡулайлаштырып тартҡан. Ә инде теге Үҙәк Азиялағы ҡоро далаларҙа урманланып үҫмәле *йеҙ* ҡурай — "Алла ағасы", буйы оҙон булһа *ла*, һалам кеүек нәҙекәй ҙә ҡурай итеп тартырға төптө яраҡһыҙ булғанлыҡтан, унан эшләпә, септә генә үрәләр, ә донъяла бармы икән һуң йөрәктәрҙең талғын оҙон моңдарын көпшәһенән шаңғыртырлыҡ шыма һәм оҙон булып үҫмәле, ысын-ысындан "Алла үләне" тип әйтерлек *йеҙ-Йеҙекәй — йеҙ* ҡурай? Ҡайҙа үҫә ул *Йеҙекәй?!* — бар икән шул, иншаАлла, һәм бөгөнгәсә, тамыры ҡоромай, Уралыбыҙҙа бойоҡмай, ҡусҡылланып үҫә икән шул, тере икән шул, бәрәк Алла! Бына уның, ғалимдәр әйтмешләй, сатыр сәскәләр ғаиләһендәге шыма көпшәле үлән-мөғжизәбеҙҙең, бабалар телендә йөрөгән тулы исеме:

## <u>**Йеҙекәй-дәүҡыяҡ-ҡурай.**</u>

Әгәр ҙә ки ошонобоҙҙоң һәр быуынын айырым алып аңлатһаҡ, баяғы *"йеҙ"гә* иркәләү ялғауы *"кәй"* теркәлмеш <u>**"Йеҙекәй"**</u> һүҙен ғилем эйәләре ошолай тип тәфсилләй: "еҙекәй — *шыма көпшә*" (башҡорт теленең һүҙлеге. М., 1993; I том, 309-сы бит). Ә *"көпшә"* тигәнебеҙ, — тип аңлата шул уҡ ғалимдар, — сатыр сәскәләр ғаиләһенә ингән ҡыуыш һабаҡлы бер төркөм үләндең дөйөм исеме ул (шунда уҡ, 544-се бит); ә "сатыр сәскәләр" тигәне, ябай ғына әйткәндә, "таҡыя башлылар" тигән һүҙ. Ә өҫтә күрһәтелмеш тулы исемдең икенсе быуыны <u>**"дәүҡыяҡ"**</u> — дәү (оло) ҡыяҡлы үлән, тигән һүҙ; өсөнсө быуыны <u>**"ҡурай"**</u> — ана шул дәү ҡыяҡлы <u>**Йеҙекәй**</u> үләненең *ҡурылып* кипкән йәғни тын өрмәле музыка ҡоралы итеп шаңғыртып тартырға яраҡлы ҡыуыш һабағы, көпшәһе; ә *"дәүкыяк-курай"* тигәнебеҙҙән *"таҡыя-курай"* йәки *"таҡыя башлы курай"* атамаһы яралған; ҡыҫҡартып уны *"йеҙекәй"* тип кенә *лә*, *"курай"* тип кенә *лә* әйткәндәр; әле һүҙ барған батырыбыҙға ла яратып шул моңло исемде ҡушҡандар: ***Йеҙекәй...***

Үҫәргән шәжәрәләренең береһендә (Башкирские шежере. Уфа, 1960; 88-се бит) был нәҫел ошолай сағыла: батырыбыҙҙың ҡартатаһы ***Таукәй*** (*дәүкыяҡ,* тигән һүҙ), уның улы ***Молоҡ,*** унан һуң килә Йеҙекәйҙең улы ***Яҡшыбай*** (был зат

Карамзин тарихының V томының 296-сы битендә күренә); тик был шәжәрәбеҙҙә Молоҡ улы ***Йеҙекәй*** үҙе ниңәлер теркәлмәй ҡалған.

Йеҙекәйҙең *Молоҡ-Төкләç (Балтырсаҡ)* ләҡәпле атаһының мосолманса *Рәхмәделгәбид* тигән исеме лә булған, Йеҙекәйебеҙ шәжәрәгә тап ана шулай *"Йедек бин Рәхмәделгәбид"* тип яҙылған ("Үçәргән тәүәрихе", 54-се бит). Башҡа тарихи сығанаҡтарҙан да яҡшы юллана был бөйөк шәхесебеҙ, Йеҙекәйҙең атаһы. Үҙе батыр йөрәкле лә, мәкерле лә, тәүәккәл дә, фиҙакәр ҙә булған ошо үçәргәнле-башҡорт уҙаманыбыҙҙы иң элек Алтын Урҙа ханы Жанибәктең (Жанибәк, батшалыҡ итә 1341-1357 й.й.) Баш бейе (премьер-министры) сифатында күрәбеҙ, баяғы төкләç-көпшәгә бәйле *Төклө-бай* (Тоғлу-бай) ләҡәбен йөрөтә ул.

Йеҙекәйҙең һәм уның халҡы "нуғай"ҙарҙың — саф Үçәргән башҡорттары, йәки Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табын кеүек башҡа башҡорт ырыуҙары булауҙарын Йеҙекәйҙең һәм уның нәçелдәренең Үçәргән батшалар шәжәрәһендәге баяғы беҙ айырым алып дауамларға тип киçәтеп ҡалдырған һәм, киң билдәле 38-се быуын ***баба Төкләçтән*** бауланып килә-килә, 41-се быуын аша артабан беҙҙең көндәргәсә һуҙылмыш быуындар теҙмәһе лә күрәләтә дөрөçләй, бына ул:

**38. Баба Төкләç-бей. — 39. Тура-хан** бин баба Төкләç (XII быуат аҙағында Көн-Өфө-Тура [хәҙерге Өфө] баш ҡалаһында тәхеттә ултырған). — **40. Ҡаҙансы** бин Тура-хан. — **41.*Карадә Ҡиә*** бин Ҡаҙансы ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән". — 54-се бит). — **42. Ҡотло Ҡиә** бин Ҡарадә Ҡиә (мосолманлыҡ намы Рәхмәделғәбид). — **43. *Йедек* (*Йеҙекәй*)** бин Рәхмәделғәбид ("хан Бураҡ [тәхеттә 1422-1427 й.й. — *Й.С.*] Һарайсыҡта ине. Ғәйәт алып кеше ине. Ҡан ҡәрҙәше [әсәһе яғынан. — *Й.С.*] Йедек [Йеҙекәй. — *Й.С.*] унда бей ине. Унан [Йеҙекәйҙән. — *Й.С.*] Мансур тыуҙы, Мансур ҙа алып кеби булды. Хөсөт итеп, дәдәһе Бураҡты аңһыҙҙан үлтерҙе [1427 йылда. — *Й.С.*]". — 55-се бит). — **44. Уның улдары: Ҡасни** бин Йедек, **Науруз** бин Йедек, **Мансур** (балаларының береһе, көсләп суҡындырылып, урыçтарҙың кенәз Мансуровтар фамилияһын башлаған) бин Йедек, солтан **Нәдерғул** бин Йедек, унан тыуған **Уаҡкас** бин Нәдерғул (был Уаҡкастың ошо шәжәрәгә теркәлмәгән **Сәғит** исемле улы ла булып, ул баяғы баба Төкләç улы Тура-хандан тыумыш үҙебеҙҙең Күсем-хандың ғәскәр башлығы булған: "Солтан Күсем-хандан һуң уғландары һәр ҡайһылары ил араларында дәғүә-талаш менән [бер-береһен] үлтерҙеләр... Солтан [Күсем-хан] буҙ күҙле ғәйәт алып кеше ине. Тирандазлыҡта [ғәскәр башында] Уаҡкас-бәктең улы Сәғит ине". — 57-се бит). — **45. Муса-бәк** (балаларының береһе, көсләп суҡындырылып, урыçтарҙың дворян Мусин-Пушкиндар фамилияһына ҡатнашлығы бар) бин Уаҡкас. — **46. Уның улдары: Алсағыр-хан** (ҡаҙаҡ Алащ-Урҙаһының беренсе ханы), **Ирзал Ураҡ** (балаларының береһе, көсләп суҡындырылып, урыçтарҙың Ураков дворян фамилияларын башлаған), **Ҡалын, *Зартуш Һары Йософ*** (ғүмере буйына Мәскәү

кенәзлегенә ҡаршы фиҙакәр көрәшеүсе баһадир, Ҡазан ханбикәһе Сөйөмбикәбеҙҙең атаһы. 1554 йылда бер туғаны Исмәғил Хайрас ҡулынан ҡорбан була. Уның нәҫел-нәсәбе, көсләп суҡындырылып, урыҫтың кенәз Юсуповтар фамилияһын башлай. — Н.А. Баскаков, 114-се бит), **Мамай-Ҡасим** (йәки Себер-Тура ханы **Мамай-Шәйех** йәки Әстерхан ханы **Мамай-Нар-Ҡасим** йәки шәжәрәләге **"хан Мамай"** — бөтәһе лә бер кеше. "Хан Мамай ғәйәт алып йөрәкле, ҡырағай арыҫлан кеби бәһлеүән ине. Хатта, имешләр, ун ир күтәрмәҫ таш илә Әстерхандың йүкечек [кесе булмаған, ҙур] биналарын атып зир-зибәр ҡылды [таш атҡыс туптары ярҙамында Әстерхан ҡәлғәһен алыуы һәм хан булып ултырыуы. -- *Й.С.*)... Ахыры Исмәғил Хайрас хәйлә илә мәҙкүр ҡәлғәдә [Әстерханда. — *Й.С.*] ҡатил иттерде [язалатып үлтерҙе. — *Й.С.*] һәм ҡәбере Кече Үзән [йылғаһы] башындадыр[20]. Һәм ул заманда Ҡазанда **Сураш солтан**[21], ғәскәре илә барып, бер мәнзил бер ҡалдыҡда [бер туҡталыш ара ҡалған ерҙә. — *Й.С.*] Мофтһуаз илә [ботарлап язалау аша. — *Й.С.*] вафат итди; ғали, ғәдел, суҡау [халыҡсан] әдәм иде". — 58-се бит), Мамай-Нар-Ҡасим-хандың улы ***Ядкәр Ғоҫман*** (Нуғай ылыҫы йәки Юрматы ырыуы шәжәрәһенән: "Төньяғындан урыҫ көффар килгәйне. Был ерҙәрҙә урыҫ күп булғас... *Ядкәр* мырҙа баш булып, һанһыҙ күп нуғай менән Ҡубанға күстеләр... Туғыҙ йөҙ ҙә илле өстә [=1546] ине". Ә Ядкәр мырҙаның бер туған ағаһы "Бурнаҡ-бей менән тороп ҡалғандары *иштәк* [башҡорт. — *Й.С.*] аталдылар. Ошбу нуғайҙан ҡалған буш ерҙә ғүмер һөрҙөләр". — Тәтегәс-бей шәжәрәһе, 29-сы бит); йәнә лә баяғы мәшһүр Муса улдары: **Солтан Сәйдәф, *Исмәгил Хайрас*** (бер туғаны Зартуш Һары Йософто үлтергәненән һуң 1555-1564 йылдарҙағы берләштерелгән Нуғай Урҙаһы кенәзе; шуға тиклем үк Мәскәү кенәзлеге менән рәсми килешеүгә ҡул ҡуйған һәм ахырынаса урыҫҡа тоғролоҡ һаҡлаған зат), **Ырыҫ** (уның ейәндәре, көсләп суҡындырылып, урыҫтарҙың **Урусов** дворян фамилияларын башлаған), **Урмәмбәт** (Тәтегәс-бей шәжәрәһендәге "Сәсле Дәрүиш"), **Әмир Иштерәк**...

Башҡорт батыры Йеҙекәйҙең тап Үҫәргән шәжәрәһендәге атаҡлы бабабыҙ **Баба Төкләҫтән** бауланыуын күрһәткән шәжәрә икенсе бер тәүәрихебеҙ "Сыңғыҙнамә"лә лә бар:

*...Баба Туклаш угли Трмә атлиг иерди. Бу Трмә Әдил -- Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Ҡазанчи атлиг иерди. Ул һәм Идил -- Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Әсламҡиа. Ул һәм Идил – Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Ҡарадәкиа. Ул һәм Идил – Жаиҡдә хасил булди. Аның угли Ҡутлукиа. Ул һәм Сәмәрҡандтә пида булди. Аның угли*

[20] Хәҙерге Саратов өлкәһендә.
[21] Сураш солтан — хан улы Сураш, йәғни Мамай-Нар-Ҡасим-хандың улы, тигән һүҙ.

*Йедикәй... Әммә Баба Туклашнең дүрт угли бар иерди... Әмма Идик би Туктамыш ханның өлөшөн булди. Идик би угли Нураҙын Мираздур убласин өлөшин биләди... Ади Үзән – Туктамыш ханның йуртидур. Жим (Сим) – Жаик араси Жәнбәк ханның йуртидур. Акидел тамаги Кара-хан берлән Бугра ханның йуртидур. Актүбә Бачман ханның йуртидур...*

Ҙур Нуғай Урҙаһы кенәзе Йеҙекәй батырҙың шәхсәнә үҙенә килһәк, баяғы хаслашып Әмбә буйына олакмыш яһил йән — дуҫтан дошманға әүерелмеш Алтайкара мырҙаның һәм Туктамыш-хан улы Кәримбирҙенең урҙаға өҙлөкһөҙ барымталарынан илде курсалар өсөн, Яйык арьяғы далаларында даими ғәскәр тоторға кәрәк була. Шул сәбәпле Йеҙекәй кенәз йәмле Һакмар тамағындағы баш калаһы Актүбәне (хәҙерге Ырымбур) мырҙаларының береһенә калдырып, Яйыктың һул ярындағы Бүртә йылғаһы тамағына (һул ярында) урҙаның яңы баш калаһын — ***Кыҙыл Һарайсыкты*** короп нығына (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы *Красногор* салаһы каршыһында, *Күмәк* ауылы янында харабалары һакланған). Шул Кыҙыл Һарайсык харабаларынан сак кына төньяктарак (Күмәк ауылы эргәһендә) таштан һалынмыш "Йеҙекәй мәсете" һәм Рәсәй империяһына каршы 1675-1683 й.й. башкорт ихтилалы етәксеһе ***Сәйет Йәгәфәр*** батыр ***Садировтың*** исеме уйып яҙылмыш кәбер ташы ла бар, имеш; арымай-талмай кыҙырынмыш тарихсы-эҙәрмәнебеҙ Ф.Ф. Илбулдин әйтеүенсә, 70-се йылдарҙа шул мәсеттең иҙәне аҫтынан "Йеҙекәйҙең Тимер күлдәген" һәм бик күп "кабырсак-акса" тапкандар; Тимер күлдәктең бер киҫәген ул Өфөгә килтереп, Башкортостан үҙәк музейына тапшырған...

Сал бөркөттәй кыуарып картайған Йеҙекәй батыр 1419 йылда һаман үҙенең ғүмерлек кан дошмандары — Туктамыш-хан улдарына һәм улар менән берлектә хөсөтләшкән баяғыса яңы дошман Алтайкара мырҙаға каршы һуғыштарын дауамлай һәм шундай бер алышта, П.И. Рычковка (69-сы бит) старшина Кыҙрас Муллакаев биргән мәғлүмәттәр буйынса, Баҫман [Йеҙекәй] кенәзде шул Алтайкара мырҙа үлтерә. Шул яктағы боронғо вакиғаларҙан якшы хәбәрдар баяғы Чокан Вәлиханов (240-сы бит) боронғо бер сығанактан күсереп алыуынса, был канлы вакиға хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Илек йылғаһы буйында була: "Андин бариб ир күшә йикилди, ани нукай Алтай баһадур бариб үлтүрди". — "унан һуң барып ***ир-кеше*** (Йеҙекәй батыр. — *Й.С.*) йығылды, уны нуғай (үҫәргәнле. — *Й.С.*) Алтайкара баһадир барып үлтерҙе"... Тарихсылар барыһы ла Йеҙекәйҙең Туктамыш-хан улы Кәримбирҙе кулынан шәһит китеүен яҙалар. Канлы фажиғаның бер шаһиты яҙған йәки һөйләп калдырған ошо һуңғы текстан күренеүенсә, Йеҙекәй батыр тәүҙә Кәримбирҙенең зәһәр уғы тейеүҙән яраланып йығылған да Алтайкара мырҙа барып уның тамам йәнен алған булырға тейеш... Илек буйындағы канлы был алышта атаһына ярҙамға килгән Нур-ад-дин

(Моражым) да ҡатнаша һәм, “ҡаты еңелгәндән һуң, диван башлығы Ҡатай Ғәлибей менән бергә Башҡортостанға килә, ошонда йәшәп вафат була” (Ә.В. Туған, 25-се бит). Хәйер, бындай мәғлүмәтте беҙ ”Мораҙын менән Боҫҡон” тигән баяғы бер башҡорт эпосынан да алып биргәйнек...

Йеҙекәй батырҙың ни рәүешле һәләк булыуын уның менән ҡанлы-даулы яуҙарҙа ла, тыныс-имен юлдарҙа ла һәр саҡ бергә йөрөгән, эпосыбыҙҙың заңы менән әйткәндә, һөйөклө “аҡ Нары” ла (бер үркәсле аҡ дөйәһе) күҙ йәштәрен мөлдөр-мөлдөр ҡойоп күреп торғандыр:

*...Үлем һис тә аямай,*
*Иҙеүкәйгә ҡул һалды...*
*...Иҙеүкәй үҙе әйткәнсә,*
*Иҙеүкәйҙең кәүҙәһен*
*Аҡ Нарына артҡан һуң*
*Нар ҡуҙғалып китте, ти,*
*Күп ҡаялар үтте, ти,*
*Күп һыуҙарҙы кисте, ти...*

Йола ҡушыуынса үҙ иркенә ебәрелгән аҡ Нар-дөйә Илек йылғаһы буйҙарынан ана шулай, Йеҙекәй мәйетен арҡаһына артмаҡлап, Йеҙекәйҙең баш ҡалаһы Ҡыҙыл-Һарайсыҡ тарафына төньяҡҡа — Яйыҡҡа табан ыңғайлай, тарихта билдәле ағын һыулы Айғыръял кисеүенән Яйыҡты аша сыға, Яйыҡ менән Һаҡмар аралына йәйрәп ятмыш Яҫы тау һыртынан лапылдап атлай-атлай, хәҙерге Жултый тимер юл станцияһы тәңгәлендә Һаҡмарға барып етеп, Һаҡмарҙы кисмәйенсә кире борола, баяғы Яҫы тау һыртынан лапылдап кире ҡайтып китә; шуға күрә лә ошо дөйә ике тапҡыр ҡаңғырып үткән Яҫы тауҙы ундағылар ***Дөйәтау*** тип атайҙар һәм әлегәсә Яйыҡ менән Һаҡмар араһын шул Дөйәтау һыртындағы Яҫы дөйә юлынан гиҙеп йөрөйҙәр... Йеҙекәй батырҙың үле кәүҙәһен артмаҡлаған аҡ Нар-дөйә, шулай итеп кире-ҡабат дала яғына Яйыҡты кисеп сығып, ҡырт ҡына уңға — Йеҙекәй батырҙың баш ҡалаһы тарафына көнбайышҡараҡ — хәҙерге Ырымбур -- Орск араһындағы таш оло юлдан күҙ йәштәрен супырлатып йүнәлә, хәҙерге Бурансы ауылы ултырған Бүртә йылғаһы тамағына дүрт саҡрымдай ҡалараҡ, эпоста әйтелгәнсә, оло юлдың һул яҡ ситендәге ҙур булмаған “бер түбәгә сүкте, ти”, — ата-баба йолаһы буйынса тап бына шунда ҡәҙерләп ерләйҙәр ҙә инде Йеҙекәй батырыбыҙҙы, башы осона исеме яҙылған ядкәр-таш ҡалҡыталар. Серле ғәрәп хәрефтәре сыйылмыш шул хәсрәтле яҙыуҙың “...зүки” тигән күсермәһен уҡыусыға мәғлүм тарихсы-эҙәрмәнебеҙ Ф.Ф. Илбулдин етмешенсе йылдарҙа мин эшләгән “Ағиҙел” журналы редакцияһына килтереп күрһәткәйне; урындағы ҡаҙаҡтар ул изге зиратты ***“Зюкәй”*** (Йеҙекәй) тип

тә, ***“Икетас”*** (Икеташ) тип тә атап йөрөтәләр, имеш... Бурансы ауылының Яйыҡҡа терәлгән осондағы *иҫке* зиратта тағы ла бер тарихи ҡомартҡы “ҡаҙанбаш” — Сыңғыҙ-хан нәҫеле Һүләгүҙәр Иранының башҡорт императоры Ҡаҙан-хандың ҡыуарып бөткән баш һөйәге тап ана шул етмешенсе йылдарғаса сал ҡылған араһында аунап ятҡанлығы ла мәғлүм. Уның тап шулай хан кәүҙәһенән айырылған баш икәнлеге Ә.В. Туғандың “Ибн Фаҙландың юлъяҙмаһы” тигән мәшһүр хеҙмәтендә лә сағыла: “Нуритдин[22] Маңыт исемле бейҙең бер принцҡа әйткән һүҙҙәренә ҡарағыҙ: “Ҡан сөйәге кийә деп, ҡандарды ҡойған Сарайчыҡ бабаңдың башын анда акелип ҡойғанмын”. Ә.В. Туған тәржемәһе: “хан һөйәге бәхетһеҙлек килтерә тип, атайыңдың башын Һарайсыҡтағы зиратҡа илтеп ҡуйғанмын” (“Ватандаш” журналы, 1997/11; 131-се бит). Үрҙәге йөмләнең иҫке төрки ҡатыш тел икәнлегенә иғтибарҙы йүнәлтәйек тә, ундағы Ә.В. Туған яңылыш аңлаған иҫке төркисә “кийә” һүҙенең “бит”, “ки”, “ғуй” тигән киҫәксә икәнлеген (кийә — уменьшительно-выделительная частица. — ДТС, 307-се бит) билдәләп, тексты инде ипләберәк уҡыйыҡ: “Хан һөйәге бит тип, хандарҙы ҡуйған (ерләгән) Һарайсыҡҡа[23] — бабаңдың башын шунда әпкилеп ҡуйғанмын”... Әйткәндәй, шул тәңгәлдә Яйыҡтың уң яғындағы Һарт (урыҫса Ельшанка) ауылы эргәһендә атаҡлы “Үзбәк-хан зираты” ла бар имеш... Был тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙы замана бурҙарынан — ҡыҙыл империя осоронда изгеләрҙән изге *Бәндәбикә, Бабсаҡ-баба* зираттарын, Асылыкүл буйындағы *Сураташтора* изге ҡорамының ырын яҙыулы ташын хараплаған зәғиф рухлы археологтарҙың нәүбәттәге баш-баштаҡлығынан ҡурсаларға тейешбеҙ:

*Бабаларҙың изге тупрағының*
*Остого ла елгә осмаһын...*

Әммә һуңғы йылдарҙа Еҙекәй батырҙфың да, ул үлтергән Туҡтамыш-хандың да ҡәберҙәре үҙебеҙҙең Миәкә районы Илсеғол ауылы янындағы күршеләш ике тау башында икәнлеге асыҡланды.

Башҡортостан тупрағында мәңгел тыныслыҡ тапҡан императорҙарыбыҙҙың иң һуңғыһы тураһында бара һүҙ.

Алтын Урҙа дәүләтенең императоры Туҡтамыш-хан һәм шулай уҡ император дәрәжәһенәсә күтәрелгән Еҙекәй батыр тураһында ныҡлап ҡыҙыҡһыныуым үткән быуаттың етмешенсе йылдарында мәшһүр “Үҫәргән тәүәрихе”нән (Библиотека Башкирского филиала Академии Наук СССР, ИБ -- 2279, ғәрәп графикалы ҡулъяҙма хәлендә) уҡып, икеһенең дә килеп сығышы

---

[22] Нуритдин — Йеҙекәй улы Нур-ад-дин (Мораҙым).

[23] Һарайсыҡка — Ҡыҙыл-Һарайсыҡка тигәндең ҡыҫҡартып әйтелеше.

үҙемдеке менән бер иш -- Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән, икеһе лә үҙем кеүек үк үҫәргән башҡорто икәнлеген белгәс ныҡлап башланды. Салдарҙан-сал тарихыбыҙҙа соҡсоноп сәсем ағарғас танырға тура килә: төрки донъяһында мәғлүм иң реаль, тарихи ерлекле, ышаныслы шәжәрә -- "Үҫәргән тәүәрихе", сөнки ул тәғәйен Урал -- Иҙел ерлегенән һәм унда беҙҙең эраға тиклем XV быуатта башҡорт-болғар дәүләтен нигеҙләүсе ***Ишек*** (икенсе бер яҙылыштарҙа ***Ижек***) бабабыҙҙан башлана (1680 -- 82 йылғы башҡорт ихтилалы етәксеһе бөйөк Сәйет Йәғәфәр Садиров бабабыҙ 1680 йылда күсертеп яҙҙыртҡан тәүәрихте ҡарағыҙ: Бахши Иман. Джагфар тарихы, I, II, III том. Оренбург, 1993 -- 1997). Дөрөҫ, донъяла *үҫәргән*, хатта *башҡорт* тигән этнонимдарҙың барлығын да белмәгән (йәки белергә теләмәгән) төрлө милләтле авторҙар (һәм шуларға эйәреп башҡорт ғалимдары!) Туҡтамыш-ханды -- Сыңғыҙ-хан тоҡомло ***татар-монгол*** тип, Еҙекәй батырҙы ***маңғыт*** (йәнәһе шул уҡ монгол!) тип тә, ***ҡуңғырат*** тип тә яҙалар. Ләкин айныҡ тарихсыларға күптән үк яҡшы мәғлүм: Сыңғыҙ-ханды һәм уның кешеләрен хандың ҡан дошманы һаналған этнос исеме менән "татар" тип урыҫтар тамғалаған, ә сығышы менән башҡорт (атаһы -- бөрйән, әсәһе үҫәргән-ҡаңғы башҡорто) бөйөк бабабыҙ үҙенең дәүләтен ***"мәңге-ил"*** (мәңгелек ил) тип атағанлыҡтан, халҡы ла шул ***мәңге-ил – монгол*** исеме менән тирә-яҡҡа танылған. Еҙекәйҙең маңғытлығы һәм ҡуңғыратлығы ла бик ябай аңлашыла: ***мәңге+т*** (бында "т" -- күплек ялғауы) ***маңғыт*** ("мәңгеләр" мәғәнәһендә) һәм ***ҡаңғы*** (шул уҡ *үҫәргән)****+ир-ат= ҡаңғырат, ҡуңғырат.*** Тимәк, бер үк ерҙә донъяны яуларға ынтылыусы һәм бер-береһенең ҡанын ҡойоусы йыһангирҙәр ***Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡтимер, Еҙекәй батыр*** дүртеһе лә бер үк тоҡом -- башҡортобоҙҙоң Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән! (Шәжәрәне ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө -- 2007). "Маңғыт"тың үҫәргән-башҡорт икәнлегенә шик ҡалдырмаусы дәлил -- "үҫәргәндар бабаһы"ның эпосыбыҙға "Маңғыт улы Мөйтән-бей" рәүешендә теркәлеүе (Башҡорт халыҡ ижады, VII том, Өфө -- 2004, 258-енсе бит). Әйткәндәй, быйыл ғына бер мәғлүмәтнамәгә юлыҡтым: Ҡаҙағстан Мосолмандар берлегенең вице-президенты, Алматы ҡала адвокаттар коллегияһы ағзаһы Ҡорбанғәли Юнысовтың Әҙәм пәйғәмбәрҙән алып 96 быуынға еткерелгән шәжәрәһе. Тәүге 65 быуыны ҡәҙимгесә фәстерелеп, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙе лә биргән ғәрәп шәжәрәһенән өҙөктө ялғау булһа ла, 66-нсынан ҡала быуындар үҙебеҙҙеке -- әле әйтелгән Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең айырылғыһыҙ киҫәге (ҡайһы бер исемдәр генә боҙола биргән). Әммә унда әле һаналған дүрт бөйөк затыбыҙ һәм уларҙың тоҡомдашлығы тураһында минең фекерҙе дөрөҫләүсе ҡимммәтле мәғлүмәт бар:

**"Идегей** (1352-1419), **Тимур** и **Тимучин- Чингизхан** восходят **к одному общему предку** которого звали **<u>Кайдада</u>**. У Кайдады был сын **<u>Байсункар,</u>** от

которого было 9 сыновей. От потомков старшего сына **Нотакына** родился **Кадаркай** отец **Эмира Идегея.** *От потомков третьего сына Кайдады родился* Эмир **Тимур.** *От потомка четвертого сына родился* **Тимучин,** избранный ханом, под именем **Чингизхан**. ***Соглано закона утвержденного Чингисханом только его прямые потомки вправе были быть ханами. По этому Идегей и Тимур не претендовали на титул Хана, а были Эмирами.*** Но они оба и их потомки всегда учитывали что ***Тимучин, то есть Чингиз Хан происходит от 4-го сына, тогда как Идегей от первого, а Тимур от 3-го сына*** *<u>их общего предка</u>*. А **по лестничной, используемой только тюрками, системе наследования трона, власть переходит от отца к старшему сыну, затем второму сыну и так далее пока все живые сыновья не закончат свое правление. За тем наступает очередь сыновей старшего сына, после них сыновей второго сына и так далее, каждое поколение правителя обязано было править согласно своей очереди**. Тимур нарушил этот тюркский принцип наследуемой по лестничной системе власть, ее фактически узурпировал, при избрании его на трон Хана: вместо того что бы уступил трон тому, кому следовала по закону лестничной системе наследования. Это нарушение, прецедент использовался часто в кризисные моменты истории Золотой Орды, и других татарских государствах после распада Золотой орды. Так например после смерти Хана Тауке, вместо созыва общего курултая и выборе законного единого хана в соответствии с лестничной системой выборов, бии всех 5 жузов страны избрали себе своих ханов, разрушив единое государство на пять. Жузы каракалпаков и киргизов видимо уже окончательно отделились от трех других, которые составляют нынешний Казахстан".

Бабабыҙ Сыңғыҙ-хандың тышҡы ҡиәфәте лә тарих фәнендә беҙгә тылҡылған ҡытай һүрәттәрендәге "типик монгол" түгел, ә V быуатта шул уҡ ҡытайҙар тасуирлап ҡалдырған "зәңгәр күҙле, ерән сәсле" үсүн-үҫәргәндәрҙекенә тап килә; хәҙерге урыҫ ғалимы ла ҡушҡуллап раҫлай быны: "В сохранившихся старинных документах, -- ти ул, -- существуют описание **Чингиэ-хана: высокий, стройный, с каштановыми волосами, голубыми (по другим данным -- зелеными) глазами и широкой окладистой бородой.** Скажем, не вполне типичный облик для монгола.

Кажется удивительным, но и в описаниях внешности многих основателей тогдашних правящих династий (Рюрик, Аспарух, Меровей, Юстиниан), фигурирует схожий внешний облик. То есть основания считать, что эти создатели династий, упоминаемых впоследствии как "царские", относятся к одному и тому же старинному правящему роду или правящим родам" (Александр Горохов. Белый царь). Йәғни ҙә ки уларҙың бөтәһе лә "Үҫәргән батшалар шәжәрәһе"нең

емеше булып, ни бары төп олондан (башҡорт-болғарҙан) ярған ботаҡтарҙа ғына башҡалана.

Тәғәйенерәк ҡарағанда, өҫтәрәк килтерелгән бөйөк дүрт шәхестең уртаҡ бабаһы (Ҡ. Юнысов шәжәрәһендәге Ҡайдада, дөрөҫөрәге Ҡай-дәдә -- Бүре-баба) Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге (ул “Башҡорт батшалары”нда тулы бирелгән) **26**-нсы номерлы реаль шәхескә -- шам Ҡыуат (рәсми тарихтағы Ҡубад, батшалыҡ итеү йылдары 488-496 һәм 499-531; “шам Ҡубад 23 йыл шам булды, Фирдәүси хөкөмөнөң заманында ине”, -- “Үҫәргән тәүәрихе”, 39-ынсы бит) тигән бабабыҙға тап килә. Шуның балаларының береһенән, өҫтәрәк әйтелгәнсә, бөйөк Сыңғыҙ-ханыбыҙҙы биргән тармаҡ айырыла, бына ул: “27. Шам Ҡыуат улы ...**нау...н** (асыҡ уҡылмай), уның улы Жуанир, уның улы Шаһриар, уның улы Мирза-алып, уның улы Һәрмүз (*Хормозд III,* 457-459 йй.), уның улы Тиауач, уның улы Жабин; һәм йәнә Жуанир менән бер туған (Ба)һрам, уның улы Ғам, уның улы **Сиавуш. -- 28. Ғали хан** бин Сиавуш. **-- 29. Ташбуға хан. -- 30. Хан Суман. -- 31. Хан Күсләк. -- 32. Хан Айтуп. -- 33. Хан Тимерил. -- 34. Хан Байкә. -- 35. Хан Ылаусы. -- 36. Хан Байсиуб. -- 37. Хан Ҡара. -- 38. Хан Арғырд. -- 39. Хан Ҡол-алып. -- 40. Хан Байжума. -- 41. (?). -- 42. (?). -- 43. Хан Турмали. -- 44. Турғай Сәхин. -- 45. Тумаул Мәргән. -- 46. Дуинбиан. -- 47. Хан Буртан. -- 48. Хан Буян. -- 49.** ***Туҡан-хан*** (Темәсйән-Сыңғыҙ-хандың йәш сағында *Туҡанда -- Арҡайымда* торғанындағы ләҡәбе; шул төбәктән Көнсығышҡа ҡасып китеп, көс-ҡеүәт туплағас, тирә-яҡ дала халыҡтары, шул иҫәптән Башҡортостан батшаһы Муйтән-бей һәм уның бер туған ҡустыһы Майҡы-бей етәкселегендәге башҡорттар, үҙҙәренең шул ҡан ҡәрҙәше Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә йыһангир *Сыңғыҙ-хан* итеп күтәрәләр). **-- 50. Уның улдары: а) Жужи-хан** (Яусы); **б) Хан Ҡабил** бин Туҡан; **в) Хан Ҡрыл** (*Кейек*) бин Туҡан, уның улы Хан Ҡотби; **г) Хан Тули,** уның улы Хан Хулукәтули бин Тули, уның улдары Хан Ҡуян, хан Турғай, хан Байду, Абғай-хан...

Шәжәрәлә шул уҡ шам Ҡыуаттың балаларының береһенән бөйөк Туҡтамыш-ханды ла, уның ҡан дошманы Еҙекәй батырҙы ла тыуҙырған изге Баба Төкләҫебеҙҙең тармағы дауамлана: **2)** шам Ҡыуат улы **Нуширван Ғәҙел** *(Хосров I,* 531-579 й.й. “Нуширван... 20 йыл шам булды, уның шаһлыҡ кыры: Төркөстандың мәшриғенән Һиндостан мәғрибенәсә уның хөкөмөндә булды”. — 39-сы бит). — **28. Бируз** бин Нуширван Ғәҙел (*Хосров II,* 628 йылда үлгән). — **29. Шырау-ир** (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628-632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер артлы *ун батша* алмашына. Йездегирд III [632-652 й.й.] тигән кемдер берәү тәхетте биләп алғас, ***сәсәндәр*** нәҫеленән булған был Шырау-ир үҙенең алыҫ бабаһы ***Бәк-сәсәндең*** тыуған еренә — ***Туран иле Башҡортостанға*** ҡасып ҡайтып, сал ***Көн-Өфө*** [*Тура]* ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***“Туран Дархан”*** тигән батшалыҡ ләҡәбе дәлилләй. Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең **Дары** исемле данлы бүләһе

Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы <u>*Өфө*</u> тәхетендә нығынған һәм ***"Туран Дары-хан"*** батша ләҡәбен алған, шунан һуң уның нәҫелдәре лә быуындан-быуынға <u>*"дары-хан" — **тархан***</u> ләҡәбен йөрөтөп, башҡорттоң *тархандар ҡатламы* барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡарт-картатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере 50 [25+25=50] йыл ятҡанлыҡтан, Туран Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). — **30. Шәһриәр. — 31. Аршир. — 32. <u>Туран Дархан</u>** (*баягы Туран Дары-хан,* йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, ***Көн-Өфө — Тура*** ҡуш ҡалаһында). — **33. Жәзир Жир. — 34. Әбү Алсаҡ** ("Алсаҡ-ир бер заман Баратурз дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөҡәтле һәм Искәндәр-сафиуллаға тиң хан ине". — 58-се бит). — **35.** Солтан **Ғоҫман** бин Әбү Алсаҡ (Ғоҫманлы төрөк империяһын нигеҙләүсе, төрөк солтандарының бабаһы). — **36.** Солтан **Жәләлитдин. — 37. Әҙһәм. — 38. <u>Баба Төкләҫ-бей</u>. — 39. <u>Трә (Тура)</u>** бин баба Төкләҫ (*Тура-хан,* XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының *Түбәнге Тирмә* ауылы эргәһендә әлегәсә һаҡланған, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI-XII быуаттарға ҡарата — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-се бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе *Ҡыҙрас Муллаҡаевтан* заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, 372-373-сө биттәр] яҙып алғанса, "хан Тура бин баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк ***Өфө*** ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған"). Ҡомартҡынан ап-асыҡ күренеүенсә, башҡорт батыры Йеҙекәйҙең дә, Сыңғыҙ-хан, Туҡтамыш-хан, Аҡһаҡ Тимер кеүек үк, ниндәйҙер татар-монгол ҡәүеменән түгел, ә Үҫәргән (башҡорт) батшалар шәжәрәһенән сыҡҡанлығы төрлө сығанаҡтарҙан дөрөҫләнде. Инде батшалар шәжәрәһен йәнә Үҫәргән тәүәрихендәгесә дауамлайыҡ: **-- 40. Уның (Тура-хандың) улдары: а) <u>*Бәрҙебәк солтан бин Тура*</u>** йәки <u>***Нармуйынлы Бәрҙебәк***</u> ("Үҫәргән тәүәрихе", 53,57-се биттәр) һәм **б) Ҡаҙансы** бин Тура (йәйәләр эсендә иҫкәртеп китеү урынлы: Башҡортостаныбыҙҙың хәҙерге Аҫҡын районындағы Ҡаҙансы -- ошо бабабыҙҙың ауылы). Әле генә а) һәм б) билдәләре аша килтерелгән ике уландан тап беҙҙе ныҡ ҡыҙыҡһындырған ике затыбыҙҙың шәжәрә ботаҡтары фашлана: **а) 40. Бәрҙебәк солтан бин Тура** йәки **Нармуйынлы Бәрҙебәк** (Үҫәргән тәүәрихе, 53, 57-енсе биттәр), уның улы **Ҡиас-хан,** уның улы **Туҡхужа-хан,** уның улы **Туҡтамыш-хан** (Туҡтамыш-хан маҡәме [төп йорто] Сирмешән [Сәрмәсән], Ҡармасан буйында ине һәм ул йәнә *Иҙел — Яйыҡ араһында* сәхрә тарафында *Үҙән*[24] һыуында булды һәм уның һыуы әсе булғанлыҡтан, саҡ сыҙаны, тиҙәр. Ул ваҡытта яҙ һыу ташҡанда алып ҡалып, бер сула тормош иттеләр: шунда хан йортоноң ҡибла тарафында бер

[24] Үҙән йылғалары хәҙерге Саратов өлкәһендә башланып, Ҡаҙағстанға ағыла.

шәре-хауыз[25] бар ине, яҙ көнө ҡаҙып һыу ебәрерҙәр ине; һыуы татлы булғаны өсөн шул хауыздың ҡибла тарафында ябыулы бинанан *Мәсет-һарай* төҙөнө, хозур шәһәр булды[26]. Һуңынан **Йедәк[27] бәк** менән араларында һуғыш-ҡырылыш булғас, ул ерҙән китеп, *Сирмешән [Сәрмәсән]* һыуында йорт тотто, *ҡәбере шундалыр*; ул ҡорбандыр — *Йедәк [Йеҙекәй]* уғынан ул тәхет кисте, тиҙәр". — 53-сө бит. Тимәк, бөйөгөбөҙ *Туктамыш-ханды*, униң тыуған һәм һуңғы торған төйәге *Сәрмәсән* тирәһенә, ә анығырағы, шуға яҡын *Төйлән*, йылғаһы буйына һөжүм ҡылып, икенсе бер бөйөгөбөҙ -- үҙенең ҡан ҡәрҙәше *Йеҙекәй батыр* үлтергән). — **44. Униң улдары: Жәләлитдин, Сәғидалитдин, Ҡадирбирҙе, Хаҡбирҙе** (һ.б. күптәр)...

Туҡтамыш-хандың әсәһе, Еҙекәйҙеке кеүек үк, башҡорттоң Ҡаңғы (Ҡуңғырат) ырыуынан икәнлеге сығанаҡтарҙа сағылған; ә хандың үҙен гәрсә "Сыңғыҙ-хан нәҫеленән" тип яҙып килһәләр ҙә, атаһынан артабанғы шәжәрә һуҙымын күрһәтә алыусы юҡ -- тарихсыларҙың күлләһө лә "Яусы (Джучи) тоҡомдарының береһенән булһа кәрәк", тигән билдәһеҙлеккә төкәтеп сикләнәләр, ә "Үҫәргән тәүәрихе"нә хатта башҡорт тарихсыларының да күпселегенең "теше үтмәй". Филологтарыбыҙ ҙа был "сәйер" Туҡтамыш исеменең асылын аңлатканы юҡ, ә ғәмәлдә унан башҡортлоҡ аңҡый: **Төктө Мышы** (Төклө Мышы) -- Туҡтамыш, атаҡлы **Мышы Улы** (уны боҙоп Мөшәүле тип яҙып йөрөтәләр) һымаҡ уҡ! Төктө (төклө) -- мал-мөлкәтле, етешле, бай тигән һүҙ, шунан килә үҫәргән бабалар исеме Баба Төкләҫ, Муйтән (төклө тән) һәм мәҡәл-әйтемдәребеҙ: "Ат аунаған ерҙә төк ҡала" "Төклө аяғың менән" һ.б.... Йәш Туҡтамыштың Алтын Урҙанан Аҡһаҡтимер ҡанаты аҫтына боҫоуының сәбәбен дә "нәҫелдәше" Урыҫ-хан менән тәхет өсөн тартышыуы итеп аңлатыусандар, ләкин эш башҡасараҡ: Аҡ Урҙа[28] ханы Урыҫ-хан күрше Күк Урҙаны[29] үҙенең урҙаһына ҡушырға яҫҡынғас, Ғаффари тигән боронғо автор яҙыуынса, Маңғышлаҡ бөрйәндәренең бейе Туҡхужа, йәғни Туҡтамыштың атаһы, быға ҡаршы төшә һәм шуның өсөн Урыҫ-хан тарафынан үлтерелә, ә Туҡтамыш Аҡһаҡтимер ярлыҡауында ҡотола.

**...** һәм **б) 40. Ҡаҙансы** бин Тура. Униң улдары **1) -- 41. Ислам Ҡиә** бин Ҡаҙансы, **2) -- 41. Ҡарадә Ҡиә** бин Ҡаҙансы ("Иҙел -- Яйыҡ араһында хөкөм һөргән", 54-енсе бит). **-- 42. Ҡотло Ҡиә** бин Ҡарадә Ҡиә (мосолманлыҡ исеме Рәхмәтелғәбид). **-- 43. Йедек (Еҙекәй)** бин Рәхмәтелғәбид ("хан Бураҡ `[тәхеттә 1422-1427 йй. -- Й.С.] Сарайчыҡта ине. Ғәйәт алып кеше ине. Ҡан ҡәрҙәше [әсәһе яғынан. -- Й.С.] Йедек унда бей ине. Унан (Йедек-Еҙекәйҙән. -- Й.С.) Мансур тыуҙы,

---

[25] Хауыз — һыу йыйғыс соҡор, хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Биләй районындағы тарихҡа билдәле *Ҡоро-күл* булырға тейеш.

[26] *Мәсет-һарай* ҡалаһы — Туҡтамыш-хандың Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһы.

[27] Йедәк — *Йеҙекәй (Едигей)* батырыбыҙ.

[28] Яусы (Джучи) ылыҫының көнсығыштан Иҙелгәсә яртыһы.

[29] Яусы (Джучи) ылыҫының көнбайыштан Иҙелгәсә яртыһы.

Мансур ҙа алып кеби булды. Хөсөт итеп, дәдәһе Бураҡты аңһыҙҙан үлтерҙе [1427 йылда. -- Й.С.]", 55-енсе бит); **3) -- 41. Ду(ҡ)с(а)ба (Туҡсаба)** бин Ҡаҙансы ("Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба-хан заманында Буйат-бей — бей ине", — 54,62-се биттәр; шәжәрәне күсереүсе был урында "Ду(ҡ)с(а)ба"ның ике хәрефен — йәйәләр эсендә күрһәтелмеш "ҡ" һәм "а"-ны яңылыш төшөрөп ҡалдырған; шуға күрә дөрөҫө "Туҡсаба" булыр). **-- 42. Муйтән-бей** бин Туҡсаба... Бөйөк шәжәрә олонобоҙ ошолай шанлы Муйтән-бей бабабыҙ аша үтеп, әлегәсә йәшәп килгән бик күп тармаҡтарҙы, шул иҫәптән был юлдар авторының 67 быуынға еткән тармағын да кәүҙәләндерә.

Һорау тыуырға мөмкин: Үҫәргән батшалар шәжәрәһе Ишек баба йәшәгән б.э. тиклем XV быуаттан уҡ башланған икән, ниңә уның быуындары шул 35 быуат һуҙымына тиңәлмәй, ә был аңлатмалар авторының шәжәрә тармағы осланған 67 генә быуынды сағылдыра? Дөрөҫ һорау, сөнки ул 35 быуат эсендә әҙәмдәр ғүмере 140 быуын аша үтергә тейеш. Әммә яҙма шәжәрәләрҙең бөйөктәренең үҙенсәлеген онотмайыҡ: тарихилыҡтан алдағы осорҙар, быуындарҙы тулайым теркәп бөтөү мөмкин булмағанлыҡтан, күпмелер арауыҡ хакимлыҡ иткән батша нәҫелдәре (династиялары) башлыҡтарының ғына исемдәрен атай һәм ул арауыҡ бер юлы 300 йылды ла (мәҫәлән, Михаил Романовтар осоро) һәм 1000 йылды ла (мәҫәлән, Лоҡман-Хәким осоро) тәшкил итергә мөмкин, ә даталар менән билдәләрлек тарихи осорҙар шәжәрәнең һуңғараҡ өлөшөндә булыусан. Бының миҫалын боронғо шумер шәжәрәләрендә, Тажитдин Ялсығол Башғорди һ.б. шәжәрәләрендә күрәбеҙ, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең тарихилыҡ өлөшө иһә Мидия батшаһы Киаксарув хакимлыҡ иткән б.э. тиклем 625-585 йылдарҙан башлана.

"Үҫәргән тәүәрихе"нән әле һоҫолған мәғлүмәт буйынса, Алтын Урҙа императоры Туҡтамыш-хандың тыуған һәм һуңғы төйәге Сәрмәсән һәм Ҡармасан һыуҙары тарафында булған, Еҙекәй ҡулынан китеүе лә, ҡәбере лә шундалыр. Боронғо заман авторҙарына шул яҡтарҙың эрерәк һыуҙары ғына билдәле булып, вағыраҡтары исемһеҙ аҡҡанлыҡтан, шәжәрәбеҙҙә әйтелгән төбәкте яҡынса -- "шундараҡ, шул тирәлә" тип аңлайыҡ. Был, бәлки, әсәһенең иленә -- Ҡаңғы ырыуы башҡорттарының еренә ҡайтып боҫҡан хандың эҙенә төшмәһендәр өсөн, юрый аймылыштырылғандыр. Ә бөгөнгө тарих фәне ысынлап та аймылыш: Туҡтамыш-хандың был төбәккә ҡасып килеүенең сәбәбе булған 1395 йылғы ҡанлы һуғыштың урынын да, тар-мар ҡылынған хандың аҙ һанлы ярандары менән ҡайһы һыуҙы кисеп сығып ҡайһы тарафҡа олағыуын да бутайҙар. Ҡабул ҡылынған рәсми раҫлау буйынса, Аҡһаҡтимер Туҡтамыш-ханды йәнәһе **Иҙелдең** (Ағиҙелдең түгел!) **һул** ярындағы ***Увек*** (хәҙерге Саратов ҡалаһы һәм **Увек** тимер юл станцияһы янындағы **Увек** тауында булған) ҡалаһында ҡыйратҡас... -- уф! тарихсылар йә күрмәгән, йә күрергә теләмәгән ошо

буталсыҡты сисәйек: ***Увек (хәҙерге Саратов)*** ҡалаһы Иҙелдең **һул** ярында түгел, ә **уң** ярында урынлашҡан! Шул уҡ тарихсы маһирҙар йәнә лә шул фарсы-ғәрәп сығанаҡтарынан аңлатып яҙыуынса, тар-мар ҡылынған Туҡтамыш-ханыбыҙ, имеш, баяғы *"һул* ярҙағы Увек-Үкек" тән (бында тағы аймылыш -- айырым ике ҡаланы, "Увек"те һәм "Үкек"те, бер үк ҡаланың ике төрлө аталышы итеп берләштерәләр!) Иҙелдең, тимәк, *уң* яғына кисеп сығып, тимәк, *көнбайышҡа* табан олаға ла *Себергә -- Төмән* төбәгенә барып боҫа һәм 1405 йылда шул Себерҙең Төмән төбәгендә үлтерелә..., ләкин *Себер,* әгәр ҙә яңылышмаһам, бөтөнләй киреһенсә, Иҙелдән шөйлә *көнсығыштараҡ* түгелме ни?!. Ә асылда ошолай күҙаллана: ханыбыҙ, Аҡһаҡтимер яуына ҡаршы Ҡафҡазда уңышһыҙ һуғышҡас, Иҙелдең уң яры буйынса һыу үренә бер туҡтауһыҙ сигенеп (артынан Аҡһаҡтимер яуы эйәреп), шул **уң** ярҙағы баяғы Увек (хәҙерге Саратов) тәңгәлендә Иҙелдең *һул* ярына -- тарихи Башҡортостан тупрағына кисеп сығып, күп аралар үтеп, хәҙерге Өфө эргәһендәге Турбаслы кисеүенән Ағиҙелде ашып, мәркәз ҡалабыҙ *Өфөккә* (ғәрәпсә хәрефле ҡулъяҙманан яңылыш, ундағы "ф"-ны "к" тип уҡып, *"Үкек"* тип яҙалар) урынлаша, булған ғәскәри көстәрен шунда туплап, тап шул ҡалабыҙ эргәһендә Аҡһаҡтимер яуы менән дәһшәтле бәрелешә *лә* ("Башҡорт батшалары" тигән китабымда яҙғанмын), тамам тар-мар ҡылынып, Ағиҙелдең һул ярына кисеп сығып көнбайышҡа (сығанаҡта "Болғар тарафына") -- әйтелгән Сәрмәсән -- Ҡармасан -- Дим йылғалар арауығына ҡаса (ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Туҡтамыш-хан, Ялыҡ-бей һәм Аҡһаҡ Тимер. "Шоңҡар" журналының 1998 йыл 3 -- 4-енсе һандары). Урыҫ теленә ауҙарылған боронғо фарсы сығанаҡтары *ла* (Йыйынтыҡ: Извлечения из персидских сочинений собранные В.Г. Тизенгаузеном и обработанные А.А. Ромаскевичем и С.Л. Волиным. М. -- Л., 1941) тап ошо юҫыҡтан һөйләй:

**"Из "Книги побед" Шереф-ад-дина Йезди. Рассказ о выступлении Тимура в набег (илгар) вслед за Токтамыш-ханом.** Прибыв к месту переправы через Итиль (Ағиҙел. -- Й.С.) называемому *Туратурской* (Турбаҫлы. -- Й.С.) переправой... он дал сыну Урыс-хана, Койричак-оглану, отряд..., велел ему переправиться через Итиль (Ағиҙел. -- Й.С.)... Войска подобные судьбе, поспешив по пятам неприятелей, дошли до *Укека* (Өфөк -- Өфө. -- Й.С.) и многих из них убили... Большую часть их взяли в плен, а немногие из них бросились на плотах в воду и переправились на ту сторону Итиля. Токтамыш-хан бросил ханство, дом и все, что имел... и, опасаясь за жизнь свою, с несколькими людьми бежал, ушел *в сторону Булара* (Башҡортостан көнбайышына, ә көнсығыш тарафтағы Себерҙең Төмән төбәгенә түгел! -- Й.С.) *в лесистую местность* (ул яҡтар әлегәсә урманлы. -- Й.С.) и спасся от львиных когтей". Һәр хәлдә, һуңғы төбәк үҙебеҙҙең Сәрмәсән, Ҡармасан, Дим йылғалары бассейнына тура килә һәм бының да сәбәбе бар:

**“Аноним Искандер. Рассказ о царствовании Токтамыша, сына Туй-ходжи-оглана.** Мать его была Катун-Кунчек из племени (насл) ***Конгурат*** (тимәк, үҙебеҙҙең ***Ҡаңғы*** ырыуынан! Шуға ла әсәһенең тыуған яғына -- Асылыкүл тирәһенә һыйынған. -- Й.С.). Он был царем способным, храбрым, с хорошим обращением, красивым. Справедливость и хороший характер его общеизвестны. Однако из-за неблагодарности, которую он проявил по отношению ко двору Тимура, все его хорошие качества и похвальные свойства пропали и погибли... он оказался на границе гибели и исчезновения, лишился крови и дома и, наконец, умер... 807 г. (=10.VII.1404 -- 28.VI.1405) в пределах ***Тулина”***. “Списки устроителя мира” тигән әҫәрендә Ғаффари ҙа шуны уҡ яҙа. Тик фарсынан урыҫсаға ауҙарылышты баҫмаға әҙерләп эшкәртеүсе баяғы икәү, Төйлән тигән йылғабыҙҙың донъяла барлығын белмәгәнлектән, бераҙ баш ватҡандан һуң, был “Тулин”ды, ул, “моғайын, Себерҙәге “Тюмен”дер”, тип бутап аңлатҡан да һөҙөмтәһе башҡа тарихсыларҙың да хеҙмәттәрендә нығынған, шул арҡала Себерҙең Төмән төбәгендә хатта “Туҡтамыш-хан ҡәбере” лә моронлаған...

Батша ерҙәрен барып күреү, мәсьәләгә асыҡлыҡ керетеү күп йылдар буйына тынғылыҡ бирмәһә лә, форсаты сыҡмай ине. Ниһайәт, ошо 2009 йылдың сағыу көнлө 18 октябрендә көткәнем алдыма килде: башҡорт халҡы, тарихы хаҡына фиҙакәрләнеп йәшәгән уҙаман Әнүәр Мансур улы Йомағолов үҙенең “тимер арба”һында елдертеп алды ла китте; 400 километр юл гиҙеп, күрәһеләребеҙҙе күреп, ишетәһеләребеҙҙе ишетеп, йөрөгән аяҡҡа йүрмә йоҡтороп ҡайттыҡ -- һауаплы хәстәре өсөн ҙур рәхмәт уға.

Әлшәй районын иңләп килеп Димгә ҡойған ***Төйлән*** йылғаһы буйында, Ҡаҙан ауылы тирәһендә гиҙәбеҙ -- ханыбыҙ тап ошонда үлтерелгән. *Төйлән* атамаһы үҙе -- төйәклән, төйәкләнеү урыны тигән һүҙҙер, уны, бәлки, Туҡтамыш-хан үҙе ҡушҡандыр. Тәбиғәт ғәжәп матур, ер-һыу бай, борон заман бигерәк тә хозур булғандыр; тәхетенән яҙған императорыбыҙ ул шомло көндә, моғайын, ошо һоҡланғыс сәхрәгә һунарға сыҡҡандыр, сөнки Ибн-Ғәрәбшаһ яҙа: **“Тохтамыш был убит Едигеем не в правильном сражении, а во время предательского ночного нападения, когда находился один без войска *в загородной местности”.*** Тимәк, торған һарайынан ситтә, ошонда. Ә ҡайһы тәңгәлдәрәк булған һарайы?

Шуныһы яҡшы мәғлүм: Ғаязитдин (мосолманлыҡ исеме) Туҡтамыштың Иҙел аръяғындағы баш ҡалаһы *Һарай* аталған, шунан һуң ул Иҙелдең бирьяғында Яйыҡ буйындағы баш ҡалаһын да *Мәсет-Һарай* исемләгән. Бындағы ҡалаһы ла, моғайын, *Һарай* булғандыр. Ҡалғанмы шуның эҙе? Ҡалған, бар, тип әйтә алабыҙ -- ошо уҡ төбәктәге ***Һарай*** ауылы! Ул Ҡаҙан ауылынан Торонтайыш аша көньяҡ-көнбайыштараҡ урынлашҡан, унда юл, имештер, тауҙар араһындағы хәтәр ҡыҫыҡтан -- *Хан тарлауығынан* үтә. Үҙебеҙ күреп ышандыҡ: Ҡафҡаз

тарлауыҡтарын хәтерләткән тәрән аралыҡ икән был, борон заман әҙәм аяғы баҫмаған төбәккә илткәндер. Юлыбыҙҙың тап осонда хәҙерге *Һарай* ауылы, тәрән үҙәнгә ҡыҫылмыш ***Ҡурсаҡ*** исемле һыуҙы буйлап ултырған. Ә тарлауыҡ асылған ерҙә күккә ашҡан ике бейек тау, улар, ике ҡарауылсылай, бөтөн тирә-яҡҡа өҫтөнлөк итә -- йәтеш ҡарауыл тауҙары! Арғы башҡа һағауыл ҡуйһаң, дошман-фәлән үтеп керерлек түгел, урынды хан яҡшы белеп һайлаған, тип һөйләнәбеҙ. Йылға исеме *лә* дөрөҫләй быны: *Ҡурсаҡ* кеше аяғын баҫтыртмай ҡурсау урыны (заповедник) тигән һүҙ... Тарлауыҡтан төшкән юлдың тап ошонда тупаҡланып (тупикланып) өҙөлөүе *лә* юҡтан түгел...

Тәхетенән тибәрелгән бөйөк шәхесебеҙ бында, әлбиттә, йән аҫырап ҡына ятмаған, ә юғары хакимиәт теҙгенен кире ҡайтарып алыу йәһәтенән Аҡһаҡтимер-йыһангирҙең "ҡылын тартҡан". Шәрәф-әд-дин дә яҙа: *"Тимур обещал Тохтамышу, по окончанию предпринятого похода в Китай, поддержать военной силой его притязания на золотоордынский престол: "После этого похода я, с Божьей помощью, опят покорю улус Джучиев и передам ему".* Тик Аҡһаҡтимер Ҡытайға йүнәлмеш һуғыш сәфәрендә вафат булып, шунан йылдам файҙаланмыш Еҙекәй батыр ҡәрҙәш көндәшенән арыныу сараһын күрә: әлеге Төйлән буйында аңдып тороп, зәһәр әжәл уғын атып, ҡан дошманы Ғаязитдин Туҡтамыштың шанлы ғүмерен өҙә...

Әлеге "Үҫәргән Тәүәрихе"ндә Төркиә дәүләтен һәм уның солтандарын башлап ебәреүселәрҙең дә Өфөнән сыҡҡан башҡорттар икәнлеге нәүбәттәге бүлектә шәжәрәләп бирелгән.

1999

# БАШҠОРТТАР ҺӘМ ТӨРӨКТӘР

## Боронғоларыбыҙҙы беләбеҙме?

Аяҡ аҫтыбыҙҙа ятҡан, эйелеп кенә алыуҙы көткән ҡатлам-ҡатлам ҡатмарлы, меңәр йыллыҡ фәһемле ғәзиз тарихыбыҙҙы, иҫебеҙ ҙә китмәйенсә, тапап йөрөй бирәбеҙ... Эйелеп алыусыны иһә күрмәҫкә *лә* ишетмәҫкә тырышабыҙ, йә булмаһа, ауыҙ йырып көләбеҙ. Әрһеҙлеген уғата туҡтатмаһа, фәҡир-фоҡор аңыбыҙҙың кимәленән оторо башы сурайып сығып торһа, суҡмар һаплап соңҡаһын сыңлатабыҙ...

Үҙем һымаҡ уҡ ҡәҙимгесә белемле, үҙемә ҡарағанда *ла* киң күңелле һәм эскерһеҙ йәштәшем бар — гәзит эшендә күҙе сыҡҡан күренекле журналист. Айныҡ сағында әллә ни өн өнәмәүсән шул уҙаман, саҡ ҡына "төшөрөп" алдымы,

осраҡаны ғына һайын теле асылып китеп, теңкәгә тейгес бер үк мәрәкәһе менән һиңкәзетә:

Һе! Башҡорт гегемонсыһы! Беренсе башлап атты өйрәтеүселәр һәм һыбайланып менеүселәр, тәгәрмәсле арба яһап егеүселәр, металл иретеп ҡойоусылар һәм иң боронғо Арҡайым тәгәрмәсҡалаһын ҡороусылар — *башҡорттар булган,* тиһең инде һин, ә?! Ха-ха-ха! Ну шыттыраһың да инде һин, әй!

— Ни эшләйем һуң? Ысынлап та, шулайын-шулай булған бит!

- Шулайын-шулай булғанда ла шаулама! Кеше ышанмаҫлыҡ һүҙҙе, дөрөҫ булһа ла, һөйләмә, тип әйткәне бар ҙа инде Мостай Кәрим ағайым! Гегемонсы!

"Гегемонсы" тамғаһынан шаңҡыбыраҡ, күбеһенсә телемде тешләп уҙам, сөнки "башҡорттоң тарихы 1917 йылғы Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына башлана" тип миңрәүләтелгән "зыялы" быуындың вәкиленән артыҡ нимә көтөргә? "Нигилистар" тип кенә үҙенә хас мәргән нарыҡлай торғайны бындайҙарҙы зирәк аҡыл ағайыбыҙ Лоҡман-Хәким Ғиләжев...

Диңгеҙ аръяғында ятҡан ҡәрҙәш халыҡ төрөктәрҙә беҙҙеке кеүек "нигилистар" бармылыр, булһа әгәр, нисек аталаларҙыр — асыҡ ҡына белмәйем. Әммә инде үҙебеҙгә килгәндә, донъя-ғаләмебеҙҙең үҙе менән үк бер йәштәге тип әйтерлек сап-сал Урал бөркөтө — иң боронғо халыҡ була тороп та, үҙебеҙҙең үк бик боронғоно бер һаплам еп оҙонлоҡ та күҙ аллай алмауыбыҙҙы таныйыҡ та урта быуаттарҙа ғына үҙ алланып тәпәй баҫҡан ҡан ҡәрҙәшебеҙ төрөктән был йүнәлештә әллә ни күпте көтөүҙән тыйылайыҡ...

Туғандарса тураһын ғына әйткәндә, төрөктә лә "башҡортса" хәл икән шул: үҙҙәренең Ғоҫман дәүләтен беренсе башлап ҡороусыларҙың төбөн-тамырын әлегәсә асыҡлап бөтмәгәндәр, милләт өсөн был бик мөһим башланғыс осор фәҡәт еңелсә имеш-мимеш, риүәйәт һәм легендалар рәүешендә генә һөйләнеп килә икән (М.А.. Гасратян, С.Ф. Орешкова, Ю.А. Петросян. Очерки истории Турции. М., 1983, 18-се бит. Артабан "Очерки" тип алына). Һәм Төркиә тарихын, төрөктәрҙең үҙҙәренән дә бигерәк, сит ил тарихсылары яҙғанлыҡтан, күбеһенсә шуларға таянабыҙ.

742 йылда Көнбайыш Төрки Ҡағанат ҡолатылғас, Уралдан Урта Азияға һәм һуңыраҡ унан — хәҙерге Төркиә биләгән Кесе Азияға тарихсылар тарафынан "төрки-оғуз" тип аталмыш ырыуҙарыбыҙ ағыла. Ә был ырыуҙарҙың тәғәйен исемдәре, шулай уҡ хәҙерге Төркиә еренә (Анталияға) улар ҡайҙан һәм ни сәбәпле килгәндәре лә аҙмы-күпме билдәле: "...Четыре тюркские племени — *печенеги, баджгарды, нукарда и баджна* в результате ожесточенных сражений с огузами, кимаками и карлуками ушли из Приаралья и оказались в Малой Азии. Около 932 — 933 гг. эти племена вторглись в пределы Византии" (Агаджанов С.Г. Очерки истории огузов и туркмен Средней Азии IX — XIII в.в., Ашхабад, 1969). Бындағы "печенег" (йәки "баджна") һәм "баджгард" (башҡорт) — бик боронғо

башҡорт-бәжәнәк ҡәбиләһенең ике сатаҡ-ырыуы ул, ә “нукарда” (нуғай-урҙа) — уғата боронғораҡҡы Үҫәргән-Ҡаңғы ҡәбиләһенең сатаҡ-ырыуҙары булып, йыйыныһы саф башҡорттар икәнлеге һәм уларҙың Башҡортостан көньяғынан (“Арал яғынан”) ҡубыныуҙары ап-асыҡ. Шулар араһынан тарихсылар яҙған Ҡыныҡы (Ҡаңғы) ҡәбиләһенең (башҡорт ҡаңғылары!) бер сатағы булған Һалъйыуыт ырыуы (башҡорт һалъйыуыттары!) бер осорҙа ифрат та ҡеүәтләнеп, XI быуаттың икенсе яртыһында Урта Азиянан алып Урта диңгеҙгәсә йәйрәп ятмыш “Бөйөк Һалъйыуыт” империяһын төҙөй.

XI — XII быуаттарҙа улар ҡатарына алыҫ төньяҡ-көнбайыштан (Уралдан!) тағы ла бәжәнәк (Башҡорт!), уз (Үҫәргән!), ҡоман (Ҡыпсаҡ!) ҡәбиләләре эркелә (бөтәһе лә башҡорт бабаларыбыҙ!) Һәм хәҙерге Төркиә дәүләте биләгән ер ҡәүемдәренең дә телдәренең баяғы башҡорт ырыуҙары телдәренең тәьҫирендә төркиләшеүенә — хәҙерге төрки телдәренең “оғуз төркөмө” хасил булыуына килтерә (“Очерки”, 4 — 5-се биттәр). Беренсе бөйөк тюрколог Мәхмүт Ҡашғариҙың 1072 — 1078 йылдарҙа яҙып тамамланған төрки телдәре һүҙлегендә: “иң еңел (йәғни ҡатнаш. — *Й.С.*) тел — оғуздар теле, иң дөрөҫ һәм иң шәп тел — тухси (йәғни “Туҡсаба” оранлы Үҫәргән. — *Й.С.*) теле һәм яғма (?) теле, — тип яҙа — уйғурҙар иленә тиклем үк һуҙылған арауыҡтағы Или, Иртыш, Йомар (Һамар. — *Й.С.*), Иҙел йылғалары буйындағы (боронғо Башҡортостандағы! — *Й.С.*) халыҡтарҙың да телдәре — дөрөҫ төрки”. Ошо “дөрөҫ төрки” телдә һөйләшеүсе бабаларыбыҙ Кесе Азияла — хәҙерге төрөк, ә Урта Азияла төрөкмән телдәренең милли тел булып ҡалыплашыуына ла үҙ өлөшөн индерә (төрөкмән телендәге “ҫ”, “ҙ” өндәре — тап шул “башҡортлоҡ”тоң күрһәткестәре).

1092 йылда “Бөйөк Һалъйыуыт” империяһы емерелгәс, урынына шул уҡ һалъйыуыттар етәкселегендәге эреле-ваҡлы солтанаттар барлыҡҡа килеп, XII быуатта улар яңынан шул уҡ һалъйыуыттарҙың ҡеүәтле һәм берәгәйле Рум солтанатына әүерелә; XIII быуатта уның ҡап-яртыһы, татар-монголдар ҡыҫымы аҫтында ҡалып, үҙ аллылығын юғалта. Ә илдең икенсе яртыһында, Көнбайыш Анталыла, төрки бабаларыбыҙҙың үҙҙәренең ырыу башлығы бейҙән башҡа бер кемгә лә буйһонмаған егермеләп бейлеге хасил булып, Ирандағы татар-монголдарҙың һәм Мысырҙағы мәмлүктәрҙең ике яҡлап тирмән ташылай ҡаты ҡыҫымы араһында ҡыйғыр ҡылыс менән генә көн күреүсе “мәңгелек яугирҙәр” хәлендә йәшәй башлай. Тап бына ошо яугир бейлектәр араһынан ҡалҡып сыҡҡан һәм Ғоҫман дәүләтенең (хәҙерге Төркиәнең) беренсе нигеҙ ташын һалған һәм артабан дауам иттерткән ***Иртоғрил бәһлеүәнде***ң асылда кемлеген, ҡайҙан һәм ҡайһы ырыуҙан килеп сыҡҡанлығын әлегәсә бер кем дә төплө генә белмәгәнлектән, шуны башҡорт хәтеренә таянып билдәләү бурысы тора (гәрсә авторға, баяғыса, “башҡорт гегемонсыһы” тигән яманат янаһа ла!). Сөнки тарих фәненең үҫеше үҙе быға этәрә бит: үҙебеҙгә билдәле булған мәғлүмәтте, бер

ниндәй ҙә ҡаршылыҡтарға ҡарамай, артабанғы тикшеренеүселәр алдына һалыу фарыз. Ә үҙ тарихын һанламаған — үҙен дә абайламаған; үҙен абайламағанды эттәр ҙә абалаған. Ошоноң тап яҡшы киреһе булған, үҙ халҡының тарих ҡынаһын, юҡтан да бар ҡылып, байытырға тырышҡан егәрлелектең ташҡа баҫылған миҫалы алдыбыҙҙа ("Известия" гәзитенең 2001 йылғы 8 июнь һанында уның Париждағы хәбәрсеһе Эльмар Гусейнов мәҡәләһенән):

**"Татары вернулись! Тысячелетие Казани отмечают в Париже.**

Генеральный директор Юнеско господин Мацура вышел из своего кабинета... татарином...

Татары вновь вернулись в Париж. Искрометная конница с берегов Волги, вступившая во французскую столицу весной 1814 года, оставила тогда неизгладимое впечатление у местного населения. И вот — снова дни Татарстана в самом сердце Францииии...

На вопрос корреспондента "Известий" о том, как он себя здесь чувствует, Минтемир Шаймиев ответил с юмором:

— Нам не привыкать брать столицы..."

Бирһен хоҙай: ташҡа баҫылып сыҡҡас, ысынлап та шулайҙыр. Әммә бында "башҡорт гегемонсылығы"н ҡыйратыусы баяғы "нигилистар"ыбыҙға салҡая биреп хахылдарлыҡ "хикмәт" бар: тимәк, Наполеон илбаҫарҙарынан "Рәсәй-әсәй"ҙе ҡурсаламаҡҡа үҙ хәленән егерме һигеҙ атлы полкын төҙөгән һәм Мәскәү тупһаһы Бородинонан — Парижғаса һуғышып барып еткән, Францияның шул баш ҡалаһына беренселәр сафында бәреп кергән, егетлектәре менән француздарҙы ла, башҡаларҙы ла таң ҡалдырған башҡорт бабаларыбыҙ ҙа һис бер ҡасан булмаған... йәки... татар булған (әстәғәфирулла тәүбә")...

Дөрөҫ һүҙҙе, кеше ышанмағанда ла, һөйләй барыу хәйерле.

"Кто владеет прошлым — владеет будущим", — бөйөк аҡыл эйәһе Никколо Макиавелли (Италия) биргән аҫыл һабаҡ был...

## Төркиә тупрағы — борон-борондан төркиҙәрҙең төйәге

Мифик "атан-аҡ-абар"ға (ата-аҡ-бүрегә) эйәреүсе Үҫәргән-Ҡаңғы ҡәбиләһенең төньяҡ-көнсығыш сатаһын шул исемдең бер аҙ ҡыҫҡартылышында "данаҡ-абар//танаҡ-абар" тип атағандар; урта быуаттарҙа иһә ошо исем шул уҡ Үҫәргән-Ҡаңғынан саталанмыш яңы (бала) ырыуға бирелеп, әлеге көндәге "Түңгәүер" булып йөрөй... Бик боронғо (хәҙерге "Түңгәүер"гә тиклемге) замандарҙа Уралдан алып Ҡафҡазғаса, артабан Көнсығыш Европа үтәләй Италия

һәм Грецияғаса барып еткән был Үҫәргән тармағы абарҙар (йәки хәҙерге Ҡафҡаздағы аварҙар). Әйткәндәй, Үҫәргән башҡорттарының мифик Әсә-Бүрегә эйәреүсе икенсе яртыһы, йәғни б.э. тиклем VII — V быуаттарҙа тап ошо Тәүтөйәгебеҙҙә (Иҙел — Урал далаларында) гөрләтеп донъя көткән һәм тарихсыларға "савромат" исеме менән билдәле булған, ә аҙаҡ килеп шул исемдең ҡыҫҡартып әйтелешендә "сармат" тип аталып, б.э. тиклем III быуат — б.э. IV быуаттарында Уралыбыҙ артындағы (эйе, "аръяғы"ндағы түгел, сөнки һыуҙың ғына — аръяғы, ә тауҙың арты була!) Тубылғы (Тобол) йылғаһынан алып Көнбайыштағы Дунай йылғаһынаса йәйрәп йәшәгән данлы бабаларыбыҙҙың да "Әсә-бүре-аба-т"тар икәнлеген (һуңғы "т" — боронғо күплек ялғауы), йәғни ҡыҫҡартып-шымартып әйтелештәге "сәбүрабат"тар — "савромат"тар булғанлығын тикшереп ҡараусы ла, телгә алыусы ла юҡ. Ошо уҡ Үҫәргән ҡәбиләһе "савромат"тың баяғы изге ата-бүре "сары-ата-аба"ға (һоро-ата-апаға) эйәреүсе бер сатағы сарабата//сарамата (сармат) — жарамата//юрматы тип атала башлай — хәҙерге башҡорт халҡының Юрматы ырыуы кешеләре...

Үҫәргән тармағы данаҡ-абарҙарҙың заманында бөйөк Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлы буйлап алыҫ көньяҡ-көнбайышҡа китмеш бөйөк сәфәр эҙҙәрен улар йәшәп уҙа барған һәм уларҙың "танаҡ//данаҡ" исеме ҡушылған ер-һыу атамаларында күрәбеҙ: Көньяҡ Уралдағы танаҡ-улаҡ (Таналыҡ) йылғаһы (борон ул Яйыҡ баштарының береһе һаналған) — Дон (данаҡ) йылғаһы — Днепр (данаҡ-абар) йылғаһы — Дунай (данай) йылғаһы — Балҡан ярымутрауы (был исемде лә үҙебеҙҙең Тәүтөйәк тауы Балҡандан алып барып биргәндәр)...

Ғөмәрҙең (Гомерҙың) "Илиада" эпосындағы шул данайҙар (йәғни ата-бүрегә эйәреүсе үҫәргәндәр) б.э. тиклем XIII быуатта уҡ үҙебеҙҙең ҡаңғылар йәки боронғо хөрмәтләп әйтелештәге "ҡан-аҡай"ҙар ("Илиада"лағы аҡайҙар — ахейҙар) менән тығыҙ берлектә ошо Кесе Азиялағы (хәҙерге Төркиәләге) атаҡлы Троя ҡалаһын яулап алыуҙа әүҙем ҡатнаша. Был яулауҙы ойоштороусы аҡайҙар ("Илиада"лағы ахейҙар) иһә, әле генә әйтә биреп ҡуйыуыбыҙса, шул уҡ Үҫәргәндең Әсә-Бүрегә эйәреүсе сатаһы ул, йәғни баяғы аҡан-аҡай — Ҡанаҡай//Ҡаңғы ырыуы тап үҙе булып тора; Ғөмәр әҫәрендә иһә был этнонимдың ҡыҫҡаҡланмыш икенсе яртыһы "аҡай" (ахей) телгә алынған. Ҡаңғыларҙың (аҡайҙарҙың) ҡасандыр шунда йәшәгәнлеген шундағы Аҡай (Ағай, Эгей) диңгеҙ исеме лә шаһитлай. Хәҙерге Төркиә тупрағында б.э. тиклем икенсе мең йыллыҡта — башҡорт ҡатайҙарының (хеттарҙың йәки хаттарҙың), ә беренсе мең йыллыҡта башҡорт һарттарының дәүләттәре лә күкрәп сәскә атҡанлығын яҙғайныҡ...

1453 йылда 2-се Мәхмүт солтан етәкселегендәге төрөк бабалары христиандарҙың шундағы шанлы ҡәлғәһе булған Константинополде (Истанбулды) һуғышып алғандан һуң, бөтә Көнбайыш христиандар донъяһы уларға ҡаршы хөсөтләнеп, "тәре һуғышы" әҙерләй башлағас, Көнбайыш Европа илдәрендә

баяғы 2-се Мәхмүт солтандың Рим папаһы Николай 5-сегә яҙған хаты тарала; ошо яҙмаһында төрөк солтаны, "төрөктәр кеүек үк, шул уҡ Троя халҡының вариҫтары булған итальяндарҙың" уға, йәғни үҙҙәренең тарихи ҡан ҡәрҙәштәре булған төрөк солтанына, дошманлыҡ ҡылыуҙарына аптырауын белдергән; ә бер нисә тиҫтә йыл алдараҡ шул уҡ итальяндар кардиналы Исидор ҙа төрөктәрҙең, итальяндар кеүек үк, *тевкр* (йәғни Троя халҡы) вариҫтары икәнлеген раҫлап сыҡҡан булған (С. Рансимен. Падение Константинополя в 1453 году. М., 1983, 149-сы бит), ә Рим ҡалаһын нигеҙләүсе башҡорт бабаларыбыҙ тураһында "Хәтерхитаб"ымда ("Ағиҙел"дә "Башҡорт хәтере" тип баҫылды) ентеклерәк яҙғайным. Быларҙан иһә Ғөмәр "Илиада"һындағы боронғо Троя ҡалаһының халҡы ла шул үҙебеҙҙең аҫаба башҡорттар булғанлығы аңлашыла, сөнки ул Троя халҡының гректар үҙҙәренсә боҙобораҡ теркәп ҡалдырған атамаһы *"тевкр"* — үҙебеҙҙең "төп-ҡор" булып, был иһә киң билдәле "баш-ҡор" (күплек һанда "башҡорт") этнонимының варианты икәнлеге ап-асыҡ (төрөктәрҙең дә башҡорттарға кендеге береш, тимәк)...

## Төрөк солтандары

Бөтә ҡан ҡәрҙәш халыҡтарҙың дөйөм атамаһы "төрөк" йәки "тороҡ" (боронғо күплек һанындағы әйтелеше "төркөт") — борон заман муйынына *тороҡ* (фаллос) ишараты баулап аҫҡан башҡорт бабаларҙың *ләҡәбе* икәнлеген яҡшы иҫләһәк, бөгөнгө Төркиәләге төрөктәрҙең, һис юғында уларҙың солтандар династияһының килеп сығышын башҡорт тәүәрихтәренән юллау яҙыҡ түгелдер.

Риүәйәттәр буйынса, — ти баяғы "Очерки" китабының авторҙары, — *ҡайа* ҡәбиләһенән бүленеп киткән 400 — 500 тирмәле ҙур булмаған күскенселәр төркөмөнөң юлбашсыһы Иртоғрил шундағы Һалъйыуыт иленең солтаны Ғәләүитдин кей-ҡеүәт 1-сенән (1219 — 1236) Сөгүт төбәгендә *ужымлыҡ* (туҡланып йәшәрлек. — *Й.С.*) ер ҡабул итеп ала, шуның хаҡына ул Һалъйыуыттар державаһының төньяҡ-көнбайыш сиктәрен һаҡларға тейеш була. Башҡа ужымлыҡтар кеүек үк, был ер уның тоҡомдарына мираҫ итеп ҡалдырыла. Иртоғрилдан һуң уның улы Ғоҫман (1258 — 1324) бей була, артабан был бейлек һәм династия уның исеме менән Ғоҫмандар тип йөрөтөлә" (18-се бит).

Иң тәүҙә геройҙың исем-ләҡәбенә иғтибар ҡылайыҡ: ир-тоғро-ил ("илгә тоғро ир" тигән һүҙ). Ә "Ир" — башҡорттоң иң күренекле юлбашсыларына ғына бирелмеш данлы *ләҡәп* ул:

Салауат батыр — *Ир* ине,
Менгән аты кир ине.
Дошман менән алышҡанда

Алдын бирмәҫ *Ир* ине.

“Күсәк бей” эпосынан:

*Ир*-Бабсаҡ Йәмиләне алып ҡайтҡан...

Боронғо Бүре-Өфө (Парфия) дәүләтенең нигеҙендә Иран (йәғни “Ир иле”) тигән империя ҡороусы башҡорт батырының да данлы ләҡәбе “Ир” булған...

Иртоғрилға Византия сигендәге был ужымлыҡ ерҙең ни сәбәпле бирелеүен төрөк тарихсыһы, Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың шәкерте Ниһал Атсыз мәҡәләһендә (“Ағиҙел” — 2000/8, 40 — 41-се биттәр) күрәбеҙ: “Иртоғрил бей етәкселегендәге *ҡайылар* ҡәбиләһе, Анталияның көнбайышына табан хәрәкәт иткән саҡта, бер үҙәндә һуғышҡан ике ғәскәргә тап булған. Иртоғрил бей үҙенең кескәй генә ҡеүәте менән еңелеп барыусыларға ярҙам иткәс, татарҙар еңелгән”, — тип аңлатыла ине был ваҡиға тарих китаптарында... Һуғыштың һалъйыуыттар менән хорезмдар, Һалъйыуыт солтаны Ғәләүитдин Кей-ҡеүәт менән Хорезмшаһ Йәләлитдин Мәңгебирҙе араһында Яҫҫысимәндә булған һуғыш булыуына тәүгеләрҙән булып Зәки Вәлиди иғтибар иткән. Һуғыш 1230 йылда Эрдзинжан тирәһендәге Яҫҫысимән тигән ерҙә булған. Был хаҡта Зәки Вәлиди Туған тарихсы Нәсәвиҙең яҙмаларынан мәғлүмәт тапҡан. Нәсәви һуғышта еңелеп барған Ғәләүитдин Кей-ҡеүәт, көнсығыштан көтөлмәгән ярҙам килеүе арҡаһында, еңеүгә өлгәшеүе тураһында яҙа”.

Тимәк, уҙаманыбыҙ Иртоғрил бәһлеүән (шәжәрәбеҙҙә ул тап шулай ләҡәпләнә) үҙенең яңы солтанатын ҡорасаҡ һәм артабан ул Ғоҫман империяһы — Төркиә тип аталасаҡ тупраҡҡа 1230 йылда килеп аяҡ баҫҡан һәм үҙенең һалъйыуыт-башҡорт ҡан ҡәрҙәштәренә хәл иткес һуғышта батырҙарса ярҙам күрһәткән. Йылына ҡарағанда, был аҫыл зат (Үҫәргән батшалар шәжәрәһе вәкиле) атаҡлы Муйтән бейебеҙ менән бер үк заманда йәшәгән һәм, бәлки, ул да шул уҡ бабабыҙ Туҡсаба улы — Муйтән бейҙең бер туғаны булғандыр.

Ғоҫман империяһының нигеҙ ташын һалыусыларҙы “Очерки” авторҙары һ.б. “ҡайа” йәки “ҡайы” ырыуынан тип атаһа ла, Мәхмүт Ҡашғариҙа был этноним аҙаҡҡы һүҙынҡыһыҙ яҙыла: “Румға (Византияға. — *Й.С.*) башҡаларҙан яҡыныраҡ йәшәүсе ҡәбилә — бәжәнәк, артабан китә ҡыпсаҡ, оғуз, йемек (ҡумыҡ. — *Й.С.*), башҡорт, басмыл, *ҡай...*”

Күренеүенсә, Византия (хәҙерге Төркиә) тарафынан тороп һанағанда был “ҡай”ҙар Арал — Каспий буйҙарындағы башҡорттарҙан да арыраҡ — нәҡ Уралдың үҙендә — Үҫәргәндәр тәүтөйәгендә йәшәгәндәр булып сыға.

Әгәр этимологияһын (һүҙҙәр килеп сығышын) барлаһаҡ, баяғы-шул “ҡай”ҙан — ҡай-аҡа//ҡайгы (бүре) — ҡайаҡ//кейек (йыртҡыс януар) һүҙенең, ә

“ҡай-ата” (ата бүре) тигәндән ҡайат//койот (бүре) килеп сығышын белгәнлектән, мифик әсә (инә) бүрегә эйәреүсе үҫәргән-нуғайҙарҙың (“нуғай” — “бүре-эткә эйәреүсе” тигән һүҙ) дини ләҡәбенә лә иғтибар итһәк, килеп сыға: ана-ҡай (инә бүре) — наҡай (нуғай — инә бүрегә эйәреүсе үҫәргәндәр) — *ҡай* (бүре). Әлхасил, Төркиә солтандар династияһын башлап ебәреүсе Иртоғрил бәһлеүән үҙебеҙҙең Үҫәргән ҡәбиләһенең батшалар шәжәрәһе вәкиле булған һәм шул Кесе Азияға Күк Уралдың үҙенән барып сыҡҡан... Был хаҡта Ғоҫман империяһы тарихсылары әлегәсә шәйләй алмаһалар ҙа, башҡорт халҡының быуындан быуынға яҙыла барған һәм әлеге көндә Рәсәй Федерацияһы Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы китапханаһында ИБ — 2279 шифры менән һаҡланған “Үҫәргән тәүәрихе”ндә ул шаҡтай аныҡ сағыла.

Билдәле булыуынса, боронғо Өфө көләре (ханы) Мүйтән бабабыҙ етәкселегендә татар-монголдарға ҡаршы баш күтәргән һәм күп йылдарса (1224 — 1257) ҡаты һуғыштар алып барған Башҡортостанды 1236 — 37 йылдарҙа бөйөк Сыңғыҙ хан улдарының берләштерелгән армиялары буйҙан-буй айҡап уҙа һәм баш ҡалабыҙ Өфөнө, башҡа ҡалаларыбыҙҙы емерә, Мүйтәнде һәм уның балаларын, туғандарын, үлем язаһынан ҡурсаланып, Каспий диңгеҙе аръяғына (хәҙерге Иран һәм Төркиә ерҙәренә) ҡасырға мәжбүр ҡыла. Ана шулай сит илдәргә олаҡҡанға күрәлерме инде, әллә боронғо шәжәрәлә һәр быуындың иң күренекле бер генә вәкилен теркәү ҡануны буйынсамы, был заттарҙың (Мүйтәндән һәм уның Башҡортостанда ҡалмыш улы Шаҡмалдан башҡа) исемдәре Үҫәргән шәжәрәһенә кермәй ҡалған, әммә Иртоғрил исемен тап шул “Үҫәргән тәүәрихе”нең 60-сы битендә Мүйтән бей ейәне Йор-уҡ (Жеруҡ) исеме тәңгәлендәге тарихи аңлатма рәүешендә күрәбеҙ: “Жеруҡ, *Тогрил хан* заманында бәк булып, хөкүмәт итер ине”. Тимәк, шәжәрәне төҙөүселәр бәһлеүәнебеҙ Иртоғрилдың алыҫтағы Анталияла бөйөк хан-солтан дәрәжәһенә ирешеүен, ә Мүйтән ейәне Йор-уҡ иһә уның шанлы бейҙәренең береһе булғанлығын яҡшы белгәндәр. Ана шул хан-солтанлығын иҫәпкә алыптыр инде, “Үҫәргән тәүәрихе”ндә Иртоғрил нәҫелдәренең бөйөк төрөк солтандары рәүешендәге үҙ аллы-айырым шәжәрәһен төҙөгәндәр. Был ҡомартҡы хәҙерге ғилми белешмәгә лә (К.Э. Босворт. Мусульманские династии. Справочник по хронологии и генеологии. М., 1971, 185 — 186-сы биттәр) шаҡтай тап килеү генә түгел, хатта уны бер килке мәғлүмәттәр менән байытыуын да иҫәпкә алып, әйләнешкә индереп ебәрәбеҙ (йәйәләр эсендә — “тәүәрих”тәге бит һандары һәм ошо мәҡәлә авторының аңлатмалары).

## Шәжәрә

1. Бәһлеүән Тоғрил (Ир-Тоғрил. — 47).

2. Хан бин Тоғрил Ғоçман Ғази.

3. Солтан Ур хан Ғази бин Ғоçман (49).

(Күренеүенсә, был уның исеме түгел, ә ләҡәбе: Ур йәки Уртүбә ҡалаһының ханы, тигән һүҙ. Был Уртүбә — хәҙерге Орск ҡалаһы урынындағы боронғо ҡалабыҙ, 1391 йылда уны АҡһаҡТимер емергән. Атаһы Ғоçман Ғази вафатына тиклем был зат Башҡортостандың Ур ханы булып торғандыр. "Ур хан тарих 724-селә" (һижрә менән) тигән аңлатмаһы бар).

4. Солтан Морат ***Өфө*** бин Ур хан Ғази.

(Атаһы Ур хандың, аҙаҡ Ғоçман дәүләте солтанының, вафатына тиклем ул Башҡортостандың ***Өфө*** ханы булып торған).

5. Йылдырым Баязид.

6. Тимерлән хан. Был (Тимерлән) солтан Мәхмүт заманында, тыумыштан боҙоҡлоҡ, енәйәт ҡылыусы булып, көтөлмәгән тарафтан һөжүм итеп, солтан эстән уларҙы кире (үҙҙәренең) еренә һөрҙө; күп үлем килтереүсе аҡһар булған, тиҙәр һәм илбаçарҙар яулап алынды һәм ҡара афатлыҡтары харамға сыҡты, тарих 823-тә вафат итте... (51).

7. Муса бәк.

8. Солтан Мәхмүт бин Баязид, 37 йыл тарихдә торурының вафаты булды рабиғәүәлдә (Ай йылының өсөнсө айында).

9. Ир-солтан Мөхәмәдулла бин Баязид.

10. Хан-солтан Моратулла.

11. Солтан Мөхәммәдфатих Исламбура, 894 вафат, 33 йыл тәхетдә булди (53).

12. Солтан Баязид.

13. Солтан Сәлим Алтази. Солтан Сәлим шам заманында 9 йыл шам (тәхет эйәһе) булды, 937 йыл тарихдә вафат.

14. Солтан Морат бин Алтази 2-чи. Солтан Морат 942 тарихдә вөжид (барлыҡҡа) килеб, 992 тәхетдә жалусиәтидә (ултырыусы рәүешендә) 21 йыл шам булды, тарихның ун бердә ваф бузар (интегеп үлде. — 55).

15. Солтан Мөхәммәд бин Алтази.

16. Солтан Мостафа бин Мөхәммәд. 982 (?). Солтан Мостафаның солтан тарихы мәғлүм дәғел, туҡыз йыл шам булды 34 йыл ғүмерендә (57).

17. Солтан Амән.

18. Солтан бин Мөхәммәд (59).

19. Солтан Ибраһим.

20. Солтан Мөхәммәд.

21. Солтан Сиғиә бин Ибраһим.

22. Солтан Амән.

23. Солтан Мостафа. Солтан Мостафа мең йөз ун тулғанда тәхет йолош итди (йолҡоп алды), 1124-дә вафат, урынын ҡәрдәше йолош итди, димешләр (61).

24. Солтан Аҡхан Алтази. Солтан Аҡхан 1129-дә туғыбди (тыуҙы), 1173-дә вафат.

25. Солтан Мәхмүдиә бин Мостафа. Солтан Мәхмүдиә 1173 тарихдә тәхет кичди, 27 йыл солтанәтдә булди, 1178 тарихдә вафат. Бу солтан заманиндә йәғафу (ғәфү иткеһеҙ) кафир илләрүн әсир идеб кәнд мәккү идеб (ҡалаларын хәйләләп) алди... 1178-дә. 1181-дә вафат, солтанәтдә әжғиә...

26. Солтан Ғоҫман бин Мостафа. Солтан Ғоҫман 1178-дә (шам), 1181-дә вафат, солтанәтдә өч йыл.

27. Солтан Мостафа бин Амән. Бу солтан 1181-дә тәхет кичди, 1197 вафат итди.

28. Солтан Дәмин бин Амән. 1213 тарихдә вафат.

29. Солтан Ғәбделхәмид бин Амән. 1197-дә тәхет кичди.

30. Солтан Сәлим бин Ғәбделхәмид (63).

31. Солтан Мостафа бин Ғәбделхәмид.

32. Солтан Мәхмүд бин Ғәбделхәмид.

33. Солтан Ғәбделмәжит.

34. Солтан Ғәбделхәмит.

(Күренеүенсә, шәжәрә теҙмәһе 2-се Ғәбделхәмит тәхеткә ултырмыш осорға, йәғни һижрә менән — 1293, миләди менән 1876 йылғаса еткерелгән, артабанғыһын К.Э. Босворт белешмәһенән барларға була).

29.06.2001.

# БӨЙӨК ШӘЖӘРӘЛӘРЕБЕҘҘЕҢ БЕРЕҺЕ

Ошоғаса килеп еткән һәм билдәле булған иң тәрән йөкмәткеле, бай мәғлүмәтле Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең береһе был, ә улар донъяла өсәү:

1. XX быуаттың 20-нсе йылдарында мәшһүребеҙ Сәғит Мерәҫев донъяға сығарған, Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге аҫыл зат Тәтегәс-би (1565 йыл вафат) үҙе әйтеп яҙҙыртып ҡалдырған "Нуғай ылыҫының шәжәрәһе"; совет этнографы Р.Ғ. Кузеев уны, моғайын, үҫәргәнле Тәтегәс-би Юрматы ырыуының бийе булғанға күрәлер, "Шежере башкир племени Юрматы" тип атаған (Р.Г. Кузеев. Башкирские шежере. Уфа – 1960, 27-нсе бит), ғәмәлдә ул Үҫәргән шәжәрәһе.

2. XIX быуат аҙаҡтарында хәҙерге Йәнсура (иғтибар! – шәжәрәләрҙә был бабабыҙҙың исеме тап шулай "Йәнсура" тип яҙылған, ә "Ейәнсура" түгел һәм уның районға исемен биргән Бәкәтәр ауылы ла халыҡ телендә Йәнсура тип йөрөтөлдө) районы Байыш ауылы муллаһы Муса хәҙрәттән күсереп алынған бөйөк "Үҫәргән тәүәрихе", ә Р.Ғ. Кузеевтың баяғы китабында унан бик бәләкәй өҙөк кенә килтерелеп, ни өсөндөр "Шежере башкир племен Бурзян, Кыпсак, Усерган и Тамъян" тип исемләнгән (75-енсе бит, VII), гәрсә шәжәрә тулыһынса Үҫәргән батшаларыныҡы булһа ла. Был ҡомартҡы баштан-аяҡ беренсе (һәм әлегәсә һуңғы!) тапҡыр мин фәҡирегеҙ тарафынан тәүҙә -- "Ағиҙел" журналында, шунан һуң китапта (Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ-хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө -- 2007) ташҡа баҫтырылды.

3. Большевиктар тарафынан хәҙерге Ырымбур өлкәһен ҡораҡлағанда ҡырҡып биреп ҡалдырылған элекке Йәнсура районының үҙәге Бәкәтәр-Йәнсура ҡасабаһында йәшәгән, урыны ожмахта булғыры ырыуҙаш аҡһаҡалыбыҙ Рәхмәтуллин Мөҡим Бәҙретдин улынан үткән быуат баштарында уның ауылдашы Илбулдина Сафия Муллағәли ҡыҙы күсереп алған "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе", ә хәҙерен шуны беренсе тапҡыр донъяға сығарыу өсөн бөтә әҙерлек эштәрен үҙем башҡарҙым.

Шуныһы ла ҡиммәтле: "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге кеүек үк, шәжәрә быуындары тәңгәлдәренә бик мөһим тарихи мәғлүмәттәр, ауыл исемдәре һ.б. теркәлгән – был баҫмаға шулары ла индерелде. Ошо юлдарҙың авторы теркәгән өҫтәлмәләр иһә дүрткел йәйәләр эсенә һалынды. Хәҙерге яҙылышта ҡабул ителгән "бей" һүҙе төп нөсхәләгесә "би" килеш ҡалдырылды.

Был ҡиммәтле сығанаҡтан байтаҡ ауылдарыбыҙҙың кем тарафынан нигеҙләнеүе, ҡайһы фамилияларҙың кем исеменән башланыуы асыҡлана. Һәм шуныһы ла мөһим: әгәр "Үҫәргән тәүәрихе"ндәге нәҫел бауҙары боронғораҡ осор быуындарында осланһа, бында шуларҙың байтағының дауамдарын шәйләргә, һуңғыраҡ осор быуындар бауын ялғарға була.

Йәнә бер мөһим нәмәгә иғтибар итәйек: изге ҡомартҡыбыҙ "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе" тип аталған, -- ни өсөн? Сөнки хәҙер айырым ырыу булып йөрөмөш Түңгәүерҙең, бер килке башҡалар кеүек үк, ошо Үҫәргән ырыуынан саталанып сығыуы билдәле һәм мин быға комплекслы тикшеренеүҙәр аша инандым. Шәжәрәнең Түңгәүер бауы башында Тимер тип исемләнгән бабаның Туҡсабанан башлап туғыҙынсы быуын Тимерҡабыҡ-би Арбан улы икәнлеген ышанып әйтә алам һәм ул быуындар һанынса ла тап килә. Әйтәйек, 1533 йылда йәшәгән Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы һәм 1933 йылда Өфөләге "Йәш төҙөүсе" гәзитендә эшләгән һәм Мәсәлим Вәлиевтың "Аҡ ҡайын" йырының һүҙҙәрен яҙған Зыя Мөхәммәтсадиҡ улы араһы ун алты (16) быуын тәшкил итеп, фәнни ҡабул ҡылынған иҫәп буйынса ул дүрт йөҙ (400) йыл тәшкил итһә, Түңгәүер ырыу сатаһының башында торған Тимер-батырҙан алып уның нәҫел бауы осондағы Әкрәм Мөхәммәт улы, Вәхит Ғиззәт улы, Рамаҙан Йыһанша улы араларын – шулай уҡ ун алты (16) быуын, Ғибат Һибәт улы, Айтул Ишбулат улы, Мостафа Ғәлиәсҡәр улы араларын – ун биш (15) быуын, Үмәр Ишмөхәммәт улы араһын – ун өс (13) быуын, Зәйнәғәбдин Рахманғол улы араһын – ун ике (12) быуын, Фәхретдин Яҡуп улы араһын – ун ете (17) быуын, Ибраһим Шакирйән улы араһын ун һигеҙ (18) быуын тәшкил итеп, өҫтә күрһәтелгән Ябынсы-яҫауыл – Зыя арауығы һуҙымына тап килә. Шул йәһәттән байтаҡ соҡсоноу эштәре башҡарҙым, һөҙөмтәһе уның түбәндәгесә.

Ырыуҙар ҙа мөһәбәт дәүүү тирәктәй: төп-олондан (тәү ғаиләнән) ҡуш саталы (игеҙәк) ырыуҙар ботаҡлана, ботаҡтарҙан сыбыҡтар (аралар), ә сыбыҡ остарында йәнә яңы ырыу бөрөләре яра — ботаҡ сатаһынан алып осонаса булған ҡәүем — ҡәбилә хасил ҡыла. Ә олондан тарбаҡланмыш көллө ботаҡтар йыйыны тирәк ябалдашына — халыҡтарҙан (милләттәрҙән) торған кешелек донъяһына әүерелә. Шуға күрә башҡорт халҡының ырыуҙарын (ҡәбиләләрен) тикшергәндә уларҙы бер-береһенән айырымлыҡта түгел, ә бөтәһе бер олондан һәм ботаҡтарҙан саталанып тармаҡланған, береһенән береһе тыуған итеп ҡарарға кәрәктер. Шул йәһәттән аҙ өйрәнелгән, ошоғаса баҫмаларҙа хатта ырыу шәжәрәһе лә сағылмаған Түңгәүер ырыуы ҡыҙыҡлы.

Түңгәүер ырыуының тәғәйен Үҫәргән ҡәбиләһенән тармаҡланып килеп сығышы тураһында журнал уҡыусыларыбыҙ филология фәндәре доҡторы Азат Камаловтың ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә хеҙмәтенән ("Ватандаш" 2001/4) арыу уҡ хәбәрдар булғанлыҡтан, дилбегәне ҡыҫҡараҡ тотор өсөн, әллә ни күп өҫтәлмә мәғлүмәттәр сурытмайынса, Сыңғыҙ-хандың фарманында ҡаңғыраттарҙың (ә шәжәрәлә Ҡаңғырат — шул уҡ Түңгәүер) "Күк төйәкле торна ырыуы" тип аталыуын (тимәк, Күк-анаға һәм торнаға табыныусы Үҫәргән нәҫеле!), ә ҡаҙаҡ ырыу шәжәрәләрендә иһә Ҡанлы (шул уҡ Ҡаңғырат йәки Үҫәр-Ҡан) ырыуын "Уйсундың (йәғни Үсен-Үҫәргәндең. — *Й.С.*) улы" тип билдәләүҙәрен иҫкәртеп

кенә үтәйек. Сөнки бындағы бурыс — баяғы ғалим фекеренең һәм мәғлүмәттәренең төп юҫығын ҡеүәтләп, шул уҡ ваҡытта "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе" уның ҡулы аҫтында булмауы сәбәпле иғтибарын йәлеп иттертмәгән ҡайһы бер мөһим мәғлүмәттәрҙе килтереүҙән ғибәрәт (хәҙерге һәм киләсәк тарихсылар өсөн).

Ғалим нигеҙ итеп алған Түңгәүер ырыу шәжәрәһенең төп кәмселеге — өҙөк кенә булыуҙа. Сөнки ул шәжәрә үҙҙәренең иң боронғо тарихын шаҡтай уҡ онотоп ебәргән, урта быуаттар осорон да яҙа-йоҙа ғына шәйләгән билдәле бер төбәктең әһелдәре тарафынан үҫәргәнле төп-олондан мөнтәлеп йәғни Түңгәүерҙе саталандырыусы Әсә ырыу Үҫәргәндең шәжәрәһенән өҙөп алынып, Түңгәүерҙең Үҫәргәнгә ҡағылышһыҙ "мөстәҡил" шәжәрәһе рәүешендә төҙөлгән, йәғни шәжәрә сатағы үҙенең тере ботағынан киҫелгән... Шул мөнтәүле "мөстәҡиллек" касафаты шаҡтай йәшерәк быуынға ла ҡағылып (Түңгәүер тарихын эҙәрмәнләүсе журналист С. Ярмуллин мәҡәләләрен ҡарағыҙ), ғөмүмән, башҡорт халҡының тарихын төпсөнөүселәрҙе аймылыш ҡылыу ихтималлығы булғанлыҡтан, башҡорт ырыуҙарының һәм ҡәбиләләренең береһе лә елдән еленләп тыумағанлығын, бәлки Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылғандан уҡ бер-береһенә кендектәре берешлеген ябай ғына алымда — донъя халыҡтарының мифтарына нигеҙләнмеш һыҙмала күрһәтәбеҙ.




Һүрәттә: Донъя-ғаләмдең 12 хоҙайы һәм 2 һын-енесле Дәү Хоҙай Үҙе урынлашҡан 7 (йәки 14 ярты) ҡаты

Бындағы буй арҡау-һыҙыҡ менән ҡап-уртаға бүленмеш ҡатлы-ҡатлы түңәрәктәрҙең өҫкө яҡ яртыһы -- Донъя-Ғаләм-Тереклектең тышҡы (йәғни **Ата**) яҡ яртыһын (Евразия ҡитғаһының төньяҡ-көнсығыш яғын); ә аҫҡы яҡ яртыһы -- Донъя-Ғаләм-Тереклектең эске (йәғни **Әсә**) яҡ яртыһын (Евразия ҡитғаһының көньяҡ-көнбайыш яғын) тәшкил итә.

Изге китап Тәүраттан (Библиянан) уҡ билдәле булыуынса, Дәү Хоҙайыбыҙ хасил ҡылмыш дөйөм Донъя-Ғаләм-Тереклек бөтәһе бер-береһенә ҡатланмыш ете уратанан (түңәрәктән) ғибәрәт икән: һыҙмалағы үҙәктән тороп һанағанда был (ғәрәп цифрҙары менән бирелгән) тәүге өс уратала — үҙебеҙ ише бәндәләр, ҡалғандарында беҙҙән өҫтөн хоҙайҙар йәшәй, имеш...

Һыҙмала сағылыуынса, кешелек донъяһының иң үҙәгендәге яртылыҡтарҙа урынлашҡан 1) игеҙәк Шүлгән-Һауа менән Урал-Әҙәм; уларҙан саталанған 2) Шүлгән-Әҙәм сиреүҙәре Аҫаба – һыу-һауа эйәләре һәм Арата – ер-тау эйәләре; 3) шуларҙан уҡмашҡан тәү ырыуҙар Әсәр-Аҡан (Сәр-Ҡан) – Үҫәргән тәүырыуы һәм Абасаҡ-Арат – Башҡорт тәүырыуы; һәм шул бәндәүиҙәр урынлашҡан өс урата яртыларында ике тәүырыуҙан саталана бала-ырыуҙар: "әсәр-аҡан"дың (Үҫәргәндең) Әсә яҡ яртыһы "аҡан"дан (Ҡандан, Ҡаңғынан) — "аҡәпсәк" (Ҡыпсаҡ) ырыуы һәм "абас-аҡ-арат"тың (Башҡорттоң) Әсә яҡ яртыһы "абас"тан -- "абасанаҡ" (Бәжәнәк йәки Печенег) ырыуы тыуған. Әйткәндәй, күренекле ғалимдарҙан Н. Аристов та ҡыпсаҡтарҙы ҡаңғыларҙан килеп сыҡҡан тип һанай.

Борон идара итеүсе бәндәләр (биҙәр, хандар һ.б.) ҡағиҙә булараҡ, әсәләр хакимлыҡ ҡылған матриархат дәүеренән үк нығынып ҡалған ҡанундарға ярашлы, Эске Башҡорт тип аталған Үҫәргән (**Әсә** яҡ) батшалар шәжәрәһендәге шәхестәрҙән тәғәйенләнеүен иҫәпкә алһаҡ, өсөнсө ураталағы "әсәр-аҡан" (йәки сары Көн — һары Ҡояш) — йәғни хәҙерге әйтелештәге *Үҫәргән* этнонимының беренсе яртыһы "әсәр" — "һыу-ер" тигәнде *лә* аңлата икән һәм шулай уҡ бер үк ваҡытта ул "сәр" (царь) — Үҫәргәндән тыуған бөтә **Ата** яҡ ырыуҙарҙың башлығы йәғни Тышҡы Башҡорт (Ата яҡ) ырыуҙарының башбабаһы ла, батшаһы ла булып тора.

Ә этнонимдың икенсе яртыһы "аҡан" — "һөт-күк" тигәнде *лә* аңлата һәм шулай уҡ бер үк ваҡытта был "ҡан" (хан) — Үҫәргәндән тыуған бөтә Әсә яҡ ырыуҙарҙың башлығы йәғни Эске Башҡорт (Әсә яҡ) ырыуҙарҙың башбабаһы *ла*, ханы *ла* булып тора.

"Аҡан" һүҙенең алдына ҙурлау эпитеты "аҡа" (аға, ағай) теркәп әйтелһә, хасил була "аҡа-аҡан" — ҡаҡан//ҡаған (император) титулы. Ә шул уҡ һүҙ аҙағына теркәлеп әйтелеү һөҙөмтәһендә "аҡан-аҡа" — Ҡанаҡа//Ҡаңғы (Үҫәргәндән айырымланған ырыуҙың исеме) килеп сыҡҡан. Ҡаңғыларҙың мифик Көн-Өфө (Ҡәнифә) юлы буйлап алыҫ көньяҡҡа, Күк (Һинд) оҡеаны ярҙарынаса, таралып йәшәгән еренең көньяҡ ҡырыйы — хәҙерге Һиндостандағы Ҡаңғы (Ганг) йылғаһы буйҙары ул. Шуға *ла* "Ҡанҡа" рәүешендәге был этнонимды иң боронғо яҙма ҡомартҡыларҙа — "Махабхарата"*ла* (Һиндостан) һәм Авестала (Иран) күрәбеҙ.

Билдәле булыуынса, Уралдағы мифик Ер Кендеге булып һаналмыш иң боронғо ҡалабыҙ Арҡайымдан сатрашланып башланыуысы мифик Көн-Өфө (Ҡәнифә) һәм Ҡуңыр-Буға юлдарының дүрт осо Евразия ҡитғаһының дүрт ситенә

олғаша: беренсеһенең ике осо Күк (Һинд) һәм Ҡара (Төньяҡ Боҙло) оҡеандарға (Ҡуңыр-Буға юлы), икенсеһенең ике осо Һары (Тын) һәм Ҡыҙыл (Атлантик) оҡеандарға (Көн-Өфө юлы) барып сыға. Көн-Өфө юлы буйлап таралыуҙарында бик боронғо бабаларыбыҙ әсәрҙәр (хәҙерге әйтелештәге үҫәргәндәр) — үҙҙәренең юлбашсыһы итеп соро (Ата) бүрене һанаған (Америка аборигендарында был соро — зорро, урыҫта серый волк), ҡанаҡтар (хәҙерге әйтелештәге ҡаңғылар) — ҡанаҡ (ҡунаҡ, киноҡ, кәнтәй) йәғни Әсә бүрене юлбашсы иҫәпләгәндәр. Ә шул уҡ юлдағы ҡатайҙарҙың юлбашсыһы — аҡ-атаҡ (аҡ Ата бүре, шунан хасил аҡ-атай -- ҡатай), ҡыпсаҡтарҙыҡы — аҡ-Әпсәк (аҡ Әсә бүре, шунан хасил аҡәпсәк -- ҡыпсаҡ) булған. Былар барыһы башбабабыҙ Шүлгәнде имеҙеп үҫтергән мифик Әсә-Бүрегә (юлбашсыға) бәйле.

Ҡуңыр-Буға юлы буйлап таралыусы бик боронғо бабаларыбыҙ абоҙаҡарҙарға (башҡорт-болғарҙарға) иһә быҙау-ир — Үгеҙ юлбашсы булған, ә абоҙанаҡтарға (бәжәнәк-һундарға) абоҙ-анаҡ (боҙ-анаҡ йәки боҙ-инәк) — боҙ Һыйыры (Бизон) юл башлап барған. Былар барыһы башбабабыҙ Уралды имеҙеп үҫтергән мифик Бизон-Һыйырға бәйле. Бәғзеләргә әкиәт кенә булып күренмәле был мәғлүмәттәр тарихыбыҙҙы дөрөҫ аңлап яҡтыртыуҙа ифрат кәрәкле булып, боронғо башҡорт ырыуҙарының Уралдан алып ҡитғаның һәр осонаса ҡайһылай барып сығыуҙарын аңларға ярҙам итә.

Хәҙерге Түңгәүер//Таңғауыр ырыуына килһәк, шәжәрәлә уларҙың башбабаһы итеп яҙылған Ҡаңғырат — Ҡаңғы-ир-ат (йәғни Ҡаңғы ырыуының ир-аты, халҡы) тигән һүҙ ул; был иһә Түңгәүер ырыуының, Ҡыпсаҡ ырыуы һымаҡ уҡ, туп-тура — Ҡаңғынан, ә Ҡаңғы үҙе, өҫтәрәк күреүебеҙсә, Үҫәргәндән тармаҡланып сыҡҡан ырыуҙар икәнлеген иҫбатлай. Ошоно ныҡ иҫтә тоторға кәрәк: әгәр тарихтың төрлө осорҙарында, әйтәйек, Ҡуңғырат-би, Түңгәүер-би, Үсен-би, Нуғай-би, Башҡорт-хан, Урыҫ-хан кеүек атамалар күҙгә салынһа, был хәл иһә шул биҙәрҙең һәм хандарҙың, үҙ исемдәре (мәҫәлән, түңгәүерҙәрҙең баш бабаһының исеме Тимер йәки Тимерҡабыҡ) менән түгел, ә шулар етәкләмеш ырыу-ҡәбилә исемдәре менән аталыуҙарын күрһәтә.

Түңгәүерҙең (йәки Дүңгәүерҙең) туп-тура Ҡаңғы аша Үҫәргән дауамы икәнлеген ул ырыу исеменең баяғы мифик Ата бүрегә бәйлелеге лә дөрөҫләй. Этимологияһын тикшерһәк, ошолай килеп сыға:

Атан-аҡ-абар (ата-аҡ-бүре) — танаҡ-абар//данаҡ-абар — Танғауыр//Түңгәүер. Б.э. тиклем һәм б.э. баштарында был “данаҡ-абар” исеме менән Үҫәргән ҡәбиләһенең Ата бүрене юлбашсы итеп һанамыш төньяҡ-көнсығыш сатаһын атағандар; урта быуаттарҙа иһә ошо исем шул уҡ Үҫәргән-Ҡаңғынан тармаҡланмыш яңы ырыуға бирелеп, әлеге көндәге “Түңгәүер” булып йөрөй... Бик боронғо (хәҙерге “Түңгәүер”гә тиклемге) замандарҙа Уралдан алып Ҡафҡазғаса, артабан Көнсығыш Европа үтәләй Италия һәм Грецияғаса барып

еткән Үҫәргән сатаһы абарҙар (йәки Ҡафҡаздағы аварҙар) — Ата бүрегә эйәреүсе шул уҡ үҫәргәндәр ул. Әйткәндәй, б.э. тиклем VII — IV быуаттарҙа тап ошо Тәүтөйәгебеҙҙә — Иҙел — Урал далаларында гөрләтеп донъя көткән һәм тарихсыларға "савромат" исеме менән билдәле булған, ә аҙаҡ килеп шул исемдең ҡыҫҡартып әйтелешендә "сармат" тип аталып, б.э. тиклем III быуат — б.э. IV быуаттарында Уралыбыҙ артындағы Тубылғы (Тобол) йылғаһынан алып Көнбайыштағы Дунай йылғаһынаса йәйрәп йәшәгән данлы бабаларыбыҙҙың да бөйөк Көн-Өфө юлында изге "Әсә-бүре-аба"ға эйәреүсе "Әсә-бүре-аба-т"тар икәнлеген (һуңғы "т" — боронғо күплек ялғауы) йәғни ҡыҫҡартып-шымартып әйтелештәге "савромат"тар булып, шул уҡ үҫәргәндәр икәнлеген тикшереп ҡараусы ла, телгә алыусы ла юҡ. Ошо уҡ Үҫәргән ҡәбиләһе "савромат"тың изге Ата-бүре "сары-аба-ата"ға (һоро-апа-атаға) эйәреүсе бер сатаһы сарабата//сарамата (сармат) — жарамата//юрматы тип атала башлай — хәҙерге башҡорт халҡының Юрматы ырыуы кешеләре...

Үҫәргән тармағы данаҡ-абарҙарҙың заманында баяғы Көн-Өфө юлы буйлап көньяҡ-көнбайышҡа китмеш бөйөк сәфәр эҙҙәрен улар йәшәп уҙа барған һәм уларҙың "данаҡ" исеме ҡушылған ер-һыу атамалары ла мәңгелеккә шаһитлай: Көньяҡ Уралдағы Тана-улаҡ (Таналыҡ) йылғаһы (борон ул Яйыҡ баштарының береһе һаналған) — Дон (Данаҡ) йылғаһы — Днепр (Дан-абар) йылғаһы — Дунай (Данай) йылғаһы — Балҡан ярымутрауы (был исемде лә үҙебеҙҙең Тәүтөйәк тауы Балҡандан алып барып биргәндәр)... Ғөмәрҙең (Гомерҙың) "Илиада" эпосындағы данайҙар (йәғни ата-бүрегә эйәреүсе үҫәргәндәр) б.э. тиклем XIII быуатта уҡ үҙебеҙҙең ҡаңғылар йәки ҡан-аҡайҙар ("Илиада"лағы аҡайҙар — ахейҙар) менән тығыҙ берлектә шул Кесе Азиялағы (хәҙерге Төркиәләге) атаҡлы Троя ҡалаһын яулап алыуҙа әүҙем ҡатнаша. Был яулауҙы ойоштороусы аҡайҙар ("Илиада"лағы ахейҙар) иһә шул уҡ Үҫәргәндең Әсә-Бүрегә эйәреүсе тармағы, йәғни баяғы аҡан-аҡай — Ҡанаҡай//Ҡаңғы ырыуы тап үҙе булып тора; Ғөмәр әҫәрендә иһә был этнонимдың ҡыҫҡаҡланмыш икенсе яртыһы "аҡай" (ахей) телгә алынған. Ҡаңғыларҙың (аҡайҙарҙың) ҡасандыр шунда йәшәгәнлеген шундағы Аҡай (Ағай/Эгей) диңгеҙ исеме лә шаһитлай...

1453 йылда Мәхмүт 2-се солтан етәкселегендәге төрөк бабалары шул замандағы христиандарҙың шанлы ҡәлғәһе булған Константинополде (Истанбулды) һуғышып алғандан һуң, бөтә Көнбайыш христиандар донъяһы уларға ҡаршы хөсөтлө тәре һуғышы әҙерләй башлағас, Көнбайыш Европа илдәре һарайҙарында баяғы Мәхмүт 2-се солтандың Рим папаһы Николай 5-енсегә яҙған хаты тарала; ошо яҙмаһында төрөк солтаны, "төрөктәр кеүек үк, шул уҡ Троя халҡының варисҭары булған итальяндарҙың" уға йәғни үҙҙәренең тарихи ҡан ҡәрҙәше булған төрөк солтанына дошманлыҡ ҡылыуҙарына аптырауын белдергән; ә бернисә тиҫтә йыл алдараҡ шул уҡ итальяндар кардиналы Исидор ҙа

төрөктәрҙең шул уҡ *тевкр* (йәғни Троя халҡы) вариҫтары икәнлеген раҫлап сыҡҡан булан (С. Рансимен. Падение Константинополя в 1453 году. М., 1983, 149-сы бит). Бынан иһә Ғөмәр "Илиада"һындағы боронғо Троя ҡалаһының халҡы ла шул үҙебеҙҙең аҫаба башҡорттар булғанлығы аңлашыла, сөнки ул Троя халҡының гректар үҙҙәренсә боҙоборaҡ яҙып ҡалдырған атамаһы "тевкр" — "төп-ҡор" булып, был иһә киң билдәле "баш-ҡор" (башҡорт) этнонимының варианты икәнлеге ап-асыҡ (төрөктәр ҙә башҡорттарға ҡанҡәрҙәш, тимәк)...

Һөҙөмтә: Үҫәргәндең бик боронғо замандарҙан уҡ "атан-аҡ-абар//танаҡ-абар" тип аталып килгән төньяҡ-көнсығыш (Ата яҡ) сатаһының исемен тәүҙә Үҫәргән сатаһы рәүешле унан айырымланған Ҡаңғы (Ҡаңғырат) ырыуының Ата яҡ яртыһы (сатаһы) үҙенә ырыу исеме итеп ала. Ә урта быуаттарҙа иһә ошо исем ҡаңғыларҙан (ҡаңғыраттарҙан) айырымланмыш яңы ырыуҙың исеме булып "Түңгәүер"гә әйләнә.

Үҫәргәндәрҙең "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе"ндә *лә*, түңгәүерҙәрҙең үҙҙәренең баяғы ғалимыбыҙ файҙаланған төбәк шәжәрәһендә *лә* Түңгәүер *ләҡәпле* шәхестең Ҡаңғырат тип тә йөрөтөлөүе төҫмөрләнә. Шул уҡ ваҡытта түңгәүерҙәрҙең риүәйәттәрендә уларҙың тәүҙә Сырдаръя аръяғында йәшәүе, һуңынан, ҙур ғына ғәскәр туплап һәм изге бүрегә эйәреп, Көньяҡ Уралға күсенеп ҡайтыуҙары бәйән ителә. Тимәк, иң элек Ҡаңғырат-биҙең (йәки хандың) тарихи эҙҙәрен юллап табырға кәрәк, ә был иһә үҙебеҙҙең бабаларҙың боронғо осор төрки-башҡорт тарихына асыҡ яҙып ҡалдырылған: "Өфө ҡалаһы янында, Дим йылғаһы Ағиҙел йылғаһына ҡойған тәңгәлдә, Ҡаңғырат ҡәлғәһе бар ине; уның кешеләре Ургенчкә күсеп киттеләр. Унда ҡәлғә ҡорҙолар һәм уны ла Ҡаңғырат тип атанылар... Ағиҙел йылғаһы буйында Тора тау бар. Тора — Ҡаңғырат ханының исеме ул. Шул тауҙың битләүендә, хәүефһеҙ булһын өсөн, ул ҡәлғә ҡорҙо. Шуға күрә уны Тора тау атанылар. Унда ҡаланың емеректәре ҡалған, шунда булған кешеләр күргән уны" (История Татарии в материалах и доҡументах. М., 1937, 123-сө бит).

Беренсенән, "Ҡаңғырат"тың Ҡаңғы-ир-ат, йәғни "Ҡаңғы ырыуы кешеләре" икәнен аңлатҡайныҡ инде өҫтәрәк.

Икенсенән, "Ҡаңғырат-хан" — Үҫәргәндең Әсә яҡ яртыһы (сатаһы) булған Ҡаңғы ырыуының ханы, тигән *ләҡәп* ул (ата-әсәһе ҡушҡан исемен белмәйбеҙ). Шулай уҡ әлеге тәүәрихтәге "Тора" *ла* — бик боронғо исемле Тора тауҙа ҡәлғә ҡорған был хандың *ләҡәбе* генә, йәғни "Тора тау ханы", тимәк.

Өсөнсөнән, был ҡаңғыларҙың төп төйәге Ағиҙел буйында булып, баш ҡалаларының беренсеһе, өҫтәрәк әйтелгәнсә, хәҙерге баш ҡалабыҙ Өфөнөң Дим районында, ә унан һуңғы икенсеһе Башҡортостандың хәҙерге Ишембай районының Тора-тау битләсендә торған (унда әлегәсә "Хан юлы", "Хан күле" тигән атамалар бар). "Көн-аҡ-аба" (ҡояш-аҡ-уба йәки үҙгәртеберәк әйтелешендәге

Көнә-Ҡуба — хәҙерге Өфө ҡалаһының Салауат һәйкәле торған Ҡоба тау) тип аталмыш, ә ҡыҫҡараҡ әйтелештә шул Ҡоба - Уба//Уфа//Өфө тип йөрөтөлмөш баш ҡалабыҙҙа ул замандарҙа Мөйтән-бийебеҙ Көн-әсә (кенәз) тәхетендә ултырыуын иҫләһәк, Ағиҙел аша ғына ошо Көн-әсә тәхетенә бойондороҡло аҡан (хан) тәхетен биләмеш Ҡаңғырат-би (хан), моғайын, шул уҡ Туҡсаба — Мөйтән тоҡомолор... Тимәк, Ҡаңғырат-би ниндәйҙер сәбәп менән Уралдан алыҫ көньяҡҡараҡ — Ургенчкә (хәҙерге Ҡараҡалпаҡстанға) иләүен алып киткән дә Сырдаръя аръяғындағы Амударъя йылғаһы буйында әлегәсә йәшәп ятмыш баш ҡалаһын — Ҡаңғырат ҡәлғәһен ҡорған. Тап бына шунда ла инде “Алпамыш” эпосыбыҙ ошо башҡорт-ҡаңғыраттарҙан Урта Азияның башҡа ҡәүемдәренә таралған, шул яҡтарҙа XIV быуатта йәшәмеш шағирыбыҙ Мөхәммәт Хауарезми иһә (ул үҙен,”Ҡаңғырат ҡәбиләһенәнмен”, тип белдерә) атаҡлы “Мөхәббәтнамә” китабын яҙған. Телсе ғалимдарҙың билдәләүенсә, был әҫәрҙең теле шағир Хужа Әхмәт Йәсәүи теленә бик яҡын, йәғни үзбәк һәм ҡаҙаҡ телдәре араһында тора (хәҙерге башҡорт теле һымаҡ уҡ!).

Боронғо ҡанҡәрҙәштәребеҙ Ҡаңғырат тоҡомдары хәҙерге Үзбәкстанда, Ҡараҡалпаҡстанда, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстандың Ҡарағанда һәм Көньяҡ Ҡаҙағстан өлкәләрендә йәшәй.

Тыумышы менән Бөрйән ырыуынан булған Сыңғыҙ-хан бабабыҙға заманында ҡаңғыраттар яҡшы хеҙмәт иткән, Сыңғыҙ-хан үҙенең дүртенсе ҡыҙы Тумалунды шул ҡаңғыраттар ханы Алсы-биҙең улы Жиккә (“Жик-Мәргән” тигән эпосыбыҙҙың геройы түгелме?) кейәүгә биргән һәм уны рәсми рәүештә лә “Жик-кейәү” тип йөрөткән. Жик-кейәүҙең атаһы Алсы-би иһә Сыңғыҙ-хандың Ҡаңғырат ҡәбиләһенән алған Бүртә исемле ҡатынының бер туған ҡустыһы (йәғни Сыңғыҙ-хандың ҡәйнеше) булған, шуға ла ҡытайҙар тарихына тәүге осорҙарҙа ул “Алсы-ҡәйнеш” титулында яҙылған. Сыңғыҙ-хандың яуҙарында ул, “Алсы” тигән ләҡәбенән күренеүенсә, ғәскәр алдында (авангардта) башлап барған; хан менән гел бергә йөрөп, утыҙ ике һуғышта ҡатнашҡан, Сәмәрҡәндте алыуҙа ҙур батырлыҡтар ҡылған. (Сәмәрҡәндте алышыуҙа ла ҡатнашҡас, Уралдан шунда күсенеп китмеш баяғы тарихи Ҡаңғырат-ханыбыҙмы әллә был?..) 1227 йылда уға ла, Сыңғыҙҙың иң кесе ҡыҙына өйләнгәс, “император кейәүе” тигән дәрәжә бирелә, ә 1232 йылда көмөш мөһөр һәм “ҡаңғыраттар сәрдары” исемен ала, 1237 йылда “200.000 шәлкем тәңкә” менән бүләкләйҙәр. Сыңғыҙ-хандың билдәле фарманы бар: “Ҡаңғырат ырыуында тыуған ҡыҙҙар быуындан-быуынға император ҡатындары булһын, малайҙар иһә быуындан-быуынға император ҡыҙҙарына өйләнһен. Был фарманды быуындан-быуынға һәр йылдың дүрт миҙгеленең тулған Ай көнөндә өҙлөкһөҙ иғлан ҡылһындар”. Тимәк, тип һөҙөмтәләй ғалимдар, Сыңғыҙ-хандың Бөрйән ырыуы менән Ҡаңғырат (Үҫәргән) ырыуы үҙ ара никахлашҡан. Азат

Камалов килтергән түңгәүерҙәр риүәйәтендәге: “Түңгәүерҙең атаһы — Бөрйән ҡәбиләһенеке, әсәһе Үҫәргән ҡыҙы булған”, тигән һүҙҙәрҙә мәғәнә бар.

Шуныһы мөһим: был мәғлүмәттәрҙән беҙ Ҡаңғырат ырыуы башлығы тарихи Алсы-биҙең Үҫәргән ырыуы башлығы Мөйтән-би менән бер үк осорҙа йәшәүҙәрен, Сыңғыҙ-ханға бик яҡын кешеләр икәнлеген күрәбеҙ. Тимәк, А. Камаловтың Ҡаңғырат-биҙе 1203 йылда тыуған итеп тоҫмаллауы ғәмәлгә яҡын килә. Ә был иһә Ҡаңғырат-би — Мөйтән-би менән яҡын ырыуҙаштар булған, тип тоҫмалларға мөмкинлек бирә.

1311 йылда Сыңғыҙ-хан нәҫелдәренең тарихын яҙып тамамлаған Рәшид-әд-дин буйынса, Урта Азияла Ҡаңғыраттың Сорлоҡ, Мәргән (баяғы Жик-Мәргән?), Ҡобай, Шәре, Ташбоҙа, Төркәил (?) исемле улдары булғанлығы мәғлүм, әммә Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһендәге ап-асыҡ “Түңгәүер” ләҡәбен унда күрмәйбеҙ һымаҡ (бының сәбәбе торараҡ аңлашылыр).

Тәүәрихтәрҙе аҡтарғанда, Сыңғыҙ-ханға тиклем дә, унан һуң да әле беҙ белгән “Түңгәүер” этнонимы күҙгә салынмай. Рәшид-әд-дин әҫәрендә лә (1311 йыл), ҡаңғыраттар хаҡында һүҙ барһа ла, Түңгәүер төшөнсәһе юҡ. Ҡытай йылъяҙмаларында ла сағылмай. Тимәк, һуңғыраҡ быуаттар емеше, тәғәйен билдәләгәндә, шәжәрәләге 8-енсе быуын Арбан-биҙең улы – 9-ынсы быуын Тимер йәғни Тимерҡабыҡ ул.

“Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”ндә быуындарҙың арауығын тоҫмаллатҡан йәнә бер таяныс бар: әле әйтелгән 9-ынсы быуын Тимерҡабыҡ-бей Арбан улы тәңгәленә: “Бораҡ хан заманы” (йәғни Бораҡ хан тәхет эйәһе булған 1422 — 1427 йылдар), — тип киҫәтелгән.

Күренеүенсә, Мөйтән-би йәшәгән XIII быуат баштары һәм Бораҡ-хан йәшәгән XV быуат баштары араһында теүәл 200 йыл ята. Шуны әлеге Тимерҡабыҡ-бигәсә булған һигеҙ быуын иҫәбенә бүлеп ҡараһаҡ, һәр быуынға төшә яҡынса 25 йыл — шәжәрә дөрөҫ, тимәк.

Азат Камалов Түнгәүерҙең баяғы сонтор шәжәрәһендәге һуңғы осор быуындарҙың йәшәү йылдарын билдәләү буйынса архив материалдарын уңышлы файҙалана, ә архивта булмаған иң боронғоларын фараз итеү юлы менән тергеҙергә тырыша. Әммә ошо һуңғыһында беҙ килтергән “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”н ҡуллана алмауы арҡаһында сараһыҙлыҡҡа ла тарып, түңгәүерҙәрҙең легендар шәхесе **“Мөтәй”** бабаның асылы асылмағанлыҡтан, шәжәрәләге урыны ла билдәләнмәй, күктә аҫылынып торғандай ҡала.

“Түңгәүер ҡәбиләһендә **Мөтәй** тигән кеше була, — тип әйтелә легендала. — Ул Күстәнәнән алдараҡ йәшәгән булырға тейеш. Түңгәүер шәжәрәһе башында “Түңгәүер” яҙылған. Уның улы Ҡаратөлкө, Ҡаратөлкөнән өс ул ҡалғаны билдәле: Мөлкәмән, Юламан, Иләмән; Иләмәндән Күстәнә килә. Шәжәрәгә **Мөтәй** тигән кеше теркәлмәгән. **Мөтәйҙең** Түңгәүергә бәйләнеше асыҡ күрһәтелмәгән”.

Был ни хәл: **Мөтәй** үҙе Түңгәүерҙең билдәле легендар бабаһы, үҙе иһә “шәжәрәгә теркәлмәгән”, “Түңгәүергә бәйләнеше лә асыҡ күрһәтелмәгән”...

Был сәйерлектең сәбәбе, минеңсә, әлеге лә баяғы, Түңгәүер шәжәрәһен “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”нән бесеп алып биреүҙә — “мөстәҡил”ләүҙә генә. Шул арҡала Ҡаңғырат-би ләҡәпле һуңғыраҡ дәүер кешеһе шәжәрәлә үҙенән әүәлге төп башбаба урынын биләп тора, ә бик мөһим быуын булған **“Мөтәй”** иһә был “мөстәҡил” шәжәрәгә кермәгән -- төп шәжәрәлә ҡырҡылып тороп ҡалған... Ысынлап та, үҙ нәҫеле түңгәүерҙәрҙе лә теркәй барған “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе” XIII быуат башында йәшәмеш тарихи Мөйтән-би Туҡсаба улынан башлана бит, ә баяғы түңгәүерҙәр легендаһындағы **“Мөтәй”** — шул уҡ **“Мөйтән”дең** боҙоп әйтелеше ул. Легенданың артабанғы өлөшө лә быны яҡшы дәлилләй: **“Мөтәй** йәшәгән дәүерҙә Көньяҡ Урал башҡорттары монгол-татар иҙеүе аҫтына эләгә. Башҡорттар Алтын Урҙа ханына яҫаҡ алып бара. Түңгәүерҙән был бурысты **Мөтәй** башҡара. Ханға был кеше оҡшай төшә, уны бер-ике ай самаһы үҙ янында тота, кәңәшсе итеп тәғәйенләй. Хан, уны төрлөсә һынап ҡарағандан һуң, **Мөтәйгә** ярҙам итергә уйлай. **Мөтәйҙең** һорауы буйынса, Түңгәүер башҡорттарына ер бирелә”... Бөтәһе лә дөп-дөрөҫ һәм Үҫәргәндең Мөйтән-бийе (Мүйтән, Мүктән, Мүкеле, Мухали — бөтәһе бер үк зат) тураһында ғына һүҙ бара бында (ҡарағыҙ: Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации. Уфа, 1985, 57-се бит). Уның хаҡында мин “Башҡорт батыры Йеҙекәй” тигән баҫмамда (“Ағиҙел журналы, 2000/1 — 5) ентеклерәк яҙғайным...

Инде тулы шәжәрәнең үҙенә күсер ваҡыт етте. Башта уның ошо көндәргәсә килеп ирешеүенә сәбәпселек иткән изге йәндәрҙең аңлатмаһын бирәйек:

*“Шәжәрәне гәрәп хәрефтәрендә яҙган һәм төҙөгән Рәхмәтуллин Мөким Бәҙретдин улының ҡулъяҙмаһынан башҡорт латинсаһына күсерҙе әсәйем Илбулдина Сафия Муллагәли ҡыҙы. Кириллицалы башҡорт яҙмаһына һалды Илбулдин Фәсхи Фәтхелислам улы (1924 йыл тыуган).*

*Йәнсура-Бәкәтәр ауылы, Ҡыуандыҡ районы, Ырымбур өлкәһе. Ноябрь – декабрь 1983 йыл”.*

Шулай итеп, башлайбыҙ, бисмилла:

## ҮҪӘРГӘН-ТҮҢГӘҮЕР ШӘЖӘРӘҺЕ

Ырыуы – **Үҫәргән.**

Ағасы – **Миләш.**

Ҡошо – **Торна.**

Ораны – **Туҡсаба.**

Тамғаһы – **Ҡояш-Көн (Ҡойошҡан):** .

[1. Туҡсаба]. – 2. Мөйтән-би Туҡсаба улы. – 3. Шаҡмалы-би Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-би Шаҡмалы улы. – 5. Һеркә-би Бүрекәй улы. – 6. Манғут-би Һеркә улы. – 7. Урал-би Манғут улы. 8. Урал-би улдары:

**I. Буят-би Урал улы.**

**II. Арбан-би Урал улы.**

**III. Инжан-би Урал улы.**

Рим цифрҙары менән билдәләнгән ошо Урал улдарынан нәҫел бауҙары дауамлана – айырым-айырым бирербеҙ:

**I. 8. Буят-би Урал улы.** – 9. Инкеш Буят-би улы. – 10. Туҡай Инкеш улы – 11. Мораҭкабул Туҡай улы. – 12. Солтанай Мораткабул улы. – 13. Ғашиҡ Солтанай улы. – 14. Байрамғол Ғашиҡ улы. – 15. Муса Байрамғол улы. – 16. Рәсүл Муса улы. – 17. Хәбибулла Рәсүл улы. Хәбибулланан ике улан:

1) Зәйнулла-ишан Хәбибулла улы Рәсүлев, уның нәҫеле: Ғабдрахман-мөфти Зәйнулла улы (уның улы Ғәбдрәүеф); Ғәбделҡадир Зәйнулла улы; Ғәбделсабир Зәйнулла улы.

2) Фатхулла Хәбибулла улы, уның нәҫеле:

а) Муса Фәтхулла улы, уның улдары: Мөштәбә Муса улы Рәсүлев (башҡорт автономияһын яулау батыры), Мостафара Муса улы, Ғабдулла Муса улы;

б) Ғайса Фатхулла улы, уның улдары: Тойғор Ғайса улы, Дала Ғайса улы.

Инде рим цифры II менән тамғаланған бау:

**II.8. Арбан-би Урал улы.** – ***9. Тимерҡабыҡ-би Арбан улы*** (өҫтәлгән: “Бораҡ-хан заманы” йәғни 1422-27 й.й.). [Иғтибар! – тап ошонан Түңгәүер ырыу шәжәрәһе дауамлана – аҙаҡтаныраҡ айырым теркәрбеҙ].—10. Һарыбаш-би Тимерҡабыҡ улы (өҫтәлгән: “Жанибәк-хан заманы”). –

**11. Һырыш-би Һарыбаш улы** (өҫтәлгән: “Ҡасим-хан заманы”). –

12. Уның улдары:

*Һарыбил-батыр Һырыш улы (Өҫтәлгән: “Иҫәнғол ҡасабаһына етмәҫ борон Һарыбил тауы бар, шунда үлгән”. Һәм йәнә: “Һарыбил ҡаҙаҡтар (ҡалмыҡтар?) менән һуғыш ваҡытында Һүрән буйындағы Һарыбил тауында үлгән һәм шунда күмелгән. Шуға күрә хәҙер ҙә Һарыбил тауы тип йөрөтәләр”);

*Болаҡ-батыр Һырыш улы (өҫтәлгән: “Был Болаҡ Тоҙтүбә [Соль-Илецк] тоҙон табып, батшаға барып әйтә. Батша уға наград итеп Ырымбур тирәһенән һораған ерҙе бирә һәм Үһәргән [Үҫәргән] иленә хужа итә”);

*Аҡмасуҡ Һырыш улы, уның улы Туҡмасуҡ, уның улы **Ҡараса**, уның улы

**13. Тәтегәс-би Ҡараса улы**, уның улдары:

13а. Бикбау-кенәз Тәтегәс-би улы, уның улдары: Кинйәбай Бикбау улы (уның улы Ҡушай, уның улы Тупай) һәм Әлебай Бикбау улы, уның улдары: Шөғәйеп, Ураҙмәт, Тләүмбәт;

13б. Ҡущдәүләт Тәтегәс улы, уның нәҫеле:

*Яҡшытай Ҡущдәүләт улы (өҫтәлгән: "Аҡъяр");

*Һарытай Ҡущдәүләт улы;

*Турытай Ҡущдәүләт улы, уның улдары:

**Һөләймән Турытай улы;

**Аҡлима Турытай улы;

**Тимербулат Турытай улы, уның улдары:

***Ҡудай Тимербулат улы;

***Биккөн Тимербулат улы;

***Һөйөндөк Тимербулат улы, уның улы Мәмәтюл;

***Аҡтуй Тимербулат улы, уның улы Рахманғол, уның улы Сиреғол [Сиреғол ауылын нигеҙләүсе?],

***Аҡан Тимербулат улы, уның улдары: Көбәк, Мостафа, Туйсура;

***Динбулат Тимербулат улы, уның улдары: Бүләк, Сумаҡ, Күбеш.

Йәнә **Һырыш-би** нәҫеленә күсәбеҙ:

**12. Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы** (өҫтәлгән: "Ябынсы батшаға хеҙмәт итеп, яҫауыллыҡ [хәрби дәрәжәһе] алған"), уның нәҫеле: Ирҡара Ябынсы улы, Этҡара Ябынсы улы, Ибәй (Иҫбай) Ябынсы улы, Күбәй Ябынсы улы, Һурҡара (Сурҡара) Ябынсы улы, Ибәнсе Ябынсы улы. –

13. Үҫәргән Ябынсы улы (кесе улы). – 14. Унан тыуған нәҫел баулы уландар:

**I.14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы.**

**II.14. Ялбаҡсал Үҫәргән улы.**

**III.14. Байғужа Үҫәргән улы.**

Инде ошо өсәүҙең нәҫел бауҙарын айырым-айырым теркәйек:

**I.14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы,** уның улы **Мусаҡай** Сөйәлғужа улы. [Ошонан Һунарсы ауылының Мусаҡаевтар, Тләмбәтовтар, Сөйәрмбәтовтар, Сунарчиндарҙың нәҫел бауҙары дауамлана – улар шәжәрәһен айырым яҙғанмын]. Мусаҡай тәңгәленә өҫтәлгән: "Ҡуҙаш, Ҡунаҡ таифәһенең атаһы". **Мусаҡайҙың** улдары:

**М.1. Мантай Мусаҡай улы.**

**М.2. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы.**

Ошо икәүҙең айырым нәҫел бауҙары:

**М.1. Мантай Мусаҡай улы,** уның улы Туҡтамыш, уның улы **Яманһары,** уның улдары:

*Ерәнбәт Яманһары улы;

*Манғутай Яманһары улы;

***Төмәнбәт Яманһары улы**, уның улдары:

**Ҡотломбәт Төмәнбәт улы (уның улы Ҡаскын, уның улы Аҡкөсөк, уның улы Шаһингәрәй);

**Ырыҫҡол Ҡотломбәт улы [Ырыҫҡол ауылын нигеҙләүсе – Ырыҫҡоловтар фамилияһы], уның улдары Арыҫлан [шул Ырыҫҡол ауылындағы Арыҫлановтар фамилияһы], Ырыҫбай [Ырыҫбай ауылын нигеҙләүсе?];

**Сурағол Ҡотломбәт улы;

**Кинйәғол Ҡотломбәт улы, уның улдары: Күсәй, Бүләк;

**Йәнтеш Ҡотломбәт улы, уның улдары: Шәриф, Ҡөҙрәт. Һәм артабан өҫтәге **Төмәнбәттән:**

**а) Татлөмбәт Төмәнбәт улы,** уның улы:

***Буранҡай Татлөмбәт улы,** уның нәҫеле:

**Теүәлбай Буранҡай улы, уның улдары: Ғамоталлап, Билал, Ғабдулла, Аҡмулла, Аҡбулат [Аҡбулат ауылын нигеҙләүсе?], Мотал;

**Исҡужа Буранҡай улы, уның улдары: Ғабдулхалиҡ, Ғабдулвахит, Ғабдул мәжит, Яйыҡбай [Абзан ҡасабаһындағы Яйыҡбаевтар фамилияһы], Аҡъегет;

**Игебай Буранҡай улы, уның улдары: Ғабдрахман (уның улдары: Ғисмәтулла, Ниғмәтулла, Рәхмәтулла, Ғөбәйҙулла, Исламғол); Иғдәүләт; Танһыҡ; Ғөбәйҙулла, уның улдары: Хажмөхәммәт, Фәтхулла-мулла (уның улдары: Сибәғәтулла-имам, Заһидулла-имам, Лотфулла, Сәлимйән); Дусмөхәммәт; Бикмөхәммәт;

**Сәйфулла Буранҡай улы, уның улдары: Йәнтүрә (уның улдары: Хажиморат, Шаһиморат, Шаһимәрҙән); Мансур, уның улдары: Мырҙағәли, Мырҙалатиф, Мөхәммәтйән.

**б) Ҡасбулат Төмәнбәт улы,** уның нәҫеле:

*Ҡуҙаш Ҡасбулат улы, уның улы Байғаҙы;

*Этҡабул Ҡасбулат улы;

*Нарбута Ҡасбулат улы, уның улдары: Дәүләткилде, Әлебай.

Инде **Мусаҡайҙың** икенсе улы:

**М.2. Яукүсте Мусаҡай улы** [Яугустиндар фамилияһы], уның улы **Именбирҙе** Яугүсте улы, уның улдары:

***Болаҡ-батыр Именбирҙе улы** [ошонан яҙыусы Йыһат Солтановты биргән нәҫел бауы дауамлана – шәжәрәмде айырым биргәнмен];

***Таймас-би (кенәз) Именбирҙе улы** (өҫтәлгән: "Шешәйләр атаһы"). Уның нәҫел бауы:

1) Мәмбәтле Таймас-би улы (өҫтәлгән: "Мәмбәтленән йәйелгән Һабыр, Буранбай, Ағурҙа ауылдары");

2) Мортаза Таймас-би улы (өҫтәлгән: "Килситбай (Һыҙғы) ауылы, аҙырағы Атингәндә");

3) Яҡшығол Таймас-би улы (өҫтәлгән: “Ҡәҙерша, Аҡнаҙар ауылдары”);

4) Тләүмбәт Таймас-би улы [Һунарсы ауылын нигеҙләгән Һунарсының атаһы – Тләүмбәтовтар, Сунарчиндар фамилияһы], өҫтәлгән: “Тләүмбәттән Әлмөхәммәт (Этбармаҫ) Ишмөхәммәт, Юлбарыҫ ауылдары”;

5) Сөйәрембәт Таймас-би улы [Һунарсы ауылындағы Сөйәрембәтовтар фамилияһы];

6) Аҡсура Таймас-би улы [Аҡсура ауылын нигеҙләүсе – Аҡсуриндар фамилияһы?], уның улы Именьюл, уның улы Хужәхмәт, уның улы Балапан, уның улы **Юлмөхәммәт Балапан улы,** уның улдары:

*Ғәлиәкбәр Юлмөхәммәт улы, уның улдары: Ғабдулшафиҡ, Ғабдулнафиҡ, уның улы Ғабдулманнан;

*Ғәлиәхмәт Юлмөхәммәт улы, уның улы Мөхәммәтшафиҡ;

*Ғәлиәсҡәр Юлмөхәммәт улы, уның улы Мөхәммәтсадиҡ мулла, уның улдары: Хәйретдин, Хөснетдин, Ғәбделхәмит, Зия (өҫтәлгән: “Зия 1933 йылдарҙа “Йәш юҡсыл” гәзитенең сәркәтибе булып эшләй. 1937 й. Ҡулға алынды”. [Мәсәлим Вәлиевтың “Аҡ ҡайн” йыры һүҙҙәренең авторы];

**7) Бабай Таймас-би улы** (өҫтәлгән: “Бабайҙан Аҡъяр, Тиргәмеш, Ҡырын ауылдары [һәм Бабай ҡасабаһы – аҙаҡ Күмертау ҡалаһы]”). **Бабай улдары** [нәҫел бауҙарын айырым-айырым бирәбеҙ]:

**1. Солтанғужа Бабай улы;**

**2. Ғаббас Бабай улы;**

**3. Мүһәш Бабай улы;**

**4. Өмбәт-абыз Бабай улы;**

**5. Бикбирҙе Бабай улы.**

Ошо бишәүҙең нәҫел бауҙары айырым-айырым:

**1. Солтанғужа Бабай улы,** уның улдары:

*Төлкөбай Солтанғужа улы, уның улы Ишдәүләт, уның улы Ишбулат, уның улдары: Сәмиғулла (уның улы Сәйфулла), Фатхулла, уның улы Мөхәммәт;

*Балаян Солтанғужа улы;

*Балапан Солтанғужа улы, уның улдары: Шәһәрғази, Бәшир, уның улдары: Ғабдулла, Әхмәт;

*Ҡараян Солтанғужа улы, уның улдары: Миңлеғужа, Сәйфетдин, Мифтах, Ҡарағужа;

*Ужнаҡ Солтанғужа улы, уның улдары: Сәфәрғәли, Муса, Ғәлим, Мөхәмәдин.

**2. Ғаббас Бабай улы,** уның улдары: Урал, Аҡбал, **Нурмөхәммәт (Нурай) Ғаббас улы,** уның улдары:

*Йәнйегет Нурмөхәммәт улы, уның улдары: Садиҡ, Латиф, Аҡмәхмәд;

*Иралы Нурмөхәммәт улы, уның улы Мөхәммәтдин, уның улдары: Бүребай, Яҡшыбай, Бикаш;

*Егетбай Нурмөхәммәт улы, уның улдары: Вахит, Ғабдулла, Мөьмин;

*Дауытбай Нурмөхәммәт улы, уның улдары: Ғабдулғази, Ғабдулғәфәр.

**3. Мүһәш Бабай улы,** уның улдары:

*Әхмәр Мүһәш улы, уның улы Зөлҡәрнәй, уның улы Һөләймән, уның улы Ғәбделхалиҡ, уның улы Йомағужа, уның улы Исмәғил;

*Аҡғускар Мүһәш улы, уның улы Ҡарабулат, уның улдары:

**Мөҡәй (Мөхәммәтғәли) Ҡарабулат улы, уның улдары: Сафа, Мостафа, Сәйфулла;

**Муллағәлләм (Муллаҡай) Ҡарабулат улы;

**Хәмит Ҡарабулат улы, уның улдары: Хәмиҙулла, Суфиян, Мулла (уның улдары: Айса, Рәхим, Ғалимйән), Шакирйән, уның улдары: Сәлимйән, Ҡорман, Шәрифйән.

**4. Өмбәт-абыҙ Бабай улы,** уның улдары:

а) Этбай Өмбәт-абыҙ улы [Этбай-Үрге Ырыҫкол ауылын нигеҙләүсе], уның улы **Бохарбай** Этбай улы, уның нәҫеле:

*Янмырҙа Бохарбай улы, уның улы Йәнтимер, уның улдары: Мустаҡ (уның улы Яхъя), Хөснетдин, уның улдары: Рамаҙан, Вәлитдин, Низам;

*Ҡарамырҙа Бохарбай улы, уның улы **Йәнтүрә-батыр** (өҫтәлгән: “1812-14 й.й. француз яуында ҡатнашсы” [матбуғат баҫмаларынан “Йәнтүрә хикәйәте” билдәле]).

б) Дәүләтбай Өмбәт-абыҙ улы, уның нәҫеле: Вәли, Ҡаламан, Аралбай, Ғөбәйдулла, Ансар, Сәләмәт, Рәхмәтулла, Ҡулбай (өҫтәлгән: “Ҡулбаевтар – Аҡъяр ауылы”), Ҡулбай улы Салих, уның улы Ҡотлоғужа, уның улы Муса, уның улдары: Данияр, Әҙһәм, Насирйән, Хәким, уның улдары: Салихйән, Сәлимйән, Ғәзизйән, Хәмитйән, Йәҙгәр.

**5. Бикбирҙе Бабай улы,** уның нәҫеле:

*Күсәк Бикбирҙе улы;

*Баҡтыбай Бикбирҙе улы, уның улдары:

**Юлдашбай Баҡтыбай улы, уның улы Әлмөхәммәт, уның улдары: Байғужа, Ғабдулла, Һибәтулла, Солтан, Ҡотло, Ғәлиәхмәт;

**Ғәбделкәрим Баҡтыбай улы, уның улдары: Мөхәммәтйәр [Мөхәммәтйәр (Серекәй) ауылын нигеҙләүсе?], Мөхәммәтбаҡый;

**Ғәбделмөьмин Баҡтыбай улы (өҫтәлгән: “Аҡъяр”), уның улдары: Ишем (уның улдары: Солтан, Мырҙаҡай (Мырҙаҡай улы Йосоп, Йосоп улы Төркмән), Ғәбделғариф, уның улы Ғәбидулла, уның улдары: Ғабдулла, Мостафа, Сәлимйән, Сәйфулла.

Өҫтә бирелгән рим цифры бау баштарына күсәбеҙ:

**II.14. Ялбаҡсал Үҫәргән улының** нәҫел бауы:

*Сыуаш Ялбаҡсал улы, уның улы Сураш-би (өҫтәлгән: “Сураштан йәйелгән ауылдар: Юлдаш, Мырҙабулат, Әселе тамағындағы өс ауыл, Буранғол ауылы һәм ике Үрген ауылдары һ.б.”);

*Килъяҡшы Ялбаҡсал улы, уның нәҫеле:

**Туғус Кильяҡшы улы;

**Ситекәй Кильяҡшы улы;

**Туҡтағол Килъяҡшы улы, уның улы **Илмәмбәт** Туҡтағол улы, уның улдары:

***Бутҫыҡ Илмәмбәт улы;

***Юнай Илмәмбәт улы [Юнай ауылын нигеҙләүсе?];

***Атанғол Илмәмбәт улы,** уның нәҫеле: Күстән Атанғол улы (өҫтәлгән: “Күстәндән йәйелгән халыҡты “Асҡаҡтар” таифәһе тиҙәр -- Аҡбулат, Тләүғол, Байдәүләт, Ғәли, Бишәй-түбә ауылдары. Янманһары, Дәүләткол, Манайыутау (Сусаин-түбә) – по семи волостям. Күҙекәле, Асҡар, Ишбулды, Райман, Мораҡ, Ҡашҡар, Солтанғол, Иләү – Үҫәргән волосы, Айыу-түбә. Аҫҡаҡлар: Бикбау, Ырыҫбай, Абыҙар, Аҡсура, Аҡташ, Байғаҙы ауылдары вә ғәйреләр (һ.б.) – Ишморат, Мәмбәтәй, Ҡансура, Әбеш, Хәлил, Сурай, Ишҡол, Ниязғол, Бикбирҙе, Ибраһим, Ғүмәр, Утраҡ, Абзан”); Күстән улдары: Тимер, Исхаҡ, Бабай, Ташбулат.

**Үҫәргән-бабаның** өсөнсө улына күсәбеҙ:

**III.14. Байғужа Үҫәргән улы,** уның нәҫел бауы: Ҡаҙаҡбай Байғужа улы, уның улы Ҡаржау Ҡаҙаҡбай улы, уның улы Ишбирҙе Ҡаржау улы, уның улы Ҡотлоҡәдәм Ишбирҙе улы, уның улы **Төрки Ҡотлоҡәдәм улы**, уның улы **Ильяс Төрки улы,** уның улдары:

И.1. Биксәнбәт Ильяс улы, уның улдары:

*Әбтекәй Биксәнбәт улы;

*Баулыҡ Биксәнбәт улы;

*Туҡлыҡ Биксәнбәт улы, уның улы Рамаҙан, уның улы Зәйнулла, уның улдары: Ғәйнулла, Хәбибулла;

И.2. Рәхмәтулла Ильяс улы, уның улы Байсыуаҡ, уның улдары: Камалетдин, Сәхәүетдин, Тахия, Йомағол, Иманғол, Мөхәммәтйән, Яппар, Мөхәммәтғәли, Баһауетдин;

И.3. Ҡунаҡас Ильяс улы, уның улдары:

*Исмәғил Ҡунаҡас улы, уның улдары: Бикмөхәммәт, Биккинә, Исхаҡ, Әхмәҙулла;

*Дәүләткол Ҡунаҡас улы, уның улы Мифтах-хәҙрәт, уның улдары: Мисбах, Ғабдулғәлим;

И.4. Рәхмәтулла Ильяс улы (өҫтәлгән: “Турат ауылы, айыулар”), уның улы Әхмәҙулла Рәхмәтулла улы, уның улы:

Ә.1. Ишмөхәммәт Әхмәҙулла улы, уның нәҫеле:

*Шәмсетдин Ишмөхәммәт улы, уның улдары:

**Имаметдин Шәмсетдин улы;

**Әхмәҙи Шәмсетдин улы, уның улы Әүхәди;

**Нурислам Шәмсетдин улы, уның улдары: Динислам, Мушукир;

*Баһауетдин Ишмөхәммәт улы, уның улы Нуретдин, уның улы Марат, уның улы Риф;

*Бәҙретдин Ишмөхәммәт улы, уның улдары:

**Кәрим Бәҙретдин улы;

**Мөким Бәҙретдин улы, уның улдары: Айрат, Салауат;

**Мөхетдин Бәҙретдин улы;

**Нарркис Бәҙретдин улы, уның улдары: Ҡыуат, Марат;

Ә.2. Солтанәхмәт Әхмәдулла улы, уның улы Файыл;

Ә.3. Баймөхәммәт Әхмәдулла улы, уның улы Баҡый;

Ә.4. Күсмөхәммәт Әхмәдулла улы, уның улдары:

*Тажһөлөк Күсмөхәммәт улы, уның улы Ильяс, уның улы Шаһибал;

*Идрис Күсмөхәммәт улы, уның улдары: Ҡотдос, Рамаҙан.

И.5. Шәрип Ильяс улы, уның улдары:

*Мөхәммәтғәли Шәрип улы;

*Кәрим Шәрип улы, уның улдары: Әбделғәфәр, Мантаф, уның улы Әйүп, уның улы Ибраһим.

Артабан бирелә **Үҫәргән ырыуының 9-ынсы быуынынан дауамланған Түңгәүер бауы:**

9. Тимерҡабыҡ-би (Тимер) Арбан улы (өҫтәлгән: "Бораҡ хан заманы [йәғни 1422-27 й.й. Ҡушаматтары] Ҡуңғырат, Түңгәүер, Таңғауыр, Дүңгәүер. Ҡайһы исеме дөрөҫтөр? Асыҡлап белеүсе юҡ. Тимер [Тимерҡотло] — Түңгәүерҙең батыры булһа кәрәк. Түңгәүерҙең батыры Тимерҡотло – юлда бер батыр, тигән ғәйрәт ныҡлығы, хан хәбәрен ишеткәс, туҡтап тормай, йөҙ иллеләп бәһлеүәнен алып юлға сыҡты"). — 10. Ҡаратөлкө Түңгәүер улы (өҫтәлгән: "Дөрөҫөндә ул Хаҡҡулы исемле булған. Тик, ҡара төлкө тотҡас, уға ләҡәп-исем биргәндәр, тиҙәр). Уның улдары:

**I. Мөлкаман.**

Юламан (нәҫеле юҡ).

**II. Иламан.**

Ике уландың нәҫел бауҙарын айырым-айырым бирәбеҙ:

**I. Мөлкаман Ҡаратөлкө улы,** уның улдары: Шикаман Мөлкаман улы, Ҡалкаман Шикаман улы.

**II. Иламан Ҡаратөлкө улы**, уның улы **Күстән Иламан улы**, уның улдары:

*Туҡбай Күстән улы;

*Туҡһары Күстән улы;

*Һарыса Күстән улы;

*Янбараҡ Күстән улы;

*Булансы Күстән улы, уның улы **Бүкәт** (өҫтәлгән: “Ғүмәр ауылдары”), уның улдары):

**Б.1. Юлай Бүкәт улы** (нәҫелһеҙ).

**Б.2. Ҡотош Бүкәт улы,** уның улдары:

*Аҡтыҡужа Ҡотош улы, уның улы Йәйләү, уның улы Йәнтүрә, уның улы Абдулҡадир, уның улы Зәйнулла, уның улы Рәхимйән;

*Аҡбирҙе Ҡотош улы, уның улы Тулынбай, уның улдары:

**Байтимер Тулунбай улы, уның улдары: Байтүрә, Абнасир, Маннан, Баймырҙа, уның улы Ҡотлоғужа, уның улдары: Кәлимулла, Сәйфулла-Тартай, уның улы Аллабирҙе, уның улдары:

***Шаһимәрҙән Аллабирҙе улы;

***Рамаҙан Аллабирҙе улы, уның улы Шаһишәриф;

***Ҡотләхмәт Аллабирҙе улы, уның улы Шәрип, уның улы Мәһәҙи, уның улдары: Мөхәммәт (уның улы Әкрәм), Сәғди, уның улы Зәки.

**Б.3. Һабай Бүкәт улы,** уның улы Теләү, уның улы Туҡһанбай, уның улдары:

*Һикһәнбай Туҡһанбай улы, уның улдары: Ҡаҙаҡбай, Ғүмәр, уның улы Рәхмәтулла, уның улы Әхмәдулла, уның улдары: Ишмөхәммәт, Дусмөхәммәт, Баймөхәммәт, Солтанәхмәт;

*Бүкәнбай Туҡһанбай улы, уның улдары:

**Әлибай Бүкәнбай улы, уның улы Хәким, уның улдары: Сәғит, Мәсғүт;

**Ғәбдрәшит Бүкәнбай улы, уның улы Бәғәҙәт, уның улдары: Рауил, Мәһәҙи;

*Бикбай Туҡһанбай улы, уның улы Бүләк, уның улы Шаһморат, уның улдары: Шаһимәрҙән, Өммөкамал, Лоҡман, уның улы Ғәзиз.

Йәнә килеп өҫтәгенең дауамы:

***Һатыусал Күстән улы,** уның улдары:

**Иштәкәй Һатыусал улы;

**Һеркә Һатыусал улы;

**Ситәй Һатыусал улы, уның улдары:

***Нуғайсы Ситәй улы, уның улдары: Буранғол, уның улы Йосоп;

***Шәнбәк Ситәй улы, уның улдары: Бөтөк, Ишкинә, Ырыҫҡол;

**Динис Һатыусал улы, уның улы Алакүҙ, уның улы Бүртә, уның улы Ҡәҙерғол, уның улы Юлдашҡол;

**Татлыбай Һатыусал улы, уның улдары:

***Ҡулиҡай Татлыбай улы, уның улдары: Һибәт, Заһир, Яҡас, **Тәкәй,** уның улдары:

**Т.1. Ғүмәр Тәкәй улы,** уның улдары:

*Бикбирҙе Ғүмәр улы, уның улы Хоҙайбәндә, уның улы Юлмөхәммәт, уның улдары:

**Сабит Юлмөхәммәт улы, уның улы Аллабирҙе;

**Ғәлиәхмәт Юлмөхәммәт улы, уның улы Хәсән;

**Салих Юлмөхәммәт улы, уның улы Абдулла, уның улы Дауыт, уның улы Мөхәммәтйән;

**Дәүләтбирҙе Юлмөхәммәт улы, уның улдары:

***Ишкилде Дәүләтбирҙе улы, уның улдары: Мәхмүт, Зөлҡәрнәй, Мырҙабулат, уның улдары: Кәрим, Әхмәткәли;

***Әбсәләм Дәүләтбирҙе улы, уның улдары:

****Идрис Әбсәләм улы, уның улдары:

1) Фәхри Идрис улы, уның улы Ҡазыхан;

2) Заһит Идрис улы, уның улдары: Мөхәммәт, Абдулхаҡ;

3) Йосоп Идрис улы;

4) Ғәлләм Идрис улы, уның улы Хәкимжан

****Мөхәммәтдин Әбсәләм улы, уның улдары: Шәрәфетдин, Нәжметдин, Ғатау, Ғәләүетдин, уның улы Бәхтиәр, уның улы Мөслим.

**Т.2. Бәкер Тәкәй улы** (өҫтәлгән: “Юлдыбай ауылы”), уның улдары:

**а) Сыуашбай Бәкер улы,** уның нәҫеле:

*Ҡармыш Сыуашбай улы, уның улы Турҙағәли, уның улы Ишбулды, уның улы Айтул;

*Амантай Сыуашбай улы, уның улы:

**Бикеш Амантай улы, уның улдары: Ирмөхәммәт, Мөхәррәм, уның улдары: Хәйрулла, Ғайса);

**Биксәй Амантай улы, уның улы Шоғайыб, уның улы Мөхәммәтғәли, уның улы Шакирйән, уның улы Ибраһим;

**Рауил Амантай улы;

**Әбүбәкер Амантай улы, уның улы Хаммат (туғыҙ улы булған), уның улдары: Уйылдан, Дауыт, Исҡаҡ, Яхъя, Ғәли, Муллағәлләм, Бәғҙәт, Исмәғил, Яҡуб, уның улы Фәхритдин;

**Турһынбай Амантай улы, уның улдары:

***Нәҙерша Турһынбай улы, уның улдары: Абдулла, Йыһангир, Йыһанъюл;

***Ғәлиәскәр Турһынбай улы, уның улы Мостафа);

***Бигаржалан Турһынбай улы;

***Ғабдулмән Турһынбай улы;

***Йыһанша Турһынбай улы, уның улдары: Рамаҙан, Мырҙағәли;

**б) Мораҙым Бәкер улы,** уның нәҫеле:

*Һары Мораҙым улы;

*Талуҡай Мораҙым улы;

*Ямғыр Мораҙым улы;

**в) Ҡарас Бәкер улы,** уның улдары:

*Фазыл-сәсән Ҡарас улы, уның улы Ғәйнелхаят;

*Үтәгән Ҡарас улы, уның улы Ҡускилде;

*Ишбулат Ҡарас улы, уның улы Байғуза;

*Именлек Ҡарас улы, уның улдары:

**Йәһүди Именлек улы, уның улы Ғиззәт, уның улы Вахит;

**Сибәғәт Именлек улы, уның улы Сәғидулла;

**Һибәт Именлек улы, уның улы Ғибат;

**г) Юлдыбай Бәкер улы** (өҫтөлгөн: “Юлдыбай ауылы”), уның улдары:

*Йәрмөхәммәт Юлдыбай улы;

*Абсабатар йәки Сабатар [Сабатар ауылын нигеҙләүсе?] Юлдыбай улы, уның улдары: Муллағәли, Әбделмән, уның улдары: Сафиулла, Кәли;

*Рахманғол Юлдыбай улы, уның улдары: Ғөбәйдулла, Бәйрәнтәй, Зәйнәғәбдин;

*Ишмөхәммәт Юлдыбай улы, уның улдары: Әмир, Үмәр;

**д) Күкһәй Бәкер улы.** — Ҡаҙаҡкол Күкһәй улы. — Даминдар Ҡаҙаҡкол улы, уның улдары:

*Усман Даминдар улы, уның улы Муллағәлләм;

*Шәмситдин Даминдар улы;

*Әйүб Даминдар улы;

*Язар Даминдар улы, уның улы Ғөбәйдулла;

*Әхәт Даминдар улы, уның улы Ҡасим, уның улдары: Мөхәммәт, Мөхтәр, Маҙһар.

15.06.2001.
15.01.2010

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ШӘЖӘРӘҺЕН ТЕРГЕҘЕҮ

## Баш һүҙ

Хөрмәтле гәзитебеҙ “Киске Өфө” халҡыбыҙ рухиәтендәге әүҙемәл темаларға туҡтауһыҙ мөрәжәғәт итеп, быйылғы (2014 й.) 25-се һанында “Салауаттың нәҫел тамырҙары” тигән ҡыҙыҡлы ғына әңгәмә уҙғарыуы йәмәғәтселеккә билдәлелер, моғайын. Унда үҙен туранан-тура Салауат Юлаев нәҫеле итеп шәжәрәләр төҙөгән, ҡалын китаптар сығарған эшҡыуар Р.Ш. Вахитовтың версияһы ҡабатлап яҡтыртыла. Был, әлбиттә, һис тә насар эш түгел, донъялағы аңлы һәр башҡорт үҙен Салауат тоҡомо һанап ғорурланырға хаҡлылыр. Әммә бер үк “дәлил”дәрҙең матбуғатта (бер “Киске Өфө”лә генә түгел!) өҫтөнлөк алыуы, башҡаларының һанға һуғылмауы һағайта. Шуға күрә редакцияға үҙемдекен тәҡдим итеп, теманы “мөгөҙөнән матҡырҙан” алда, мөхтәрәм тарихсыбыҙ (урыны ожмахта булғыры!) Әнүәр Зәкир ул Әсфәндиәров тексын оригинал (урыҫ) телендә килеш биреүгегеҙҙе һорайым.

“В последние годы, -- тип яҙҙы ул, -- на страницах республиканской периодической печати появлялись статьи и заметки о предполагаемой родословной Салавата Юлаева. Думается, что будет уместно высказать свое отношение к ним. Подчеркну, что авторы этих публикаций искренне стремятся к истине, имеют добрые намерения. Однако почти все авторы еще далеки от поставленной цели. Причина неудачи — отсутствие выявленных источников.

Чтобы обосновать свою ошибочную концепцию о том, что Юлай Азналин, его отец и дети, происходившие [якобы] из Куваканского рода, были припущенниками Шайтан-Кудейской волости, один из авторов (Р. Ш. Вахитов), исходя из неверного понимания сути Указа от 11 февраля 1736 г., разрешившего продажу башкирских земель, приходит к следующим необоснованным выводам: 1) вопреки его утверждениям, Указ не лишил башкир их вотчинного права на землю; 2) как будто до названного документа не определялись границы башкирских волостей, что дало возможность, по мнению этого автора, проживать башкирам разных родов в «одном месте», а однородцам — в разных родах-волостях. Такое следует считать исключением, а не правилом. Трагическая судьба куваканцев заключалась почти в добровольном лишении самих себя родовых вотчин путем их систематической продажи или сдачи в аренду. В итоге все башкиры Куваканской волости, кроме ее одной деревни, еще в 60-х годах XVIII в. стали припущенниками других волостей. Такая же участь постигла и башкир Сызгинской волости (юг Свердловской области), на вотчинных землях которых возникло немало заводов; 3) на основе выше приведенных предположений, по его велению (эти примеры были единичными, поэтому мнение автора не находит у нас поддержки), без никакого документарного обоснования, активный повстанец и один из предводителей башкирского восстания 1735-1740 гг., старшина Куваканской волости Аднабай Карагузин (Азнали-бай — по Вахитову, чтобы уподобить его имя с фамилией Юлая Азналина), его отец Карагузя Акаев (Акаков), дед — Акай Камакаев (участник восстаний 30-х гг.), прадед — Камакай

Биккулов (в документах упоминается за 1706 г.), объявляется отцом старшины Шайтан-Кудейской волости (с 1763 г., а в 1760- 1762 гг. им был Иштуган Мишаров, а до него — Шаганай Барсуков и др.) Юлая Азналина и дедом Салавата Юлаева; 4) родовая деревня Юлая Азналина и шайтан-кудейцев никогда не называлась Аднабаево или Азнабаево, а во всех источниках она — Адналы или Азналы (Шайтан). При существовании старинной деревни Адналы, обозначенной на картах 1737 г. (см. Приложение к «Материалам по истории Башкирской АССР». Т. 4. Ч. 2. М.,1956), у Красильникова и Рычкова 1755 г., которая служила центром Шайтан-Кудейской или Шайтанлярской волости, поэтому ранее называвшаяся Шайтан, куваканец Аднабай-Азнабай Карагузин продолжал быть старшиной Куваканской волости. Обосновавшись как будто в этой деревне, он управлял волостью, находившейся не смежно с шайтан-кудейцами, а далеко через территорию нескольких волостей. С началом репрессий против повстанцев Азнабай оказался в Средней казахской орде, вместе с Карасакалом и другими повстанцами. Вернувшийся на родину после амнистии Азнабай занимался делами не шайтан-кудейцев, а куваканцев: в 1756 г. участвовал вместе с отцом и другими в продаже куваканских вотчинных земель владельцам Катав-Ивановского завода, возникшего на вотчине Трухменского аймака Кудейской волости. Теперь сравните: в то же самое время шайтан-кудеец Юлай Азналин резко выступает против продажи некоторыми одновотчинниками во главе с отставным с 1743 г. старшиной Шаганаем Барсуковым земель к строящемуся Симскому заводу. Выходит, что выдуманный отец (Аднабай Карагузин) разбазаривает вотчинные земли одной волости, а его мнимый сын (Юлай Азналин) оберегает земельные угодья другой волости. Возможно ли такое, логично ли? Если бы Юлай Азналин был куваканцем по происхождению, то какой резон ему, будучи рядовым, а не старшиной стать защитником кудейских интересов.

Несостоятельность суждений вышеназванного автора подтверждается неидентичными по форме тамгами представителей двух волостей. Ничего общего мы не видим между тамгами Юлая Азналина и его мнимого прадеда Ака муллы Камакаева. Отсюда напрашивается вывод: тамги двух родов-волостей категорически отрицают их кровное родство. Следовательно, родовая деревня Азналы-Шайтаи и дочерние деревни Юлаево и Текеево Шайтан-Кудейской волости никак не могли принадлежать Куваканской волости. Юлай Азналин, его дед Азналы, сын Салават были настоящими коренными шайтан-кудейцами, не имевшими никакого родственного отношения к куваканцам (Аднабай — Карагузя-Ака — Камакай — Биккул), проживающими далеко от их волости».

## Юлай Аҙналин аҫаба ерҙәрен ҡурсалай.

Урал заводтарындағы ҙур боланан башларға кәрәк, буғай, уны 1764 йылда Бибиков-кенәз ғәскәре ҡан ҡойоп баҫтырған…

Ошо бола Аҙналы байҙың һәм уның улы Юлайҙың (Салауаттың атаһының) Мейәскә ҡойған Бишкил (урыҫса яҙылышы Бешкил) йылғаһы буйындағы аҫаба

ерҙәрендә заводтар төҙөүгә ҡаршы 1760 йылда уҡ башланып китә, 1764 йылда уға завод эшселәренең бунты ялғана. Был хәрәкәттә старшина Юлай Аҙналиндың хәҙерге Иглин районындағы Тәкәй ауылынан килгән бер килке туғандары, ырыусиреүҙәре лә ҡатнашҡан, булһа кәрәк. Дөрөҫ, старшина Юлай Аҙналин һәм сотник Баҙарғол Юнаев (һуңғараҡ Е.И. Пугачевтың фельдмаршалы) бунттан ситтә торғандар, әммә башҡорт боласыларын көрәшкә рухландырыусы Таймаҫ тархан Шайымовҡа (һуңғараҡ Е.И. Пугачев хәрәкәтен баҫтырыуҙа батша хөкүмәте яҡлы) аҫтыртын теләктәшлек белдереүҙәре билдәле (Материалы по истории башкирской АССР, том IV, часть вторая, М., 1956; 159-160-ынсы биттәр).

Боланы баҫтырыу барышында уның Тәкәй ауылынан сыҡҡан (“биш тәкәй”) бер килке ҡатнашсылары батша ҡырғынсыларынан Урал көнбайышына (Өфө провинцияһына) ҡасып, Муса ауылы башҡорттарынан ер алып, рәсми ҡағыҙҙарҙа башҡорт типтәрҙәренә (ә аҙаҡ мишәрҙәргә) әүерелә. 1764 йылдың 17 мартында 7 татарға ер һатыу тураһындағы доҡументта «Биштәкә ауылдарына элегерәк 8 обывател»дең типтәрлеккә керетелеүе әйтелә (баяғы IV том, беренсе киҫәк, 289-ынсы бит). «Деревень Биштеков» тип күплек һанда яҙылыуы — баяғы һигеҙ уҙамандың шул төбәктәге бер-нисә урында нигеҙләнеүенә ишара, буғай. Элегерәк былар барыһы, моғайын, өҫтәрәк иҫкәртеүебеҙсә, Эҫемгә ҡойған Баш йылғаһы тамағындағы (хәҙерге Иглин районы) баяғы Тәкәй ауылынан (Өфө провинцияһында бүтән Тәкәй ауылы булмаған), Юлай Аҙналин һымаҡ уҡ, Урал артына күсеп барып, Миәс йылғаһына ҡойған исемһеҙ һыу буйына биш өй һалып ултырған биш уҙаман -- “биш тәкәй”ҙәр булған, шуға күрә йылғаның исемен -- Бишкил (бишәү күсеп килгән), ә һуңғараҡ юҡҡа сыҡҡан ауылды Биштәкәй атағандарҙыр, тип тоҫмаллана. Баяғы бунт арҡаһында, моғайын, ул ауыл яндырылып, биш уҙаман (“биш тәкәй”) көнбайышҡараҡ ҡасып киткән дә хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районындағы баяғы Муса ауылы еренә төпләнгән, бындағы исемһеҙ йылғаны ла улар -- Бишкил (Бшкил) тип, яңы ауылды ла Биштәкәй (йәғни Тәкәй ауылынан сыҡҡан бишәү) тип исемләгән; был исемдәр, тора-бара саҡ ҡына үҙгәреп, әйтелештә береһенең -- тәүге, икенсеһенең һуңғы өндәре юйылып, ошо көндәрҙәге ***Шкил*** йылғаһы һәм ***Биштәкә*** ауылы булып әүерелгәндер...

Баяғы тарихи документтағы һигеҙ уҙамандың Биштәкәй ауылынан ситкәрәк (шул уҡ төбәктә) төпләнгән өсөһөн боронғо перепись «ревизские скаски»ҙарҙан асыҡларға мөмкин булды: хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районындағы Ҡамышлы (Камышинка) ауылында — Әбдесәләм Аҙналин (1730 йылда тыуған, 1795 йылда уға 65 йәш булған) һәм Балта Аҙналин (1743 йылда тыуған, 1795 йылда уға 52 йәш булған) – Салауат Юлаевтың ике тыуған ағалары булмыштар. Өсөнсөһө — Илмырҙа ауылындағы (ул ауыл хәҙер юҡ) Күҫәк Йосопов (1736 - 1793). Тәүге икеһе, күрәһегеҙ, Салауаттың атаһы Юлай Аҙналин менән бер туғандар. Әйткәндәй, дуҫым Рәми Ғарипов үҙенең әсәһе яғынан бабаларының береһе Балта — «Салауат тоҡомонан», ти торғайны, һәм ул ошо Балта Аҙналин булыуы бик ихтимал.

## Шәжәрәләр ни һөйләй?

1950 йылдың 25 апрелендә Х. Ҡолмөхәмәтов Салауат районының Яңы Ҡаратаулы ауылында Сафия инәй Исламованан һорашып яҙып алған шәжәрәнең башланышы ошондай:

1. Дөртмән. — 2. ???. — 3. Аҙналы. — 4. Юлай. — 5. Салауат һәм Юлайҙың ҡыҙы (исемен белмәйем), ул ***Бишәүҙәрҙә*** була»...

Күренеп тора: беренсе бабаның дөрөҫ исеме Дәрдмәнд (ғәрәпсә мәғәнәһе «бисара, ғәзиз») булып, бер аҙ боҙоп — “башҡортса”лаштырып яҙылған. Унан һуңғы (һорауҙар ҡуйылған икенсе быуын) исемде иһә «ревизские скаски»ҙарҙан соҡсоноп һәм тоҫмаллап таптыҡ: Мөъмин (ғәрәпсә мәғәнәһе «ышаныусы, инаныусы; Ислам динендәге кеше». Урыҫса доҡументтарҙа Мукмин, Мукминов тип яҙыла). 1773-75 йылдарҙағы бөйөк боланан һуңғы осорҙа Салауат Юлаевтың тоҫмалланмыш тоҡомдарының байтағы, батша хөкүмәте ялсыларын аймылыш ҡылыу өсөндөр, үҙ аталары исемен йәшереп, шул Мукминов фамилияһында йөрөй. Мәҫәлән, 1795 йылғы ревизияла Якшиваново ауылында йәшәүсе башҡорт типтәре Аҡбулат Мукминов (1721 йыл тыуған) күрһәтелгән, ә уның улы йорт старшинаһы Мортаза Аҡбулатовтың (1746 й.т.) командаһына ҡараған Ҡамышлы, Илмырҙа ауылдарында баяғы Әбдесәләм һәм Балта Аҙналиндар менән бер ҡатарҙан Күҫәк Йосопов йәшәй. Шул уҡ Ҡамышлылағы Баязит Киләйев (1800 й. үлгән) уҙамандың улы Рәхимҡол Баязитов (тыумышы 1752 йыл — Салауат Юлаевтың йәштәше) 1816 йылда хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районындағы Биштәкә ауылында йорт старшинаһы булып торған, ә уның өлкән ҡатыны Сәғиҙә Мукминова (1758 й.т.) — Салауат Юлаевтың бер туған һеңлеһе йәғни Юлайҙың баяғы шәжәрәлә «исемен белмәйем, ***Бишәүҙәрҙә*** була» тип күрһәтелгән ҡыҙы булырға оҡшай. Бындағы «Бишәүҙәр»ҙе хәҙерге Салауат районындағы *Бишәүләр* ауылы итеп түгел, ә Ҡырмыҫҡалы районындағы ***Биштәкәй*** (хәҙерге Биштәкә) ауылын нигеҙләгән ***бишәүҙәр*** (Тәкәй ауылынан сыҡҡан биш кеше) ауылы тип аңларға кәрәк. Сөнки Салауат заманында тегеһенең, хәҙерге Салауат районындағының, дөрөҫ аталышы “Бишәүләр” түгел, ә ***“Бишәйләр*** булған, йәғни ул ауылды 1735 йылғы Килмәк-абыз етәкселегендәге баш күтәреүҙә Ҡаҫмарт йылғаһы тамағында (Һаҡмар буйы) батша ҡырғынсылары тарафынан ҡыйратылмыш Үҫәргән ырыуының Күк Уралға ҡасып киткән ***“бишәй”*** araһы кешеләре нигеҙләгән (Р.Г. Кузеев, Происхождение башкирского народа. М. 1974; 158 – 159-ынсы биттәр), шуға күрә ул ауыл Үҫәргән һөйләшенә хас *лар-ләр* ялғауы менән (ә хәҙерге Салауат районындағы ҡыуаҡандарҙыҡынса *ҙар-ҙәр* түгел!) “Бишәйләр” тип йөрөтөлгән. Бынан тыш, старшина Рәхимҡолдоң Биштәкәйҙәге бер туған ағаһы Сәғит Баязитов та (1749 й.т.) шул уҡ Салауаттар тоҡомо булыры ихтимал Миһырбан Мукминоваға (1764 й.т.) өйләнгән бит.

Тимәк, әгәр ошо юрауҙарыбыҙ юш килһә, хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районындағы был төбәк йорт старшиналарының икеһе тиң (һәм тағы башҡалар) Салауат Юлаевтың яҡын ағай-энеләре булып, улар Е.И. Пугачев болаһында ҡатнашмаған йәғни батша хөкүмәтенең ышаныслы кешеләре һаналған. Ә батшаға ҡаршы баш күтәреп еңелгән башҡорттарҙың ҡатындары, балалары, ҡырғын әтрәттәре тарафынан ҡулға алынып, ихтиладды баҫтырыусы урыҫ офицерҙарына, татарҙарға һәм шулай уҡ батшаға тоғролоҡло башҡорт һәм мишәр түрәләренә

ҡоллоҡҡа таратып бирелеүе билдәле. Һәм был төбәк Салауат ғаиләһенең батша яҙаһынан ҡасҡан ҡайһы бер ағзаларына боҫоу урыны булыуы бик ихтимал. ***Салауат Юлаев ҡылысының*** беҙҙең замандарғаса ***тап шул төбәктә*** һаҡланыуы ла ҡеүәтләй был фекерҙе.

## Салауат Юлаев ғаиләһенең яҙмышы

Заманаһының заңына һәм йолаларына ярашлы, йәш кенә (ә ысын йәше тураһында һүҙ – алдараҡ) Салауаттың өс ҡатыны һәм уларҙан тыумыш балалары (һаны билдәһеҙ) булған. Батырҙың эҙенә төшөрҙән элек үк, ҡырғынсылар уның ҡатындарының һәм балаларының бер нисәһен ҡулға ала, шунан һуң үҙен дә эләктерә. Салауаттың үҙенең әйтеүенсә, уның бер улы Өфө ҡала коменданты полковник С.С. Мясоедовта, икенсеһе генерал Ф.Ю. Фрейманда тотҡон булып, «башҡа ҡатындары һәм балалары иһә урындағы түрәләр тарафынан бүлешеп алынған» (береһенең дә исеме аталмай). Мәҡәләбеҙ башында уҡ ҡуйылған һорауға яуапты нәҡ ошо һуңғы «башҡа»лары араһынан һәм Салауаттың Е.И. Пугачев болаһында ҡатнашмаған ағай-энеләренең төйәге булырҙай ***Биштәкәй*** (хәҙерге Биштәкә), ***Илмырҙа, Ҡамышлы*** (Ҡырмыҫҡалы районы) ауылдарынан эҙләйек.

Билдәле булыуынса, Салауатты тәүҙә, үҫмер-малай көйөнсә, тол ҡалған еңгәһенә өйләндергәндәр һәм шунан һуң алған ҡатындарының береһе Гөлбәзер (Гөлбәзир тип тә әйтәләр, урыҫса Гульбазар тип яҙылған; фарсы ҡатнаш ғәрәпсә мәғәнәһе — «сәскә орлоғо») исемле булған. «Ревизские скаски» (ЦГИА Р.Б., фонд И-138, оп. 2, дело 355, *л.* 151) буйынса, 1816 йылдың февралендә 60 йәшлек (1756 й. тыуған) был «вдова Баязитова Гульбазар» Ҡамышлы ауылында баяғы түрә ***Баязит*** Киләйевтең тол ҡатыны рәүешендә теркәлгән, ә шул уҡ йылдың икенсе бер ҡағыҙында (дело 347, *л.* 221) шул ***Баязит*** Киләйевтең Абдуллатиф исемле улының әсәһе итеп күрһәтелгән. Тимәк, Абдуллатифтың 1787 йыл тыуыуына ҡарағанда, Салауат Юлаевтың хәләл ефете Гөлбәзер Ҡамышлы ауылы типтәре ***Баязит*** Киләйевкә иң кәмендә 1786 йыл тормошҡа сыҡҡан (шуға тиклем Салауатын көткәндер?).

Инде килеп Салауат улдарының да баяғы «башҡа»лар ҡатарындағы берәйһе, моғайын, ошо төбәктә ереккәндер, тигән ышаныс тыуа. Ағай-энеләре уның Салауат улы икәнен дә, Салауат ҡушҡан ысын исемен дә бик ныҡ йәшергән булыр, әлбиттә. Һәр хәлдә, ул бындағы Салауат ағай-энеләрендә тормаҫҡа, фамилияһын Салауатов тип тә, Юлаев һәм Аҙналин тип тә атамаҫҡа тейештер. (Ә хәҙер үҙҙәрен Салауат Юлаевҡа бәйле шәжәрә төҙөргә тырышҡан Салауатовтар нәҫеле иһә бөйөк батырыбыҙ менән бер заманда, бер төбәктә аралашып, батырыбыҙ тыуып-үҫкән хәҙерге Иглин районы Тәкәй ауылына яҡын Тауыш ауылында йәшәгән һәм батша администрацияһына уның тураһында шаһитлыҡ ҡылған [Крестьянская война 1773 – 1775 гг. на территории Бапшкирии, Уфа – 1975, 327, 328, 329, 426-сы биттәр] Салауат Собханғолов нәҫелдәрелер. Ошоларҙан сығып, Салауаттың икенсе бер шәжәрәлә («Ағиҙел» журналы, 1978/6, 120-122-нсе

биттәр) исемләнгән ике улы ***Аҡбулат*** һәм ***Шатморат*** тирәһендә төпсөнөү кәрәк. Бөтә дәлилдәрҙе йыйып оҙаҡ тикшергәндән һуң, баштараҡ Аҙналиндар менән бергә исеме аталған Илмырҙа ауылы уҙаманы баяғы Күсәк Йосоповҡа һәм уның Мөрсәлим (ғәрәпсә мәғәнәһе «ебәрелгән илсе, пәйғәмбәр») исемле улына (1765 й. тыуған) шып-туҡтала иғтибар (1795 йыл ревизияһы буйынса), — йәғни ҙә ки Салауат Юлаевтың улын, ысын исемен һәм килеп сығышын йәшереп, унда шуның (Күсәктең) улы итеп яҙҙыртҡандарҙыр, исем мәғәнәһе лә дөрөҫләй быны – "ебәрелгән илсе". Абайлаһаҡ, Е.И. Пугачев болаһы баҫтырылғанда уланға ***ун*** йәш булған. Был иһә Юлай Аҙналиндың 1775 й. 25 февралендәге һорау алыу барышында, ике ҡатынымды һәм ***ун*** йәшлек уланымды әсир итеп алып киткәндәр, хәҙер ҡайҙа икәнлектәрен белмәйем, тигәненә тап килә, сөнки башҡорт йолаһынса тәүге ейән (йәғни Салауаттың тәүге улы) ҡартатаһының (йәғни Юлайҙың) уланы һанала ла уның ҡарамағында тәрбиәләнә. Салауаттың был улы, бәлки, Салауаттың тәүге ҡатынынан (еңгәһенән) тыуғандыр, ә бәлки, ул саҡтағы 9 ғына йәшлек Гөлбәзерҙәндер (ҡыҙҙарҙың енси өлгөрөүе 8-9 йәштә лә була). Ә Салауат үҙе, йәғни атай кеше, тарихсыларыбыҙ бер ниндәй ҙә тәғәйен документҡа таянмайынса, фәҡәт уның язаланыу барышында батша хөкөмдарҙарына әйткән һүҙҙәре буйынса ғына, ә ул уйҙырма булыуы ла бик мөмкин! -- ул саҡта йә — 13, йә 11 йәштә (сөнки уны, баяғыса, бер ниндәй ҙә ышаныслы документҡа таянмай, йә — 1752, йә 1754 йылда тыуған һанайҙар). Әммә был да тәбиғәт ҡанунына тап килә: малайҙарҙың енси өлгөрөүе 10-11 йәштән үк икән (Большая Советская Энциклопедия, 20-нсе том, 241-енсе бит). Ә шулай ҙа шик тыуа: совет заманында батырыбыҙҙың юбилейына әҙерлек айҡанлы яҙыласаҡ мәҡәлә проектын тикшергәндә уның тыуған йылын тар ултырышта тауыш биреү юлы менән генә билдәләп ҡанунлаштырған ғалимдарыбыҙ яңылышманымы икән? Сөнки бына "Протокол N 2 заседания комиссии по составлению научной биографии Салавата Юлаева. 3 марта 1952 года. Присутствовали члены комиссии: тт. Типеев, Туктаров, Усманов и Васильев… Постановили: …а) тезис [в проекте статьи] – точные данные о рождении Салавата не сохранились – из статьи исключить, привести общепринятую дату рождения Салавата – 16 июня 1752 года… Председатель Типеев Ш.И., секретарь Туктаров С.З." Ләкин "общепринятую дату" тигәне лә хаҡ түгел, сөнки халыҡ хәтерендә һаҡланғанға тап килмәй, быны атаҡлы Мәскәү тарихсыһы иҫкәрткән:

"Отзыв т. Устюгова о рукописи "Салават Юлаев – национальный герой башкирского народа" (к 200-летию со дня рождения).

В целом очерк удовлетворителен… 2. Откуда известна точная дата рождения Салавата – 16 июня 1752 года? Насколько известно, в источниках нет точных указаний не только на число , но и на год. А упоминание в некоторых фольклорных материалах о том, что Салават родился ***в год барса,*** ведет к 1746 г., поскольку ближайшими годами барса к предполагаемому времени рождения Салавата были 1746 и 1758 гг… 1758 год исключается, остается 1746 г., т.е. что Салавату в момент начала крестьянской войны было 27 лет. То обстоятельство, что Салават еще до крестьянской войны выполнял обязанности старшины вместо

отца, а также, что Салават имел трех жен, говорит за более зрелый возраст… Старший научный сотрудник Института Истории АН СССР Н. Устюгов".

Беҙҙекеләр күбеһенсә: "Салауат булған, һәй, булғаҙир/***Егерме лә ике*** йәшендә" тигән халыҡ йырына таяныусан, ләкин уны яңы быуындар элекке ***"ете"*** тигәнде берҙәй яңғырашлы ***"ике"*** тип йырлауы бик ихтимал ("Ирәмәлкәй"ҙе "Ирәндеккәй" тип шаңғыртҡандай)…

Әммә төптө ерлекһеҙ, ләкин рәсми ҡабул ҡылынған даталдарҙы һанға һуғып барайыҡ. Әле генә бында беҙҙең тарафтан ***Салауаттың улы*** һаналған ***Мөрсәлим*** дә шундай уҡ «иртә»ләрҙән: 1777 йылда 12 йәшендә уның беренсе ҡатынынан *Рәхмәтулла* тигән малайы тыуа; 1834, 1850, 1859 йылдарҙағы ревизия ҡағыҙҙарына (делолар: 459 — 67-98-енсе биттәр; 619 — 484-532-нсе биттәр; 729 — 134-енсе бит) ул, *Рәхмәтулла,* Биштәкә ауылында йәшәүсе «зауряд хорунжий Рахметулла Мурсалимов Мукминов» (йәғни Мөрсәлим Мукминовтың улы) тип икеләтә фамилиялап теркәлгән, был, моғайын, алда буласаҡ ревизияла буталсыҡ тыуҙырмаҫ өсөндөр, сөнки уның атаһы Мөрсәлим дә был осорҙа үҙенең әүәлге ысын аталышы ***Шатморат*** (ҡағыҙҙарҙа боҙоп «Шамрут» тип яҙылған) исеменә ҡабат ҡайтып, башҡа туғандары кеүек үк, бабаларының береһе булған Мөъминдең исемен фамилия итеп алып, Биштәкәй ауылында Шамрут Мукминов булып йөрөй, ә тыуған йылы шул уҡ — «Мөрсәлим» тыуған 1765 йыл...

Шулай итеп, милли геройыбыҙ Салауат Юлаевтың бер улы ***Шатморат*** табылды, тиһәк тә була һәм уның (Шатмораттың) өлкән улы булған баяғы Рәхмәтулла Мөрсәлимов Мукминовтан кесерәк уландары барыһы ла ҡағыҙҙарға Шамрутов (ә кәрәк ине Шатмуратов) фамилияһында теркәлгән. Артабанғы быуындар иһә һәр береһе, ғәҙәттәгесә, тәғәйен үҙ аталарының исемен фамилия итеп, *Шатморат* бабаның исеме етенсе быуында ғына шәжәрәгә йәнә әйләнеп ҡайта ла данлыҡлы генералыбыҙ *Шайморатов* фамилияһы рәүешендә бөтә илгә таныла.

Инде бер һорауға яуап бирәйек: "Генерал Миңлеғәли Миңғазитдин улы Шайморатов бер рәсми анкетала милләтен "татар" тип күрһәткән дәһә?" Аптырамайыҡ: шанлы Совет хакимиәте тарафынан Башҡортостандың Миңзәлә өйәҙен Татарстанға ҡырҡып биреп ҡалдырылғандан һуң шундағы шул ваҡыттағы *ике йөҙ меңдән ашыу аҫаба башҡорт* һәм уларҙың хәҙерге тоҡомдары ла "татар" булып яҙылып йөрөй ҙәһә... Ошондай хәл Башҡорт исемен йөрөткән республикабыҙҙа ла аҙ түгел…

## Бер юлы ике милли герой (Салауат һәм Миңлеғәли)

Тәүҙә был икәү шәжәрәһенең туп-тура теҙемен күрһәтәйек:

1. Юлай Аҙналин (1730 й. тыуған). — 2. Салауат Юлаев (1752, йәки 1754, йәки 1746 — 1800). — 3. Шатморат-Мөрсәлим (1765-1848). — 4. Фәсихитдин (1802 й.т., уның ҡатыны Фатима Зәйнәшева). — 5. Фәхрилислам (1829 й.т., уның ҡатыны Сабира Әннәсова). — 6. Миңғазитдин (1866 й.т., уның ҡатыны Бибитайфа). — 7. Миңлеғәли Миңғазитдин улы Шайморатов генерал (1899-1943).

Хәҙерге барлыҡ доҡументтарҙа М.М. Шайморатов генералдың тыуыу датаһы 1899 йылдың 15 августы тип яңылыш яҙылып йөрөй. Шул хатаны төҙәтмәккә, төп сығанаҡты барланыҡ:

***«Оренбургское магометанское духовное собрание. Метрические книги записей Уфимского уезда Уфимской губернии за 1899 г., номеры 90-176, страница 170, Биштеке. К 1-ой мечети.***

***№6. Миңлегәли. Аугусның 10-чи көнөндә. Биштәкәдә туган. Атасы мишәрдән башҡорт Миңгәжәлдин Фәхрилислам углы. Анасы Бибитайфа типтәрдән башҡорт Мөхәмәдиәр ҡызы».***

Күрәһегеҙ, башҡорт Салауат Юлаевтың нәҫелдәре, билдәле тарихи сәбәптәр арҡаһында, тәүҙә — башҡорттан мишәр, шунан һуң мишәрҙән башҡорт, ә Советтар осоронда татар яҙылып йөрөй...

Инде әле күрһәтелгән Салауат Юлаев нәҫеленең 1859 йылға тиклемге киңәйтелгән шәжәрәһен дә бирәйек, шуның буйынса уның бөгөнгө тоҡомдары ла үҙ-үҙҙәрен асыҡлар:

Салауат Юлаев (1752, йәки 1754, йәки 1746 -- 1800). — Шатморат-Мөрсәлим (1765-1848). Шатмораттың биш улы булған:

1. Рәхмәтулла Шатморат улы (1777 й.т., 1859 йылда уға 82 йәш). Рәхмәтулланың улдары:

А) Ғәлиулла (1805 й.т.). Ғәлиулланың улдары: Ғәҙелша (1831 й.т.), Ғиззәтулла (1838 й.т.), Камалитдин (1840 й.т.), Йәләлитдин (1848 й.т.), Яҡуп (1849 й.т.);

Б) Ғәтиәтулла (1813 й.т.);

В) Хәмиҙулла (1814-1852);

Г) Әхмәтғәли (1819-1840);

Д) Абдулсалих (1822 й.т.);

Е) Мөхәммәтрәхим (1822 й.т.). Мөхәммәтрәхимдең улы Мөхәммәткәрим (1842-1852);

Ж) Абдулғәни (1824 й.т.). Әбдулғәниҙең улы Ғәлимөхәммәт (1856 й.т.);

2. Хисамитдин Шатморат улы (1798 й.т.). Хисамитдиндең улдары:

А) Бәҙиғитдин (1820 й.т.). Бәҙиғитдиндең улдары: Фәттәхитдин (1843 й.т.), Кашафитдин (1845 й.т.), Ғәйнитдин (1859 й.т.);

Б) Хәйритдин (1828 й.т.);

В) Хафизитдин (1850 й.т.);

Г) Садритдин (1856 й.т.);

3. Фәсхитдин Шатморат улы (1802 й.т.). Фәсхитдиндең улдары:

А) Фәхрелислам (1829 й.т.). Фәхрилисламдың улдары: Йәләлитдин (1854 й.т.), Нурғәли (1857 й.т.), Миңғазитдин (1866 й.т.). Миңғазитдиндең улы ***Миңлегәли Шайморатов генерал*** (1899-1943);

4. Әбделғәлим Шатморат улы (1834 й.т.);

5. Зәйнитдин Шатморат улы (1793 й.т.). Зәйнитдиндең улдары:

А) Ғималитдин (1818 й.т.). Ғималитдиндең улы Абдрахман (1852 й.т.);

Б) Кашафитдин (1822 й.т.). Кашафитдиндең улдары: Мөхәммәтҡәнәфиә (1840-1853), Мортаза (1855 й.т.), Мөстәҡим (1857 й.т.)...

Был мәғлүмәттәр заманында М.М. Шайморатовтың 100 йыллыҡ юбилей байрамын әҙерләүселәргә, тыуыу датаһын дөрөҫләһендәр өсөн, 1999 йылдың 19 апрелендә яҙып бирелде, тик эҙемтәһеҙ ҡалды. Башҡорт телле матбуғатта ҡыҫҡараҡ варианты беренсе тапҡыр баҫылды «Аҙна" гәзитендә.

## Артабанғы эҙләнеүҙәргә ерлек

Был бүлектә эҙәрмәндәр ҡарамағына авторҙың ике тоҫмаллауы бирелә (сәмлейәндәр архивтарҙа төбөнә туҙ ҡуйһын өсөн).

1. Салауат Юлаевтың ҡырғынсылар әсир итеп алып киткән икенсе улы ***Аҡбулаттың*** эҙҙәренә төшөү мөмкинлеге бар: ул Аҡбулат хәҙерге билдәле ҡурайсы ***Ишморат Илбәковтың*** бабаһы булыуы бик ихтимал. Сөнки уларҙың быуындан-быуынға бирелә килгән ғаилә легендаһы буйынса, хәҙерге Хәйбулла районына ҡараған үҫәргән башҡорттарының батша хәҙрәттәренә итәғәтле (ихтилалда ҡатнашмаған) бер старшинаһына, ихтилал баҫтырылғас, Ырымбур гөбөрнәтере бер әсир малайҙы аҫыраулыҡҡа тапшыра; артабан уны бөтә ***ил-йорт бағып*** үҫтергәнлектән, фамилияһын ***Илбаҡов*** тип яҙҙырталар, исемен ***Мырҙа*** тип атайҙар (үҫәргән башҡорттарында мырҙа -- "бей [кенәз] улы" мәғәнәһендә: тимәк, яу башлығы Салауат бей-кенәздең улы). Шул Мырҙа нәҫеленең шәжәрәһе ҡурайсы И. Илбәковта бар.




2. Икенсе тоҫмалдың төп-ерлеге (сығанаҡтар):

а) Башкирские шежере (филологические исследования и публикации), Уфа -- 1985, 69 -- 70-енсе биттәр. Юлайҙың Салауаттан өлкәнерәк тағы ике улы күрһәтелә: Раҡай, ***Сөләймән***.

б) "Ағиҙел" журналы, 1978, №6, 120 -- 122-нсе биттәр, "Туғыҙ ауыл Тырнаҡлы" аймағы шәжәрәһе. Тырнаҡлы аймағына ингән ауылдар: Лағыр (боронғо исеме Васҡын), Шәрәк, Иҫке Мөхәммәт, Ибрай (Ураҙгилде), Яңы Мөхәммәт (Торамороно), Яуын, Юныс (Әпкәҙир), Сәғир (Сутыш), ***Әнйәк*** (Йәнгилде).

3. Южноуральский археографический сборник, выпуск 2. Уфа -- 1976, 287-нсе бит. 1841 йылдың 18 октябрендә урыҫ телендә атҡарылған документтағы №11-енсе Башҡорт кантоны ауылдарының исемлегендә № 16 булып теркәлгән аҫаба башҡорт ауылы: ***Амекеева,*** м.п. число 13, женского 20; Булярской волости, землею владение имеют собственную, башкирцы, живут постоянно в своих селениях.

4. Населенные пункты Башкортостана, часть I. Уфимская губерния, 1877, 290-ынсы бит, №1875. ***Анякова***, деревня при речке бызимянной, число жителей м.п. 278, ж.п. 254, ***тептяры.*** Шул уҡ ауыл кешеләре әүәлерәк 1859 йылғы ревизия (дело 753, лист 555) буйынса ***башҡорттар, типтәрҙәр*** тип теркәлгән.

Шул уҡ китаптағы 303-өнсө бит, №2015. ***Анякова,*** деревня при речке Каширке, число жителей м.п. 90, ж.п. 95. Баяғы уҡ ревизия делоһы, листы буйынса ***типтәрҙәр*** йәшәй (аҫаба башҡорттар күрһәтелмәй).

5. Уралдағы Тырнаҡлы аймағы башҡорттарының (шул иҫәптән Юлай Аҙналиндың) ырыу тамғаһы булып тора бына был саталы **V** (һәнәк) – Минтимер Шәймиев шәжәрәһендә лә шулай.

Ошоларға таянып тоҫмаллайыҡ: Юлай улы ***Сөләймән*** тәүҙә үҙҙәренең аймағындағы ***Әнйәк*** ауылында йәшәгән һәм ҡасандыр, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында (ә бәлки, 1735 йылғы Аҡай -- Килмәк-абыз яуын баҫтырыуҙа ҡатнашҡандыр ҙа үлтерелгән баш күтәреүселәрҙең ерҙәренән өлөш алғандыр батшанан (шундай тәртип хөкөм һөргән). Йәки үҙе 1840 йылғы Ҡараһаҡал яуында болғанып, яу баҫтырылғас Миңзәлә яғына ҡасҡандыр? Сөнки ***Сөләймән*** тигән башҡорт 1740 йылдың февраль айында шул уҡ Тырнаҡлы аймағы Муса ауылында ғәскәрләнеп торған Ҡараһаҡалдың яҡын яраны итеп күрһәтелә (Материалы по истории Башкирской АССР, ч. I. М. -- Л., 1936). Һәр хәлдә ғәмәл тоҫмалға тап килә: башҡорт Юлай улы Сөләймән Миңзәләнән Бөрө ҡалаһына табан 37-нсе саҡрымда исемһеҙ йылға буйына барып төйәкләнә һәм шул яңы ауылға Уралдағы йәшәп киткән ауылының исемен ***(Әнйәк,*** урыҫса яҙыуҙарҙа ***Аняк)*** килтереп ҡуша һәм ул ауыл тора-бара һәр төрлө (башҡорт, татар, мишәр) типтәрҙәр иҫәбенән ҙурая ла, шулар өҫтөнлөк алып, ауылдағыларҙың бөтәһе лә рәсми ҡағыҙҙа типтәргә әүерелә. Бер килке халыҡ ауылдан бүленеп сығып, Каширка йылғаһы буйына ерегә, был яңы ауыл да ***Әнйәк*** тип атала (бәлки, Яңы Әнйәк йөрөтөлгәндер?)...

Ошо урында тоҫмалыбыҙҙы саҡ ҡына үҙгәртәбеҙ, сөнки Ҡазан авторҙарының тикшеренеүендә: "Тарихчылар Әнәк авылына XVIII гасыр башында нигез салынуын әйтәләр. Таһир Кәримов, мәсәлән, 1747 елда авылда яшәүчеләр исемлегендә Исай ***Әнәков*** дигән кешенең булуын яза. 1762 елда, өченче ревизия чорында ул инде вафат булган. Димәк, ***Әнәк*** карттан башланган бу авыл" ("Ғасырлар авазы" журналы 2002 ¾), тип әйтелә, -- шулайҙыр. Инде килеп сыға: Уралдағы ***Әнйәк*** ауылын нигеҙләгән ***Әнйәк*** уҙаман (йәки уның улы Усай Әнйәков) яҙмыш елдәре тарафынан Миңзәлә өйәҙенә илтеп ташланып, яңы ерҙә яңы ***Әнйәк*** ауылын башлап ебәргән, ә Юлай улы Сөләймән тигән бөркөтөбөҙ ана шул әҙер ояға килеп ҡунған…

Ауыл халҡының милләт күрһәткесе, Рәсәйҙәге ҡәҙимгесә, башҡорттан татар яһау йүнәлешендә үҙгәргән: 1841 йылғы хисапнамәлә ул тоташ башҡорт булһа, 1859 йылғы ревизияла башҡорттар, типтәрҙәр тип күрһәтелә, ә 1877 йылғы хисапнамәлә иһә башкөлләй типтәргә әйләндерелеп, тоталитар совет хакимияты осоронда бөтә Миңзәлә өйәҙе халҡы татар итеп яҙыла...

Төптәнерәк тикшереү талап ителә: өҫтәрәк шәжәрәләр бүлегендә телгә алынған Ҡамышлы ауылы уҙаманы ***Баязит*** Киләйев (1795 йыл март ревизияһы буйынса 1744 йылда тыуған) татар ғалимы (Ҡазан) Таһир Тимерғазим улы Кәримов төҙөгән шәжәрәләге ***Баязит*** түгелме икән? Асылда ул, моғайын, дәүләт енәйәтселәре (ворҙар) итеп ләғнәтләнмеш Юлай фамилияһынан (ғәҙәттә атай, ҡартатай, бабай исемдәрен фамилия итеп йөрөткәндәр) икәнлеген йәшереп,

“Юлаев”ты яҡын мәғәнәүи яңғырашлы “Киләйев”кә үҙгәртеүе ихтимал. Йәнә килеп, ғүмерлеккә һөрөлгән Салауаттың бәхетһеҙ ҡатыны Гөлбәзерҙе ҡатын итеп алыуында ла (башҡорт йолаһы) ғилла бар. Әгәр шулай икән, беҙҙең тоҫмал баяғы Т.Т. Кәримов төҙөгән “Минтимер Шәймиев шәжәрәсе”нә бер кес кенә төҙәтеү аша тап килә, ә төҙәтеү бына нимәнән ғибәрәт: әйтелгән шәжәрәлә Юлай -- Минтимер араһы (8 быуын) 200 йыл тәшкил итә; ҡабул ҡылынған тәртип буйынса һәр быуынға 25 йыл һалһаҡ, был дөрөҫ (25х8=200). Әммә тәүге икенсе һәм өсөнсө быуындың урындары алмашынғандыр кеүек (шәжәрәләрҙә быныдай хәл булыусан); әгәр уларҙы тейешле үҙ урындарына ҡуйһаҡ, барыһы ла ҡалыпҡа ултыра, йәғни: Аҙналин Юлай (1722 й. тыуған) -- Баязит (1744 й. тыуған) -- Сөләймән (1770 й. тыуған) һәм артабан Т.Т. Кәримов төҙөгән теҙем ялғанып дауамлана: башҡорт Аҙналы улы Юлай -- Баязит -- Сөләймән -- Шаһиморат -- Шәмсимөхәммәт -- Вәлимөхәммәт -- Шәймөхәммәт -- Шәйшәрип -- Минтимер... Ә шулай ҙа был тәңгәлдә ҡайһы бер шәхестәрҙең шәжәрә быуындарындағы урындары менән бергә йәштәре лә, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре лә буталыуы, мәҫәлән, Сөләймән тигән уҙаманыбыҙ, Юлайҙың улы булмайынса, ә бер туған ағаһы булыуы ла ихтимал.

Башҡорттарҙан татар яһау осоронда Миңзәлә өйәҙе башҡорттарының ысын милләтен дә, ырыуын да, ырыу тамғаларын да онотторторҡандар, әммә-ләкин Әнйәк ауылындағы Юлай-баба нәҫеле кешеләре үҙҙәренең Уралдағы Тырнаҡлы аймағы башҡорттарының саталы **V** (һәнәк) тамғаһын, татар тарихсылары таныһанса, быуындан-быуынға юғалтмай һаҡлап килгән.

6.09.2003.

# БӨЙӨК ИНСАН ШӘЖӘРӘҺЕ

Гәзитебеҙҙең 2013 йыл 28 март һанында сыҡҡан “Шәхес һаман уйланырға мәжбүр итә” тигән мәҡәләне уҡыусылар, моғайын, мәшһүр Зәйнулла Рәсүлевтең шәжәрәһен тулыраҡ белеү йәһәтенән дә уйланмай ҡалмағандыр, сөнки унда “Шәрип ауылы кешеһе Рәсүл”дән генә башлап 4-5 быуын ғына теркәлгән.

Хәтеремдә, ҡәҙимгесә күпте белергә теләгән үҫмер йылдарымда әнейем (әсәйем) Бибисадиҡаның шул атаҡлы Зәйнулла ишанды үҙе күреп белеүен ишеткәс: “Милләте кем ине?” – тип төпсөндөм. “Кем булһын, уттай янып торған ҡара күҙле башҡорт – үҙебеҙҙең үҫәргән кешеһе ине”, -- тип яуапланы. Шунан һуң күп йылдар үтеп, Үҫәргәндең сал Йәнсура (Бәкәтәр) ауылында һаҡланған “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе” ҡулыма тарығас, бабабыҙҙың ысынлап та Туҡсабанан дауамланмыш шәжәрә бауына юлыҡтым:

1. Туҡсаба. – 2. Мөйтән-бей. – 3. Шаҡмал-бей Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-бей Шаҡмал улы. – 5. Һеркә-бей Бүрекәй улы. -- 6. Манғут-бей Һеркә улы. – 7. Урал-бей Манғут улы. 8. Ята (Буят)-бей Урал улы. 9. Иңкеш Ята улы. – 10. Туҡай Иңкеш улы. – 11. Мораҡкабул Туҡай улы. – 12. Солтанай Мораҡкабул улы. – 13. Ғашиҡ Солтанай улы. – 14. Байрамғол Ғашиҡ улы. – 15. Муса Байрамғол улы. – 16. **Рәсүл** Муса улы. – 17. Хәбибулла Рәсүл улы. – 18. **Зәйнулла** Хәбибулла улы (ишан). – 19. Ғабдрахман Зәйнулла улы (мөфтөй). – 20. Ғәбделрәүеф Ғабдрахман улы…

Әлеге мәҡәләлә ике һүҙ араһында ғына “Зәйнулланың туған **ҡыуаҡан** ырыуы” тигән мәғлүмәт бар. Бынıһын автор Ҡыуаҡан ырыуы шәжәрәһе менән дә дәлилләһә, уғата нығыраҡ уйланырға булыр ине.

31.03.2013.

# ӘҘӘБИӘТЕБЕҘ ТАРИХЫНАН...

**ЦГИА РБ – БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ ҮҘӘК АРХИВЫ.**

1. Ф. Р-933, оп. 1, д. 75, л. 32.

**Постановление Всебашкирского ЦИК-а Советов Рабочих, Солдатских и Крестьянских депутатов об учреждении Общества изучения быта, культуры и истории Башкирии.**

...Действительными членами общества БашЦИК утверждает:

1. Сулейманова Габдуллу – известный математик.
2. Фахретдинова Ризаитдина – ученый историк.
3. Бурангулова – Народный поэт.
4. Габитова Хабибуллу – Народный поэт.
5. Фахретдинова Габдурахмана – журналист-публицист.
6. Сагадеева Гидиятуллу -- .
7. Мрясова Сагита – педагог.

Членов общества БашЦИК обеспечивает академическим пайком и обеспечением вообще сообразно с обеспечением в РСФСР.

Обществу предлагается срочно войти в связь с обществом по изучению Востока, утвержденным ВЦИК, на предмет установления постоянной связи и получения средств для научных изысканий.

Председатель БЦИК Муртазин.

Секретарь БЦИК Терегулов.

16 февраля 1922 года, г. Стерлитамак.

Күренеүенсә, Мөхәммәтша Буранғоловҡа һәм Хәбибулла Ғәбитовҡа халыҡ үҙе “Халыҡ шағиры” тигән юғары исем биргән һәм был дәүләтебеҙҙең юғары органы тарафынан указһыҙ-ниһеҙ танылған (М. Ғафури, моғайын һ.б.-лар сафында йөрөтөлгән). Сталин режимы хөкөм һөргәндә икеһенең дә яҙмышы ифрат аяныс: “башҡорт милләтсеһе” тип эҙәрләүҙәргә түҙә алмай, халыҡ шағиры Х. Ғәбитов үҙенә ҡул һала, ә халыҡ шағиры һәм халыҡ сәсәне М. Буранғолов дүрт тапҡыр төрмәгә ултыртылып, ғүмеренең ахырынаса эҙәрлекләнә…

2. Ф. Р-394, оп. 1, д. 219, л. 130.

**Постановление Президиума Всебашкирского Центр. Исп. Комитета Советов Рабочих, Крестьянских и Красноармейских Депутатов.**

В ознаменование двадцатилетней литер. деятельности товарища Мазита Гафури, Президиум Всебашкирского Центр. Исп. Комитета постановляет:

1. Присвоить товарищу Гафури звание Народного поэта Башкирской Соц. Сов. Республики…

Председатель Всебашкирского ЦИК-а

Секретарь “------------“

9-го мая 1923 г., г. Уфа.

Иғтибар: М. Буранғолов менән Х. Ғәбитов бер ниндәй ҙә рәсми указһыҙ халҡыбыҙҙың Халыҡ шағиры булһа, М. Ғафури иһә ғәмәлдә “Всебашкирский ЦИК”-тың указлыһы булып сыға…

## Әҙиптәребеҙ үҙҙәренең милли сығышын билдәләй.

**“Белем” журналының 1926 йыл 11-12-се һандары, 49-сы бит.**

Яңы әҙәби журнал “Сәсән”.

Түбәндәге иптәштәр яҙышырға саҡырылалар.

**Башҡорттарҙан:**

Ғ. Амантай

М. Агиш

Хәбир Әбдрәшитов

Сәғит Агиш

А. Абдуллин

Бикбаев

Т. Байыш

Мохтар Байышов

Ә. Биишев

Бәшир Бикбулатов

Ғ. Вилданов

Ғәббәс Дәүләтшин

Булат Ишемғолов

Г. Ибраһим-Ҡыпсаҡ

Сәғит Мираҫ

Нури Таһиров

Төхфәт Йәнәби

Исхаҡ Зәйни

Мөхәмәдйәров

Хажи Әмиров

Ш. Типеев

Г. Илбай

Рәшит Мағазов һ.б.

**Татарҙарҙан:**

Мәжит Ғафури

Ҡасим Ғирфанов

Ғариф Ғүмәр

Ғ. Ғәббәсов
Нәҡи Исәнбәт
Сәйфи Ҡудаш
Ченәкәй
Ғазим Ҡасимов
Һади Сәғди
Шәриф Сөнчәләй
Муса Йосопов
Әхмәт Хәбиби
Әхнәф Танғатаров
Ғайнан Хәйри
Вәли Мортазин
Сиражетдинов һ.б.

Күренеүенсә, Башҡортостандағы татар әҙиптәренең исемлеге Мәжит Ғафуриҙан башлана һәм уның татар әҙәбиәте классигы икәнлеге лә бәхәсһеҙ. Ул ижадының башында уҡ үҙен "Ғәбделмәжид ибне татар" (Ғәбделмәжид татар улы) тип раҫлаған һәм ғүмере буйына шуға тоғро ҡалып, әҫәрҙәренең береһендә лә башҡортлоғон танымаған. Шағирҙың изге йөрәк ҡушыуын ихтирам итеп, уның яҡты исемен һәм һәйкәлен Өфө татар "Нур" театрына күсерһәк һәм шул айҡанлы театрға академия статусы ла беркетһәк, ә башҡорт академия драма театрына лайыҡлы Мөхәммәтша Буранғолов исемен һәм һәйкәлен бирһәк, ғәҙеллек тантана итер ҙә сауаплы булыр инек.

## ЦГАОО РБ (бывший партархив).

Ф. 122, оп. 26, д. 450. Список 1946 года писателей, докладные. Л. 17.
Тов. Шафикову. Список членов и кандидатов ССП Башкирии.
**...Из них татары:**
1. Кудашев С.Ф.
9.Максудов С.М.
10. Гумеров Г.М.
11. Шамуков Г.Р.
12. Исмагилов С.А.
14. Мухтаров Х.Б.
15. Давлетшин Ф.
16. Усманов А.Н.
17. Кудашев А.Г.
18. Валеев А.М.
19. Чанышев А.И.
22. Каримов М.С.
26. Ибрагимов Х.К.
29. Каримов Х.К.

Был мәғлүмәттәр ВКП(б)-ның Башҡорт өлкә комитеты секретарына бирелеүен һәм төгәллекле булыуын иҫтә тотайыҡ.

11.01.2014.

# ШАҒИРҘЫҢ ШӘЖӘРӘҺЕ

Ижады менән бер ниндәй ҙә рәсми «указ»һыҙ-ниһеҙ, мәртәбәле башҡорт халыҡ шағиры булып танылған һәм халҡының мәңгелек һөйөүен ҡаҙанған бөйөк Шәйхзада Бабичтан ныҡ айырмалы булараҡ, органдарҙың яҙма указы ярҙамында «Башҡорт АССР-ының халыҡ шағиры» һәм «башҡорт совет әҙәбиәтенең классигы» ителгән урта ҡуллы ҡәләм эйәһе Мәжит Ғафуриҙы «башҡорттоҡо түгел, ә татар әҙәбиәте классигы!» тип Ҡазан һәм Өфө ғалимдары араһында зыҡ-ҡубышыуҙар булды… Был тәңгәлдә, йәне һөйгән – йылан ите ейгән (ашаған), тигән мәҡәлгә ярашлы, хаҡлыҡ Ҡазандыҡыларҙа инелер, сөнки йәне-тәне менән башҡортто үҙһенмәгән, ихласйәндән үҙен татар һанаған башҡорт балаһы кем булһын?!. Ә үҙенә был мәсьәлә көн кеүек асыҡ булғандыр:

Русиялы бер төрөктөр асыл затым,
Ғабделла ибне татар мәшһүр атым.
(«Йәш ғүмерем», 1905.)

Аңлатма: оҙон исем «Ғабделлә-Мәжид» шиғыр ҡалыбына һыймағанлыҡтан, тәүге яртыһын алған. Ҡулсыр егет «татар улы Ғабделлә» тип бер үҙен генә түгел, ә бөтә башҡорт ата-бабаларын татар ҡәүеменә теркәгән һәм, ҡәләм эйәһе булараҡ, әллә ҡасан уҡ ҡалыплашҡан башҡорт яҙма әҙәби телен һанламай, ижадында башҡортса бер һөйләм дә, бер генә һүҙ ҙә яҙмаған, һис бер ҡасан үҙен башҡорт тип танымаған. Киреһенсә, уны яҡшы күреп белгән өлкән быуын ҡәләмдәштәр беҙгә хәтерләүенсә, ғүмере буйына башҡортто, башҡорт автономияһын үҙһенмәгән. Әллә шуғамы инде: «Ысын татар – башҡорттоң яҡын туғаны, ә башҡорттан аҙған татар – башҡорттоң яһил дошманы», — тирҙәр ине…

Алдыбыҙҙа билдәле башҡорт ырыуы ҡомартҡыһы (текстың М. Ғафуриға тиклемгеһен күсерәм; ҡайһы бер исемдәрҙең, һүҙҙәрҙең күсереп яҙылышында хаталаныуым ихтимал).



**Шағир Мәжит Ғафури шәжәрәһе.**

Был шәжәрәне күсереп яҙҙым Эстәрлетамаҡ кантоны Кәлсер-Табын вулысында яҫауыл Ғариф Үтәғолов яҙған төрки ҡағыҙлардан. Күсергәнде Латиф 1911 йылда тапшырған. Күсереп яҙҙым 1947 йыл 29 ғинуар, Сәид.

Майҡы-би – Солтан-би – Тамхәсән-би – Арслан-би – Йәләлбирҙе-би – Хоҙайбирҙе-би – Шаһид-би – Дәүләткирәй-би – Байтирәк – Аҡбирҙе – Аҡса-би – Ҡасан-би – Байшәкүр – Жанбирҙе – Татарғол – Ғабдулхалиҡ – Ғабдулханнан – Ғабделхаҡ-хан – Ғабделғәни – Нурғәни – Ғәбделмәжид шағир – Әнүәр…

Шәжәрәһен инҡар итеп әҙәм үҙен башҡа ҡәүем улы һанай икән – быға ғына хоҡуҡлылыр, моғайын. Ә беҙҙәр, тим, шағир рухын, әрүәхен һөймәгәненә һөйкәндертеп рәнйетеүҙән арынһаҡ, уның татар әҙәбиәте классигы икәнлеген тулыһынса танып ихтирамлаһаҡ, һауаплы булыр инек...

20.03.2014.

# ХАЛЫҠ ШАҒИРЫНЫҢ ШӘЖӘРӘҺЕНӘН

Башҡортостан Республикаһының Шишмә районы Келәш ауылында дәүләтебеҙ тарафынан халыҡ шағиры Мостай Кәримдең егерме гектар майҙанды биләйәсәк йорт-музейын төҙөргә ҡарар ҡылынғас, шул тиклем дә һоҡланып, буғай, уны А.С. Пушкин, М.Ю. Лермонтовтарҙыҡына тиңләүселәр ҙә булды, бирһен Хоҙай!

Шундайын да изге урынға, моғайын, төрлө яҡтан мосафирҙар, туристар ҙа ағылыр һәм, әлбиттә, уларҙың төрлө һорауҙарына (шул иҫәптән нәҫел-нәсәбенә, шәжәрәһенә ҡағылышлы) ғилми яҡтан теүәллекле аңлатма бирергә кәрәгер. Мәҫәлән, тыуған ауылының халҡы саф татар милләтенән, ә һеҙ уны башҡорт тип әйтәһегеҙ -- әллә ата-бабалары ситтән күсеп килгәнме, ҡасан, тип төпсөнөүҙәре бик ихтимал (шундайҙар бит әләгә көнгәсә хатта Келәштә лә бар). Был иһә

арҙаҡлыбыҙ хаҡында төплө ғилми биографияның булмауына бәйле. Дөрөҫ, мәрхүм шағир үҙе бер саҡ күпте белергә тырышыусан ауылдашына "Ағиҙел" журналында яуаплап, Ғайса Хөсәйенев минең ошо Келәштәге ғәзиз бабаларымдың "башҡорт типтәре" икәнлеген архивтан юллап бирҙе, тигәнерәк мәғәнәлә яҙғайны ла ул, ләкин ғилми яҡтан нигеҙләмәне, кәрәк тә һанамағандыр, сөнки ҡара эфиоп тоҡомло Пушкин да, шотланд тоҡомло Лермонтов та нәҡ урыҫтың бөйөк шағирҙары бит.

Үҙебеҙҙең төбәктә лә оҡшаш хәлдәр булғылай: билдәле архив эшмәкәре Дамир Ҡускилдин шул уҡ "Ағиҙел"дә мәҡәлә яҙып, Татарстан Республикаһының халыҡ шағиры Роберт Миңнуллиндың бер юлы атаһы һәм әсәһе яғынан да һигеҙ быуын бабалары аҫаба башҡорт икәнлеген таныҡтайны, ләкин ундағы һуңғы быуын уҙаманыбыҙ үҙен татар милләтле таный ҙаһа! Йәнә килеп мәсьәләнең икенсе яғы ла бар. Әйтәйек, халыҡ шағиры Мәжит Ғафури ғүмере буйына тормошта ла, шиғырҙарында ла үҙен татар һанаған ("Русиялы бер төрөктөр асыл затым,/Ғәбделмәжид ибне татар мәшһүр атым". – Ҡарағыҙ: Мәжит Ғафури. Әҫәрҙәр дүрт томда. I том, Өфө -- 1978; 66,88,93,114,213,266,280-се биттәр), тәғәйен башҡортҡа бағышлап бер юл шиғыр ҙа яҙмаған, әммә күркәм баш ҡалабыҙҙағы йорт-музейында ла, башҡа урындарҙа ла ул, сығышына (1911 йылда күсереп алынған боронғо шәжәрәгә) таянып, башҡорт тип йөрөтөлә. Тикшеренеүселәргә архивтарҙан ҡысҡырып ятҡан Мостай Кәрим шәжәрәһе иһә уның бабаларын "башҡорт типтәре" тип билдәләргә һис кенә лә юл ҡуймай, сөнки улар, тарихи документтарҙан асыҡ күренеүенсә, татар милләтле типтәрҙәр (типтәр ҡатламына теркәлеүсе татарҙар).

1833 йылдың 26 апрелендә Ырымбур граждан гөбөрнәтере Н.В. Жуковскийға Келәш ауылынан атҡарылмаш коллектив хат буйынса, 1737 йылдың 15 майында Өфө өйәҙе Себешле (Чебишинский) ылыҫы (волосы) аҫаба башҡорттары бер төркөм татарҙарға (улар иһә документҡа ҡул ҡуйыусылар тарафынан "предки наши" тип атала) ер һатҡан, килешеү ҡағыҙына йәмәғәт исеменән "татарин Клящ Тулебахтин" ҡул ҡуйған (шунан килә Келәш ауылының исеме). Шул бер төркөм ("коренной") татарҙарҙың туранан-тура тоҡомдарының ҡайһы берҙәренең исемдәре улар ҡул ҡуйған әлеге документта ике тапҡыр теркәлгән: Ҡудаш Бикташев (халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаштың бабаһы), Абдулкәрим Шәрипов (Мостай Кәримдең бабаһы), Сөбхан Сабаев, Абдулғәлләм Абдулваһапов (И-1, оп. 1, д. 1239. л. 1-2, БР Дәүләт Үҙәк тарих архивы).

Инде ошо Келәш ауылы татар типтәрҙәренең "ревизские сказки"ҙарына ла таянып, халыҡ шағирының шәжәрәһен барлайыҡ:

И-138, д. 626, л. 1454 оборот. 1850 йылдың 8 сентябре, типтәрҙәр.

4. **Абдулкәрим Шәрипов** үткән ревизияла 69 йәштә булған, 1839 й. вафат.

Абдулкәримдең улдары:

2. **Мөхәмәҙей** 13 йәштә булған, хәҙер 29 йәштә.

Мөхәмәҙейҙең улдары:

1. **Мөхәмәтсафа** яңы тыуған булған, хәҙер 10 йәштә.

Д. 728, л. 842. 1859 йылдың 15 авгусы, типтәрҙәр.

4.5. Мөхәмәҙей Абдулкәримовтың улдары:

**Мөхәмәтсафа** 10 йәштә булған, хәҙер 19 йәштә.

**Тимәк, халыҡ шағирына бәйле быуындар бауы:**

1. Шәрип (?)
2. Абдулкәрим (1781 --.1839)
3. Мөхәмәҙей (1821)
4. Мөхәмәтсафа (1840)
5. Мостафа (Мостай Кәрим 1919 – 2005).

Халыҡ шағиры үҙенең милләте тураһында Ғайса Хөсәйеновтың "юллап биреүе"нә тиклем белмәгән, тип уйлаһаҡ, мәрәкә булыр ине. Ул замандарҙа ВКП(б) һәм КГБ алдында һис кем дә ялған мәғлүмәт бирергә баҙнат итмәгәнлеген иҫтә тотоп, партия өлкә комитетына 1946 йылда тапшырылған 33 (утыҙ өс) яҙыусы исемлегенә мөрәжәғәт ҡылайыҡ:

### Список членов и кандидатов ССП Башкирии

1. Кудашев С.Ф. – середнык, *татарин*, 1894 г.р. чл. ВКП(б), сред. образование.

………..

22. Каримов М.С. – крест. середняк, *татарин*, 1919 г.р., чл. ВЛКСМ, высш. обр. (ЦГАОО РБ, ф. 122, оп. 26, д. 450, л. 17).

Бының менән, ихтимал, ҡайһы бер рыяларҙы төҙәткәнмендер. Һөргәнемдә ярҙыртһам, минекен дә ямарҙар.

03.05.2013

## СВЕДЕНИЯ О РОДЕ ТЕВКЕЛЕВЫХ

По крепостным актам и другим официальным бумагам а равно и по преданию сохраняющемуся в роде господ Тевкелевых значится: 1-е в родословной представленной в 1789 году в Дворянское собрание учрежденное при Уфимском наместничестве от Госпожи Секунд майорши Дарьи Алексеевой дочери по муже Тевкеловой показано: первый известный родоначальник рода Тевкелевых был Уразлей, неизвестно когда и из какой орды поступивший в Росское подданство; ибо бумаги относящиеся до древнего происхождения рода Мурз Тевкелевых потеряны в 1773 и 1774 годах при разграблении их домов во время Пугачевского бунта. Сын Уразлея был Ураз Мамет: от него произошел Давлет Мамет; у Давлет Мамета дети: Мамеш, Булуш, Сафер, Мамет. Мамешевы дети: сын Кутлу Махаммет, по Русски Алексей Иванович Тевкелев, Генерал Маиор, дочери: Урая выдана за Бектира Сеита Шакулова, Зулейха выдана за Князя Бактимера Максютова. У Булуша сын Мустафа; у Сафера сын Абдулла крестился. Алексеевы потомки: сын Осип, Юсуп, Секунд Майор муж Дарьи Алексеевой; внук Юсупов сын Петр. 2-е по крепостным актам сохранившимся еще в роде Тевкелевых

первым значится Мурза Девлет Мамет Уразмаметев сын Тевкелев, бывший Ярославским кормовым поместным иноземцом, и имевший поместье во Владимирском уезде; 2-й после Девлет Мамета сын его, города Касимова Мурза Мамеш Девлет Маметев Тевкелев, имевший поместья в Касимовском, Владимирском и Керинском уездах, бывшие прежде за дедом и дядей его, а кто именно были сии последние из актов не видно; 3-й сын Мамеша Кутлу Мамет Мамешев Тевкелев, бывший Генерал майором и именовавшийся по-русски Алексей Иванов [20] Тевкелев; 4-й Рамазан Абдрахманов Тевкелев двоюродный дядя Генерал майора Тевкелева, Посольского приказа переводчик; 5-й сын Ромазана Муртаза Рамазанов Тевкелев, бывший Иностранной коллегии переводчик, Коллежский асссссор, он в указе иностранной Коллегии писанном 28 Сентября 1754 года назван братом Генерал Майору Тевкелеву бывшему тогда еще Бригадиром; 6-й сын Муртазы Ахмет крестившийся и наименованный Михаилом Александровым Тевкелевым, прапорщик Бутырского полка. 7-й Сын Генерал Майора Тевкелева Юсуп Кутлу Маметов Тевкелев, именовавшийся по-русски Осипом Алексеевым, он при отставке пожалован Секунд-Майором, и в 1773 году во время Пугачевского бунта убит, будучи в командировке против мятежников, как значится в свидетельстве, выданном (за подписанием благородных дворян и штаб и обер-офицеров девяти персон) сыну его Ефрейт-капралу Шигин Гарею, именовавшемуся по-русски Петром Осиповым Тевкелевым. В прошении поданном в 1789 году в учрежденное при Уфимском намесничестве для составления дворянской родословной книги собрание от вдовы Секунд-майорши Дарьи Алексеевой Тевкелевой показано: за сыном ее Лейб гвардии конного полку Гефрейт капралом Петром Осиповым Тевкелевым по последней ревизии наследственных после отца его Секунд-маиора Осипа Тевкелева во владении обоего пола душ состоит в наместничествах:

в Уфимском мужеска 437, женска 460; в Вятском мужеска 552, женска 578; в Рязанском мужеска 39, женска 44 души.

О службе Генерал Майора Алексея Иванова Тевкелева при помянутом прошении его невестки Дарьи Алексеевой приложены: 1-е патент, за собственно ручным подписанием Императрицы Анны Иоановны, о пожаловании его Тевкелева в полковники в 1734 году Маия в 8 день, за оказанную им при колегии иностранных дел переводчиком службу; и 2-е указ из Правительствующего Сената от 4 Сентября 1755 года о пожаловании его из бригадиров в Генерал Майоры. В сем указе написано: "В Правительствующей Сенат в представлениях Действительного Тайного Советника и Оренбургского Губернатора Неплюева обьявлено, что многие из Башкирцов, учиня злодейство бежали в Киргиз Кайсацкую Орду; и хотя о выдаче их туда писано, токмо и поныне их не возвращено; и он Действительный Тайный Советник в том надежды мало полагает. Но Правительствующим Сенатом, по объявлению Канцлера Действительного Тайного Советника и кавалера Графа Алексея Петровича Бестужева Рюмина, Определено: В рассуждении настоящей к тому надобности а вашей способности, о всемилостивейшем пожаловании вас [21] чином, и об отправлении ныне в Киргиз-Кайсацкую Орду, для возвращения беглых

Башкирцов, из Иностранной Коллегии с надлежащею инструкциею представить и представленно было Ее Императорскому Величеству от Сената всеподаннейшим докладом, которой сего Сентабря 3 дня от Ее Императорского Величества собственно ручным Ее Величества подписанием всемилостивейше и конфирмован. Того ради, во исполнение того Ее Императорского Величества указа, Правительствующий Сенат приказали: отправить вас в Киргиз-Кайсацкую Орду, для возвращения беглых Башкирцов, Кол-легии иностранных дел с надлежащею инструкциею; а о пожаловании вас в Генерал Майоры послать к вам сей указ из Правительствующего Сената; а к присяге на тот чин привесть вас в Оренбургской Канцелярии”.

# ҠАРА ЭСЛЕ ҠАРАҺАҠАЛ ШӘЖӘРӘҺЕ

“Башҡорт ханы” булыр өсөн үҙен “башҡортмон” тип атап башҡорт халҡын ҡанға батырышҡан алдаҡсы-авантюрист ***Байбулаттың*** шул ялғанлығын тикшереү нигеҙе итеп алып, яҙыусы Булат Рафиҡовты ла “Ҡараһаҡал” романында ялған юлға баҫтыртҡан тарихсы Ирек Аҡмановтың был “табыш”ы унын намыҫында тороп ҡалһын, ә уҡыусы иғтибарына башҡаларҙың фекерҙәрен тирәйек.

1. Карасакал, руководитель башкирского восстания 1739-40 годов. Карасакал был смелым воином, народным организатором, начитанным; совершал хадж в Мекку и Медину. Башкиры сложили о Карасакале песни и легенды.

**И.Г.Акманов** (Башкортостан. Краткая энциклопедия, стр.367).

2.Потери башкир в восстании 1737-40 годов: убиты 18.134 человек, взяты в плен и отправлены в Рогервик на тяжелые работы 3.236 человек, проданы русским помещикам (на рабство) 5.983 человек, многим отрезаны носы и уши. Общие потери составили 28.190 человек.

**П.И.Рычков.** История Оренбургского края... стр.488).

3. «Желаю от господа бога здравствовать ея и в., потом вам, генерал-лейтенанту Л.Я.Соймонову. От меня владельца Шуны, контайшина сына, вам высокопревосходительному генералу-лейтенанту и *большому брату* Соймонову премного кланяясь... доношу вам, превосходительному генералу: нынешнею весною ездил я, владелец Суну контайшин, порубил оных каракалпаков, побрал многие пожитки и детей брал в полон; ныне еще еду со многим войском и буду требовать у оных каракалпаков называемаго Хадже хана и *башкирцев,* которые у них каракалпаков живут... *которые ныне состоят вам русским и нам неприятелями*. И желаю ехать, взяв Ходжея хана и живущих *башкирцев* и явится з заслугою и отдать их своею рукою... А что вы требуете меня, называя *башкирцем* и каракалкпаком, то я сущей владелец Суну, контайшин сын; и ежели впредь меня будете требовать, то прошу писать, называя Суною.

Оное переводил переводчик Араслан Бекметов».

Из послания Карасакала своему “большому брату” г.-л. Л.Я.Соймонову. Материалы по истории Башкирской АССР, часть I. М.-Л., 1936, стр. 478.

4. Карасакал не был ни башкиром, ни батыром, а был проходимцем-авантюристом, провокатором, тайным шпионом князя Урусова и генерала Соймонова... Для того, чтобы восстановить историческую правду и раскрыть подлинное лицо Карасакала, требуется заново написать историю данного восстания. Такую большую работу смогут совершить только те историки, которые верны исторической правде.

**Ахмет-Герей Янгалин,**

кандидпат исторических наук (журнал “Агидель”, 2010 №6).

Ҡараһаҡалдың асылында кем булыуы тураһындағы бәхәстәрҙе бөйөк тарихсыбыҙҙың төплө һөҙөмтәһе менән сикләп ҡуяйыҡ:

“Ҡараһаҡал Солтан-Гәрәй, йә иһә Юрматы башҡорттарынан Миңлеғол, йә иһә ҡалмаҡса Шуна исемдәрен алһа ла, былар барыһы ла йәшеренеү өсөн файҙаланылған ялған исемдәр. Ҡараһаҡал Байбулат — Арал ҡараҡалпаҡтары солтаны Ҡәйеп һәм Шәйбәк хандарҙың атаһының ҡустыһы ул. Быны бөтә ҡаҙаҡ солтандары ла белгән, тик урыҫтар менән мөнәсәбәттәренә зыян килтермәү өсөн уларҙан йәшергән. Байбулат һәм ҡәрҙәше Ишем — бер саҡ Хиуала хөкөм һөргән Хәсән хандың улдары, Хәсән хан иһә Хиуанан ҡалмаҡ ханы... янына килгән һәм улдары менән бергә шунда ҡалған. Һуңынан ҡараҡалпаҡтар Ишемде үҙҙәренә хан итеү өсөн атаһынан һорап алған, ә Байбулат ҡалмаҡтар араһында ҡалырға булған. Ниһәйәт, ул 1728 йылда Башҡортостанға килгән һәм ун ике йыл Нуғай юлында йәшәгәндән һуң бындағы күтәрелеш менән етәкселек иткән. _Ҡараһаҡалдың Байбулат солтан булыуына һис шөбһә юҡ._ Уның ҡараҡалпаҡ солтаны икәнлеген башҡорт күренеклеләре, әлбиттә, белгән, ләкин Ҡырым хандары халыҡ араһында абруйлыраҡ һәм Төркиә менән бәйле булғанлыҡтан, Байбулат солтанды ла Ҡубан Гәрәйҙәренең береһе итеп танытыуҙы өҫөнөрәк күреүе ихтимал. _Ҡараһаҡал, һис шикһеҙ, Күсем нәҫеленән._ Был тәңгәлдә Йәғәфәр Юлдаш улының мәғлүмәттәре Бабажан Маңыт тарихындағы Үргәнес хөкөмдары Хәсән хан менән уның улдары Байбулат һәм Ишем солтандар хаҡындағы мәғлүмәттәргә тап килә” (Ә.В. Туған, 112-се бит)...

Тулыраҡ мәғлүмәткә һыуһаусылар өсөн: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Өфө – 2007, «Башҡорт батыры Еҙекәй» тигән бүлек.

# ШӘЖӘРӘЛӘРЕМ

Эйе, «ләрем»... Сөнки Үҫәргән аҫаба башҡорто Йыһат Солтановтың тән тамырҙарында, донъя яратылғандан уҡ килгән үҙ ырыуы Үҫәргәндекенә ҡушылып, башҡорттоң Бөрйән ырыуынан Сыңғыҙ-хан нәҫеленең һәм башҡорттоң боронғо бер ярсығы Мишәр ырыуының ҡаны ла тибә һулҡылдап. Һуңғы икеһе, әлбиттә, тарихи сәбәптәр арҡаһында Үҫәргән ерендә пәйҙә булған, килеп һыйынған ырыуҙар... Ә ул ерҙең төп хужаһы — Үҫәргәндең шанлы көнәсәһе (кенәзе) Муйтән-бейҙең бөйөк Сыңғыҙ-ханға иң яҡын кеше икәнлеге шәжәрәбеҙгә яҙылған:



Һүр. 54. Сыңғыҙ-хан. Бронза

*«Вә бәгдә Сыңғыз-хан Муйтәнгә һәр мәжлескә ҡабул идеп, яҡынлардан иҫәп итеп бик ҡәдерле гиззәт илән хан янында бер нисә йыл тороп, ахырында хан Муйтәнде билек дәрәжәһен биреп, илгә дау-талашларҙы тикшереп тороу өсөн указ биргән.*

*Бирелгән указда яҙылған һүҙләр: «Муйтән Туҡһаба балаһына билек мансабы бирелде. Үҙе үлгәнсә би булыр, үҙенән һуң балаларынан береһе*

*булыр». Шул рәүешендә баланан балаға бирелеп, Муйтән нәҫеленән башҡаға бирелмәй. Береһе һайланмай береһенә билек бирәрәк Муйтән ырыуына — Туҡһаба ырыуына бирелдерәк».*

Тимәк, Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе — бөтә башҡорттарҙың Батшалар шәжәрәһе икәнлеген бабабыҙ Сыңғыҙ-хан таныған. Һәм Муйтән-бейҙең йәғни Үҫәргән ырыуының биләмәләренең ҡайҙарҙан ҡайҙарғаса йәйрәп ятыуы йәғни дәүләт сиктәре лә шул заманында уҡ бөйөк йыһангир Сыңғыҙ-хан бабабыҙ тарафынан аныҡ танылған:

*«Әүәл Аҡ Иделнең башынан тамағына саҡлы Аҡ Иделгә ҡойған үҙәнләре белән һәм урман вә йылғалары белән һәм Урал тауының көнсығыш ягы Уралға яҡын Ишем ҡушылган һыулар, Ирман, Иртыш тигән үҙәнләр, үҙәнләренә ҡушылган бар йылгалары, урман вә ялан белән, йәнә лә Яйыҡ башы Ялпы таулары, Яйыҡдиң ике ягы. Ер Яйыҡтың көнсығыш ягы Тубыл һыуына саҡлы һәм Яйыҡга ҡойған ни бары һыулар һәм үҙәнләре һәм урманлары вә яланлары, ердән сыга торган мәгдәнләре белән Туҡһаба оранлы башҡортларга күсеп йәйләгән, ултырып ҡышлау урынларын мәңгелек итеп бирелде», — тип яҙылган указында».* (Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации). Уфа — 1985, 57-нсе бит).

Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: бүре-эткә табыныусы үҫәргәндәрҙең бик боронғо замандарҙан уҡ ҡитғабыҙҙың ҡайһы өлөшөнөң аҫабалары булғанлығын улар һыулаған, уларҙың «әсәһе» бүре-эткә бәйләп изгеләштерелгән йылға исемдәре асыҡ күрһәтә. Быны тамаша ҡылдыртыуҙы Үҫәргәндең мине тыуҙырған «ҡамалар» араһынан башлайыҡ.

Ҡама-ан (-ан — сығанаҡ килеш ялғауы, йәғни «ҡаманан тыуған») — ҡоман//куман (үҫәргәндәрҙең боронғо бер аталышы).

Ҡама//Кама йылғаһы.

Ҡобан//Кубань йылғаһы.

«Ҡама» һүҙенең ҡама — ҡаба (ҡаб) — ҡоба (ҡоб) үҙгәрештәрен кисергәнлеге асыҡ. Ә ҡоб//ҡаб — бүре ул. Сөнки ҡоб-аҡ («аҡ бүре») — көбәк («бүре»). Ошоғаса телебеҙҙән төшмәгән «өй көбәге» тигән әйтемебеҙ — «өй бүреһе» йәғни ҡулға эйәләштерелгән бүре (эт) тигән һүҙ ул. Тимәк, ҡобан-ҡомандар//ҡамалар — «бүренән тыуған» йәки «бүрене имгән» башҡорттар (үҫәргәндәр).

Шулай уҡ телебеҙҙә әлегәсә һирәкләп булһа ла ҡулланылыусы ҡабаҡ//ҡапаҡ һүҙе — нимәне булһа ла бүре-эт хоҙай кимәлендә изгеләштереп маҡтау, «аҡ бүре» тигәнебеҙ. (Танылған яҙыусыбыҙ Сәләх ағай Кулибай ҙа, нимәнелер яратып маҡтар булһа, «ҡапаҡ» һүҙен ҡуллана торғайны).

Һәм йәнә:

Пирет (Бүре-эт) — Геродот тарихындағы Ағиҙел йылғаһының исеме.

Прут (Бүре-эт) — ҡитғабыҙ көнбайышындағы хәҙерге йылға.

Бөрө//Бирь, Бөрөсуан//Бирсуан (Бүре-әсә-аба-ан — «Бүре-әсә-апанан тыуған») — Башҡортостандағы хәҙерге йылғалар.

Бөрө-аҡ-эт-ул («бүре аҡ эт улы») — Бүре-аҡ-әтил (бүре-Ағиҙел»). Һәм шунан килеп сыға:

Бөрө-аҡ-әтил — болоаҡа-әтил//болаҡ-әтил — болоайа-әтил — Белая-Әтил//Белая-Иҙел. Шулай уҡ:

Болаҡа-Әтил — Волга-Иҙел.

Аҡ-әсә-ул («аҡ бүре улы») — Ҡәсул//Ҡыҙыл йылғаһы.

Абай (апай)-әс («бүре-әсә») — амай-әс — Майәс//Мейәс йылғаһы — «бүре-әсә йылғаһы».

Аба (апай, өпәй) — Өфө//Уфа (Ҡариҙел) йылғаһы — «бүре йылғаһы».

Эҫем//Сим — «әсәм» йәғни «бүре-әсәм» йылғаһы.

Бөрө-әсән («бүре-әсәнән тыуған») — Йөрө-әсән//Йөрүҙән йылғаһы.

Әс-әй («бүре-әсәй») — Әй йылғаһы.

Әсәй-аҡ («аҡ бүре-әсәй») — Жайаҡ//Йайыҡ йылғаһы.

Әсәк-бөрө («әсә-бүре»)//Әсәк-мөрө — Сәк-мәре//Сакмара (Һаҡмар) йылғаһы.

Әсә-мәре («әсә-бүре») — Сәмәре//Самара йылғаһы.

Аҡ-әсә-бүре-эт — Кәсәмәрет//Ҡаҫмарт йылғаһы.

Күренеүенсә, былар бөтәһе башҡорттоң бүре-эткә табыныусы Үҫәргән тәүырыуы сиреүҙәре йәшәгән ер йөҙөндәге һыуҙарҙың исемдәре, йәғни ҡитғабыҙың Обь — Иртыш үҙәненән алып көнбайышҡа табан Уралғаса һәм Урал тауҙары аша Алыҫ Көнбайышҡаса һуҙылған (боронғо ғәрәп сәйәхәтселәре яҙып ҡалдырған Эске Башҡорт) тарафы. Бында «Эске» — әсәкә//әсә-аҡ («аҡ әсә бүре яғы») тигән һүҙебеҙ. (Шуныһын да әйтәйек: үҫәргәндәрҙең көнсығыш яртыһы — ата бүрегә, ә көнбайыш яртыһы әсә бүрегә табынған).

Миҫал өсөн башҡорттоң боҙ-инәгә (боҙ һыйыры бизонға йәки боланға) табыныусы икенсе яртыһын тәшкил итмеш Бәжәнәк («боҙ-инәк» — боҙ һыйыры бизон йәки болан) тәүырыуҙары сиреүҙәре йәшәгән, баяғы Обь — Иртыш дөйөм үҙәненән алып Алыҫ Көнсығышҡаса һуҙылған Тышҡы (атасҡы йәғни «ата яғы» — тасҡы — Тышҡы) Башҡорт тарафының ҡайһы бер йылға исемдәренең асылын күрһәтәйек:

Ана-ҡар-аба//Ана-корова («инә-һыйыр») — Ана-Ғара-аб//Ангара-Обь йылғаһы.

Инә-әсәй («һыйыр-әсәй» йәки «һыйыр-һыу») — Инәсәй//Енисей йылғаһы...

Ә инде Алыҫ Көньяҡтағы ер йөҙөнә һалған эҙҙәребеҙҙе билдәләү өсөн, Урта Азиялағы Сыр-даръяны, Сурхан-даръяны («үҫәргән-йылға»лар), Афғанстандағы Башҡорт (Бажгир) ҡалаһын, Ирандың Лот далаһындағы Бөрйән (Буржан) ҡалаһын һәм Күк (Һинд) океанының Фарсы диңгеҙ ҡултығы яры буйындағы Башҡорт (Башгирд) өлкәһен, шулай уҡ шул тарафтарҙа Һиндостандың бөйөк эпосы «Махабхарата»ла теркәлгән Ҡанҡа (Ҡаңғы) башҡорт ырыуын иҫкә алыу ҙа етә.

Донъя-Ғаләм-Тереклек тураһындағы мифтан билдәле булыуынса, Дәү Хоҙайыбыҙ Донъя-Ғаләмде ете ҡатлы түңәрәк урата рәүешендә яралтҡан: урталыҡтан башлап тышҡа табан һанағанда тәүге өс ҡат-уратаһы — бәндәләр, ҡалғандары хоҙайҙар өсөн йәшәү урыны имеш. Шул уҡ ваҡытта был ете ҡатлы түңәрәк-урата тап уртанан һәр береһе ярым түңәрәкле ике өлөшкә бүленеп, шул бүленештәге ҡитғабыҙҙың көньяҡ-көнбайыш яртыһы — Эске Башҡорт яғы (Үсәр-

Ҡан йәки Үҫәргән тәүырыуының «Ҡан» яртыһынан үрсегән Ҡанлы//Кангюй//Канка, Ҡыпсаҡ//Половец, Башҡорт//Пицигит//Паскатир ҡәбиләләре тарафы); ә иһә төньяҡ-көнсығыш яртыһы — Тышҡы Башҡорт яғы (Үсәр-Ҡан йәғни Үҫәргән тәүырыуының «Үсәр» яртыһынан үрсегән Үҫәр//Сэр//Усень, һәм дә йәнә Ҡатай//Кидань//Хат//Хэт һәм Бәжәнәк//Бәшнәк//Печенег ҡәбиләләре тарафы).

Ҡатламлы түңәрәк-ураталарҙы ике яртыға бүленмәгән бер бөтөн рәүешендә ҡараһаҡ, үҙәген — Үҫәргән (Үҫәргән-Ҡанлы), икенсе ҡатламын — Ҡатай-Ҡыпсаҡ, ә өсөнсө иң тышҡы ҡатламын иһә Бәжәнәк-Башҡорт игеҙәк ырыуҙары биләгән, уларҙың ҡитғала урынлашыу ҡануны ла шуға ярашлы булған. Бына ни өсөн V быуатта бәжәнәктәр (һундар; сөнки һун//сун — ҡыр, йәғни «ҡыр-дала кешеләре» тигән һүҙ), ҡитғаның көнсығыш ҡырыйындағы йәшәү шарттары насарланыуы сәбәпле, үҙҙәренең шул көнсығыштағы Тышҡы Башҡорт тарафынан ҡубынып, Эске Башҡорт аша үтеп китеп, баяғыса үҙҙәренең өсөнсө түңәрәк-уратала урынлашыу ҡануны буйынса, ҡитғаның Алыҫ Көнбайыш ҡырыйында (Башҡорт яғында) үҙҙәренә Хоҙай Бабай тарафынан бирелгән һәм тейешле булған биләмәләргә — Көнбайыш Европаға ябырылалар («халыҡтарҙың бөйөк күсенеү» дәүере)...

## Сыңғыҙ-хан бабам менән Муйтән-бей бабам

Тарих тойғоло һәм белемле һирәк-һаяҡ әҙиптәребеҙҙең береһе Аҫылғужа Баһуманов сәйерһенеберәк яҙҙы бер заман:

«Актерҙар йорто. Яҙыусыларҙың дөйөм йыйылышы. Тарих һәм тарихи темаға әҙәбиәт тураһында һөйләшәбеҙ. Ғәҙәттәгесә, президиум ултыра. Мин сығыш яһарға иң алдан яҙылһам да, һүҙ бирмәйҙәр әле, сөнки Президент Рәхимов һәм уға эйәргәндәр әҙәп өсөн ултырып китергә тейеш. Улар һәм телевидение киткәс кенә тейә миңә сығыш яһау бәхете.

Бына трибунаға Йыһат ағай Солтанов менде. Сығышының аҙағында, ярһып китеп, һалмаһынмы хәбәрҙе: «Сыңғыҙ-хан башҡорт булған!»

Тәгәрәп ятып көлдө зал. Айырыуса Тамара Ғәниева рәхәтләнде — шаңғыраны ғына. Мыҫҡыллы көлөүҙәрҙән Йыһат ағай ҡаушабыраҡ ҡалды, сығышын тоҡос ҡына бөтөрөп, трибунанан төшөп китте. Һүҙҙе Ғәлим Хисамовҡа бирҙеләр, шунан һуң ғына сират тейҙе миңә. Микрофонды ситкәрәк эттем дә былай ҙа көслө тауышыма ғәйрәт индереп әйттем:

— Йыһат Солтановтың сығышын ниңә көлкөгә һабыштырҙығыҙ әле? Аң-тоңдо белмәйенсә! Тарихты белмәгән көйөгөҙгә!» («Ағиҙел» журналының 1999/6 һаны, 176-нсы бит).

Хаҡ һүҙҙәр. Белмәгәндең беләге тыныс — белгәндәрҙе тинтәккә һанап, йығылып ятып һәм шаңғыртып көлөүе лә ап-анһат бит ул үҙенең рухи наҙанлығын «йән сәләмәтлеге» итеп һанаусы меҫкен миңрәүйәндәргә. «Белмәү ғәйеп түгел, белергә тырышмау ғәйеп», — тигән ата-баба һүҙен һанламай, «шаңғыратабыҙ» ғына шул...

Лəкин ошо «сəйер» əҙəм Йыһат Солтанов өсөн ысынлап та кемдəр һуң улар — Сыңғыҙ-хан менəн Муйтəн-бей?..

Ауылым, ырыуым, нəҫелем тəүəрихенə, шəжəрəмə туранан-тура бəйле булғанлыҡтан һəм дə ошо хикəйəтемдең артабанғы ағылышы ла уларһыҙ һəм уларҙың тоҡомдарыһыҙ була алмағанлыҡтан, минең ҡанымда ҡандары ҡайнаған алыҫыраҡ шул ике бабам тураһында бер килке мəғлүмəт бирмəйенсə булмайҙыр.

1155 йылда боронғо Башҡортостаныбыҙҙың Һаҡмар (Саҡмар) һəм Таналыҡ йылғалары аралығында «Бурхан тау»ға яҡын ерҙə шул «Бурхан» — Бөрйəн ырыуы башҡорто Темəсйəн (аҙаҡ Сыңғыҙ-хан) бабабыҙ донъяға килə. 1240 йылда (Сыңғыҙ-хан үлгəндəн һуң 13 йыл үткəс) башҡорт сəсəне тарафынан ҡытай иероглифтары ҡулланып яҙылған һəм һуңынан монголсалатып уҡылған (уны башҡортсалатып та уҡырға булыр ине!) һəм хəҙер «Йəшерен хикəйəт» тип йөрөтөлгəн тəүəрихтə Бөрйəн ырыуы — Борчжигин, бабабыҙ Темəсйəн — Темучжин тип, Һаҡмар (Əсəк-мəр йəғни Əсə-һыу) йылғабыҙ — Онон (Ана-йылға) тип бəйəн ҡылына. (С.А. Козин. Сокровенное сказание. М. — Л., 1941. Был «Йəшерен хикəйəт»те артабан Й.Х. тип кенə бирəбеҙ). Бер үк йылғаның ике төрлө аталышының сере ул һүҙҙəрҙең мəғəнəһе аша сиселə: Саҡмар — Əсəк-мəр («Əсə-йылға») һəм Онон//Анан — «Ананың (инəнең йəғни шул уҡ əсəнең) һыуы». Күренеүенсə, Əсəк//Анан — икеһе бер мəғəнəлə (борон заман Һаҡмар һыуын «Анан» тип тə исемлəгəндəр, тимəк). Ə Таналыҡ йылғаһының исемен ул ҡомартҡыла шул көйөнсə — «*Теңелик*» тип яҙғандар. Ундағы боронғо «Бурхан» тау — хəҙерге Бүребай ҡасабаһы эргəһендəге тау икəнлеге шəйлəнə: «Бүре-хан»ды «Бүре-бай» тип кенə яңылатҡанбыҙ...

Билдəле булыуынса, Темəсйəндең атаһы Иҫəкəйҙең вафатынан һуң, беренсе ҡатынынан — дүрт ул һəм бер ҡыҙ, икенсеһенəн ике ул ҡалып, улар янына Темəсйəндең йəн туғаны (побратимый) Йəмуха (Джамуха) ла өҫтəлеп, тол ҡалмыш Ай-Луна-əсəй (Оэлун-учжин) шул ете малайы менəн бергə үҙҙəренə ҡан-ҡəрҙəш һалйыуыттар йəйлəүендə ҡағылып-һуғылып, аслы-туҡлы көн күрə. Ағалы-энеле ете малай сикһеҙ интегə бында. Һалйыуыт ҡəрҙəштəренең ситлəтеүе шул тиклем дə аяуһыҙ була ки, бер көн иртəн Тарғытай Кирелтуҡ менəн Төҙөгəн Кəртə исемле түрəлəр башлығындағы һалйыуыттар яңы йəйлəүгə күскəн саҡта Иҫəкəйҙең ырыуы бөрйəндəрҙе лə үҙҙəре менəн бергə алып китһəлəр ҙə, Ай-Луна-əсəне кескəй балалары менəн, малһыҙ-ниһеҙ, таянысһыҙ килеш, ошо Башҡортостандағы иҫке йəйлəүҙə торғоҙоп ҡалдыралар.

«Ай-Луна-əсə тыумышынан аҡыллы ҡатын ине, — тип əйтелə Й.Х.-ла. — Үҙенең бəлəкəй балаларын тəрбиəлəп, тол ҡатындың əрһеҙ кəпəсен башына кейеп, күлдəк итəген билбауы аҫтына күтəрə ҡыҫтырып, Һаҡмар (Онон) йылғаһы буйын үрле-түбəнле ҡыҙырҙы, ҡырағай алма, муйыл емештəрен бөртөклəп йыйып, көнө-төнө балаларын туйындырҙы. Тыумышынан уҡ ҡыйыу һəм изгелекле əсə, хоҙай рəхмəтендəге изге балаларын ҡəҙерлəп, йүкə ҡурысынан үргəн ҡуҙы-тубалын белəгенə элеп ялан ҡыҙырҙы, сарана//һарана (судуна[30]) тамыры ҡаҙып, кесерткəн (кичигин) йыйып туйҙырҙы тамаҡтарын.

---

[30] Судуна — ҡытай яҙмаһында «р»-лы иероглиф булмағанлыҡтан, уны «д»-ға алмаштырып, «суруна» (сарана) урынына «судуна» тип яҙғандар һəм уҡығандар.

Әсәнең муйыл да һуған ашатып үҫтергән балалары хан дәрәжәһенә ирешерлек булып етеште. Хыянатһыҙ әсәнең үлән тамырҙары ашатып үҫтергән балалары ғәҙеллекле, аҡыллы булып сыҡтылар.

Гүзәл әсәй сарана-әсәк//саранәсәк (сарымсаҡ[31]//һарымһаҡ) ашатып үҫтергән кемһәләр — батыр улдар булдылар, Юғары дәрәжәләргә ирешкән дәүләт эшмәкәрҙәре булдылар»... (Й.Х., параграф 75).

Темәсйәндең (буласаҡ Сыңғыҙ-хандың) балалыҡ һәм үҫмер йылдары башҡорт халыҡ ижадында ла (Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Бишенсе китап. Өфө — 1983, № 181; артабан бирелә: Б.Х.И.), һәм шулай уҡ монголдарҙыҡы тип һаналған баяғы «Йәшерен хикәйәт» (Й.Х., 1, 28, 63, 74, 75, 76, 77, 82, 105, 110, 111-енсе параграфтар) тәүәрихендә лә бер үк төрлө тасуирлана. Икеһен дә йәнәшәләп-сағыштырып ҡарайыҡ:

Б.Х.И. Бер бабайҙың булған, ти, ете улы.

Й.Х. Иҫәкәйҙең ете улы.

Б.Х.И. Малайҙар балыҡ ҡармаҡлап, һунарға йөрөп тамаҡ туйҙыралар.

Й.Х. Малайҙар балыҡ ҡармаҡлап, ҡош аулап тамаҡ туйҙыралар.

Б.Х.И. «Арала берәү була бит инде. Быларҙың да эштәре гел көйлө бармаған. Бер ағай гел генә туғандарынан ситләшеп, башҡалар һүҙенә ҡолаҡ һалмай, үҙһүҙләнер булған... Яңғыҙы ярты яҡ тартып йөрөгәнгә, уға «Яңғыҙаҡ» тип исем ҡушҡандар, ти».

Й.Х. Темәсйән һәм башҡа туғандары араһында низағ тыуа, Темәсйән хатта Балағатай[32] тигән бер туғанын үлтереүгә тиклем барып етә. Ай-Луна-әсәй Темәсйәнде ҡәһәрләп, былай ти: «Ҡарынымдан яҡты донъяға усында ойошҡан ҡан йомарлап тыуыуы юҡҡа түгел икән шул»...

Б.Х.И. Малайының үҙһүҙлелегенә «бабай бик көйөнгән. Үлеп киткәнсе: «Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт», — тип нығыған булды, ти».

Й.Х. Боронғоларҙан килгән шул уҡ атай өгөт-нәсихәтен Ай-Луна-әсәй ҙә нығып ҡабатлай.

Б.Х.И. Яңғыҙаҡ, бер туғандары менән килешә алмай, «Көсөм бар, миңә нимәгә таяныс, — тип, ағай-энеләренән айырылып, тау, урмандар араһындағы бер аҡланға барып нигеҙ ҡорҙо, ти»...

Й.Х. Үҙ-ара низағлашып тарҡауланған туғандарҙы көтмәгәндә һалйыуыттар[33] (тайчжиуты) килеп баҫа, Темәсйән тау, урмандар артына ҡаса ла Туғын-Ындыр (Тэгунэ-Ундур) тигән ерҙә боҫоп, йәнен һаҡлап алып ҡала. (Лубсан Данзан. Алтан Тобчи. М., 1973; 76-нсы бит. Артабан: Алтан Тобчи). Бик мөһим мәғлүмәт: Туғын//Туҡан — тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым емеректәре ырҙынланып ятҡан, тәгәрмәс туғынына оҡшаған урын был! Бик мөһим булғанға күрә лә Үҫәргән батшалар шәжәрәһендә Темәсйән бабабыҙ шул Туҡан-Арҡайым исеме менән «Туҡан-хан» тип теркәлгән. (СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан

---

[31] Текста «голый чеснок» тип тәржемәләнгәндең «голый» тигәне, моғайын, «сарана-әсәк»тең «әсәк» өлөшөн «асыҡ» тип аңлауҙан хасилдыр (йә булмаһа хәҙерге телебеҙҙәге «ҡоро һарымһаҡ» мәғәнәһендәлер).

[32] Балағатай — башҡорт ырыуҙарының береһенең исеме.

[33] Хәҙерге Һалйыуыт ырыуы башҡорттарының бабалары.

филиалы китапханаһы. РБ — 2279. Үҫәргән тәүәрихе, 39-ынсы бит. Артабан: «Үҫәргән тәүәрихе»). Ләкин бер көн килеп уны, Темәсйәнде, һалйыуыттар әсир итәләр, муйынына ағас боғалаҡ һалып, Һаҡмар (Онон) буйына алып ҡайтып китәләр. Әсирлектән һәм үлемдән уны Үҫәргән-Сура (Соргон-Шира) — йәғни Үҫәргән ырыуынан Сура тигән кеше ҡотҡара.

Б.Х.И. «Шулай йәшәп ятҡанда, тирә-яҡты шом баҫҡан: уның яңғыҙ йәшәүен ҡараҡтар һиҙеп ҡалған. Тәүҙә бер өйөр башы йылҡы юғалған. Шунан икенсе өйөрҙөң айғыры үрештән ҡайтмаған»...

Алтан Тобчи, 79-ынсы бит: «Ҡараҡтар килеп», Темәсйәндең һигеҙ ҡола атын урлап китәләр.

Б.Х.И. «Шулай аңҡы-тиңке килеп йөрөгән арала ҡараҡтар төнөн килеп, бының... ҡатынын да тартып алғандар... Өс ҡараҡ Яңғыҙаҡты бер мөйөшкә ҡыҫырыҡлай башланы, ти... Яңғыҙаҡ үҙе ҡара урманға ҡасып, йәнен саҡ ҡотҡарып алып ҡалған». Ә ҡатынын урлап алып китәләр.

Й.Х. Таҡта-хан етәкселегендәге Мәркет хәрби берләшмәһенең өс бейе, йәғни Мәркет ырыуынан Таҡта, Убасы-Мәркет (Өфөсө-Мәркет) ырыуынан Дәү-ир-Үҫен (Үҫен — Үҫәргән ырыуының көнсығыш тармағы), Ҡатай ырыуынан Тармалы, ғәскәр менән Темәсйән йортон килеп баҫалар. Темәсйән йәшеренгән Бүребай (Бурхан) тауын өс тапҡыр ҡамаһалар ҙа, Темәсйәнде тота алмай, уның ҡатыны Бүртәне урлап алып китәләр. «Алтан Тобчи» (84-енсе бит) был урынды беҙ белгән хәҙерге Бүребай (Бурхан) тауы эргәһендәге Таналыҡ (Түңәлек) йылғаһы буйында, тип билдәләй.

Б.Х.И. Яңғыҙаҡ, үҙенең алты ағай-энеһе менән берләшеп, ҡатынын урлаған өс ҡараҡтың йорт-ерен барып баҫа ла уларҙы ҡырып ташлай һәм ҡатынын әсирлектән ҡотҡарып алып ҡайта.

Й.Х. Темәсйән, кирәйҙәр (кереит) ханы Туғрил (кирәйҙәр — хәҙерге башҡорт ырыуы гәрәйҙәрҙең боронғо бабалары) һәм йән дуҫы Йәмуха менән берләшеп, Мәркет ылыҫын (улусын) барып баҫа ла һәммәһен тар-мар ҡыла, ҡатыны Бүртәне әсирлектән ҡотҡарып алып ҡайта...

Башҡорттоң «Бөрйәндәр хан замандарында» тигән риүәйәтендә лә Сыңғыҙ-хан тураһында тап «Йәшерен хикәйәт»тәгесә бәйән ҡылына. (Б.Х.И. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө — 1980; 155-енсе бит).

Буласаҡ бөйөк Сыңғыҙ-хандың бала сағына һәм йәшлегенә бәйле ваҡиғаларҙың тап Башҡортостан тупрағында булғанлығын, уның, әсәһенең һәм яҡындарының тап башҡорт икәнлектәрен тәрән йөкмәткеле һәм бай мәғлүмәтле Ирәкте башҡорттары шәжәрәһендә лә күрәбеҙ (урыҫсаға тәржемәһенән алынды):

«В старых шеджере предков нашего рода, которые были у меня в руках, башкира Ирякте, насколько хватает моего разумения, я возвожу к разыскавшему Чингиз-хана и передавшего его матери Алан-гува-ханым Майкы-бию по прозвищу Уйшун (Задумчивый)...

Выше я уже написал, что имевший прозвище Задумчивый Майкы-бий по приказу матери Чингиз-хана разыскал его. Из старых шеджере видно, что когда Чингиз-хан понял, что старшие братья завидуют ему настолько, что собираются убить его, он покинул свою землю и бежал. Мать Чингиз-хана направила на его

поиски посыльных, одним из которых становится Майкы-бий»... (Башкирские родословные. Выпуск первый: издание на русском языке. 2002, Уфа — «Китап», с. 391 — 392, № 27).

Инде бөйөк бабаларымдың икенсе бреһенә — Сыңғыҙ-хандың уң ҡулы һәм беренсе таянысы, ышаныслы урынбаҫары, бөйөк дәүләтенең алтын өрләгө, Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге алтын ҡулса — Туҡсаба улы Муйтән-бейгә күсәйек.

Темәсйән, баяғыса, Иртыштың көнсығыш яғында Мәркет хәрби берләшмәһен тамам ҡыйратҡас, даны бөтә тирә-яҡҡа таралып, башҡорт һәм монгол ырыуҙары күпләп уға килеп баш эйә, урҙаһына керәп берләшә башлай. Әйтеп үтеүебеҙсә, 1240 йылда уҡ ҡытай иероглифтары менән яҙылып, аҙаҡ монголсалата боҙоп уҡылған был Сыңғыҙ-ханға ҡушылыусы ырыу һәм исемдәр араһында ҡайһы бер башҡорт бабаларын көсәнмәй танып була, мәҫәлән, былай тип әйтелә унда: килделәр Тарғыттан — Ҡаҙаған-Талтар-хан үҙенең биш ҡустыһы менән. Меңетәй-Ҡиян улы Уңғар — үҙенең Һалйыуыт һәм Баяуыт ырыуҙары менән. Барлас (Барулас) ҡәбиләһенән — Ҡубилай-Ҡотос үҙенең ҡустылары менән. (Барлас — хәҙерге Һалйыуыт ырыуы башҡорттарының бер араһының ораны. — А. Камалов, Ф. Камалова. Атайсал. Өфө — «Китап» — 2001; 408 — 409-ынсы биттәр. Әйткәндәй, донъяға билдәле йыһангир Аҡһаҡ Тимер ҙә шул Һалйыуыттың Барлас араһынан булған). Маңҡот ҡәбиләһенән — бер туған Етәй менән Туҡылҡы-Сәрби. Уран (Урянхан) ҡәбиләһенән бүленеп, ағаһы Елмә эргәһенә уның кесе бер туғаны Сабырхан-Сүбәҙәй-Батыр килде. Башҡорт (Бесуд) ҡәбиләһенән бер туған Дағә һәм Көсөкөр килде. Шулай уҡ һалйыуыттарға ҡараған Сулдус ҡәбиләһе кешеләре, ә атап әйткәндә, Елгетай-Тәкә үҙенең ҡустылары менән килде... Шулай уҡ бер ауыл барындар килде: Ҡорсо-Өсән ҡартлас һәм Куке-Сос үҙенең Менән-Барын кешеләре менән...

Был урында беҙҙе ҡыҙыҡһындырғаны — тағы ла бер ырыу исеме булыр — былай тип дауамлана унда: Йылайырҙың Туҡран араһынан килде — өс бер туған туҡрандар: Хажийән-Туҡран, Ҡараҡай-Туҡран һәм Ҡаралтай-Туҡран... Йәнә лә Йылайырҙан — Сөсө-Тамаҡ һәм Арҡай-Ҡасар-Бала үҙенең уландары менән... (Й.Х., параграф 120). Һуңғылары артабан Темәсйәнгә хыянат ҡылып, уның ҡан дошмандары татарҙар яғына сығып киткәс, татарҙарҙы ҡырған яуҙа Темәсйәнгә әсир төшөп, язалап үлтереләләр.

Ләкин ниндәй ырыу һуң ул Йылайыр ырыуы? — тигән һорауға: «Үҫәргән ул», — тип аныҡ яуап бирәбеҙ.

«Р» менән «л»-дың алмашынып йөрөүен иҫәпкә алһаҡ, бер үк һүҙҙең ике төрлө яҙылышын күрәбеҙ: Үҫәргән//Үҫәлгән. Был ҡушма һүҙ түбәндәге тамырҙарға тарҡала:

Әс-ал-аҡ-ан — әсәлҡан//әсәргән (Үҫәргән). Һәм:

Әс-ал-аҡ-ир — салаҡир//жалайир (Йылайыр).

Күрәһегеҙ: ике термин бер-береһенән аҙаҡтағы «ан» (ана йәғни ҡатын кеше) һәм «ир» (ир йәғни ата кеше) өлөштәре менән генә айырыла, йәғни икеһе бер үк термин, тик беренсеһе, урыҫса әйткәндә, — женского рода, икенсеһе — мужского рода. Ҡалған өлөштәрҙең мәғәнәләре: әс — әсә йәки һыу-һөт; ал-аҡ — ал-аҡ

төҫтәге Көн (ҡояш). Тимәк, мифтарыбыҙға бәйле, терминдар артындағыларҙың икеһе лә — Әсә-Көн кешеләре йәғни Шүлгән-башбаба тоҡомдары үҫәргәндәр. Сөнки:

Әсә-ал-Көн//Әсәлҡан (Үҫәргән) — Сәлгән//Шүлгән. Ә Дәү Хоҙайыбыҙ тарафынан Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылыуы тураһындағы миф буйынса, күктә йөҙөп йөрөгән Көн (ҡояш) — Шүлгән-башбабаның үлеп тарҡалып һыу-һауаға әүерелмеш «кәүҙә»һенән айырылған һәм ергә йәшәү саткылары һибеп янған мәңге үлемһеҙ «баш»ы ул. Шул уҡ ваҡытта Ай — Урал-башбабаның шундай уҡ «баш»ы...

Ҡыҫҡаһы, «Йылайыр ырыуы» тигәндәре — Үҫәргән ырыуы икән. Бөгөнгәсә Йылайыр йылғаһының Үҫәргән ере үҙәгендә булыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй.

Иртыш йылғаһының көнсығыш яғындағы Көньяҡ Себер далаларында кинәт көсәйеп алған, шундағы бөтә ҡәүемдәрҙе үҙ тирәһенә туплап, үҙ илен ҡора башлаған ҡан-ҡәрҙәше Темәсйәнгә ҡарата Бөйөк Башҡортостан *көнәсе* (йәки *көләре*) Туҡсаба Ҡаҙансы улының мөнәсәбәте ҡайһылай булған һуң?

Быны асыҡларҙан элек, Бөйөк Башҡортостандағы Үҫәргән батшалар шәжәрәһе вәкилдәренең ул заман батшалыҡ дәрәжәһе атамаларын (титулдарын) аңлатыбыраҡ бирәйек.

Сал Афина һәм Рим ҡалаларынан да салыраҡ баш ҡалабыҙ Көн-Өфө (хәҙерге Өфө) алтын тәхетендә Бөйөк Башҡортостан менән идара итеүсенең дәрәжә атамаһы — *көнәс* йәки *көләр.* Был «Көн-әс» (Ҡояш-әсә) — ҡарыһүҙ (миф) буйынса Үҫәргән тәүырыуының башбабаһы Шүлгән-әсәнең Ҡояш булып әүерелмеш үлемһеҙ башына ишара, шунан хасил булалыр *көн (көн-би) — ҡан (хан)* титулдары. Бөйөк Башҡортостандың (урта быуат көнбайыш сәйәхәтселәре ватаныбыҙҙы «Һунгария майор» — «Бөйөк Бүре-ирҙәрҙең өйө» тип юҡҡа ғына атамаған: бында һуна//шуна//суна — «бүре» тигән һүҙ) тәхет эйәһе — Көн-әсәнең ерҙә әҙәми ҡиәфәттәге кәүҙәләнеше, тимәк. Шул «көнәс(ә)»нән яһалған да инде *көнәс//кенәз* титулы; мәҫәлән, шәжәрәбеҙҙәге кенәз Бикбау Тәтегәс улы һәм Рәсәй батша Сенаты указындағы «кенәздәр тоҡомо тархан Боҫҡон Даянов» (минең атам яғынан да, әсәм яғынан да яҡын бабаларымдың береһе). «Көләр» (көл-әр) титулы иһә шул уҡ «көн» («көл» дә шул уҡ «көн»: «көләс-ҡояш» тибеҙ) һәм ул, тәүге вариантынан айырмалы булараҡ, уға «ир» (әр) өлөшө ҡушылыуҙан хасил; был иһә әсә заты Көндөң ир (ата) затына — Айға әүерелеүен күрһәтә (Ай — Башҡорт тәүырыуының башбабаһы Урал-атаның үлемһеҙ башы, имеш). Фарсы тәүсығанаҡтарында ул осор Бөйөк Башҡортостан батшаһының «көләр» титулы менән аталышы — бөтә ырыуҙарыбыҙҙың «берәгәй хоҙай» Уралға табыныуҙарын (Сураш-Тора — Зороастр дине) һәм дөйөм «башҡорт» исеме аҫтында йөрөүҙәрен күрһәтә. Шуға бәйле рәүештә, Бүре-әсән//Бөржән ырыуы башҡорто Сыңғыҙ-хандың байрағы *аҡ* — Асман (Әсәм-анам) йәғни күктәге яҡтылыҡ төҫөндә булһа, Бөйөк Башҡортостан *көләре* (батшаһы) улының, йәғни Туҡсаба улы Муйтән//Мухали *мырҙаның* шундай уҡ төҫтәге байрағының уртаһында *ҡара ер* төҫөндәге Ай һүрәтләнер булған. (Мэн-да бэй-лу. М., 1975; 187-нсе бит).

Көнәс (кенәз) улының *мырҙа* (принц) титулына килгәндә, ул Бүре-әсә — бүрҙә — *мырҙа* рәүешле хасил булған. Бүре-әсә — күктәге Көн-әсәнең (ҡояштың) ерҙәге кәүҙәләнеше, ә Үҫәргән ырыуының башбабаһы Шүлгәнде иһә Бүре-әсә имеҙеп үҫтергән. Көнәс//кенәз балаларының иң өлкәне алтын тәхеттә атаһын алмаштырған һәм көнәс//кенәз титулын алған. Башҡа мырҙалары көнәс//кенәзгә бойондороҡло ырыуҙар берләшмәһенә (иләүенә йәки иленә) *солтан* итеп тәғәйенләнгән («солтан» — сүл-атан йәғни ҡояштан нур алыусы Ай, тигән һүҙ), йә иһә шулар уҡ ырыуҙарҙың башлыҡтары — *бәк//бей//бай* итеп беркетелгән...

## Муйтән-бейҙең Сыңғыҙ-ханда аманат (дипломат) булып ҡалыуы

Һәм бына минең туранан-тура ҡанбабаларҙың эҙе: Темәсйән яуының ҡулына төшкән Үҫәргән (джургән) кешеләре араһында Йылайырҙың (йәғни Үҫәргәндең!) Түлғата Байан улдары — Ҡоман-гүзәл, Селәүһен Ҡайсы һәм Ябаға исемле уҙамандарҙың да барлығы асыҡлана -- Сыңғыҙ-хан урҙаһына Башҡортостандан илсе итеп ебәрелгән был инсандарҙы юлда саҡта уның яугирҙәре осраҡлы рәүештә тотоп килтерәләр (Алтан Тобчи, 109-ынсы бит).

«Үҫәргән тәүәрихе»ндәге шәжәрә буйынса самалаһаҡ, әле әйтелгән Түлғата Байан — Бөйөк Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Көн-Өфө тәхетендә ултырған кенәз//көләр Ҡаҙансы Тура улына, ә Ҡоман[34]-Гүзәл — Туҡсаба Ҡаҙансы улына, Селәүһен Ҡайсы — Ҡарада Ҡиә Ҡаҙансы улына һәм Ябаға — Ислам Ҡиә Ҡаҙансы улына тура килә. Был өсәү тап Көн-Өфө тәхет эйәһенең улдары икәнлеген ышаныслы тоҫмаллатҡыс мәғлүмәт бар ҡытайҙарҙың тәүәрихендә. Беренсенән, уларҙың атаһы Ҡаҙансы, ошо исеме менән түгел, ә үҙе тәхеттә ултырған баш ҡалаһының исеме менән ләҡәпләнә унда, ҡытайҙар тәүәрихендә: «*Кун-вэнь* ***Ку-ва***» йәки «*Кун-вень* ***У-хэ***». Быларҙан шул күренә: Кун-вэнь тигәне — Көн-Апан (Көн-Әсә), Ку-ва тигәне — Ҡоба (хәҙерге Өфө торған Ҡоба тау), йәғни «Ҡоба тау ҡалаһының көнәсе//кенәзе»; ләҡәптең икенсеһе ***(У-хэ)*** лә шулай уҡ: «Өфө (Өхө) кенәзе»... Икенсенән, «Ҡоба//Өфө кенәзенең биш улы бар ине: өлкәне Ху-лу-ху-эр, унан ҡала Ци-ли-ку-эр, унан ҡала *Мухали*, унан ҡала Буға һәм унан ҡала Дәүсун», — тип әйтелә ҡытайҙар йылъяҙмаһында. Тимәк, Муйтән-бей (Мухали) бабабыҙ — Ҡаҙансының уртансы улы булып сыға... Өсөнсөнән, Муйтән//Мухалиҙың ата-әсәһе ҡушҡан балалыҡ исеме — *Сәмиҡ* икән дә баһа! Һәм ул үҙенең ҡул аҫтындағы сәрдарҙарҙан, шулай уҡ яугирҙәрҙән дә үҙен, «Муйтән//Мухали» тигән рәсми ләҡәп менән түгел, ә шул ата-әсәһе ҡушҡан ысын исеме менән атауҙарын талап ҡылыр булған. (Мэн-да бэй-лу; 59 — 60, 155 — 157, 226-нсы биттәр). Шулай итеп, Үҫәргән шәжәрәһендәге Ҡаҙансыны, уның улы (Муйтәндең атаһы) Туҡсабаны юлланыҡ; ул һәм уның ҡустылары Иртыш йылғаһы — Бөйөк Башҡортостандың көнсығыш сиге — аръяғында, моғайын, Башҡортостандан Сыңғыҙ-хан ыҫтанына ебәрелмеш илселәр рәүешендә пәйҙә

---

[34] Ҡоман — ошо бабанан беҙҙең Солтановтарҙың ҡома//ҡама араһы киләләр.

булғандарҙыр ҙа унда һуғыш барған осорҙа Темәсйән яуының ҡулына осраҡлы рәүештә килеп эләккәндәрҙер. Сөнки, ҡеүәтле хан урҙаһы менән мөнәсәбәттәрен нығытып, урҙала даими илсе (аманат) итеп Темәсйәнгә үҙҙәренең улдарын ҡалдырып китәләр бит. Уландарҙың исемдәрен ҡытай иероглифтарынан түбәндәгесә уҡыйҙар.

Туҡсабаның Сыңғыҙ-ханға аманатлыҡҡа ҡалдырған ике улы: 1. *Мукли-куен* (Мүкле ҡуйын йәғни төклө-йөнтәҫ ҡуйын)//*Мукали*//*Мухали* (Мэн-да бэй-лу, 132-нсе бит). Үҫәргән шәжәрәләрендә ул боронғоса Мүкле-тән//Мүктән тип әйтелешенән *Муйтән* булып үҙгәрешендә яҙыла. Тимәк, Мухали тигәндәре — үҙебеҙҙең тәне йөнтәҫ Муйтән-бей бабабыҙ икән дә! 2. Буҡа//Буха йәки Буға (үҙебеҙсә).

Селәүһен Ҡайсының да аманатлыҡҡа ҡалдырған ике улы: 1. Тухэ, ә үҙебеҙсә Туҡай; Үҫәргән һ.б. шәжәрәләребеҙҙә ул, шулай уҡ рәсми ләҡәбе менән булһа кәрәк, Туҡай тип түгел, ә Байҡы//Майҡы булып яҙыла; тимәк, үҙебеҙҙең *Майҡы-бей* бабабыҙ икән. 2. Хасар//Хазар.

Ябағы иһә, үҙ балаһы булмағанғалыр, моғайын, үҫәргәндәр («джургэн»дар) йәйләүенән Сыңғыҙ-ханға аманатлыҡҡа Бүреғол исемле бер малайҙы килтереп бирә (Алтан Тобчи, 109 — 110-ынсы биттәр).

Ҡытай тәүәрихтәренән билдәле булыуынса, Муйтән//Мухалиҙың ҡустыһы Буға — Сыңғыҙ-хандың йәнуҙағы (телохранителы), ә икенсе бер ҡустыһы Дәүсун (Дәү Бүре тигән һүҙ) — Сыңғыҙ-хандың ҡыҙына өйләнгән кейәүе — Сыңғыҙ-хандың шәхси гвардияһының башлығы булып хеҙмәт итәләр. Муйтән//Мухали бабабыҙ бер заман үҙе идаралыҡ иткән Төньяҡ Ҡытайҙан саҡыртып алынып, көнбайыш фронтҡа (урыҫ-ҡыпсаҡ ғәскәрен ҡыйратырға) ебәрелгәндән һуң, урынына уның улы Бүре (Дәүсун) тәғәйенләнә һәм, «атаһы кеүек үк, Сыңғыҙ-ханға мөкиббән хеҙмәт итеп, 1228 йылда 32 йәшендә үлә», тип әйтелгән унда (Мэн-да бэй-лу; 155 — 156, 158-енсе биттәр). Был *Бүре,* моғайын, Үҫәргән шәжәрәләрендәге Муйтән-бейҙең улы Шаҡмал//Шаҡалдыр, сөнки «шаҡал» да бит «сүл бүреһе» тигән һүҙебеҙ... Шаҡмал улы Бүзәкте[35] (Бөжәкте йәғни буҙ бүрене) лә шәжәрәбеҙ: «Туҡан-хан (йәғни Сыңғыҙ-хан) заманында бәк булып, хөкүмәт ҡылыр ине», — ти бит — заманалары тап килә. Күренеүенсә, Муйтән//Мухалиҙың яҡын туғандарына ла бик ныҡ таяна Сыңғыҙ-хан.

Бына шул шанлы Муйтән//Мухали бабабыҙ, үҙенең зирәк аҡыллылығы, киң һәм тәрән белемлелеге арҡаһында яусыл Темәсйән урҙаһында ундағы һис кемгә күрһәтелмәгән ышаныс, ҡәҙер-хөрмәт ҡаҙана, Темәсйәндән шанлы Сыңгыҙ-хан яһаусы ла ул була. Сөнки Муйтән//Мухали бабабыҙ Онон[36] йылғаһы башында 1206 йылғы ҡоролтайҙа Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә Сыңғыҙ-ҡаған итеп күтәреүҙе ойоштора; шул уҡ ҡоролтайҙа Муйтән//Мухали үҙе лә Сыңғыҙ-ҡаған дәүләтенең Юғары Хөкөмдары (Судъяһы) итеп һайлана (Й.Х., параграф 202) һәм уға, Муйтән-бейгә, дәүләт юғарылығындағы иң ҡатмарлы мәсьәләләрҙе һәм тартыштарҙы ғәҙел итеп сисеү, хөкөм сығарыу хоҡуғы тапшырыла. Бөйөк ҡағандың ул уң ҡулы

---

[35] Бүзәк — Үҫәргән шәжәрәләренең береһендә ул Бүрекәй тип тә яҙылған.

[36] Онон (Әсәк-мәр -- Һаҡмар) йылғаһы исемен Темәсйән менән бергә киткән бөрйәндәр Байҡал күле аръяғындағы йылғаға ла исем итеп илтеп ҡушҡан.

һәм таянысы рәүешендә һәр саҡ унының уң яғында ултыра, ә ике туған ҡустыһы Майҡы-бей, шундай уҡ рәүештә, ҡағандың һул яғын биләй. Сыңғыҙ-хандың атаҡлы йәшәү ҡанунының («Яҫау»ының) нигеҙен дә юғары белемле һәм зирәкйән Муйтән бабабыҙ һалған булырға тейеш. Башҡорт иленең иң юғарылыҡлы илсеһе булараҡ та бик уңышлы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Муйтән баба Сыңғыҙ-ҡағандан Обь — Иртыш дөйөм үҙәненән алып көнбайыштағы Иҙел — Ҡама дөйөм үҙәненәсә йәйрәп ятҡан Бөйөк Башҡортостан[37] дәүләтенең Сыңғыҙ-хан урҙаһына итәғәтле (хәҙергесә әйткәндә, *автономиялы*) үҙ аллылығын таныу ярлығы ала. Әммә шуға ла ҡарамаҫтан, Муйтән баба менән кәңәш иткәндәрме, юҡмылыр, киләһе 1207 йылында уҡ Сыңғыҙ-хан үҙенең өлкән улы Яусыға (Джучиға) ҙур ғәскәр биреп, туранан-тура Бөйөк Башҡортостан аша Алыҫ Көнбайышҡа үтергә лә “аттарының тояҡтары барып еткән” Атлантик океан ярҙарынаса бөтә донъяны яулап алырға бойора. Яусы-батыр, юлындағы барса Себер халыҡтарын бер-бер артлы еңеп һәм буйһондороп, Бөйөк Башҡортостандың ҡағылғыһыҙ көнсығыш сиге булған Иртышҡа килеп етә, ләкин башҡорт еренә үтеп керә алмай: Иртыштың көнсығыш ярында уҡ һағауылда торған башҡорт ғәскәрҙәре менән ҡаты бәрелештә еңелеп, Бөйөк Башҡортостан менән ике-ара тыныслыҡ килешеүе төҙөшөргә һәм, Бөйөк Башҡортостан тупрағына аяҡ баҫмайынса, һул яҡҡа ҡырт ҡайырылып, Урта Азияға табан урап үтергә мәжбүр була. Шул ике-ара килешеү буйынса, Башҡорт иле Яусы-батырҙың ғәскәрен үҙенең яугирҙәре, яу аттары, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙе йөкмәй — артабан башҡорт яугирҙәре татар-монгол яуҙарының Урта Азияға, Иранға һәм Һиндостанға сәфәрҙәрендә туранан-тура ҡатнаша. 1236 йылдың көҙөндә Бөйөк Башҡортостанға килеп киткән Юлиан-монах яҙып ҡалдырыуынса, татар-монголдар баяғы 1207 йылда Иртыш ярында башҡорттар менән «бәрелешкән саҡта уларҙы (башҡорттарҙы) еңә алмағандар, ә киреһенсә, беренсе һуғышта уҡ улар тарафынан еңелгәндәр. Шуға күрә уларҙы (башҡорттарҙы) үҙҙәренә дуҫтар һәм ҡорҙаштар итеп һайлап алғандар ҙа, шул рәүешле бергә ҡушылып, улар ун биш батшалыҡты башкөлләй ҡыйратҡандар». Күренеүенсә, Европаны (шул иҫәптән урыҫтарҙы) татар-монгол ябырылыуынан ул саҡтағы Башҡортостан ҡалҡаны ҡурсалап ҡалған, шул арҡала татар-монголдар стратегик ниәттәренә фәҡәт бик урау юлдан — Урта Азия һәм Төньяҡ Ҡафҡаз аша ундағы ҡәүемдәр менән һуғыша-һуғыша көстәрен бик ныҡ кәметеп, тиҫтәләгән йылдарҙан һуң ғына ирешә алғандар — унда ла тулыһынса түгел. Бына ошоно урыҫ тарихсыларына ла танырға ваҡыт.

Бөтөн ҡитғаны баҫып алырға илһамланған Сыңғыҙ-хан шул Көнбайышты яулау менән бер үк осорҙа көнсығышҡа ла ҡул һуҙа, шул йәһәттән 1214 йылда Муйтән//Мухалиҙы сәрғәскәр (ғәскәр башлығы) итеп ҡуйып, урынына Юғары Хөкөмдарлыҡҡа үҙенең аҫырау улы татар Шығай-Ҡотағаны билдәләй. Ә сәрғәскәр вазифаһындағы Муйтән//Мухали 1214 — 1217 йылдар һуҙымындағы өҙлөкһөҙ һуғыштарҙа Төньяҡ Ҡытайҙы яулап ала ла, әйтеп үтеүебеҙсә, Сыңғыҙ-хандың шундағы урынбаҫары итеп тәғәйенләнә (Татаро-монголы в Азии и Европе. «Наука», М., 1977; 38, 66 — 69-ынсы биттәр; Алтан Тобчи, 38-енсе бит). Күп

---

[37] Ҡарағыҙ: Башкирские шежере. (Филологические исследования и публикации). Уфа — 1985; 57-нсе бит. Артабан: «Башкирские шежере».

йыллыҡ фиҙакәр хеҙмәттәре өсөн Муйтән//Мухали Сыңғыҙ-хандан дәүләттең иң юғарылыҡлы (ҡытай терминлы) *гоа* (сибәр, гүзәл), *гуи-онг* (дәүләт мырҙаһы), *чингизанг* (Сыңғыҙҙың премьер-министры), *тайши* (бөйөк остаз) тигән титулдарын ала, Сыңғыҙ-хандың иң ышаныслы туғыҙ «өрлөг»өнөң[38] иң ышаныслыһы була (Алтан Тобчи; 39, 363-өнсө биттәр).

Бөйөк Муйтән//Мухали бабабыҙҙың да йәшәү йылдарын асыҡларлыҡ мәғлүмәттәр күренә ҡытайҙар тәүәрихендә. Әйтәйек, бер урында «Мухали 1223 йылда 54 йәшендә вафат» тип яҙылған, ләкин был «вафат» тигәне дөрөҫ түгел. Сөнки тап шул 1223 йылда татар-монгол ғәскәрҙәре Аҙау диңгеҙе яҡаһындағы Ҡалҡа йылғаһы буйында берләшкән урыҫ-ҡыпсаҡ ғәскәрҙәренең бик ныҡ ҡаршылығына осрай ҙа, әйтеп үтеүебеҙсә, Сыңғыҙ-хан үҙенә Ҡытайҙы яулап алып биргән данлы сәрғәскәре Муйтән//Мухалиҙы Төньяҡ Ҡытайҙан саҡыртып алып, шул Аҙау яғына көнбайыш фронтҡа ебәргән булырға тейеш, ә ҡытайҙар үҙҙәре яғында дәһшәтле Муйтән//Мухалиҙың юҡҡа сығыуын уның вафатына тиңләгәндәрҙер. Сөнки Муйтән//Мухали бабабыҙ Сыңғыҙ-хан үлеп күп йылдар үткәс тә иҫән — Мәңке-ҡаған тарафынан ул 1254 йылда Хубилай менән бергә империяның көнсығыш (Ҡытай) биләмәләренең хәлен тикшерергә инспектр итеп юлландырылған[39]. (Мэн-да бэй-лу; 132 — 134-енсе биттәр). Шулай ҙа тәүге мәғлүмәттең бер ҡиммәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур — 1223 йылда 54 йәшлек Муйтән//Мухали бабабыҙ 1169 йылда (1223 - 54=1169) донъяға килгән, тимәк! Ғүмеренең ахырын да фараз ҡылып беләбеҙ: татар-монголдарға ҡаршы баш күтәргән Бөйөк Башҡортостандың 35 йыл буйына һуҙылған ҡоралы көрәшенә йә — йәшерен, йә — асыҡтан-асыҡ етәкселек итеп, татар-монголдар тарафынан 1255 йылда 86 йәшендә хәҙерге Ирандың Мазендеран өлкәһендә ҡулға алынып юҡ ителгән. («Ағиҙел» журналының 1999/12 һаны; 126, 133-өнсө биттәр).

Инде кире артҡараҡ сигенәйек.

# Сыңғыҙ-хандың вафаты

Көнбайышҡа урыҫ илен яуларға ебәрелмеш аҡыллы сәрдар Яусы (Джучи), Дон буйҙарына барып етһә лә, урыҫтар менән ҡапыл-ғара бәрелешергә ниңәлер ашығып бармай, эште оҙаҡҡа һуҙа: моғайын, Иртыш буйында башҡорттар менән һөйләшеп килешкән кеүек үк, урыҫ мәсьәләһен дә тыныс юл менән хәл ҡылырға йыйына. Атай әмерен еренә еткереп үтәмәгәне өсөн һарыуы ҡайнаған Сыңғыҙ-хан 1227 йылда Яусыны саҡыртып ҡайтарта ла йәшерен рәүештә билен һындыртып үлтертә, тик үҙе лә оҙаҡҡа бармай — шул уҡ йылдың авгусында Ордостағы хәҙерге Иньчуан (Ҡытай) ҡалаһы тирәһендә йән бирә (шундағы Чжамхаҡ йылғаһы буйында ошоғаса иҫтәлекле кәшәнәһе һаҡланған). Ләкин мәйетен уның тыуған яғына илтеп ерләйҙәр. Быны мәңгелеккә сер итеп ҡалдырыр өсөн, оҙон матәм юлы буйынса осраған һәр берәүҙе үлтерәләр, илдәге иң һылыу ҡырҡ ҡыҙҙы ла

[38] Өрлөк — башҡорт һүҙе.

[39] Был, бәлки, уны тотоп алып үлтереү өсөн һылтау ғына булғандыр.

Сыңғыҙ-хан мәйете менән ҡуша ҡәбергә һалалар, имеш (Е.И. Кычанов. Жизнь Темучжина, думавшего покорить мир. «Наука», М., 1973; 128,.130 — 131-енсе биттәр. Артабан: Е.И. Кычанов). Мәрхүмде тыуған иленә оҙатышып, әлбиттә, иң беренсе таянысы, «өрлөг»ө Муйтән//Мухали[40] барған, дөрөҫөрәге, Башҡортостандағы Сыңғыҙ-хан ырыуы бөрйәндәрҙең төбәгенә алып ҡайтып ерләшкән булырға тейеш:

*Мәңгелек Сыңғыҙ[41] тыуҙырган бөйөк батыр, хужабыҙ!*
*Һинең хаҡ халкың,*
*Һинең улдарың һәм уларҙы тапҡан ҡатының,*
*Һинең тыуган хан ерең һәм һыуҙарың — шундалар бит!*
*Һинең бөтә ырыуың, тугандарың — шундалар бит!*
*Һине ҡойондорган һинең һыуҙарың,*
*Күп һанлы мәңгелдәрең[42] — һинең халкың,*
*Анандагы[43] Түләгән-Балдаҡ, һинең тыуган ерҙәрең — шундалар бит!*
*Турайгыр кикеле эленгән һинең әләмең,*
*Һинең дөмбөрҙәрең, торба һәм борголарың,*
*Һинең йор телле бөтә халкың,*
*Көрүлән[44] далаһындагы һин хан булып күтәрелгән Арал[45] — шундалар бит!*
*Һинең Бүртәгөлйән-ҡатын, иң беренсе хәләлең,*
*Бураган-Туҡан[46] — һинең тыуган ер-һыуың,*
*Бауырсы[47] һәм Мухали[48], һинең һөйөклө дуҫтарың,*
*Һинең бөтә бөйөк ҡанундарың — шундалар бит!*
*Һинең менән мөгжизәле ҡауышҡан Ҡолон-ҡатын,*
*Һинең* ***ҡурайҙарың*** *һәм һыбыҙгыларың, һәм йырҙарың,*
*Бөтә халыҡтарың һинең тулайым,*
*Һинең изге хан ер-һыуҙарың — шундалар бит!*
(Алтан Тобчи, 241 — 242-нсе биттәр).

---

[40] Эренжен Хара-Даван тигән тикшереүсе 1929 йылда Белградта нәшер ителгән «Чингис-хан как полководец и его наследие» тигән китабының 129-ынсы битендә: «Мукали 1223 йылда үлгән», — тип яҙа, ләкин был дөрөҫ түгел, сөнки Муйтән//Мухали бабабыҙ шанлы сәрғәскәр сифатында 1224 йылда Төньяҡ Ҡытайҙа һуғышҡанлығы билдәле. (Е.И. Кычанов, 124-енсе бит).

[41] Сыңғыҙ (Зәңгәр) — боронғо динебеҙ буйынса, Зәңгәр-Күк Хоҙай йәғни Анабыҙ Һауа тигән һүҙ.

[42] Мәңгел//монгол һүҙенең төбөндә «мәңгелек» тигән мәғәнә ята, тип һанағандар. (Мэн-да бэй-лу, 89-ынсы бит).

[43] Анан (Онон) — хәҙерге Баймаҡ районындағы Һаҡмар йылғаһы буйы. Йәғни мифик "Ананан – Ана-Һыйырҙан башланғыс алған һыу.

[44] Ҡараған йылғаһы (Яйыҡҡа ҡоя) һуғарған иркен дала — боронғо Туҡан (Арҡайым) ҡалаһы төбәге.

[45] Арал — Урал тауҙары.

[46] Бураған-Туҡан — боронғо Арҡайым ҡалаһы. Темәсйән башлап үҙенең хан дәрәжәһен шул төбәктә алғанлыҡтандыр, моғайын, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенә ул «Туҡан-хан» тип теркәлгән.

[47] Бауырсы (табынсылар башлығы) — Табын ырыуының башбабаһы, бер үк ваҡытта Сыңғыҙ-хандың шәхси гвардияһының башлығы Бүрекәй Муйтән улы.

[48] Мухали — Муйтән.

Күрәһегеҙ, юл буйынса сеңләй-сеңләй, тыуған ере Уралға — Башҡортостан тупрағына алып ҡайтып киләләр Бөрйән ырыуының бөйөк улы Сыңғыҙ-хандың мәйетен. Башҡортҡа ғына хас моң-көй ҡоралының исеменә — «ҡурайҙарың» тигәнгә иғтибар итегеҙ! Бөрйән ырыуы башҡорто Сыңғыҙ-хан ғүмере буйына ҡурай (ҡур) моңон тыңларға бик яратҡан, үҙе лә ҡурай тартҡан булырға тейеш, сөнки «хан ҡурайын (ҡурын) һаҡлаусы Жәбә исемле башҡорт (бэсут)» билдәле, ә уның туранан-тура тоҡомо Ҡуширҙәй-ҡурайсы (Куширдэй-куричи) XVII быуатта Ордоста йәшәгән. Был фактҡа аңлатма биреүсе Н.П. Шастина ошолай яҙа: «Сыңғыҙҙың ҡурайын һаҡлаған музыкант тураһындағы был мәғлүмәттәр һис шикһеҙ ҡыҙыҡһыныу уята... Күренеүенсә, Сыңғыҙҙың һарай музыканты — ҡурайсыһы (хуричи) һәм ифрат ҡиммәтле моң-көй ҡоралы булған». (Алтан Тобчи; 294, 386-нсы биттәр). Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: ҡурайыбыҙ хәҙерге монгол моң-көй ҡоралы рәүешендә лә һаҡланып ҡалған имеш: «*бишхур* — звук извлекается через камышовую трость» (Д. Мадар. Памятники истории и культуры Монголии. М., «Мысль», 1981; 130-ынсы бит). «Бишхур» тигәне — «биш тишекле ҡурай», йә иһә «башҡорт ҡурайы» тигән һүҙҙер, моғайын...

Ҡош-ҡорт, дошман күҙен яҙлыҡтырмаҡҡа, юл буйында барышлай уҡ бер-нисә урында Сыңғыҙ-ханды ялған ерләү йолаларын үткәреп, ә үлгән ере Ордоста — өҫтәрәк телгә алынмыш иҫтәлек-кәшәнәһен ҡороп ҡалдырып, һәм тыуған төйәгенә килеп етәрәк «*Муна* тауы янындағы һаҙлы-батҡаҡ урында... уның кейем-һалымын һәм ойоҡтарын ерләгән «ҡәбер»е өҫтөнә лә тирмә ҡороп» ҡалдырҙылар... (Алтан Тобчи, 241-енсе бит). Үтә лә мөһим мәғлүмәт был: ялған ерләү йолаһы үткәрелгән «*Муна*» тауы тигәнгә иғтибар итегеҙ! Тәүәрихтәге ошо *Муна* — Сыңғыҙ-хандың ырыуҙаштары бөрйәндәр йәшәгән хәҙерге Баймаҡ районы *Сыңғыҙ* ауылының боронғо исеме *Мунаш* бит! (Ә. Әсфәндиәров. Олатайҙарҙың бар тарихы. Өфө — «Китап», 1996; 65-енсе бит)... Ысын ҡәбере тәғәйен ҡайҙалығын бик ныҡ йәшергәнлектән, берәү түгел — бер нисә мәғлүмәт быуындан-быуынға килә:

«Уның ысын мәйете, бәғзеләр һөйләүенсә, Бурхан-Халдун тауында ерләнгән. Башҡалары иһә уны — Алтай-хан тауының төньяҡ итәгендә йәки Кәнтәй-хан тауының көньяҡ итәгендә, йәки *Яга-Үтәк* тигән урында ерләгәндәр, тип һөйләй» (Алтан Тобчи, 242-нсе бит).

Темәсйәндең, йәш сағында, тыуған төйәгендә үҙенә янаған бәлә-ҡазанан ҡасып, емерек Туҡан (Арҡайым) ҡалаһын янлап аҡҡан һәм Ҡарағанға (Көрүләнгә) ҡушылған *Үтәгән* йылғаһы буйында йәшәп алғанлығын белгәнлектән, тарихнамәлә әйтелмеш *Яга-Үтәк* тигәнде, һис ҡыйынһынмай, шул «*Үтәгән* йылғаһы *ягы*» йәки *"Үтәгән* йылға *яҡаһы"* итеп ҡабул ҡылабыҙ. Ә көнсығыштан былай табан килә ятҡандағы ул *Үтәгән ягы* — шулай уҡ хәҙерге Сибай тәңгәлендәге Яйыҡ, Таналыҡ, Һаҡмар йылғалары буйы ла бит ул шул уҡ ваҡытта — тәүәрихтәге Темәсйәнде (Сыңғыҙ-ханды) тыуҙырған изге еребеҙҙең йылғалары!

Йәшлегендә шул тирәлә һунарҙа йөрөгәнендә, Темәсйән бер яңғыҙ тирәк төбөндә ятып ял иткән һәм йәненә хозур еңеллек алған. Шуға күрә лә күңеленә ныҡ оҡшаған был төбәк тураһында: «Вафат булғас, мине ошонда килтереп ерләрһегеҙ», — тип әйтеп ҡалдырған, ти (Е.И. Кычанов, 130-ынсы бит). Был

урынды, әлеге лә баяғы, хәҙерге Баймаҡ районының *Сыңғыҙ* ауылы ултырған ер итеп ҡарамай булмай, сөнки тап шунда, Сыңғыҙ тигән ауыл исеменән тыш, *Сыңғыҙ-ханға* бәйле тағы ла бик мөһим ике нәмә бар. Уларҙы бөтәбеҙгә билдәле булған мәшһүр Р.Г. Игнатьев 1864 йылда уҡ тикшереп, бөтәбеҙ өсөн аманатлап ҡалдырған. Бына тап шул ғилми-рәсми мәғлүмәт: «Чингизовский вал (городище?). Дер. Чингизово, Баймаҡский район. В четырех верстах от деревни, на левом берегу р. Сакмары, в устье Асили находятся остатки вала окружностью 84 сажени с двумя воротами, по преданию «Ставка Чингиз-хана». Игнатьев Р.Г., 1864».

Һәм ниһәйәт: «Чингизовский курган. Дер. Чингизово, Баймакский район. В трех верстах от деревни, на правом берегу р. Сакмары, в 300 метрах от берега находится каменный курган под названием «Усулар» (могила ордынского хана). Высота кургана три сажени, диаметр 17 саженей, на вышине три ямы глубиной 1 — 1,5 аршина. Игнатьев Р.Г., 1864». «Урҙа ханы»нығы булғас, ошолор инде Алтын Урҙа ханы Сыңғыҙ баба ҡәбере!

Йәнә килеп, тәүәрихтән шуныһын да беләбеҙ: Сыңғыҙ-хан бабабыҙ ерләнгән ерҙә — уның иң яҡын туғандарының да зираты: «Чингизовские курганы... Дер. Чингизово, Баймакский район. На окраине деревни, на территории кладбища и вблизи него находится группа из 30 курганов, расположенных беспорядочно. Многие курганы разрушены современными могилами. В одном раскопанном кургане обнаружена ограбленная могила... Садыкова М.Х. Отчет 1963; Мажитов Н.А. Отчет 1965» (Археологическая карта Башкирии. «Наука», М., 1976; 187 — 188-енсе биттәр).

Бөйөк бабабыҙ Сыңғыҙ-хандың тәғәйен ҡайҙа ерләнгәнлеге, тимәк, шөйлә баҙыҡ төҫмөрләнә башланы...

## Урыҫ-авторҙар нимә ти

## БАШКИРЫ И ЧИНГИЗ-ХАН

### О тюркской компоненте т.н. "монгольского" завоевания Евразии

**Введение**

Немало копий сломано вокруг т.н. монгольского завоевания, якобы начавшегося из окрестностей рек Онон и Керулен в Забайкалье и завершившегося порабощением почти всей Евразии. Многократно отмечалась мифологичность такого головокружительного скачка малочисленного азиатского народца, прозябавшего в полной дикости и безвестности - к владычеству над всем известным миром всего за каких-то 60-70 лет. И не единожды возникало удивление темпами стремительной деградации величайших завоевателей всех времен и народов - опять к полной дикости и безвестности за какие-то 100 лет после распада «их» великой империи на составные части. Деградации настолько глубокой, что уже через 200 лет этот народ вообще ничего не помнил ни о своем удивительном прошлом, ни о тех достижениях, с которыми его познакомили

многочисленные порабощенные народы. Одним из первых попытался объяснить все немыслимые метаморфозы, произошедшие с монголами, Л.Н.Гумилев, разработавший теорию этногенеза, основанную на изобретенном им принципе пассионарности. Его принцип породил шквал критики со стороны классической исторической науки. Но принцип пассионарности оказался в 1970-е гг. единственным инструментом, способным более или менее правдоподобно объяснить загадку монголов. В итоге некоторые положения теории Гумилева вошли в новейшие учебники истории для ВУЗов. Но даже заключение о повышенной страстности-пассионарности монголов не может достоверно объяснить ту массу противоречий, с которыми сталкиваешься при детальном знакомстве с обстоятельствами завоевания, не имевшего под собой ни политической, ни экономической, ни технологической, ни военной, ни людской базы.

### Этнические монголы конца XII века и их окружение

Согласно исследованиям ученых, монголы кон.XII в. были малочисленным кочевым народом, живущим за счет скотоводства и охоты. Их общественный строй представлял из себя союз родовых общин. Неудачная попытка создания Монгольского каганата во 2-ой пол.века указывает на отсутствие у монгол потребности в централизованном объединении. Это вполне объяснимо крайне низкой плотностью населения и самодостаточностью родового ведения хозяйства. Как статданные численности населения Монголии, так и расчеты по мобилизационным ресурсам государства Чингиз-хана, взятым из различных литисточников, не единожды производившиеся в процессе дискуссий на инет-форумах, показывают, что максимально возможное население на территории нынешних Монголии и Бурятии, где и зародился монгольский этнос, не могло превышать 200тыс.чел. Быт монгольских кочевников, довольствующихся собственным хозяйством, не располагал ни к сложной организации общественных структур, ни к возникновению разделения труда. Ученым не известно о существовании у монгол зачатков промышленности, требующей перехода к хотя бы частичной оседлости. Не существовало никакой письменности. Хозяйство, за исключением редких товаров, было натуральным, т.е. каждый род обеспечивал себя самостоятельно и вполне мог длительное время существовать автономно. Окружение этнических монгол состояло из тюрков и предков манчжур. Одно время монголы подчинялись могущественным Тюркским каганатам, а позднее Уйгурскому каганату. Т.е. этнические монголы были крошечным инородным включением в огромном массиве тюркских народов, раскинувшемся от Средиземного моря и почти до Тихого океана. Что манчжуры, тяготевшие к высокоразвитой китайской цивилизации, что многочисленные тюркские народы, находились на более высоком уровне развития по сравнению с монголами. Все они имели не только государственные структуры, но и развитую, хотя и кустарную, промышленность. В первую очередь, производство железного оружия. Обе эти группы народов славились умелыми и храбрыми воинами, постоянно доказывавшими свое мастерство в стычках с армиями других государств. Манчжуры, тюрки-кыргызы и тюрки-уйгуры издавна имели собственную письменность, которую (уйгурскую) заимствовали у них монголы. Анализ верований монголов показывает, что вначале

они переняли традиционную веру тюрков, несколько видоизменив ее под собственные климатические и культурные условия, а впоследствии сменили ее на распространившийся по Азии ламаизм. Т.е. культура, ремесла, общественный строй этнических монгол кон.XII в. были вторичны и зависимы от окружающих их тюркских народов.

**Антропология**

Исследования ДНК разных европейских народов показали, что все они содержат в материнских генетических линиях монголоидные признаки. Но, в зависимости от национальности и места жительства, процент этих признаков различен. Так у русских он составляет 2-3%, у марийцев, коми, удмуртов - от 6 до 20%, у татар -15%, у чувашей -10%, а у башкир- 65%. Повторюсь: это признаки, передаваемые только по материнской линии. Антропометрические же исследования черепов из захоронений различных времен дают несколько иную, порой даже шокирующую картину. Так, монголоидность русских до «монгольского» нашествия составляла 6-7%, а вскоре после установления «ига» стала составлять 3-4%. В то же время, количество монголоидных признаков у башкир до-монгольских времен и времен господства Орды никак не изменилось и составляло 15 %. О чем говорит этот разброс? Русские женщины и мужчины имеют чисто индоевропейское происхождение, но привнесение «монгольской» крови во время многочисленных рейдов ордынцев не только не добавило русским монголоидности, но даже еще больше очистило их расовую принадлежность. На мой взгляд, такое могло произойти - только при явной европеоидности завоевателей. Неизменность же признаков на протяжении длительного времени у башкир при огромном различии их у мужчин и женщин, тоже красноречиво свидетельствует о том, что они - потомки индоевропейских воинов, бравших себе в жены представительниц монголоидной расы. Это вполне объяснимо имеющимися научными данными. Известно, что башкирский народ образовался на основе нескольких потоков переселенцев, среди которых были европеоидные иранцы, сарматы-юрматы, согды, тюрки-кипчаки, саксины-саксы. А заняли эти переселенцы места обитания представителей т.н. Ананьевской культурно-исторической общности, антропологический тип которых, как известно, определялся как метисный, в основе - монголоидный, с отдельными примесями европеоидных черт. Об этом же говорят и исследования советско-финляндской медико-антропологической экспедиции 1983г. под руководством профессора А.А.Зубова, показавшие, что наиболее древними расовыми типами башкирского населения являются понтийский и субуральский. Но для нас интересен другой вывод этой экспедиции: наиболее поздним является южносибирский расовый тип, который проник на Южный Урал в период Золотой Орды. Распределение же преобладания расовых типов у башкир оказалось следующим (и я попрошу обратить на это внимание для правильного понимания моих дальнейших рассуждений). Южносибирский расовый тип характерен для северо-восточных и зауральских районов, субуральский монголоидный - для северо-западных районов, светлый еврепеоидный - для северных и центральных районов, а понтийский - для юго-западных и горно-лесных районов. Кроме того, в юго-восточных районах прослеживаются признаки

памиро-ферганского расового типа. Заметьте: со временем Золотой Орды связывают появление не континентального монголоидного расового типа, к которому относятся этнические монголы, а южносибирского, со слабо выраженной монголоидностью. После этого попробуйте переварить информацию о родстве предков Темучина с одним из башкирских племен. Именно из-за установления этого родства, согласно башкирских преданий, «монголы» заключили с башкирами союз после 12 лет ожесточенной борьбы.

**Лингвистика**

«Монгольское» нашествие не оставило в Восточной Европе никаких (!) языковых следов. Даже самых незначительных. Якобы монгольская Золотая Орда со столицей в низовьях Волги, просуществовавшая (вместе с ее наследниками) более 300 лет, не оставила после себя ни единой монголоязычной группы населения. Официальная история объясняет это весьма малым количеством этнических монгол в составе Орды. Только это явно не вяжется с фактом известной по учебникам и историческим трудам обособленности монгольского костяка ордынских войск. Тем более, невесть откуда взявшиеся у почти бесписьменных монголов отчеты о решениях курултаев, говорят о направлении на завоевание Европы именно семей, а не отдельных воинов. Т.о. не выдерживает критики объяснение стремительной ассимиляции этнических монгол воспитанием их потомства немонголоязычными матерями. Даже сегодня существуют (например, в Афганистане) весьма малочисленные племена, хранящие монгольский язык уже сотни лет. Имеются и другие примеры малых народов, потомков так и неассимилированных различных завоевателей. Зато вызывает крайнее удивление стремительность демонголизации Орды. Уже спустя 15-20 лет после захвата Восточной Европы «монгольские» ханы, перенявшие совсем недавно уйгурский алфавит, чеканят монеты исключительно с арабской вязью, бывшей уже несколько столетий официальным алфавитом восточноевропейских тюрков. Все официальные документы Орды пишутся либо по-арабски, либо по-персидски (два языка международного общения в Азии тех времен), либо арабской вязью на языке тюрки. До сих пор в тюркских языках встречается довольно небольшая группа слов, считающаяся заимствованием из монгольского языка. Удивительно, но это - либо слова, одинаково распространенные во всех языках, либо еще более незначительные группы, вошедшие в какой-то один из языков. При тщательном разборе выясняется, что учеными направление заимствования определялось однозначно исходя из аксиомы: монголы правили, значит, заимствовали у них. Не допускается даже мысли, что этнические монголы, как губка впитавшие огромный пласт тюркской культуры, могли сами заимствовать эти слова от окружавших их в Забайкалье тюрков. До сих пор не выявлено время появления многих монгольских слов в тюркских языках, которые могли быть заимствованы много позднее XIII в. от джунгар и калмыков, контактировавших со многими тюркскими народами на протяжении XVI-XVIII вв.. В то же время удивительно просто переводятся с тюркских языков многие слова, считающиеся якобы монгольскими: курултай, Каракорум, багатур. Даже сам титул «хан», считающийся заимствованным от монгол, в старинных тюркских документах называется древнетюркским. Строчки: «С тех пор всех тюркских правителей

называют ханами»: описывают события, случившиеся за много веков до «монгольских» завоеваний. А само название государства «Менге Иль» однозначно тюркское -вечная страна. Отдельной загадкой считается титул предводителя «монгол» Чингиз-хана. Официальная наука с трудом трактует его по-монгольски как «Необъятный океан». И это - после утверждения Гийома Рубрука, что монголы не представляют, что такое море-океан, не понимают, как он может быть безбрежным. Но «Чингиз» довольно легко переводится с башкирского языка, где оно звучит как «СынҒыз»: Сын» - настоящий, истинный, неподдельный; «Ғызз» - сокращение от «Ғ>ыззет» - устаревшего слова почет, уважение, могущество. Т.е. Чингиз-хан переводится как «истинно могущественный правитель». (Напомним, что это имя Темучин получил в 1206 г. на Великом Курултае.) Внук Чингиза, хан Бату (или Батый) имел имя, означавшее на древне-тюркском языке «драгоценный камень». Да и имя пра-отца Чингиза, Борджигин, является не чем иным, как незначительно измененным башкирским племенным наименованием, и означает «из племени Бурзян». Просто башкирское «з с хвостиком», может в некоторых тюркских языках читаться как «дж». Чингизид Тохтамыш носил чисто башкирское имя, образованное в идеальном соответствии с правилами башкирского словосложения «Тукта-Тохта» - «остановись», «мыш» - аффикс, применяемый при образовании имен. Имя хана Угэдея состояло сразу из двух башкирских слов: «Ук» - стрела, и «Этэй» -превосходный . Менгу-Темир означает по-тюркски «железный наездник». Это -только самые яркие примеры тюркского перевода якобы монгольских имен. Причем, перевод осуществлен без использования древних словоформ. Труднообъясним выбор монгола с древне-тюркским именем Батый слова для обозначения своей столицы. Слово «Сарай» - персидское, обозначает дворец. А «Сарай-Бату» - дворец драгоценного камня. Трудно понять и его деда, назвавшего будущую столицу своего государства. Ведь «кара» - общетюркское слово, обозначающее, кроме черного цвета, такие признаки, как грозный, сильный, могучий. А «кырым» на древне-тюркском языке значит «даль, дальняя страна; хорошо сделанный; много, бесчисленно». Примеров лингвистических странностей «монгольских» завоевателей столько, что на их разбор не хватило бы времени.

### Этнография

Абсолютно все исследователи отмечают изначальное единство религий тюрков и этнических монгол. Кто-то пытается назвать эту веру шаманизмом, но это не совпадает с действительностью. Для человека, воспитанного на идеях христианства, поклонение духам огня, воды, ветра, камлание шаманов, и есть язычество, не смотря на почитание единого верховного божества, именуемого Тэнгри, Бер Тэнгри. Т.е. Единый Дух Неба, почитавшийся народами от Дуная до Манчжурии. Первые упоминания о Тэнгри встречаются в рунических орхоно-енисейских надписях, относящихся ко временам, когда о монголах никто и не слышал. Т.е. вера монгол - явное заимствование от тюрков. Правда, не 100%-ное: например, тюрки различали 17 духов-божеств, а монголы -99. Есть и другие признаки тюркской первоосновы тэнгрианства: например, очень многие моления Тэнгри связаны со священным деревом всех тюрков -березой.

Причем, повсеместно (кроме Монголии). Четко прослеживаются и другие заимствования. Так, монголы, ассимилируя остатки тюркских племен, проживавших до них на территории Монголии, постепенно меняли тип хозяйствования с лесного охотничьего на кочевой. Это подтверждается анализом предметов имеющих отношение к кочевому образу жизни. Почти все названия этих предметов имеют тюркскую языковую основу. Немало важных сведений можно почерпнуть из эпосов тюркских народов, описывающих события времен Золотой Орды. Вот примеры: известной исторической личностью является сподвижник Чингиз-хана Майкы. Чингиз настолько его уважал, что Майкы всегда ездил с ним в одной повозке. Но башкиры считают Майкы-бия своим ханом и сподвижником Муйтэн-бия (своего первого хана, перешедшего впоследствии под власть Чингиз-хана). Тот, в свою очередь, назначил 30-летнего Муйтэна своим наместником в Башкирии. Особо отмечается, что ханов-завоевателей было много, а Чингиз лишь считался самым могущественным из них. Признанием первенства Чингиза Муйтэн спас свой народ от уничтожения. Еще любопытнее, что древнейшим (домонгольским) именем юго-восточного башкирского племени Усерган является имя Муйтэн, а северо-восточное племя Табын ведет свою родословную от Майкы, потомка создателя государства Тюкю. Личность Чингиз-хана не просто уважаема тюрками. Его почти боготворят. В т.ч. и восточноевропейские тюрки и особенно башкиры. Историки утверждают, что Чингиз-хан умер еще до похода на Волгу и Урал. Но откуда же тогда взялась в родословной башкирского племени табын такая фраза: «Чингиз дал Майкы-бию страну, уран (боевой клич) - Салават, дерево - лиственницу, птицу - карагуш (имеются в виду племенные тотемы)»? Это все равно, что утверждать: царь Александр III написал работу «Детская болезнь левизны в коммунизме». В этой фразе из родословной интересно и то, что слово «Салават» вовсе не монгольское и даже не тюркское, а арабское, означающее молитву с благословением пророка Мухаммада, т.е. это указывает на сильное проникновение ислама в Башкирию. Ни для кого не секрет, что очень часто родовые имена трансформируются в племенные и наоборот. А представители других народов или племен, осевшие на землях коренных жителей, ассимилировавшись, дают название новому роду. Этот процесс знаком по массе источников, как исторических, так и эпических. Я попытался проследить закономерность размещения башкирских родов и племен, с явно монгольскими названиями. И у меня получилось, например, что роды (роды входят в племена) с именем «монгол» относятся к восточным башкирским племенам Табын (племя Майкы-бия) и Кувакан. Роды «чингиз» встречаются среди родов только восточных племен Бурзян (вспомним имя Борджигин), Табын и Кыпчак. Роды «тума (тумен)», соответствующие одному из монгольских племен, попадаются чуть чаще, у восточных башкир Бурзян, Усерган (или Муйтэн), Кыпчак, Катай. И единственный раз - у западных Мин. Известно название племени Барын, примкнувшего к Чингизу и Джамухе. В Башкирии это название носят роды только зауральских племен Катай и Табын. И ни одно из вышеперечисленных родовых имен не известно казахам, киргизам или узбекам! Но среднеазиатским тюркам прекрасно

известны названия племен и народов, с которыми - воевал Чингиз. Эти названия бережно сохранены ими в именах своих племен: найман, кыпчак, кырлык (карлук), кереит (кераит), онгут, тангут, мангут, меркит, татар, уйгур, авар, маджар. Из всех этих этнонимов башкирами употребляются только «найман» у усерган-муйтэнов, «кыпчак», вследствие переселения огромного числа кипчаков после разгрома их ордынцами, «меркит» у племени мин, и «татар» благодаря соседнему народу.

Удивляет поразительная, для жителя Забайкалья, осведомленность Чингиза о географии мест, отдаленных от его родины на 5-6 тыс.км. Вот, например, как описывает это «Сокровенное сказание»: «А Субеетай-батура он [Чингиз-хан] отправил в поход на север, повелевая дойти до 11 стран и народов, как-то: Канлин (Канглы), Кибчаут (Кыпчаки), Бачжигит (Башкиры), Оросут (русские), Мачжарат (мадьяры или марджя-мордва), Асут (асы-языги), Сесут (чехи), Серкесут (черкесы), Кешимир, Болар (башкиры-биляр), Лалат (аланы), перейти через многоводные реки Идил и Аях (Яик), а также дойти и до самого города Кивамен-кермен (Киев) ...» О географических аспектах «Монгольской» Империи будет сказано чуть ниже, а пока я остановлюсь на самом «Сокровенном сказании», считающимся самым важным доказательством завоевания мира этническими монголами.

Считается, что этот документ, «содержащий фрагменты древних мифов, былинного эпоса и легенды» был создан не ранее 1240 г. Записанный уйгурским письмом, его в 1382 г. транскрибировали китайскими иероглифами, а потом перевели на китайский язык. Оригинал, как всегда, не сохранился. Эпос скрывали от глаз аж до 1866г, пока его не сумели разыскать у бурятов и перевести на русский язык русские исследователи. Но в 30-е гг. XX в. «Сокровенное сказание» было реконструировано и именно в таком виде влилось в историческую науку. Если не касаться вопросов по транскрибированию, переводам и проблеме тотального переписывания книг в Китае, то настораживает момент появления документа: время дискуссии между славянофилами и западниками, защищавшими написанную Миллером, Шлетцером и Байером русскую историю. Судя по содержанию, «Сокровенное сказание», если предположить, что оно - не подделка, является явно компилятивным документом. Какие именно хроники, эпосы и легенды были основой для его написания, науке пока неизвестно.

**Археология**

Многолетние поиски следов существования центра мощного государства на территории современной Монголии до сих пор никаких результатов не дали. Находят следы пребывания тюрок: стелы с надписями (оленные камни) в виде тюркских рун, остатки небольших поселений домонгольских времен, курганы с захоронениями кыргызских вождей. Поиск могилы Чингиз-хана превратился уже в манию. Этих «могил» найдено больше десятка, но год за годом появляются все новые и новые сообщения об очередной находке захоронения великого полководца. (Не там ищут.) Казалось бы «анализом древних источников» уже разыскано местонахождение столицы Монгольской Империи, города Каракорум. Естественно - в Монголии. И мало кого волнует, что вся (!) территория величайшего города занимает крохотную площадь, а под якобы дворцом Угэдэя

раскопана древняя буддистская кумирня. Поясню: БСЭ определяет время проникновения буддизма в Монголию XVI веком. И именно этим временем (1585-й г) датируется стоящий рядом с развалинами буддистский монастырь. Сам же Каракорум существовал до XVI в. Все, хоть как-то касающиеся истории Великой Орды, задаются вопросом: куда же подевались несметные сокровища, награбленные т.н. монголами во всем мире? Где те тонны драгоценностей, полученных ханами в виде воинской добычи или дани?! Где великолепные изделия искусства, ради возможности производить которые кровожадные захватчики направляли искусных мастеров всего мира в свою столицу? Исчезли. В самой Монголии нет ни кладов, ни даже случайных находок. Но есть другое место в мире, наличие невообразимых сокровищ в котором ученые объяснить не в состоянии. Это - Зауралье и Западная Сибирь. Именно там до сих пор находят иранское сасанидское серебро. О количестве находок говорят факты жизни чердынского купца и коллекционера Алина, собравшего 16 пудов восточных серебряных изделий, найденных за Уралом. Основу личной коллекции Строгановых, хранящейся сейчас в Эрмитаже, составляли именно иранские шедевры, найденные в Приобье. И все это - жалкие крохи в сравнении с общим объемом находок. Фактом является то, что центральноазиатским купцам не был известен путь в Зауралье и Западную Сибирь. В персидских и арабских документах нет ни единого упоминания о путешествиях в те края. Не было и соответствующей экономической базы у западносибирских племен для приобретения такого количества драгоценностей. Единственно правдоподобным объяснением феномена сасанидского серебра является мысль, что именно Зауралье и Западная Сибирь - и были центром могущественной державы, куда стекались богатства из всех покоренных стран. Центром Великой Орды. Центром империи Менге Иль. Не от этих ли богатств идут легенды о неуловимой Золотой Бабе?

Большинство находимых на территории нынешних Монголии и Бурятии археологических объектов времен раннего средневековья идентифицируются учеными как следы тюркской культуры. И это интересно сопоставить со сведениями о заселении этих территорий предками монгол и бурят. По данным археологических исследований, заселение Забайкалья бурятами произошло лишь в нач.XIII в., как раз во *времена* Чингиз-хана. Учитывая мнение бурятов об их идентичности монголам, заслуживает внимания легендарный факт их появления на Байкале. Они считают, что предки бурят и монгол пришли к озеру из окрестностей нынешнего Красноярска, выйдя на западный берег Байкала по долине р. Сарма. Там же они основали свое первое поселение, названное по имени реки, и оттуда начали расселение вокруг озера. И лишь несколько позднее произошло разделение родственных одноязычных народов из-за различий в среде обитания, роде деятельности и укладе жизни. Т.о. как может существовать на каких-то землях мощное государственное объединение народа, еще не заселившего территорию, где родились они и их единородный предводитель? Явно прослеживается, что империя с центром в Монголии - есть миф, фантом, дубликат какого-то другого государственного объединения. Какой же народ схож по культуре с забайкальскими монголами и бурятами?

Загадочные рыжеволосые кимаки, название которых исчезло из обихода после развала Кимакского каганата в XI в.? Казахский ученый С.М.Алимджанов определенно связывает кимаков с монгольским племенем ку-мо-хи. Ку-мо-хи имели тотемом змею, кимаки также почитали змею. Кимаки властвовали над территорией от Алтая до Волги, от западносибирской тайги до Аральского моря. Обычай захоронения кимаков, центральная часть государства которых располагалась в прииртышских степях, очень схож с бурятским: все те же неглубокие могилы с небольшими грудами-курганчиками камней на них. И именно в Зауральской лесостепной зоне наблюдается наибольшее количество монгольских языковых заимствований в башкирском языке. Близкое соседство с двумя мощными сырьевыми регионами, Алтаем и Уралом, полностью снимают вопрос об экономической базе «монгольского» завоевания, т.к. особенно Урал, является традиционным металлургическим центром всей тюркской цивилизации по производству железного оружия. Кроме того, именно на Урале человек впервые приручил коня, и именно с Урала выплескивались всегда конные армады завоевателей-арии, масагеты, геты-готы, гунны.

**География**

В части «Сокровенного сказания», описывающей происхождение Чингиз-хана и его славные дела, рассказывается о светловолосом предке «Потрясателя вселенной», который пришел с запада(!), переплыв море. Традиционные толкователи (академик Ринчин) объясняют этот пассаж тем, что сей предок одолел горный приток Керулена, очень трудный для переправы, что, согласитесь, просто смешно. Исходя из анализа множества фактов, я склоняюсь к мысли, что «Сокровенное сказание» является переведенным на монгольский язык и адаптированным к местным условиям старинным тюркским произведением, занесенным в монгольские пустыни кем-то из тюркских воинов, покорявших земли восточнее Алтая. О том, что покорение Азии происходило с запада на восток, очень четко говорит Плано Карпини, на которого также любят ссылаться представители официальной истории: «...Чингис-кан также в то время, когда разделил те войска, пошел походом против Востока через землю Керпис, которую не одолел войною, и, как нам говорили, там же прошел до Каспийских гор...». Есть следы этого завоевания и в эпосах. Так, в общетюркском эпосе «Изиге и Мурадым» (башкирское звучание имен знаменитого темника Едигея и его сына Нуретдина), хан Тохтамыш (башкир) обращается к вождю башкирского племени тамьян: «Ты, за Сину водивший поход». (За Сину - т.е. в Китай.) Неоднократные упоминания в башкирских эпосах и родословных именно Чингиз-хана, а не кого-то из его потомков, наводит на мысль, что Чингиз имел самое непосредственное отношение к башкирам. Это подтверждает и тот факт, что даже представители башкирских племен и родов, особенно сильно пострадавших от «монгол» (был случай, когда т.н.«монголы» (правильнее все же говорить и писать - «менгеили») вырезали все племя, оставив в живых лишь одного человека), чтят его. Зная обычаи тюрков, считаю, что такие зверства могли простить только СВОЕМУ. И подтверждением этой гипотезы является опубликование в «Вестнике Башкирской Академии Наук» материалов карачаево-черкесских ученых о происхождении рода

Чингиз-хана из Приуралья, подтверждающих мои выводы, представленные выше. Кроме того, башкиры - это единственный тюркский народ, сохранивший свой высокий боевой дух и пассионарность и в последующей многовековой и драматической истории.

Классический маршрут путешествия Плано Карпини из ставки Батыя в Каракорум описывается примерно так: ставка -устье Яика - Мангышлак - Хорезм -Алмалык - юго-восточное побережье Балхаша - Тянь-Шань - Алтай - Монголия -Каракорум. Однако, описываемые им путевые(!) признаки отнюдь не позволяют так однозначно судить об этом маршруте. Тем более, многими учеными убедительно доказано, что Карпини в монгольских степях не был. Осмелюсь предположить, что путешествие свое в Каракорум он все-таки совершил, но, из-за неверной трактовки его описаний, столицу Империи локализуют вовсе не там, где она существовала. Для краткости изложения постараюсь остановиться только на основных моментах. Карпини описывает свое путешествие так: из ставки Батыя, расположенной в Комании (земли куман) ехали по земле кангитов, где мало воды. Оттуда - в земли биссерминов, к югу от которых находятся горы, а с севера -- земли кара-китаев и Океан. Далее - кара-китаи, где слева тянулось небольшое море с массой островов, небольших лесов и .небольших рек, потом найманы, где в начале июля похолодало и выпал снег. После земель найманов, где много гор, приехали в монгольские земли. Попробуем расшифровать. Кангиты (у Рубрука они еще названы кангле, канглы) - одно из северо-западных башкирских племен. Заволжские степи вплоть до Самары - это засушливые места. Биссерминами до сих пор называется одно из обособленных племен мордвы и небольшой обособленный народ на севере Татарстана. Кара-катай или улу-катаи, что значит «старые катайцы», - тоже башкирское племя, жившее и живущее в северной части Башкирии. Кстати, слово «кара» имеет несколько значений, одно из которых -«северный». Найманы, согласно перечням племенных образований различных тюркских народов, относятся к юго-восточным башкирам и северным казахам. Возможно, возникнут возражения, что Карпини упоминает башкир персональным этнонимом. Да, но до XV в. башкирами звали от 5 до 7 племен, живших в центре и на юге Башкирии. Потом число племен, входивших в башкирский этнос, все увеличивалось. Второе название этого объединения - ете ырыу, «семь племен». Т.е. Карпини выехал зимой из низовий Волги и поехал по левобережью на север по исконным землям башкир-канлы, в которых было мало воды и приходилось утолять жажду снегом. Потом он попал в землю бесерменов-мордвы, к юго-востоку от которых находятся горы (в XIII в. существовали только четыре направления, и юго-восток обозначался просто как юг). После чего попал в землю племени кара-катай. Там он долго ехал вдоль Камы, которую во время половодья легко принять за небольшое море со множеством островков (была уже весна, а уровень воды, например, в притоке Камы, реке Белой, во время майского половодья поднимается на 10-12 метров). Затем он перевалил Урал примерно по маршруту Красноуфимск - Михайловск - Полевскои - Каменск-Уральский. В этих гористых местах 6 июля резко похолодало, и выпал снег. Явление для Среднего Урала, хотя и не частое, но не чрезвычайное. Отсюда он двинулся

по равнине, и через три недели оказался в Каракоруме. Расчет пути, проделанного Карпини, показывает, что от низовий Волги он прошел около 4.500 км со средней скоростью 25 км в день, что вполне совпадает со скоростью передвижения Гийома Рубрука, одолевшего междуречье Волги и Яика шириной 300 км за 12 дней. Отсюда попытаюсь предположить, что Каракорум - это нынешний город Курган, до конца ХУШ в. именовавшийся Царёво Городище и получивший свое нынешнее название после разгрома Пугачевского восстания. Современная Курганская область кишит в своей топонимике башкирскими названиями, а башкир там св. 40тыс. чел. Если учитывать и подвергшихся ассимиляции, то и того больше.

Не исключаю возможности, что огромное озеро южнее нынешней Тюмени, появившееся на позднесредневековых картах, было там изображено именно на основании рассказов Плано Карпини о небольшом море, вдоль которого он ехал. Если взять другое путешествие, Гийома Рубрука, и допустить достоверность описания его пути, то более или менее уверенно можно проследить совпадение ориентиров его маршрута до озера Балхаш. После этого Рубрук, двигаясь на север, пересек хребет Тарбагатай, и оказался на равнине, обширной, как море, где не было видно ни единой горки. Т.е. на Кулундинской равнине. Еще через две недели пути на север, в степях он нашел кочевку хана Менгу, в 10 днях пути от которой находился Каракорум. Направление же от Балхаша на Монголию - строго на восток и только через почти непроходимые горы. Т.о. путешествия Плано Карпини и Гийома Рубрука указывают на локализацию изначального места обитания чингизхановых «монгол» в р-не Зауралья и Западной Сибири, а анализ описания пути в Каракорум позволяет определить истинное местонахождение города. Одно из самоназваний уже упоминавшихся выше кимаков -- «уранхай». В Казахстане, в местах обитания кимаков, есть речка, поселок, гора и место старинного города под названием Уранхай. напомним, слово «уранхай» - это еще старинное самоназвание одной из частей саха-якутов. А среди северо-восточных башкир также имеется племя под названием Уран, которое многие тюркские исследователи отождествляют с потомками кимаков. Ядро народа саха, наряду с уранхайцами, составляли кангаласы (канглы), племенное название которых -- «яха/саха» стало названием всего народа. Кыпчакский компонент в составе саха ученые связывают исключительно с кангаласами, потомками кимаков. Якуты, самый восточный тюркский народ, считает, что они - потомки воинов Чингиз-хана, направленные им на покорение северовосточных пределов Азии. И были это кангаласцы - часть канглы, т.е. башкирское племя, служившее менге-ильским ханам, добравшиеся до Якутии из Приарапья. В подчинении у кимаков некогда находились племена половцев, первыми отколовшихся от каганата, едва в нем начались внутренние распри. Вам не хочется при этом вспомнить знаменитую реплику менге-ильских послов о половцах: «они - наши пастухи»?

**Выводы**

1 .Современная Монголия никогда не была исходной точкой «монгольского» завоевания. 2. Первый этап завоевания осуществлен коалицией преимущественно европеоидных тюркских и соседних с ними монголоидных и угорских народов. 3. Предположительно начальной точкой завоевания была

лесостепная зона в Притоболье. 4. Предположительно основой изначального войска Чингиз-хана были потомки тюрков-кимаков, чье государство распалось незадолго до этого. 5. Чингиз-хан происходил из рода ярко выраженных европеоидных переселенцев, пришедших с запада. Имя основателя его рода говорит, что тот имел отношение к башкирскому племени Бурзян. 6. «Монгольские» завоевания послужили мощным толчком для продвижения на восток как тюрков, совершивших поход «за Сину» (в Китай) и ставших ядром народа саха, так и потревоженных ими монголоидных сибирских племен, одно из которых было вытеснено в Забайкалье и послужило основой для возникновения бурятов и собственно этнических монгол. 7. Попавшие с тюрками-завоевателями на территорию современных Монголии и Бурятии документы или предания о завоеваниях, после многочисленных трансформаций и переписываний стали восприниматься монголами и бурятами как свидетельства их былой славы. 8. Предположительно местом нахождения столицы «Монгольской» Империи Менге Иль может быть город Курган, известный до кон. XVIII-го в. как Царево Городище, а столичной областью на первом этапе завоевания -- бассейн Тобола. 9. И последнее. Признание географическим центром империи Чингиз-хана «Менге-Иль» Зауралья и Притоболья ставит исследователей перед еще большей загадкой истории - почему обширная территория горного Урала на протяжении веков являлась местом рождения цивилизаций и последующих завоеваний ими Евразии: арии сер.-II тыс. до н.э.; масагеты сер.I тыс. до н.э.; геты (готы) нач. I тыс. н.э.; гунны 1V-V вв.н.э.; и если никого не пропустил и менгеили XIII века? Лев Николаевич Гумилев, когда составлял свою знаменитую «карту пассионарности», как он сам ее называл «карту ударов бичом Божьим», исходил из общепринятых тогда установок в науке, что упомянутые завоевания рождались в совершенно других местах -- от Центральной Азии до Причерноморья. Если попытаться сегодня составить «карту пассионарности» исходя из новейших данных, то мы отчетливо увидим, что «бич Божий» из века в век рассекает Предуральё и Зауралье, т.е. горную страну Южный Урал. Почему? Этот ответ адресован всем пытливым исследователям.

Горохов Александр Викторович,
г. Миасс, Челябинская обл.

## Муйтән-бей бабамдың һуңғы юлы

«Башҡорт батыры Йеҙекәй (Едигей)» исемле хеҙмәтемдә («Ағиҙел» журналының 1999/12 — 2000/1 — 5 һандары) Бөйөк Башҡортостаныбыҙҙың татар-монголдарға ҡаршы үҙ аллылыҡ өсөн ҡораллы көрәшен яҡшы уҡ яҡтыртҡайным. Бында фәҡәт Муйтән//Мухали баба ғүмеренең үҙем тыуып үҫкән төбәккә, ауылыма һәм бабаларыма тығыҙ бәйле булған һуңғы өлөшөнә туҡталам — дөйөм тарихыбыҙ ул.

Башҡорт тәүәрихтәрендә һәм шәжәрәләрендә, ҡытай, ғәрәп-фарсы һ.б. йылъяҙмаларында зирәк күҙгә ап-асыҡ күренгәндәй, тыуған тупрағыбыҙҙа ла

ярылып ята улар, тарих ҡалдырған эҙҙәр. Һәм шуларҙың байтаҡ ҡынаһы — минең эскән һыуым Ҡаҫмарт йылғаһы тамағында...

1241 йылдың иртә яҙында урыҫтың хәҙерге Кострома өлкәһендә тупланмыш татар-монгол «батша улдары» (Сынғыҙ-хан тоҡомдары) Батый-хан һәм уның бер туған ҡустылары, шулай уҡ уның менән бергә йәнә уның яҡын туғандары Ҡаҙан, Бүре, Бүҫек исемле уҙамандар етәкселегендәге берләштерелгән татар-монгол ғәскәрҙәре башҡорттарҙың уларға ҡаршы нәүбәттәге ихтилалын баҫтырырға һәм башҡорт тамырын ҡоротоРға *Бараҡ-Убан* (Северные Увалы) тауҙары аша Бөйөк Башҡортостанға тоҫҡалып ябырыла... Сыңғыҙ-хандың вариҫтары «Урҙа һәм Байҙар, — тип яҙа татар-монголдарҙың рәсми тарихсыһы Рашид-ад-дин, — уң ҡанаттан ҡыҙыу хәрәкәт ҡылып, *Ублавун* өлкәһенә килеп еттеләр». Боҙолоп яҙылған был исем, моғайын, *(у)Блавун — Блаву — **Бәләбәй*** ҡалҡыулыҡтары булырға тейеш (татар-монголдарҙың ул саҡтағы тап юл өҫтөндә ята). Ошо тәңгәлдә «уларға үҙ ғәскәре менән *Берзенам* (Бөрйән. — *Й.С.*) ҡаршы төштө, — тип дауамлай тарихсы, — ләкин улар (татар-монголдар. — *Й.С.*) уны тар-мар ҡылдылар. Шунан һуң Батый *Истарилава* (Эстәрлетамаҡ. — *Й.С.*) тарафына йүнәлде, унда *башҡорттарҙың батшаһы* менән һуғышты һәм монгол ғәскәре уларҙы ҡыйратты».

Иғтибар итәйек: *башҡорттарҙың батшаһы* тип атаған тарихсы ул батшаның исемен телгә алмай, гәрсә Бөйөк Башҡортостан дәүләтенең бөйөк *батшаһы* (көләре) булһа ла ул, — ни өсөн? Моғайын, Сыңғыҙ-ханды ерләшеп, уға үҙенең аманатлыҡ бурысынан арынған Муйтән//Мухали, ата йорто Көн-Өфөһөнә ҡайтып, вафат булған атаһы Туҡсаба урынына тәхеткә ултырғандыр ҙа башҡорттарҙың татар-монгол иҙеүенә ҡаршы көрәш байрағын күтәреп алғандыр, шуға күрә Сыңғыҙ-хандың алтын «өрләг»өнән уның империяһының ҡан дошманына әүерелмеш бөйөк инсандың исемен телгә алыу урҙала *туба* (табу) рәүешендә ҡәтғи тыйылғандыр. Сыңғыҙ-хан вафат булғандан һуң, Муйтән//Мухалиҙың ул урҙала эшмәкәрлеген сағылдырған бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ, — быныһы ла уның Көн-Өфө тәхетенә ҡайтыуы тураһындағы фекеребеҙҙе нығыта... Тимәк, батша *(көләр)* Муйтәндең төп көстәре ҡырғынсы-илбаҫарҙарҙы *Эстәрлетамаҡ* ҡалаһы эргәһендә ҡаршылаған һәм артабан, еңелеп, Урал тауҙарына сигенгән. «Ҡаҙан һәм Бүре (Батый-хандың яҡын туғандары. — *Й.С.*) *сәсәндәр* халҡына («Үҫәргән тәүарихе» батшалар шәжәрәһендәге *Сәсән* батшалар тоҡомо булған Муйтән-көләрҙең нәҫелдәштәренә. — *Й.С.*) ҡаршы ҡуҙғалды һәм *өс тапҡыр һугышҡандан һуң гына* еңде ул халыҡты (үҫәргәндәрҙе. — *Й.С.*). Бүҫек (Батый хандың яҡын туғаны) *Ҡараулаг* (Ҡарауыллыҡ — хәҙерге Әбйәлил районы Таштимер ауылы янындағы *Ҡарауыл тауы. — Й.С.*) юлы буйлап китеп, шундағы тауҙарҙы үтеп, шул *улаг* (ҡара-аулаҡ — ҡараулыҡ тигән һүҙҙән алынған — ҡарауыл кешеләре йәки *ҡара табындар. — Й.С.*) ҡәбиләләрен тар-мар ҡылды; ә унан, урман һәм *Баяҡ-буҡ* тауы (Маяҡ-баҡ — Баймаҡ йәки маяҡлы күҙәтеү тауы. — *Й.С.*) аша *Мишлява* (Мышылы-уба йәки Мышығыр — хәҙерге Усалы районы Ураҙ ауылы эргәһендәге *Мышагыр-тау. — Й.С.*) яҡтарына уҙҙы һәм шунда уға ҡаршы һуғышырға әҙер торған дошмандарҙы ҡыйратты. Батша улдары, әйтеп үтелгән *биш юл* (хәҙерге биш — Дәүләкән, Ауырғазы, Ҡырмыҫҡалы,

Ғафури, Ишембай, Әбйәлил районларындағы *Ҡарауыл* тауҙарҙың араһынан уҙған һәм уларҙы тоташтырған биш бүлемле оло юл. — *Й.С.*) буйынса барып, *башҡорттарҙың, мажарҙарҙың* (мадъяр-мишәрҙәрҙең. — *Й.С.*) һәм *сәсәндәрҙең* (батша тоҡомло үҫәргәндәрҙең. — *Й.С.*) барлыҡ өлкәләрен яулап алдылар һәм, *уларҙың батшаһын* йәғни *көләрҙе* (Муйтәнде. — *Й.С.*) *ҡасырға* мәжбүр ҡылып (*«ҡасырға»* һүҙенә иғтибар итегеҙ: Муйтәндең ҡулға алынған улын да, исеме менән атамайынса йәки «Мухалиҙың улы» тимәйенсә, *«Ҡасыр улы»* тип кенә әйтәсәктәр! — *Й.С.*), йәйҙе *Тиса* (хәҙерге Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районындағы *Төсө* йәки урыҫса *Теча. — Й.С.*) йылғаһы һәм *Туна* (Тана-улаҡ — *Таналыҡ,* Башҡортостандың хәҙерге Хәйбулла районында. — *Й.С.*) йылғаһы буйҙарында ял итеп үткәрҙеләр. (Был ваҡытта Муйтән-көләрҙең хәрби ыҫтаны, моғайын, Нөгөш йылғаһы буйындағы әҙәм үткеһеҙ тау араларында йәшенеп ҡалып, Ҡаҫмарт тамағына киткәндер. *Й.С.*). Ҡаҙан үҙенең ғәскәрен алып сәфәр сыҡты һәм *Туҡат* (*Туҡ* йылғаһы, хәҙерге Ырымбур өлкәһендә. — *Й.С.*), *Ырбураҡ* (Ыр-булаҡ — «Ыр һыуы» тигән һүҙ, йәғни Ырғыҙ йылғаһы, хәҙерге Самара өлкәһендә. *Й.С.*) һәм *Саран* (Соран йылғаһы буйы, хәҙерге Ырымбур өлкәһендә. — *Й.С.*) өлкәләрен яулап алды һәм ул илдәрҙең (бөтөн Бөйөк Башҡортостандың. — *Й.С.*) батшаһы *көләрҙе* (йәғни Нөгөш төбәгенән Ҡаҫмарт тамағына килеп *ҡасып* ятҡан Муйтәнде. — *Й.С.*) диңгеҙ ярынаса ҡыуып ебәрҙе. Ул (көләр-батша Муйтән. — *Й.С.*) диңгеҙ ярындағы *Төләнкөн* (Тюлень-көн — диңгеҙ хайуаны төләндәр көнгә ҡыҙынып-төләп ятмалы ваҡ утрауҙар теҙмәһе, хәҙерге *Тюленьи острава* тәңгәле Яйыҡ тамағындағы боронғо порт-ҡалабыҙ — хәҙерге *Балыҡсы. — Й.С.*) ҡалаһында кәмәгә ултырып диңгеҙгә олаҡҡанлыҡтан, Ҡаҙан кире әйләнеп ҡайтырға юлланды һәм, шул юлында барышлай, *күп һуғыштарҙан һуң,* ***Улаҡут*** (Оло-Ҡот — оло ҡот биреүсе хоҙайбикәнең йорто һаналмыш *Йағалса* тау[1] итәгендәге *Темәс;* көнбайыш сәйәхәтсеһе Марко Поло уны «*Тау Ҡарты* йәшәгән *Мулекет*» — Муллыҡ-Ҡот тип атаған; тимәк, был Оло-Ҡот — *Темәс,* сит ил тарихтарында «Тау Башҡорто»//Горный Старец тип яҙып йөрөтөлөмөш Муйтән-көләрҙең Бөйөк Башҡортостандағы һуңғы таяныс баш ҡалаһы булған. — *Й.С.*), *Киркин* (Курган. — *Й.С.*) ҡалаларын алды». Тимәк, Батый-хан етәкселегендәге берләштерелгән татар-монгол армияһы был юлы, Иҙелдән алып Иртышҡаса көнсығышҡа табан бөтә Бөйөк Башҡортостанды, йәтмә менән балыҡ һөҙгәндәй, бер осонан икенсеһенәсә ҡыйратып-тапап үтәләр. Әйткәндәй, хәҙерге Йәнсура районының Ергәйеш һәм Юлдаш ауылдары араһында *Бату* күле бар, шунда «Батый-хан ятҡан», имеш... Юлдаш ауылы янындағы тау башында үткер күҙле өс ҡыҙыбыҙ (береһенең исеме *Зөһрә)* яу килер юлды ҡарауыллап торғандар һәм, яу күренеүе менән үк һөрән һалып, үҙебеҙҙекеләргә хәбәр биргәндәр. Ошондағы башҡорт яугирҙәренең әҙерлекле ҡаршы тороуы арҡаһында татар-монголдар ул юлдан Муйтән-көләр *ҡасып* ятҡан төбәккә (Ҡаҫмарт тамағындағы «Иҫке Ҡый»ға) үтә алмай, Һаҡмар йылғаһына ҡойған Эйек тамағы янындағы кисеүгә боролғандар, имеш (тарихсыләрҙән Ф.Ф. Илбулдин яҙып алған мәғлүмәт). Бәлки, баяғы Туҡ — Соран яғына үтеп бармыш татар-монгол «батша улы» Ҡаҙан ғәскәренең берәй алғаҫҡы төркөмө булғандыр ул...

Хәҙер «Иҫке Ҡый» аталмыш бик боронғо ауылыбыҙҙың «Үҫәргән тәүәрихе»нә яҙылған иҫке ысын исеме лә Муйтән-көләрҙең Яйыҡ аша диңгеҙгәсә сәфәр юлындағы ваҡытлыса *ҡасып* ятыу урыны икәнлеген һөйләй, сөнки ул иҫке исем — ***«Ҡасанҡый Сала»*** — ҡасып ятыу ҡасабаһы тигән һүҙ... Заманалар үтеү менән ул боронғо ауылыбыҙ тарҡалғандан һуң, исеменең тәүге тулы әйтелеше юйылып йәғни «сала»һы ҡыҫҡартылып ташланып, ил хәтерендә «Ҡасан-Ҡый» йөрөй башлаған һәм шул «әллә ҡасанғы», «иҫке» мәғәнәһендәге «ҡасан» һүҙе лә тора-бара «иҫке»гә алмаштырылып, әлеге көндә ***«Иҫке Ҡый»*** төбәге булып йөрөй... Ауылыбыҙға нигеҙ һалыусы бабаларыбыҙҙың «Нөгөш буйынан күсеп килеүе» тураһындағы риүәйәт тә ҡарашыбыҙҙы Муйтән-көләр ҡасып килгән йәмле Нөгөш яҡтарына йүнәлтә...

Муйтән-көләр үҙенең ошо һуңғы сәфәрендә ауылыбыҙҙа, үҙенең исеменән бөтөн Бөйөк Башҡортостан менән идара ҡылыусы ***солтан*** итеп, ул үҙе юҡта ла татар-монголдарға ҡаршы көрәште уның исеменән дауамлаһын өсөн, үҙенең бер улын беркетеп ҡалдырған, имеш. Уның, Муйтән улының, ысын исеме сер итеп һаҡланған, башҡорттар уны ***Солтан*** тип, ә татар-монголдар Ҡасар Улы (Качир-улэ) тип йөрөткәндәр (ҡасып киткән Муйтәндең улы мәғәнәһендә). Шул Солтандан бер малай тыуып, уның Муйтән нәҫеленән икәнлеген дошмандарҙан йәшереү, әйтмәҫ өсөн һәм үҙенән дә әйттертмәҫкә, шул тубаны нәҙерләп, ***Муйнәйтмәҫ*** («Муйтәнде әйтмәҫ») тип исемләгәндәр... Байтаҡ быуындар үтеп, Алтын Урҙа һәм Нуғай Урҙалары емерелеп, башҡорттар урыҫ батшалығына ҡалғас, һәм халыҡ иҫәбен алыу, кешеләрҙең исемдәренә ата-бабаларының исемдәрен фамилия итеп теркәп яҙыу башланғас, үҙемә тиклем дүрт-биш быуын ғәзиз бабаларым, үҙҙәренең Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге затлы нәҫелдән икәнлектәрен фашлап, ***Солтанов*** (солтан баба нәҫеле), ***Муйнәйтмәҫев*** (Муйнәйтмәҫ баба нәҫеле), ***Болаҡбаев*** (Болаҡбай-батыр тигән бабаның нәҫеле), ***Уралбаев//Аралбаев*** (Уралбай баба нәҫеле), ***Даянов//Дуянов*** (Даян-хан баба нәҫеле) тип яҙылғандар, асылында улар бөтәһе лә баяғы Ҡасар Улы тигән солтан баба нәҫелдәре – Солтановтар булғандар. Күренеүенсә, был юлдарҙың авторы ла тап шул Муйтән-көләрҙең Башҡортостанға *солтан* итеп билдәләп ҡалдырған улының нәҫеленән.

Муйтән-көләр Үҫәргән (Каспий) диңгеҙе аръяғына боҫҡандан һуң, Бөйөк Башҡортостанда татар-монголдарға ҡаршы баҫмасылыҡ (партизан) һуғышы дөрләп ҡабына, был һуғыш башында баяғы Муйтән улы ***солтан*** — Ҡасыр Улы (Качир-улэ) һәм *Оло-Бүрелек* (Үҫәргәндең *башбүре* араһы) ҡәбиләһенең бейе Баҫман (Бачман) ләкәпле батырҙар тора.

Был ваҡиғаларҙан теүәл етмеш йыл үткәс (1311 йыл), башҡорт Булат-сәсәндән һорашып алып тәүәрих яҙған баяғы фарсы ғалимы Рашид-ад-дин, Баҫмандың һәм Ҡасыр Улының әсир алыныу ваҡыттарын айырым-айырым күрһәтмәйенсә, шул ике ваҡыт-ваҡиғаны берләштереп биргәнлектән, улар икеһе бер үк ваҡытта һәм бергә тотолғандар ҙа бергә үлтерелгәндәр һымаҡ тәьҫир ҡала, ләкин был дөрөҫ түгел. Сөнки ваҡиғаларҙың эҫе эҙенән үк (фәҡәт ун йыл ғына үткәс йәғни 1252 — 1260 йылдарҙа) яҙған Джувейни тигән тарихсы бер Баҫман тураһында ғына хикәйәләй, уның әжәле лә Рашид-ад-дин тәүәрихендәгегә тап

килә, *ләкин* Ҡасыр Улы тураһында бер нәмә *лә* әйтелмәй (Сборник материалов, относящихся к истории Золотой Орды. II том. Извлечения из персидских сочинений собранные В.Г. Тизенгаузеном... М., — *Л.*, 1941; 24, 35 — 36-нсы биттәр. Артабан: Тизенгаузен). Шуға күрә солтан бабабыҙ Ҡасыр Улының («Үҫәргән тәүәрихе»ндәге Муйтән улы Шаҡмалдың) ул йылда иҫән ҡалып, тора-бара атаһы янына диңгеҙ аръяғына ҡасып, мосолман исемле ***Руханитдин*** сифатында 1256 йылда ғына ҡулға алыныуы билдәле («Ағиҙел» журналының 1999/12 һаны, 133-өнсө бит). Үҙ осоронда яҙып ҡалдырылған ҡытай тәүәрихтәре *лә* нығыта быны. 1221 йылда Сыңғыҙ-хан урҙаһына барып ҡайтҡан Ҡытай илсеһе Чжао Хундың баяғы беҙгә билдәле яҙмаларында Муйтән//Мухалиҙың *Бүре* исемле *бер генә* улы барлығы әйтелеп, күркәм тасуирламаһы ла бирелә: «Ул матур ҡиәфәтле, башҡаларҙыҡы (татар-монголдарҙыҡы. — *Й.С.*) һымаҡ итеп соңҡа сәсен ҡырҙыртырға теләмәй, фәҡәт *салма гы*на урай башына (мосолман динле булған — баяғы «Руханитдин»дер! — *Й.С.*), ыҡсым кейенә һәм *төрлө илдәрҙең телдәрендә һөйләшә белә*» (Мэн-да бэй-лу, 60-ынсы бит). Тимәк, Муйтән//Мухали улы татар-монголдар араһында ла үҙенең башҡорт ҡиәфәте, кейеме, дине, белеме менән ныҡ айырылып торған — уларға яраҡлашмаған. Бигерәк тә, мосолман динен тотоуы һәм «төрлө илдәрҙең телдәрендә һөйләшә белә» тигән мәғлүмәт бик мөһим: был факттар 1238 йылда «Таубаш Ҡарт»//Горный Старец (Муйтән-көләр, уның мосолман исеме Ғәләүитдин) тарафынан Көнбайыш Европа илдәрен татар-монголдарға ҡаршы көрәшкә саҡырып Францияға һәм Англияға юлландырылған мосолман динле уланы (исеме әйтелмәгән; «Ағиҙел» журналының 1999/12 һаны, 132 — 133-өнсө биттәр), ә һуңғараҡ, баяғы 1256 йылда татар-монголдар тарафынан ҡулға алынған мосолман исемле Руханитдин менән баяғы «Мухали улы Бүре» араһына ышаныслы күпер һуҙа, былар өсөһө *лә* бер үк инсан — Муйтән//Мухалиҙың улы Бүре (“Үҫәргән тәүәрихе”ндәге Шаҡмал) булырға тейеш, тигән фекерҙе ҡеүәтләй. Дөрөҫ, байтаҡҡа һуңыраҡ яҙылған Ҡытай тәүәрихендә: «Мухалиҙың улы Бүре атаһынан һуң уның вазифаһының һәм титулдарының вариҫы булды,... 1228 йылда 32 йәшендә үлде», — тип әйтелә (Мэн-да бэй-лу, 158-енсе бит), *ләкин* уның ул йылда үлеүенә ышаныуы бик ҡыйын. Атаһы Муйтән//Мухалиҙың Сыңғыҙ-хан вафатынан һуң уҡ, Алтын Урҙанан ҡайтып китеп, Бөйөк Башҡортостан тәхетенә ултырыуының икенсе йылында уҡ Бүре уҙаманыбыҙ ҙа атаһының юлынан киткәндер ҙә татар-монголдар икеһенең дә «хыянат»ын үҙҙәренә дошман ҡытайҙарҙан йәшереп, икеһенең тиң урҙанан юҡҡа сығыуын «үлде» тип аңлатҡандарҙыр. Ә ғәмәлдә улар икеһе *лә* тыуған илгә ҡайтҡан һәм башҡорт халҡының тулы бойондороҡһоҙлоҡ өсөн татар-монголдарға ҡаршы көрәшен етәкләгән булырға тейеш. «Үҫәргән тәүәрихе»ндәге Муйтән улы Шаҡмал иһә шул уҡ Мухали улы Бүре ул, сөнки шаҡмал//шаҡал — сүл бүреһе тигән һүҙ (ә бәлки, был синоним-исем татар-монголдарҙы аймылыш ҡылыу өсөн алынғандыр?). Әммә ҡытай тәүәрихенән йәнә *лә* бер ҡиммәтле табышҡа юлығабыҙ — Бүре//Шаҡмал бабаның тыуған йылы. 1228 йылда 32 йәшендә булғас, 1228-32=1196 — Муйтән бабаның улы Шаҡмал 1196 йылда донъяға килгән һәм 1256 йылда теүәл 60 йәшендә үлтерелгән, тимәк. Беҙҙең солтандар нәҫеле (Солтановтар фамилияһы), риүәйәттәр буйынса, тап ана шул Шаҡмал-

солтандан килә. Һәр хәлдә, Муйтән-көләр — Шаҡмал-солтан — Муйнәйтмәҫ баба минең нәҫел шәжәрәмдең өҙлөкһөҙ быуындары улар. Һәм мөһим бер һығымта: боронғо ғәзиз ауылыбыҙ (шул төбәктәге ауылдарҙың әсәһе) Ҡасанҡый-Сала Бөйөк Башҡортостаныбыҙҙың һәләкәтле осоронда Муйтән-көләр ҡасып килеп һыйынған һәм күпмелер ваҡыт йәшәп киткән (шуға күрә лә ул ерҙә «Муйтән-хандың баш ҡалаһы булған» тигән риүәйәт бар) осорҙан — 1241 йылдан уҡ билдәле тип әйтә алабыҙ, һәм уға ошо юлдар яҙылған 2003 йылда теүәл 762 йыл тулды...

Инде шәжәрәләремдең үҙҙәренә керәйек.

## 1. Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән Йыһат Солтановты биргән бау

1. Ишек. —
2. Күриң. —
3. Фаридун. —
4. Түрәҡан (Тура-хан) Фәҡфәдәр. —
5. Ҡаф. —
6. Круз.(Ҡорос, Һарт иленең батшаһы, Геродоттағы Крез: б.э. тиклем 560 — 546[49]). —
7. Ҡавәб. —
8. Бәширмин. —
9. Сам Сиуар. —
10. Ҙал Ҙаман. —
11. Бәһлеүән Рөстәм. —
12. Манжуһр (Манжур). —
13. Нәвҙар. —
14. Пузар. —
15. Ҙаб. —
16. Ғиҡбад. —
17. Кииксарув (Мидия батшаһы, Геродоттағы Киаксар: б.э. тиклем 625 — 585). —
18. Аҡкар Әййүб. —
19. Кәштә. —
20. Әсфәндиәр. —
21. Баһуман. —
22. Драб бин Баһуман (Баһуман шам[50]... «улы юҡтан әҙәм алып тәрбиә ҡылып, Көннур ҡыҙын уға бирҙе; һыуҙан табылғаны өсөн Драб тип исем ҡуйҙы; үҙенән һуң шам булды; Искәндәр Юнан[51] унан тыуҙы, тиҙәр». — 35-енсе бит. Беҙҙең өсөн бында Драб батшаның — Александр Македонскийҙың атаһы Филиптың — бәпес сағында «һыуҙан табып алыныуы» тураһындағы риүәйәт бик фәһемле — был хәл

---

[49] Быуындарға йәйәләр эсендәге аңлатмалар — авторҙыҡы, ә тырнаҡтар эсенә алынғандары һәм ундағы бит һандары — «Үҫәргән тәүәрихе»нән.
[50] Шам — батша.
[51] Александр Македонский.

унының ысын-ысындан үçәргәндәр бабаһы булыуын күрһәтә, сөнки үçәргәндәрҙең легендар бабалары Үçәргән (Саргон) да, Көн-би ҙә, Муса [Моисей] ҙа, Жик-Мәргән дә ана шулай «һыуҙан табып алынған»дар. Үçәргән әсәләре иһә «мин ҡайҙан сыҡтым?» тип ҡыҙыҡһыныптөпсөнөүсе бала-сағаларына әлегәсә, «бәпес сағыңда һыуҙан табып алып ҡайттым», тип аңлата). —

23. Сасун (Үçәргән ырыуының Сәсән нәçелле батшаларҙың бабаһы йәғни Тура [Тора] таулы Туран иленең [Башҡортостандың] шанлы батшаһы Бәк-Сәсән ул, б.э. II быуатында йәшәгән. Сәсән тоҡомдары [сасанидтар] б.э. III — VII быуаттары һуҙымында тәхеттә ултырғандар, улар дәүләте хәҙерге Төрөкмәнстан, Афғанстан, Иран, Әрмәнстан, Грузия, Әзербайжан ерҙәрен иңләгән һәм ғәрәптәр яулап алғанға тиклем йәшәгән. Тулыраҡ мәғлүмәтте «Хәтерхитаб»ымдың икенсе томының «Бөйөк Ҡошан» тигән бүлегендә бирҙем). —
24. Бабсаҡ (Папак) [«Бабсаҡ менән Күсәк» тигән эпосыбыҙҙың бер геройы]. —
25. Артыш-ир (Ардашир, 224 — 240 йылдарҙа батша; «Бүре-Өфө-Ой»өн[Парфияны] һәм «Бүре-Әсә» [Фарсы] илен һ.б. яулап алып, үҙенең тәүтөйәге булған Туран иленә [Башҡортостанға] ҡаршы тороусы Иран илен [йәғни «Ир илен»] нигеҙләгән [хәҙерге Иран дәүләтселлегенә нигеҙ һалыусы]. «Үçәргән тәүәрихе»ндә әйтелә: «Ардашир утыҙ йыл шам булды, фарсы вә ғаҡ вә лаш илдәре унын ҡулы аҫтында ине»... — 35-енсе бит). —
26. Шабур (339 — 372 йылдар. «Шам Шабур утыҙ йыл шам булды». — 35-енсе бит). —
27. Фируз (Пероз, 459 — 484 й.й.). —
28. Ҡыуат (Кубад, 488 — 496 һәм 499 — 531 й.й. «Шам Кубад 23 йыл шам булды, Фирдәүси хөкөмөнөң заманында ине». — 39-ынсы бит. Ошо Ҡыуат батшаның бер улы Нуширван ғәҙел [Хосров I, 531 — 579] тигән батшанан — беҙҙең нәçелдәге Баба Төкләç-би тармағы, ә икенсе улы «...иау...н»дан [шәжәрәлә уҡып булмай] — бабабыҙ Сыңғыҙ-ханды тыуҙырған тармаҡ саталанған). —
29. Нуширван Ғәҙел (Хосров I, 531 — 579 й.й. «Нуширван... 20 йыл шам булды, унын шаһлыҡ ҡыры: Төркөстандың мәшриғенән Һиндостан мәғрибенәсә унын хөкөмөндә булды». — 39-ынсы бит). -
30. Бируз (Хосров II, 628 йылда үлгән). —
31. Шырау-ир (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628 — 632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер артлы ун батша алмашына. Йездегирд III [632 — 652 й.й.] тигән берәү тәхетте биләп алғас, Сәсәндәр нәçеленән булған был Шырау-ир үҙенең алыç бабаһы Бәк-Сәсәндең тыуған еренә — Туран иле Башҡортостанға ҡасып ҡайтып, сал Көн-Өфө [Тура] йәки хәҙерге Өфө ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***Туран Дархан*** тигән батшалыҡ ләҡәбе дәлилләй. Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең ***Дары*** исемле данлы бүләһе ошо Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы Өфө тәхетендә нығынған һәм Туран-Дархан [Дары-хан] батша ләҡәбен алған, шунан һуң унын батшалыҡ итеүсе нәçелдәре лә быуындан-быуынға «дары-хан» — ***тархан*** ләҡәбен йөрөтөп, башҡорттоң тархандар [хакимлыҡ итеүселәр] ҡатламы барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡартҡартатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында

әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере — 50 [25+25=50] ятҡанлыҡтан, Тура Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). —
32. Шәһриәр. —
33. Ардашир. —
34. Туран Дархан (баяғы Туран Дары-хан, йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; уның тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, Көн-Өфө — Тура ҡуш ҡалаһында, йәғни хәҙерге Өфөлә). —
35. Жәзир Жир. —
36. Әбү Алсаҡ («Алсаҡ-ир бер заман Баратурз Дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөкәтле һәм Искәндәр сафиуллаға тиң хан ине». — 58-енсе бит). —
37. Солтан Ғоҫман. (Хәҙерге Төркиә дәүләтен нигеҙләүсе, ғоҫманлы төрөк солтандарының бабаһы. Ә беҙ иһә уның солтан Жәләлитдин бауынан киләбеҙ). —
38. Солтан Жәләлитдин. —
39. Әҙеһәм. —
40. ***Баба Төкләҫ-бей.*** —
41. Трә (Тура) бин Баба Төкләҫ (Тура-хан, XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған хәҙерге Өфөнән алыҫ түгел Шишмә районының Түбәнге Тирмә ауылы эргәһендә һаҡланған әлегәсә, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI — XII быуаттарға ҡарата. — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-енсе бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе Ҡыҙрас Муллаҡаевтан заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, Уфа — 1999; 372 — 373-өнсө биттәр] һорашып яҙып алғанса, «хан Тура бин Баба Төкләҫ оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк Өфө ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған». Мәсетле районы Һөләймән ауылында табылған Әйле ырыу шәжәрәһендә Боронғо Башҡортостан 9 ханлыҡҡа бүленгәнлеге, һәр бүлемдә кем хан булып торғанлығы күрһәтелеп, «1-енсе. Өфи ҡәлғәсен, Дим тамағын Тирәй хан биләде», — тип әйтелгән, йәғни «Тирәй» тигәне — Тора-хан. — Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации. Уфа — 1985, 67-нсе бит). —
42. Ҡаҙансы. —
43. Туҡсаба («Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба хан заманында Буйат-бей — бей ине». — 54, 62-нсе биттәр). —
44. Муйтән-бей («Ҡасыр»). —
45. Шаҡмалы-бей Муйтән [«Ҡасыр»] улы. (Рашид-ад-дин тарихында ул, уның дошмандары татар-монголдар ләкәпләгәнсә, Ҡасыр улы [Качир-улэ] тип бирелгән; 1237 йылдың йәйендә татар-монголдарға ҡаршы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе; Үҫәргән ихтилалсыларынан Баҫман [Бачман] менән бер осорҙа көрәшкән, аҙаҡ ҡулға алынып, язалап үлтерелгән. Был хаҡта Рашид-ад-диндың тәүәрихендә: «Сығышы ҡыпсаҡ халҡынан — ***Оло Бүрелек*** [Үҫәргәндең Баш-Бүре араһы. — Й.С.] ҡәбиләһенән булған Баҫманды [Бачманды], ундағы иң оятһыҙ әмирҙәрҙең береһен, һәм ***Әсәләр*** [Бүре-Әсәләр йәғни Үҫәргән. — Й.С.]

ҡәбиләһенән Ҡасыр[52] улын [Качир-улэ] икеһен әсир итеп алдылар...». Әлхасил, Рашид-ад-дин яҙған был «Ҡасыр улы» — Муйтән-бейҙең улы Шаҡмал тип раҫларға таяныс бар. Муйтән-бей, билдәле булыуынса, Каспий диңгеҙе аша хәҙерге Иран тупрағына ҡасып китерҙән алда хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ районы Жултый ауыл советына ҡараған Һунарсы һәм Сәнкем-Биктимер ауылдары араһындағы һәм шул ике ауылды тыуҙырыусы Ҡасанҡый-Сала [хәҙерге «Иҫке Ҡый»] ҡасабаһында йәшеренеп йәшәгән; уны эҙәрлекләүсе татар-монгол әтрәтен хәҙерге Ергәйеш ауылында һағалаусы башҡорт ғәскәре, Ҡасанҡый-Сала [«Иҫке Ҡый»] яғына үткәрмәй, Эйек тамағы тарафына бороп ебәргән. Муйтән-бей, Ҡасанҡый-Саланан көньяҡтараҡ хәҙерге Алабайтал ауылы янындағы Йайыҡ кисеүенән ашып, Каспий диңгеҙе ярындағы Түләнкөн [хәҙерге Тулений остров янындағы Рыбачий] ҡалаһына килә һәм, карапҡа тейәлеп, Каспий аръяғына [хәҙерге Иранға] аша, шунан тороп илбаҫар татар-монголдарға ҡаршы көрәште ойоштора. Уның улы Шаҡмал, Ҡасанҡый-Сала [«Иҫке Ҡый»] ҡасабаһында ҡалып, татар-монгол илбаҫарҙарына ҡаршы Башҡортостандағы ҡоралды көрәште етәкләй. Муйтән-бей үҙе хан булып, уның улы Шаҡмал ***солтан*** [принц] булғанлыҡтан, Ҡасанҡый-Салала уны ***Шаҡмал-Солтан*** йәки ***Солтан*** тип кенә лә йөрөтәләр, һәм унан ҡалған тоҡомдарҙы ла, беҙҙең ғаилә риүәйәттәре буйынса, ***Солтандар*** [урыҫ документтарында — ***Солтановтар***] тип атайҙар. Шул рәүешле шул төбәктә ***Солтановтар*** фамилияһы барлыҡҡа килә, ә был иһә ошо юлдарҙың авторының да мөҡәддәс фамилияһы). —

46. Бүрекәй-бей (Бүзәк-бей йәғни Бөжәк[53]-бей) Шаҡмалы улы йәки ләҡәбе буйынса Муйнәйтмәҫ-бей. (Сыңғыҙ тоҡомдары хакимлыҡ ҡылған хәтәр заманда был бабабыҙ, моғайын, үҙенең Муй [Муйтән-бей] ейәне икәнлеген йәшереп йөрөгәндер; шуға ла уға «Муйнәйтмәҫ» йәғни Муйҙы әйтмәҫ ләҡәбе бирелеп, икенсе исеме рәүешле нығынып ҡалғандыр. Аҙаҡ килеп, беҙҙең нәҫел кешеләренең ҡайһы берҙәре ана шуны фамилия итеп алып, «Муйнәйтмәсов» булып йөрөгәндәр). —
47. Һеркә-бей (Жерүкә-бей). —
48. Манғут-бей Һеркә улы. —
49. Урал-бей (Аралбай) Манғут улы[54]. —
50. Арбан-бей Урал улы. —
51. Тимерҡабыҡ-бей Арбан улы. («Бораҡ-хан заманы». — Ү.Т.Ш[55]). —
52. Һарыбаш-бей Тимерҡабыҡ улы. («Жанбәк-хан заманы» — Сим — Йайыҡ йылғалары араһын биләгән). —
53. Һырыш-бей Һарыбаш улы. («Ҡасим-хан заманы»). —
54. Ябынсы Яҫауыл Һырыш улы (Иван III Васильевич — «Сабаталы батша» заманында [1440 — 1505 й.й.] йәшәгән, Литваны яулауҙа шул батшаға хеҙмәт итеп, «Яҫауыл» дәрәжәһен алған. 1552 йылда ғәскәр төркөмө башында Ҡазанды һаҡлап

---

[52] Ҡасыр — татар-монголдарҙан ҡасып киткән Өфө батшаһы Муйтәнгә дошмандар биргән ләҡәп; ә «Ҡасыр улын» — Муйтәндең улын, тигән һүҙ.
[53] Бөжәк — боронғо телдә Бүре.
[54] Ошонан башлап артабанғы мәғлүмәттәр «Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе»нән (ҮТШ) алына.
[55] Ү.Т.Ш. — Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе.

Яуыз Иван ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡаһармандарса һуғыша. Ябынсы Яҫауыл үҙенең замандашы — Сыңғыҙ-хан нәҫеле Даян-ҡағандың Миңдекәй тигән, Үҫәргәндең Сураш араһынан булған еңгәй-ҡатынынан тыуған ҡыҙына өйләнеп, был икәүҙән бабабыҙ Үҫәргән Ябынсы улы тыуған булырға тейеш, шуға күрә лә минең ғәзиз бабаларҙың бер килкеһе Даянов [Дуянов] фамилияһын алған). —

55. Үҫәргән Ябынсы улы (кесе улы). —
56. Сөйәлғужа Үҫәргән улы. —
57. Муҫка Сөйәлғужа улы. («Ҡуҙаш Ҡунаҡ таифәһенең атаһы»). —
58. Күскенсе Муҫка улы. —
59. Иҫәнбирҙе Күскенсе улы. —
60. Болаҡбай-батыр Иҫәнбирҙе улы. Ошо урында Болаҡбай бабабыҙ тураһында аңлатма биреү урынлы (шәжәрәбеҙҙәге унан да боронғораҡ быуын Болаҡ баба менән бутамаҫ өсөн). Сөнки «Ағиҙел» журналының 1993/9 һанында ырыуҙашым Рәшит Насиров уҙаман мәғлүм ҡылған Үҫәргән шәжәрәһе тураһындағы хәбәрҙә: «Үҫәргән олатайыбыҙҙың ике улы булған. Беренсеһе (өлкәне) Болаҡ, икенсеһе Таймаҫ исемле», — тигәне буталыбыраҡ киткән. Беренсенән, иң теүәлдәрҙең береһе һаналған Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһендә (Ү.Т.Ш.) Үҫәргән бабаның өс улы күрһәтелеп, Болаҡ менән Таймаҫ иһә Үҫәргән бабанан һуңғы бишенсе быуындағы Иҫәнбирҙе улдары булып тора. Икенсенән, Болаҡ бабабыҙ «сабаталы[56] Һары Кривой Иван заманында йәшәгән, әммә уландары булмаған шул», — тигәне лә, заманаһы дөрөҫ әйтелһә лә, бабабыҙ Болаҡбай батыр менән уның бер туғаны Таймаҫ осорона тура килмәй (улар 18-енсе быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән); бында шәжәрәләргә хас саҡ ҡына аймылыш бар, сөнки ошо әйтелгәндәр ысынлап та урыҫ илендә Иван III Васильевич (1440 — 1505) һәм Яуыз Иван IV (1530 — 1584) батшалыҡ иткән һәм беҙҙең баба Болаҡ батырҙан ете быуын элгәрегә Болаҡ Һырыш-бей улы менән уның бер туғаны Ябынсы Яҫауыл баба заманаһында булған. Шәжәрәлә Болаҡ Һырыш-бей улынан, ысынлап та, нәҫел күрһәтелмәгән.

Шулай итеп, шәжәрәмдәге ошо 60-ынсы быуын бабам Болаҡбай-батыр Иҫәнбирҙе улының шәжәрәләге 61-енсе быуынды тәшкил иткән уландары (туғыҙ ул) бына кемдәр:

I. Этйеймәҫ (йәки Эттеймәҫ, бер ниндәй ҙә этлектәргә бирешмәҫ, тигән исем);
II. Боҫҡон Даянов[57] (Дуянов); тархан, кенәз дәрәжәләрендә йөрөй (1748 й. тыуған);
III. Юламан;
IV. Әбделмәмбәт (1789);
V. Ҡотлогилде *Муйнәйтмәҫов* (1770), яҫауыл. Фамилияға әүерелгән «Муйнәйтмәҫ» — Муйтәндең нәҫеле икәнлеген әйтмәҫ, мәғәнәһендәге ләҡәп; Муйтән-бей тоҡомдары илбаҫар татар-монголдарҙан эҙәрлекләнгәнлектән, шуларҙы аймылыш ҡылмаҡ өсөн, Муйтән улы Шаҡмалының («Ҡасыр улы»ның) улын шулай йөрөткәндәрҙер. Һуңынан, күренеүенсә, бабаларым уны фамилия итеп ала башлаған; 1763 йылдың 25 июнендә бер төркөм Нуғай юлы башҡорттарының

[56] "Ҡалталы" тигән һүҙҙе яңылыш уҡыу.

[57] Бабабыҙ Үҫәргән Ябынсы Яҫауыл улының әсәһе Сыңғыҙ-хан нәҫеленән — Даян-ҡағандың ҡыҙы икәнлеген иҫтә тотоп, Болаҡбай-батырҙың ҡатындарының береһенән тыуған улдары, башҡаларынан айырылып тороу өсөндәр, Даянов (Дуянов) фамилияһын алғандар.

Ырымбур гөбөрнәтере Д.В. Волковҡа яҙған хатына Йомаҡай Муйнәйтмәҫов та ҡул ҡуйған, урыҫса тексҭа был «Муаитмасов» тип боҙоп яҙылған. (Материалы по истории Башкирской АССР, IV, часть вторая. М. — 1956; 45-енсе бит).

VI. Аҡкилде (1773);

VII. Муса (1809? — дата яңылыштырылған);

VIII. Ҡәҙербирҙе.

IX. Айбаш.

Тимәк, Болаҡбай-батыр бабабыҙҙың нисәмәлер ҡатындарынан туғыҙ улан тыуып үҫкән.

Инде тәүҙә шуларҙың араһынан шәжәрәләге 60-ынсы быуын Болаҡбай бабанан һуңғы — ошо юлдарҙың авторы Йыһат Солтановты ла үҙ эсенә алған быуындарҙы 61-енсенән алып туранан-тура теҙәйек:

61. (IV). Әбделмәмбәт Болаҡбай улы. —

62. Әйүп Әбделмәмбәтов (1792), урядник. —

63. Мөхәммәтсадиҡ Әйүп улы Солтанов[58] (1846 — 1909). —

64. Әҙеһәм Мөхәммәтсадиҡ улы Солтанов (1895 — 1936). —

65. Йыһат Әҙеһәм улы Солтанов (1932, ошо юлдарҙың авторы). —

66. Сабит Йыһат улы Солтанов (1960). —

67. Наилә Сабит ҡыҙы (1990) һәм Диләрә Сабит ҡыҙы (2000) Солтановалар.

Тимәк, үҙемдең 67 быуын шәжәрәмде барланым.

Инде Болаҡбай-батырҙың һәр туғыҙ улының нәҫелдәрен айырым-айырым һәм өҫтәге сират һандары буйынса барлап теркәйек:

I. Этйеймәҫ йәки Эттеймәҫ тип тә әйткәндәр (бер ниндәй ҙә этлектәргә бирешмәҫ, тигән исем). Уның нәҫеле:

1. Ишемтәй Этйеймәҫев (1754). Ишемтәй нәҫеле:

а) Шәмситдин Ишемтәйев (1802);

б) Хәмиҙулла Ишемтәйев (1805);

в) Һибәтулла Ишемтәйев (1817);

г) Хисамитдин Ишемтәйев (?), уның улы Йәләлитдин Этйеймәҫев (1830), Йәләлитдин улы Солтангәрәй (1847);

2. Ишәй Этйеймәҫев (1759), уның нәҫеле:

а) Хәсән (1789);

б) Хәмитдин (1795);

в) Сиреүбай Ишәйев-Этйеймәҫев (1807). Был исем ер-һыуҙарыбыҙға береккән: Сәнкем-Биктимерҙән, Ҡаҫмартты кисеп, Селек Мужиғы (Ново-Николаевка) утарына барған юлда «Сиреүбай-ҡараҡ ҡасып ятҡан» тәрән (Ҡаҫмарттың иҫке үҙәне) Сиреүбай соҡоро бар.

Сиреүбай нәҫелдәре: Сиразитдин (1799), Дәүләтбай (1814), Кинйәғол (1812); Кинйәғол улдары: Мырҙағол Кинйәғолов (1836), Ырыҫланғол Кинйәғолов (1839),

[58] Үҙ шәжәрәһен яҡшы белгән икән шул бабаларым, Муйтән-бей улы Шаҡмалы Солтан тоҡомдары; улар уның «Солтан» ләҡәбен үҙҙәренең фамилияһы итеп күрһәтә башлай — беҙҙең нәҫелдең Солтановтар фамилияһы барлыҡҡа килә. Шулай уҡ данлы бабаларыбыҙҙың башҡаларының да исемдәрен фамилия итеп алалар (мәҫәлән, Урал-бай исеменән — Аралбаевтар).

был мырҙабыҙ «әхләкһеҙлеге арҡаһында» 1863 йыл генерал-гөбөрнәтер фарманы буйынса Себергә һөрөлгән; Хәйрулла Кинйәғолов (1842);

3. Сәйфитдин Этйеймәçев (1819), уның нәçеле:

а) Бесәнсе (1836), Бесәнсе улдары: Ғарифйән Сәйфитдинов (1918 — 1919 йылдарҙа ҡыҙыл гвардиясы, 1920 — 1937 йылдарҙа БашЦИК-та эшләй, репрессияланған), Хәмәтйән Сәйфитдинов;

4. Ҡускилде Этйеймәçев (1791);
5. Байгилде Этйеймәçев (1764), Байгилде улдары: Динмөхәммәт (1805), Мөхәммәтғәли (1813).

II. Боçҡон Даянов (1748), тыумыштан уҡ («природный») тархан һәм кенәз дәрәжәләрендә. Уның нәçеле:

1. Әлмөхәммәт Боçҡонов (1775), йорт старшинаһы. Уның нәçеле:

а) Дилмөхәммәт Әлмөхәммәтов (1813), указлы мулла;

б) Мостафа Әлмөхәммәтов (1814), уның нәçеле:

*Хамбал (1845), имам хатиб, Хамбал улы Сәлмән Солтанов (1908);

*Ибраһим (1855);

в) Ғәбделҡадир Әлмөхәммәтов (1817), уның нәçеле:

*Мөхәммәтсадри Солтанов (1847 — 1914);

*Мөхәммәтсадиҡ Солтанов, уның улы Мөхәммәткәрим (1882), уның улы Ғәбделрәхим (1909);

*Мөхәммәтхарис Ғәбделҡадир улы Солтанов (1850);

*Ғәбделмәзин Солтанов, уның улы Сәлмән (1883);

*Ғәбделғәзиз Солтанов (1855), уның нәçеле:

Ноғоман (1880 — 1899),

Ғилман (1906 — 1908),

Вилдан (1909),

Ғәбделрахман (1915 — 1916),

Суфиян Солтанов, уның улы Сәлимйән Солтанов, Сәлимйән улы Ырыçлан (Руслан) Солтанов;

г) Ҡотлоәхмәт Әлмөхәммәтов, уның нәçеле:

*Бикмөхәммәт (1837),

*Ниязмөхәммәт (1844);

д) Шаһиәхмәт Әлмөхәммәтов (1821), уның улы Шаһимәрҙән (1852);

2. Ноғоман Боçҡонов-Солтанов (1797), уның нәçеле:

а) Мортаза (1819), Мортаза улы Ағзам (1848);

б) Нурмөхәммәт Солтанов (1831), уның улы Ғәбделсәлим Солтанов (1860 — 1908);

3. Юлмөхәммәт Боçҡон улы Болаҡбаев[59]-Солтанов (1801), уның улы Мөхәммәтлатиф (1831). Мөхәммәтлатифты *Лотош* ҡарт тип атап йөрөткәндәр; алтын алам тип, ауыл осондағы Әүлиә (Урмәмбәт-кенәз) зиратын ҡутарғанында ауыҙы ҡыйшайған;
4. Мөхәммәтжан Боçҡон улы (1791), указлы мулла.

III. Юламан. Уның нәçеле:

---

[59] Ҡартатаһы Болаҡбай-батырҙың исемен дә, алыç бабаһы Шаҡмалының Солтан ләҡәбен дә фамилия итеп алған.

1. Ҡотбул Юламанов (1754), Ҡотбул нәҫеле:

а) Сәлих;

б) Исмәғил;

в) Исламғол Ҡотбулов-Солтанов (1809), Исламғол улдары:

*Кәлимулла (1834),

*Заһиҙулла (1853),

*Ғәлиулла (1856),

*Хәлилулла Солтанов (1858 — 1915), уның улдары:

Сәлимулла Солтанов (1918 — 1919 йылдарҙа ҡыҙыл гвардиясы. 1919 й. башҡорт аҡ армияһының ҡыҙылдар яғына сығыу мәсьәләһе буйынса Темәстә йыйылған Хәрби йыйын делегаты),

Ямалитдин Солтанов (1899),

Сәлихулла Солтанов (1904 — 1905).

IV. Әбделмәмбәт, уның нәҫеле:

1. Теләүғол Әбделмәмбәтов (1789), Теләүғол улы Мөхәммәтхәсән Теләүғолов (1819). Был Мөхәммәтхәсән — Лотош ҡарт менән бергә алтын көҫәп баяғы Әүлиә зиратын ҡутарғандарында күҙе салшайған Хәсән ҡарт була инде;

2. Әйүп Әбделмәмбәтов (1792), урядник; уның нәҫеле:

а) Баһауитдин Әйүп улы Солтанов (1819), ауыл старостаһы. Уның түшенә тағаҡай «Староста деревни» тип яҙылған ҡалай билдәһе беҙҙә 60-ынсы йылдарғаса һаҡлана ине,

б) Мөхәммәтсәлим (1841),

в) Мөхәммәтсадиҡ Әйүп улы Солтанов (1844 — 1909. Ошо юлдарҙың авторының ғәзиз ҡартатайы), Мөхәммәтсадиҡ нәҫеле:

*Мөхәммәткәрим Солтанов,

*Әҙеһәм Солтанов (1895 — 1936), Әҙеһәм улы:

Йыһат Солтанов (1932), Йыһат улы:

Сабит Солтанов (1960), Сабит ҡыҙҙары:

Наилә Солтанова (1980),

Диләрә Солтанова (2000).

V. Ҡотлогилде Муйнәйтмәҫев (1770), яҫауыл.

VI. Аҡкилде (1773. Ҡотлогилде Муйнәйтмәҫев менән бер туған). Аҡкилденең нәҫеле:

1. Баһауитдин (1803), — Ҡаҫмарт йылғаһының ятыуына батып үлә: Сәнкем-Биктимер ауылында «Баһау батҡан» ятыуы бар ине;

2. Ҡунаҡбай Аралбаев (1790) — беҙҙең Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге алыҫ бабабыҙ Уралбай//Аралбай исемен фамилия итеп алған; уның нәҫеле:

а) Мөхәммәтғәли Ҡунаҡбаев-Солтанов[60] (1801), уның улдары:

*Тимерғәли (1837),

*Йыһанша (1845);

3. Ҡунаҡҡужа Аралбаев (1812), уның нәҫеле:

а) Мөхәммәтша Ҡунаҡҡужин-Аралбаев (1832), уның улы:

*Ишмөхәммәт Аралбаев (1898);

б) Ғәлиәхмәт (1838), уның нәҫеле:

---

[60] Аралбаевтарҙың элек Солтанов фамилияһында булғанлыҡтарына дәлил.

*Хужахмәт (1884 — 1899),
*Шаһиәхмәт, уның улы:
Хикмәтулла Аралбаев (1896 — 1942, совет хакимиәтенең дошманы рәүешендә ҡулға алынып, атып үлтерелә), уның улдары:
Салауат Аралбаев,
Рафиҡ Аралбаев.
*Һиҙиәтулла Ғәлиәхмәт улы Аралбаев (1905 й. үлә);
*Мотиғулла Аралбаев (1909),
*Сәғиҙулла Аралбаев (1912 — 1914);
в) Ниязмөхәммәт (1840);
г) Дәүләтша (1845), уның нәҫеле:
*Илморат Аралбаев (1899 — 1899),
*Вәлиша Аралбаев (1902),
*Йыһанша Аралбаев (1900);
д) Әхмәтша (1848), уның нәҫеле:
*Сәхәбитдин Аралбаев (1905), уның улы:
Алмас Аралбаев;
*Ишбулды Әхмәтша улы Аралбаев (1898);
е) Вәлиәхмәт, уның улдары:
*Нуриәхмәт Аралбаев (1910),
*Сәмиғулла (1912);
4. Билал Аҡкилде улы Солтанов (1813), уның нәҫеле:
а) Шаһимөхәммәт (1836);
б) Мөхәммәтзариф (1846);
в) Ғәбиҙулла Солтанов (1853), уның нәҫеленән:
*Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙы Солтанова (1896 — 1977, Өфө — мосолман зиратында) — Йыһат Солтановтың ғәзизә әсәһе;
*Һибәтулла Солтанов (1909 — 1943), уның нәҫеле:
Фәрит (1935),
Ринат (1938 — 1941), Фәрит улдары:
Ринат Солтанов,
Рифҡәт Солтанов;
*Хәбибулла Солтанов (1910 — 1941).
5. Ҡолмөхәммәт Муйнәйтмәҫев-Солтанов (1814), уның нәҫеле:
а) Динмөхәммәт (1843 — 1852).
VII. Муса, уның нәҫеле:
1. Ильяс, уның нәҫеле:
а) Шамалмәт (1861 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;
б) Мәрҙән (1875 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;
в) Ишмөхәммәт, уның улы:
*Шаһимөхәммәт (1885 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

г) Шаһиәхмәт, уның улы:

*Ғәбдрәхим (1890 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән.

2. Сәғитдин Мусаев, уның нәҫеле:

а) Камалитдин Сәғитдинов-Мусаев (1809), уның улы:

*Мифтахитдин (1833);

3. Баһауитдин Сәғитдинов-Мусин (1813), уның нәҫеле:

а) Әхмәтйән (1840), уның улдары:

*Хисамитдин Мусаев (1877 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

*Фәхритдин Мусаев (1885 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Мифтахитдин (1853);

4. Сәлихйән (1840), уның нәҫеле:

а) Әхмәтша Мусаев (1860 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Ғабдулла Мусаев (1902 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән, уның улы:

*Юныс (1903);

5. Ғарифйән (1846);

6. Махийән, уның нәҫеле:

а) Абдулла (1894 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән. Уның улы:

*Юныс (1903 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән.

7. Хисамитдин, уның нәҫеле:

а) Ямалитдин (1845), уның улдары:

*Минғазитдин Мусаев (1882 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

*Зиннәтулла Мусаев (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылнда татарға әүерелгән;

*Бәҙритдин Мусаев (1885 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында башҡорт килеш;

*Хәмзә Мусаев (1895 — 1941) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында башҡорт килеш, ҡыҙыл гвардиясы. 30-ынсы йылдарҙа ул — Өфөлә комвуз ректоры, 1937 йылда репрессиялана, 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була;

8. Тазитдин Мусаев, уның нәҫеле:

а) Дауыт Тазитдинов-Мусаев (1806), уның нәҫеле:

*Мөхәммәтғәли, уның улы:

Фазыл Мусаев (1920 й. иҫән, Яңы Ғафарҙа) — милләте яҙылмаған;

*Мөхәммәтхәсән (1833), уның улдары:

Мотиғулла Тазитдинов (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән,

Ниғмәтулла Тазитдинов (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

*Йософ (1841), уның улы:

Закир Тазитдинов (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Рәхмәтулла Тазитдинов-Мусаев, уның улы:

*Ибәтулла (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында, милләте яҙылмаған.

VIII. Ҡәҙербирҙе, уның нәҫеле:

1. Көбәк, уның нәҫеле:

а) Аҡмырҙа Көбәков (1783);

б) Ғәбделмәзит Көбәков (1819), уның улдары:

*Собханғол (1854 — 1856),

*Умырҙаҡ (1859);

в) Ғәбделфаиз Көбәков (1823);

2. Балыҡ (1797);

3. Ҡанмырҙа Солтанов (1786), уның нәҫеле:

а) Лоҡман, уның улы:

*Бикмырҙа Солтанов, уның улы:

Шиһабитдин Бикмырҙа улы Солтанов (1840), уның улы:

Хисамитдин Солтанов (1890), уның улы:

Ким Солтанов (1933), уның улдары:

Динис Солтанов,

Хәким Солтанов;

йәнә лә шул уҡ Шиһабитдин улдары:

Солтанғәли Солтанов (1905 — 1905),

Байрамғол Солтанов (1906),

Ғүмәр Солтанов (1909),

Камалитдин Солтанов (1912);

*Йәнмырҙа Бикмырҙа улы Солтанов, уның улдары:

Әхмәтйән Солтанов (1908),

Афзалитдин Солтанов (1916),

Язаритдин Солтанов (1924 — 1943);

4. Йомағужа, уның нәҫеле:

а) Алтай Йомағужин (1788);

б) Булдай Йомағужин-Солтанов (1793);

в) Иркәбай (1811);

г) Аҡмөхәммәт (1813).

IX. Айбаш, уның нәҫеле:

1. Бикҡужа Айбашев (1773);

2. Аҡҡужа Айбашев (1778), уның улы:

а) Йомағол Аҡҡужин-Солтанов (1817 — 1854);

3. Аҡбирҙе Айбашев (1782), уның нәҫеле:

а) Ғибәҙәт Аҡбирҙин-Солтанов (1820);

б) Шәрәфитдин Аҡбирҙин (1828), уның улдары:
*Сәләхитдин (1859 — 1859);
*Ямалитдин Солтанов, уның улы:
Камалитдин Солтанов, уның улдары:
Язаритдин Солтанов (1894 — 1899);
Зәйналитдин Солтанов (1900 — 1910);
Йәләлитдин Солтанов (1904);
Шәрәфитдин Солтанов (1912);
Фәрхәлитдин Солтанов (1915);
Ғаязитдин Солтанов (1924?), уның улдары:
Шәрәфитдин Солтанов,
Сәләхитдин Солтанов,
Йәләлитдин Солтанов;
4. Аҡбура Айбашев (1784);
5. Байҡашҡа Айбашев (1786).

Бер юлы кенәз һәм тархан дәрәжәләренә эйә булмыш Боҫҡон бабабыҙ, Үҫәргән батшалар тоҡомо (кенәз, тархан) булыуы менән бергә, Сыңғыҙ-хан — Даян-ҡаған бабаларыбыҙ нәҫеленән дә икәнлеген белдертеп, Бөрйән ырыуының бөйөгө Сыңғыҙ-хандың туранан-тура нәҫеле — 16-нсы быуатта Яуынсы Яҫауыл бабам менән бер осорҙа йәшәгән һәм, моғайын, Яуынсы Яҫауылға хәләл ефетлеккә ҡыҙын биргән туранан-тура икенсе яҡ бабаһының – Сыңғыҙ-хан нәҫеле Даян-ҡағандың исемен үҙенә фамилия (Даянов йәки Дуянов) итеп алғанлығын әйткәйнем. Даян-ҡағандың Үҫәргәндәргә кейәүгә сыҡҡан шул мөхтәрәмә ҡыҙы тап минең дә алыҫ оләсәйем булғанлыҡтан:

## 2. Бөрйән ырыуының Йыһат Солтанов нәҫеленә ялғанған Сыңғыҙ-хан нәҫеле шәжәрәһе

1. Бүре-ата Сөн-Һауа (Буртә Чино-а), Асман-Күк улы[61]. —
2. Түбә Мәргән (Добу Мэргэн). Түбә Мәргән үлгәс, уның тол ҡатыны Лан-Һауа (Алан-гоа) үҙенең йорт хеҙмәтсеһе — *ниндәйҙер бер уҙғынсынан болан ботона (иткә) алмаштырып алып ҡалынған* хеҙмәтсеһе менән ҡауышып (ләкин тол ҡатын үҙенең «елдән» быуаҙыуын «Һары әҙәм ҡиәфәтенә кергән Ҡояш менән ҡауыштым», тип аңлата), донъяға килә Сыңғыҙ-хан нәҫелен биргән бөрйәндәрҙең баш бабаһы:
3. Боҙансар (Боданчар, хәҙерге башҡорт риүәйәтендәге Байназар – Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендәге зат). —
4. Ғәбәши-баһадир (Хабичи-багатур). —
5. Бәғер-баһадир (Бэхир-багатур). —
6. Маха Тотон. —
7. Хажи-Көлөк (Хачи-Кюлюк). —

---

[61] Асман-Күк улы — Бөрйән ырыуы ғәмәлдә Үҫәргән ыррыуының сатаһы икәнлегенә ишара.

8. Барс Шөңгөр Тыҡшын (Барс Шонгхор Догшин). —
9. Төмбинәй Сәсән. —
10. Ҡабул-ҡаған. —
11. Бартан-баһадир. —
12. Йәсүгәй-баһадир. —
13. Темәсйән — Сыңғыҙ-хан (1155 — 1227). —
14. Толуй. —
15. Мүнкә (Маңка)-ҡаған (1208 — 1257), 1251 йылда ҡырҡ биш йәшендә тәхеткә ултырған. —
16. Хубилай Сәсән-ҡаған (1213 — 1294), 1263 йылда ҡырҡ биш йәшендә тәхеткә ултырған. —
17. Өлзәйтү-ҡаған (1265 — 1307), 1294 йылда утыҙ йәшендә тәхеткә ултырған. —
18. Хәсән Көлөк-ҡаған (1281 — 1311), Хубилай Сәсәндең ейәне, 1307 йылда 27-нсе йәшендә тәхеткә ултырған. —
19. Буянту-ҡаған, 1311 йылда тәхеткә ултырған, 1320 йылда үлгән. —
20. Гәгән-ҡаған (1303 — 1323), 1320 йыл тәхеткә ултырған. —
21. Йесүн Тимер-ҡаған, 1324 йыл тәхеткә ултырған, 1327 йыл үлгән. —
22. Рәжәбәк-ҡаған, 1327 йыл тәхеткә ултырған, 1328 йыл үлгән. —
23. Ҡошала-ҡаған, 1328 йыл тәхеткә ултырған, 1329 йыл үлгән. —
24. Ҡотоҡто-ҡаған, 1329 йыл тәхеткә ултырған, 6 айҙан һуң үлгән. —
25. Заяғату-ҡаған, шул айҙа уҡ тәхеткә ултырған, 1333 йыл үлгән. —
26. Иржамал Әрҙәнә Суҡты-ҡаған, 1333 йыл тәхеткә ултырған, шул уҡ айҙа үлгән. —
27. ***Туған Тимер Уҡағат-ҡаған,*** 1333 йыл тәхеткә ултырған 1368 йыл үлгән ***(Ҡытайҙың Юань династияһының һуңғы императоры).*** «Этот каган лишился великой державы, основанной Чингис-ханом»... «Говорят, что с тех пор, когда Хубилай Сэчэн-хаган воссел на престол в Дайду, до времен Ухагату-хагана (Тоган Тэмура) прошло сто пять лет и шесть месяцев, и тогда-то чингизиды лишились Дайду, где царствовали».

Туған Тимер-ҡағандың бер улы:

28. Айыушридар Белегте-ҡаған (Белемле-ҡаған, 1370 — 1378 йылдарҙа тәхеттә. —
29. Усҡал-ҡаған (Уҫал-ҡаған) ләҡәпле Туғыҙ Тимер (1378 — 1388 йылдарҙа тәхеттә). —
30. Энге Зариғты-ҡаған (1359 — 1392), 1389 — 1392 йылдарҙа тәхеттә.
31. Илбәк-ҡаған (1393 — 1399 йылдарҙа тәхеттә). —
32. Үлсәй Тимер-ҡаған (1403 — 1410 йылдарҙа тәхеттә). —
33. Дилбегә-ҡаған (1411 — 1415 йылдарҙа тәхеттә). —
34. Аҙай-ҡаған (14 йыл тәхеттә, 1438 йыл үлгән). —
35. Дайсуң-ҡаған (1438 — 1452 йылдарҙа тәхеттә, 1452 йылда монголдарҙың хурлат ҡәбиләһе башлығы Цэбдэн тарафынан үлтерелә). «У Дайсунг-хагана было три сына... Старший сын его Монгэлэй-тайджи (Миңғәли-солтан. — Й.С.) еще раньше стал тэнгри (үлгән). Хаган и два его сына Или и Дали и два их товарища из ***хор хунов*** (ҡор-һун — башҡорт!) Агбулат и Багбулат (Аҡбулат һәм Бәкбулат), — все пятеро были захвачены Цэбдэном»...

Был өҙөктә Дайсуң-ҡағандың үҙ башҡорттары араһында һәм уларға таянып йәшәүе, татар-монголдарға ҡаршы тороуы асыҡ сағыла.

«Миңде-өрлөк[62], старший брат Агбулата и Багбулата, ночевал у себя в стойбище. Два его коня, называвшиеся Хулагана (Ҡола ғына) и Харагана (Ҡара ғына), предчувствуя несчастье, били копытами о землю и вздыхали. Услышав вздохи своих коней, Миңде-өрлөк сказал: «Этим они предсказывают, что скоро произойдет несчастье». Утром Миңде-өрлөк встал и поспешил хагану (Дайсуң-ҡағанға). Прежде чем он успел доехать, хаган и младшие братья его были казнены (монгол Цэбдэн тарафынан). Миңде-өрлөк сделал подушкой одного из убитых младших своих братьев — положил под голову хагана, на другого младшего брата положил ноги хагана и так похоронил их. Вслед за этим Миңде-өрлөк во главе всех своих *нукеров* напал на Цэбдэна, чтобы отомстить ему, и захватил его»...

«Когда ойратами и Цэбдэном была отнята держава у Дайсунг-хагана и Абхарчин-джинонга (Дайсуңдың улы)[63], то *младший брат Дайсунга по отцу* от другой матери, называвшийся Мандугули (Миңдеғәли, Аҙай-ҡағандың улы), ушел и кочевал в местности *Джисут.* После того:

36. Мандугули-хаган воссел на великий престол в год овцы (1463 г.) в местности Хасарандай-дзон. У Мандугули-хагана были две супруги. Одна из них была *Мандухай (Миңдекәй, беҙҙең Үсәргәндең Сураш араһынан).* Другая была большеносая Йүнгән. Отцом Мандухай-хатун был Тэмур-чингсанг из рода Чорос (Сураш араһы — Үсәргән ырыуынан!)... Отцом большеносой Йүнгән был уйгурский Бэгэрсэн-тайши. Говорят, что с большеносой Йүнгән хаган испытывал онемение и не мог соединиться с ней (тәне тартмай)»...

Был текстан асыҡ күренеүенсә, Миңдеғәли-ҡағандың «тән тартҡан» (яратҡан) ҡатыны Миңдекәй — минең үсәргәнле бабаларымдың аҫаба ер биләмәләрендә Әселе йылғаһы буйындағы Сураш ауылы ҡыҙы булған, Сураш ауылы әле лә бар, рәсми исеме Юлдыбай...

Миңдеғәли-ҡағандың бер туған ҡустыһы Болху-джинонг (Болаҡһыу-солтан) бик мыҡты егет булып үҫә, татар-монголдарға ҡаршы яу сабып данлана. Ағаһының тәхетен тартып алырға йыйына, тип яла яғыусыларға ышанып, бер туған ағаһы Миңдеғәли-ҡаған уны үлтерергә яҫҡанғас, Болаҡһыу-солтан үҙенең башҡортҡа кейәүгә сыҡҡан бер туған апаһы Боғорол-көнсөнөң ҡанаты аҫтына Башҡортостанға ҡаса, ***Ҡоҙоҡ-Тереһыулы*** (хәҙерге Салауат районындағы Ҡорғаҙаҡ) йылғаһы эргәһендә йәшәй һәм Шихир-дайху (Шәһәрбаныу) исемле башҡорт ҡыҙына өйләнә. Һөйөклө ҡатыны Шәһәрбаныуҙан 1466 йылда Даян исемле улы тыуа (буласаҡ Даян-ҡаған бабабыҙ). —

37. Болаҡһыу-солтан 1467 йылда тәхеткә ултыра, тәхеттәге исеме Байан Мүнкә Болаҡһыу-ҡаған.

Улы Даянды, моғайын, башҡорт араһында башҡорт итеп үҫтереү өсөн, башҡорттоң Балыҡсы ырыуы кешеһе Бахайға (Баҡыйға) тәрбиәгә биреп ҡалдыралар.

Уйғыр ханы Смал-тайши (Исмәғил-мырҙа) барымтаға килеп, ҡаған ҡатыны Шәһәрбаныуҙы урлап алып китә, ә Болаҡһыу-солтан үҙе ҡасып ҡалып,

---

[62] Миңде исемле был башҡорт Дайсуң-ҡаған дәүләтенең «өрлөгө» — министры булған.

[63] Быларҙың монгол Цэбдэн тарафынан баяғы үлтерелеүе тураһында һүҙ бара.

йәшеренеп ҡаңғырып йөрөгәнендә бер ауылда билендәге алтын билбауы өсөн юлбаҫарҙар тарафынан үлтерелә (1470 й.).

Буласаҡ ҡаған Даянды Баҡый насар тәрбиәләүе сәбәпле, тиҙәр, танғут ханы Теләксенең етенсе улы Тимер Һаҙаҡ (исемдәренән күренеүенсә, улар ҙа башҡорт!) уны урлап алып китеп, үҙендә тәрбиәләй. Тимер Һаҙаҡтың ҡатыны Йисүн Томи сирле баланы дауалап һауыҡтырғас, Тимер Һаҙаҡ шул Даян-солтанды уның атаһы менән бер туған баяғы Миңдеғәли-ҡаған йортона илтеп тапшыра. 1467 йылда Миңдеғәли-ҡаған үлгәс, уның Сайын-ҡатын (Гүзәл-ҡатын) ҡушаматлы тол ҡатыны Миңдекәй ҡәҙерләп үҫтерә малайҙы. Был саҡ Сыңғыҙ-хандың бер туғаны булған Хасар нәҫеленән Энебулат тигән уҙаман Миңдекәйгә өйләнергә яусылап йөрөһә лә, Миңдекәй һылыу һис риза булмай (Сыңғыҙ-хан нәҫеленә генә кейәүгә сығырға риза). Бер заман ул Сыңғыҙ-хан нәҫеле Даян-солтанды, үҙенең аҫырау балаһын, хандарса кейендерә лә, Сыңғыҙ-хан ҡомартҡыларын һаҡлаған изге һигеҙ аҡ тирмәгә алып килеп ҡорбан сала һәм бөрйәндәрҙең баш бабаһы (әсәһе) һаналмыш Алан-Һауаға — “Әсә-ҡатын”ға баяғы мөҡәддәс теләген әйтеп табына:

*Если одобришь эти мои слова,*
*Әсә-ҡатын, моя матушка,*
*Пусть на внутреннюю полу мою*
*Родятся семь сыновей!*
*Пусть на внешнюю полу мою*
*Родится единственная дочь!*
*Если пожалуешь семерых сыновей по просьбе моей,*
*Каждому из семи дам тогда я имя «Болад»...*

«После того, когда Бату Мүнкэ Даян-хагану было семь лет, Мандухай Сайн-хатун соединилась с ним и в тот же год свиньи (1470) возвел его на ханский престол...» —
38. Бату Мүнкә Даян-ҡаған (1466 — 1543).

«Родилась у Мандухай-хатун (Даян-ҡағандан) семеро сыновей и одна дочь... Каждому из семерых (сыновей) было дано имя Болад (Булат)...

От Самар-дайху, внучки урйанханского (монгол) Хутугту Шигүши у Дайан-хагана родилась ***Гәрәсәндзә*** (Джалаир-тайджи) и Гэр-Болад (Урут-тайджи)... От младшей жены Хуши-хатун родились Гэрэту и Чинг-тайджи... Все они были одиннадцатью сыновьями Даян-хагана».

Был өҙөктән күренеүенсә, Даян-ҡағандың монгол ҡатынынан 1513 йылда тыумыш ***Гәрәсәндзә (Ҡарасансы)*** тигән улы һуңынан Джалаир-тайджи (Йылайыр-солтан) — Башҡортостандың хәҙергә Йылайыр төбәгендә Үҫәргән кенәзе булып торған, ә Гәр-Болад (Ҡарабулат) тигәне Урут-тайджи (Урыҫ-солтан) булып, моғайын, шул уҡ Үҫәргәндең көнбайыш төбәген (урыҫ яғын) биләгәндер (Башҡортостандың хәҙерге Йәнсура районында әлегәсә ике Ҡалмыҡ ауылы бар). Минең икенсе тыуған ауылым һаналмыш Һунарсылағы *Ҡарасановтар* фамилияһы тап ана шул *Ҡарасансы* тоҡомдарылыр, моғайын. Хәҙерге Йәнсура районындағы *Ҡарабулатовтар* ҙа Даян-ҡаған улы *Ҡарабулаттың* нәҫелдәре булыуы бик ихтимал.

Ә минең ***Боҫҡон*** бабамдың ***Даянов*** фамилияһына килгәндә, әйтеп үтеүемсә, Даян-ҡаған менән бер осорҙа йәшәгән ***Ябынсы Яҫауыл*** бабабыҙ Даян-ҡағандың бер туған еңгә-ҡатыны (үҙебеҙҙең Сураш ауылы ҡыҙы) Гүзәл Ҡатын Миңдекәйҙән тыуған берҙән-бер ҡыҙына (Даян-ҡаған ҡыҙына) өйләнгән дә шул ҡатынынан ***Үҫәргән*** исемле бабабыҙ тыуған, тигән риүәйәт бар ине. Шуны яҡшы белгән Боҫҡон бабабыҙҙың Даян-ҡаған тоҡомло Даянов булып йөрөүе бик тәбиғи.

Даян-ҡағандың гелән генә беҙҙең үҫәргәндәр менән аралашып, яуҙарҙа берләшеп йәшәүе лә билдәле. Мәҫәлән, Даян-ҡаған алыҫ Ордоста (Ҡыуанһыу йылғаһы буйында) йәйләгәнендә Ҡытай яуынан еңелеп, беҙҙең тарафҡа ҡаса. Шунан һуң Керуленда (Алтайҙа) сағында монголдарға ҡаршы яу сабып, Тургэн (хәҙерге Ҡаҙағстандағы Турғай) йылғаһы буйында һуғыша. Аты һөрлөгөп батҡаҡҡа ауғас, бэсут (башҡорт) Туған (Ә.З. Вәлиди Туғандың бабаһы?) уны ҡотҡара, монгол ғәскәрен бергәләшеп еңәләр.

Шунан һуң уйғыр ханы Исмәғилгә ҡаршы яу саба, уны үлтереп, теге саҡта ул урлап алып киткән әсәһен — Шәһәрбаныуҙы ҡотҡара. Барын-табындарҙы еңеп, үҙенә буйһондора. Монголдар ҙа уға буйһона...

«Даян-хаган тридцать семь лет сидел на ханском престоле и в возрасте сорока четырех лет стал тэнгри (умер)»...

Минең бабаларым Солтановтарҙың боронғо документтарға ҡуйған ҡултамғалары — уларҙың Үҫәргән батшалар тоҡомо икәнлектәрен белдереүсе Донъя Ҡуласаһы (Свастика) йәки шуның төрлөсә киҫәксәләре.

*«Когда Добу Мэргэн, взяв мяса, возвращался домой, по дороге к нему приблизился один бедный человек, ведший своего маленького сына.*

*Когда Добу Мэргэн сказал: «Ты чей человек?», — тот человек ответил: «Я человек Магалиг Байагуая; не могу идти я так больше. Отдам тебе этого своего сына, а ты не дашь ли мне часть того мяса?» Когда он так сказал, то Добу Мэргэн, отрезав одно из бедер трехлетнего оленя, отдал ему, и тот мальчик стал у него в юрте слугой. Вскоре... Добу Мэргэнә не стало, Алун-гоа, живя без мужа, родила трех сыновей по имени Буху Хатаги, Бухучи Салджи и Боданчар Мунгхаг»...* (Лубсан Данзан. Алтан Тобчи. М., 1973; 55-енсе бит).

Был өс малай башҡорттоң өс ырыуының баш бабалары булалыр инде: Хатаги — Ҡатай, Салджи — Һалйыуыт, ә өсөнсөһө Боданчарҙан (Байназарҙан) башланалыр Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуының Байназар нәҫеле Байназаровтар...

Һәм был Сыңғыҙнамәләге Боданчар — шул уҡ беҙҙең баяғы риүәйәттәге Байназар икәнлеген исемдәрҙең килеп сығышынан һәм телдән-телгә үҙгәрешенән шәйләйбеҙ:

Боданчарҙың әсәһе Алун-гоа//Алан-Һауа — Лан-Һауа (Лан — боландың бер төрө). Тимәк, анабыҙ Болан-Һауа.

Болан-Һауанан тыуа Боданчар//Боҙансар — Боҙан-әсә-ир, йәғни «Боҙан-әсәнән тыуған ир», сөнки «Болан» боронғо телебеҙҙә «Боҙан» тип әйтелгән, ә Боҙан һыйырын иһә Боҙан-апа-эйә — Боҙан-бейә тип тә йөрөткәндәр. Быйың сағыу миҫалын башҡорт халыҡ ижадында тап шул бөрйәндәр бабаһы Боҙансарға бағышланмыш «Боҙансы батыр» (Боҙан-бейәнән тыуған батыр) әкиәтендә күрәбеҙ. (Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр, өсөнсө китап. Өфө, 1978; 113-өнсө бит). Шул

«Боҙан-әсә-әр»ҙән (Боҙансарҙан), телебеҙҙә әүмәләнә-әүмәләнә, урталағы "н" өнө "й"-ға әүерелеп, Боҙанасар — Байаназар — ***Байназар*** килеп сыҡҡан...

*«Сыновья Арсу Болада были Онон* (йәғни Һаҡмар!) *и Буджигир* (йәғни Башҡорт!)... *Сын Буджигира был нойоном* (бей булған) *рода Тартай. Его потомки были нойонами в семи туменах Ордоса».* (Алтан Тобчи, 294 — 295-енсе биттәр).

Бында, бәлки, Үҫәргәндең тартай араһы, ә «Ордос» тигәне — Ҡыуанһыу буйындағы Ордос түгел, ә Ағиҙел йылғаһы буйындағы Оро-таш («Арский камень») төбәге, ете төмән тигәне — башҡорттоң ете ырыуылыр. Һәр хәлдә, Даян-ҡаған улы Ырыҫ-Булат, Ырыҫ-Булат улы Башҡорт һәм уның ете уланы башҡорт еренең бейҙәре булып торғанлығы күренә. Ә Даян-ҡағандың бабам-башҡорт Ябынсы Яҫауылға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙынан тыуған олаталарымдың береһе -- кенәз-тархан Боҫҡон Даянов...

Шулай итеп, 2-нсе шәжәрәләге 38-енсе быуын Бату Мүнкә Даян-ҡағандан һуң 39-ынсы быуын — үҫәргәнле башҡорт әсәнән тыуған Ырыҫ-Булат, ә 40-ынсы быуын — Ырыҫ-Булат улы Башҡорт-бей...

Алыҫ бөрйәнле бабалар ҡаны менән ҡуша, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһенән Байназаровтар ҡаны ла ҡатнаш миндә, сөнки Бибиғәфифә оләсәйем (әсәйемдең әсәһе) — ауылыбыҙҙың атаҡлы зыялыһы (урыҫса ла грамоталы) Мөхәммәтзариф Ғәбделлатиф улы Байназаровтың ҡыҙы бит.

Тыуған ауылым Сәнкем-Биктимергә ун һигеҙ саҡрымдағы Мырҙабулат-Абзан ауылында ла бар Байназаровтар. Мәҫәлән, 1816 йылда Абзанда йорт старшинаһы Ҡазбулат Мырҙабулатовтың командаһында сәфәр йөҙбашы (походный сотник) Байназар Аҡназаров (51 йәштә) үҙенең уландары Туғыҙбай (27 йәштә), Иҙрис (17 йәштә), Сәйетбаттал (3 йәштә), Зәйнәғәбдин (1 йәштә) һәм бер туған ҡустылары Әбделмән (25 йәштә), Ниғмәтулла (23 йәштә) менән бергә донъя көткән. Шулай уҡ Ҡашҡар Байназаров, Вәлит Аҡназаров тигән ғаилә башлыҡтары ла булған. Был осраҡта шул Мырҙабулат-Абзан ауылындағы Байназарҙың уландары Байназаров фамилияһын алғандарҙыр, моғайын.

Күренеүенсә, мәғлүм ителгән ике фамилия һәм сәфәр йөҙбашының исем-шәрифе башҡорттоң Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыу шәжәрәләрендәге (Башкирские шежере. Уфа, 1960; 94-енсе бит һәм «Замандаш» гәзитенең 1992 йыл 13 июль һаны) Аҡназар, уның улы Байназар исемдәренән алынған.

Минең төбәк Байназаровтары, әле әйтелгән Мырҙабулат-Абзандағы түгел, ә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһендәге боронғораҡ Байназарға бәйле, сөнки Сәнкем-Биктимерҙә баяғы уҡ 1816 йылда иҫәпкә алынмыш 50 йәшлек Бәлхиә Байназаров һис кенә лә Мырҙабулат-Абзан ауылындағы 51 йәшлек Байназар Аҡназаровтың балаһы була алмай. Беҙҙең Һунарся ауылындағы Байназаровтар фамилияһының тап Сынғыҙ-хан бабаларыбыҙ замандарындағы «Байназар»ҙан килеп сыҡҡанлығын дәлилләүсе бер риүәйәтте мин 1965 йылда үҙебеҙҙең Һунарсы ауылы ҡарты Баубаков-Байназаров Һибәтулла олатайҙың ауыҙынан яҙып алғайным:

***Һунарсы ауылының тарихы***

*Һунарсы ауылы әүәл бында булмаған. Һунарсы Ҡормантай*[64] *эргәһендә ултырған.*

*Утыҙ йәштән түбәне башҡорттарҙың бер яҡтан күсеп киләләр малдары менән, ата-әсәләрен ҡалдыралар. Бер егет атаһын арбаға йәшереп һалып алып килә. Килә торғас, һыуһайҙар, теге ҡарт малдарҙы үҙ ыңғайына ебәрергә ҡуша, малдар һыуға ҡарай тарта. Бүре (кейек-йәнлек) осрай, малдар (йылҡылар) бүрене ҡыуып китә, бара торғас бүре юҡ була (һыу буйында); ҡарт шул ергә ауыл ҡорорға, ауылды Башҡорт тип атарға ҡуша. Түрә (баш) һайлайҙар, халыҡ теге егетте баш итеп ҡуйырға була (дөрөҫ булғанға әйткәндәре). Егет: «Мине тәүҙә хөкөм итегеҙ — атайымды алып килдем бит мин», — ти. Ғәфү итәләр. Ҡарт ҡала.*

*Ауылдағы ҡайһы бер араларҙың килеп сығышы:*

1. ***Ҡаҙаҡтар** — әсир төшкән.*
2. ***Төрөкмәндәр:** бер уҙғынсы китеп барғанда беҙҙең Баубаковтар бер етем баланы **(Байназарҙы)** бер һыйыр ботона һатып алып ҡалалар.*

*Мөгөш (Нөгөш) Сәнкеменән килгән халыҡ был — унда (Нөгөш Сәнкеменә) иһә Тук-Соран буйынан килгән.*

*Йәнә лә аралар:*

1. ***Ҡамалар** (Солтановтар), тамғаһы (ҡойошҡан -- Донъя Ҡуласаһы).*
2. ***Төрөкмәндәр** (Байназаровтар).*
3. ***Борайҙар** (Сунарчиндар).*
4. ***Ҡаҙаҡтар** (Үтәбаевтар, тамғаһы (сүкеш).*
5. ***Һыуырҙар йәки башҡаралар** (Мусакаевтар).*
6. ***Бешкәктәр** (Ташбулатовтар), тамғаһы (ҡуян).*
7. ***Ҡараҡалпаҡтар** (Биккужиндар).*

Өҫтә килтерелгән риүәйәттән беҙ «төрөкмәндәр» араһының Байназаровтар икәнен белдек, Үҫәргән ырыуында ла бар ул төрөкмәндәр араһы (Р.Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М. — 1974; 109, 111-енсе биттәр). Ә иң мөһиме һәм ҡыҙыҡлыһы — беҙҙәге төрөкмәндәр араһының баш бабаһы Байназарҙы ниндәйҙер бер уҙғынсынан бөрйәндәрҙең бер һыйыр бото биреп алып ҡалыуҙары. Был иһә тарихи Сыңғыҙ-хан бөрйәндәренең тарихындағы Боданчар (боҙоп яҙылған шул уҡ Байназар) мажпараһына ике тамсы һыуҙай тап килә.

## ҺУНАРСЫ АУЫЛЫ БАЙНАЗАРОВТАРҘЫҢ ҠАРАҒАЙ-ҠЫПСАҠ ШӘЖӘРӘҺЕ

Өҫтә килтерелгән риүәйәттән беҙ «төрөкмәндәр» араһының Байназаровтар икәнен белдек, Үҫәргән ырыуында ла бар ул төрөкмәндәр араһы (Р.Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М. — 1974; 109, 111-енсе биттәр). Ә иң

[64] Ҡормантай — шунда Ҡаҫмарт йылғаһының тармағы — Аҡмалы буйындағы бер төбәктең исеме, шуға яҡын иң боронғо ауылыбыҙ (хәҙер юҡ) Ҡасанҡый-Сала («Иҫке Ҡый») күҙ уңыда тотола.

мөһиме һәм ҡыҙыҡлыһы — беҙҙәге төрөкмәндәр араһының баш бабаһы Байназарҙы ниндәйҙер бер уҙғынсынан бөрйәндәрҙең бер һыйыр бото биреп алып ҡалыуҙары. Был иһә тарихи Сыңғыҙ-хан бөрйәндәренең тарихындағы Боданчар (боҙоп яҙылған шул уҡ Байназар) мажпараһына ике тамсы һыуҙай тап килә.

1. Лоҡман-Хәким. – 2. Дәшт Ҡыпсаҡ. – 3. Рушан. – 4. Исмәғил. – 5. Алмалы. – 6. Күҙәй. – 7. Боҫкон. – 8. Бабасаҡ. – 9. Күсәк-би. – 10. Игүнсәк. – 11. Мөндөк. – 12. Сөйөндөк. – 13. Ишбулды. – 14. Бикдархан. – 15. Дәүләтбай. – 16. – Ҡашаҡ. – 17. – Базан. – 18. Ильяс. – 19. ***Байназар*** (Башҡортостандың хәҙерге Бөрйән районындағы Байназар ауылын нигеҙләгән – XI быуат аҙағы). – 20. Мырҙағол (мулла). – 21. Баубаҡ, уның нәҫеле:

I. Ҡолбәк, уның нәҫеле:

1. Бикмөхәммәт Ҡолбәков (1792), уның улдары:
 а) Динмөхәммәт (1813),
 б) Ишмөхәммәт Бикмөхәммәтов-Ҡолбәков (1822);
2. Дуҫмөхәммәт, уның улдары:
 а) Ырыҫмөхәммәт Дуҫмөхәммәтов (1831), уның улдары:
 *Ғәзизйән Ҡолбәков, уның улы:
 Ғәлимйән Ҡолбәков (1895),
 б) Шәрәфитдин Дуҫмөхәммәтов (1833),
 в) Сәйфитдин Дуҫмөхәммәтов (1838).

II. Бәлхиә (1766), уның нәҫеле:

1. Фазулла Бәлхин-Байназаров (1814 — 1856), уның улдары:
 а) Сафиулла (1839 — 1852),
 б) Үмәр, уның улы:
 *Бәҙритдин Баубаков (1893 — 1920 й. иҫән).

III. Ноғоман Баубаков-Байназаров (1788), башта мөхтәсип (һөнәрмән), аҙаҡ указлы мулла. Уның нәҫеле:

1. Ғәбделлатиф Ноғоманов-Байназаров (1808), уның нәҫеле:
 а) Мөхәммәтзариф Байназаров (1831), уның нәҫеле:
 *Мофаззал (1858 — 1915), уның нәҫеле:
 Мырҙағәли (1893 — 1920 й. иҫән), уның улдары:
 Мәһди (1902 — 1910),
 Муллағәли (1904),
 *Бибиғәфифә (1873 — 1940, Андижан шәһәрендә ерләнде. Йыһат Солтановтыңоләсәһе),
 *Хәмзә (1898 — 1942),
 *Хөснөтдин, уның улдары:
 Ғаббас (1904),
 Ғәбделсәлим (1910);
 б) Мөхәммәтғариф (1836 — 1857);
 в) Сөнәғәтулла, уның улы:
 *Зиннәтулла (1916);

г) Лотфулла (1916).

2. Абдулкәли (1813).
3. Мөхәммәтсадиҡ (1827), уның улдары:
   а) Шаһислам Баубаков (1850 — 1920 й. иҫән);
   б) Шәйхулислам Баубаков (1866 — 1920 й. иҫән).
4. Мөхәммәтхәсән Байназаров (1830), зауряд-хорунжий, 3-өнсө йорт старшинаһы вазифаһын башҡара. Уның улдары:
   а) Ғәбделфәттәх (1852);
   б) Ғәбделфазыл (1858), уның улы:
   *Һибәтулла Баубаков (1887 — 1965 й. иҫән, миңә баяғы риүәйәтте һөйләүсе).
5. Мөхәммәтғәли Ноғоманов-Байназаров (1814), урядник. Уның улдары:
   а) Хәмзә (1850 — 1853);
   б) Хәким;
   в) Айытбай Байназаров (1871 — 1920 й. иҫән);
   г) Ғабдулла Байназаров (1873 — 1920 й. иҫән);
   д) Шәйхелислам Байназаров (1875 — 1920 й. иҫән);
   е) Абдрахман Байназаров (1878 — 1920 й. иҫән), уның нәҫеле:
   *Фәйзрахман (1918?), уның улдары:
   Ринат,
   Сафуат;
   *Фәтхрахман (1930?);
   ж) Ҡорбанғәли, уның улы:
   *Миңлеғәли (1932), уның улы:
   Сергей.
6. Ғабдулвәли Ноғоманов-Байназаров (1815 — 1857), уның улы:
   а) Мөхәммәтшәриф (1834).
7. Мөхәммәтсафа Байназаров (1844), уның улдары:
   а) Мөхәммәтвафа;
   б) Төхфәтулла Байназаров (1872 — 1920 й. иҫән); уның улдары:
   *Насибулла, уның улдары:
   Марат (1932 — 1952),
   Фоат (1927 — 2000), уның улдары:
   Марат,
   Талғат.
   *Сәғиҙулла Байназаров (1902), уның улдары:
   Ирек,
   Спартак;
   *(?) Сәмиғулла Байназаров;
   *(?) Хөсәйен Байназаров.
8. Хисмәтулла, уның улы:
   а) Ғайса Байназаров (1902).
9. Хәйбулла, уның улы:
   а) Хәмзә Байназаров (1907), уның улдары:
   *Динам Байназаров,

*Илүс Байназаров,
*Мансур Байназаров.
IV. Абдулмоталлап (1800)...

# ҺУНАРСЫ АУЫЛЫН НИГЕҘЛӘҮСЕЛӘР ШӘЖӘРӘҺЕ

**(Хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Һарыҡташ районы, Жултый ауыл советы)**

Мәғлүмәттәр XX быуат баштарында Бәкәтәр-Йәнсура (хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Ҡыуандыҡ районы) ҡасабаһының аҡһаҡалы Рәхмәтуллин Мөҡим Бәҙретдин улы төҙөп ҡалдырған “Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе”нән, Рәсәй дәүләт администрацияһы төрлө йылдарҙа үткәргән “ревизские сказки”ҙарҙан һәм 1956, 1960 йылдарҙа Мәскүҙә нәшер ителгән “Материалы по истории Башкирской АССР” исемле документтар тупланмаларының IV һәм V томдарынан, шулай уҡ Сәнкем-Биктимер ауылы мәсетенең метрика кенәгәләренән алынды. Хәҙерге яҙмала ҡабул ителгән “бей” һүҙе шәжәрәләгесә “би” (мәҫәлән, Мөйтән-би) яҙылышында ҡалдырылды; волость – ылыҫ, губерния – гөбөрнә тип бирелә. Тексҭағы автор өҫтәлмәләре дүрткел йәйәләр эсенә һалынды.

Билдәле булыуынса, Обь – Иртыш үҙәненән алып Ҡама – Иҙел үҙәненәсә, Төньяҡ Боҙло океандан (Ҡар диңгеҙенән – Карское море) Каспий (Үһәргән – Гурган) диңгеҙенәсә йәйрәп ятҡан ерҙәр бик боронғо замандарҙан уҡ башҡорт ырыуҙарының тәүтөйәге булған, ошо тәүтөйәктән бабалар мең-мең йылдар дауамында мифик Бүре һәм Болан (Һыйыр) юлбашсылығында изге Көн-Өфө (Ҡәнифә) һәм Ҡуңыр-Буға юлдары буйлап Евразия ҡитғаһының дүрт тарафына таралған, хатта Америка, Африка ҡитғаларына барып еткән.

Изге Көн-Өфө юлындағы бабалар, әле әйткәнсә, үҙҙәренең юлбашсы-башбабаһы (дәдәме – тотемы) итеп бүре-этте (бүретте – бурятты) һанаған; ырым буйынса дәдәмдең ысын исем-атын әйтеү ҡәтғи тыйылғанлыҡтан, уны “аҙаштырып” Әби-ән-әс (бында Әби-ән -- Әбиҙән йәғни әпи-апабыҙ Көн-Ҡояштан тыуған, әс -- әсә мәғәнәһендә) -- Әби-Нәс тип йөрөткәндәр; ябай ғына әйткәндә, Көн-Әбиҙән (Ҡояш-Апанан) тыуған Әсә (Әсә-Бүре) була инде. Бара-тора “Нәс” тигәнебеҙ “нәсәб” (нәс-әби), “нос” (бүреттең еҫ тойҒон осло танауы) төшөнсәләрен биргән. “Нос” тигәнебеҙ тағы “с” өнө “һ”-лашыу һөҙөмтәһендә “нос”тан ноһ – нох – нюх (урыҫса “еҫ тойоу”) – еҫкәп белеүсе тойҒон-эт мәғәнәһендәге һүҙҙәребеҙ хасил булып, ахырҙа был дәдәмебеҙ донъялағы төп диндәрҙең Нух – Ной пәйғәмбәренә әүерелә. Ошоларғы бәйле, бүрет (бурят) дәдәмле ырыу-ҡәбиләләр ҡәүемен, дөйөмләштереп, Нухай – Нуғай (йәғни бүре-эткә табыныусы) тип атағандар; был атама Сыңғыҙ-хан бабабыҙ заманында уға буйһынған һәм ҡулға бүре-эт эйәләштереүҙе башҡорттарҙан күреп белгән монгол ҡәбиләһенең теленә “эт” мәғәнәһендә “нухай – нуғай” рәүешле барып кергән. (Ентеклерәк белергә теләгән уҡыусыға китап бар: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙ-хандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө, 2007).

Һуңғы Бирелəсəк шəжəрəбеҙ кешелəре төйклəнгəн тупраҡтың да тарихын ҡыҫҡаса белеү хəйерле. Урта быуаттар Башҡортостан хакимы Сəсле Дəрүиш-биҙəн һуң дəүлəтебеҙ идаралығы һəм билəмəлəре уның ике ейəненə бүленеп, өлкəне Борнаҡ – Себер өлкəһендə (Себер ханлығының башланыуы), кесеһе Ядкəр (1533 йылда тыуған) Өфө өлкəһендə (Нуғай Урҙаһы) идара ҡыла. Бернисə йыл буйы килгəн ҡоролоҡ-ҡытлыҡ арҡаһында ил ҡаҡшап, өҫтəүенə төньяҡлап урыҫ баҫҡынсылығы көсəйгəс, халыҡтың бер өлөшө 1546 йылда Ядкəр уҙаман етəкселегендə илдəн ҡубынып, ул саҡтағы тыныс һəм йылы һаналған Ҡубан яҡтарына күсеп китə лə шундағы нуғай халҡына əүерелə. Тəүтөйəкте ташлап китергə риза булмаған башҡорттар (ҡаҙаҡтар уларҙы Себер ханлығындағы əстəк – остяк ҡəүеменең исеме менəн истəк – иштəк тип атай) баяғы ҡанҡəрҙəштəренəн бушанып ҡалған ерҙəр иҫəбенə билəмəлəрен киңəйтеп, Үҫəргəн батшалар шəжəрəһенең аҫыл заты Тəтегəс-би (1565 йылда вафат, Юрматы ырыуының бийе) етəкселегендəге берлəшмə булараҡ йəшəй, лəкин дөйөм Башҡортостан бернисə өлөшкə бүленгəн хəлдə тарҡаулыҡ осорон кисерə. Шул шарттарҙа 1557 йылда башҡорттарҙың дүрт ырыу биҙəре – Үҫəргəндəн – Тəтегəс һəм уның улы Бикбау, Бөрйəндəн – Иҫке (Иҫəкəй), Ҡыпсаҡтан Мышы улы Ҡараҡужаҡ, Тамъяндан Шəғəли Шаҡман уҙамандар үҙҙəренең ихтияры буйынса Урыҫ дəүлəтенə ҡушылыуҙарын иғлан ҡыла һəм шул дəүлəт администрацияһынан ергə аҫабалыҡ хоҡуҡтарын һəм билəмə-ер сиктəрен билдəлəгəн рəсми танытма-грамота ала. Шуға ярашлы Үҫəргəн, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Бөрйəн ырыуҙарыныҡы итеп танылған ер-билəмəнең сиктəре түбəндəгесə (текст бөгөнгө телгə яраштырылды):

«961 йыл ғəкрəбнең 2-че көнендə рус жəмəғəте Ҡазан шəһəрен басып алдылар. Шундан суң, башҡордлар дүрт ыруғындан вəкиллəр: Үсəргəндəн — Бикбау кенəз, Ҡыпчаҡдан — Мəшəүле Ҡаракөчөк кенəз, Бержəндəн — Иске бей кенəз (икенче исеме Буранчы бей), Тамъяндан — Шығай Шаҡман кенəз рус кенəзенең чаҡырыуы буйынча Ҡазанға бардылар. Олуғ кенəз царь Васильевичҡа, тəбиғə вə рəғиəлек (буйһонмаҡҡа) ғарыз (яҙма рəүешле аңлатыу) итүб, ҡабул итеп, үз химаясына алғандан суң, ерлəрен һəм сыуларын тигезлəб үлчəб бирүб, ғарыз итдилəр. Былар һəр ҡайусына тарханлыҡ чины биреб, башҡордларға ерлəрен ғəделлəп тигезлəб биреү, тигезлəб бүлеү ҡайуның өчөн төлкө вə сусар ясағы түлəделəр. Еремез түбəндəгечə бүленеб, Олуғ кенəзнең санатлары тəсдик итделəр. Əүəл Жайыҡ буйлап Үрге Жики Бузчык, Ҡызыл, Саҡмар сыуы, Эстəрле, Исəйле Үскəлек, Ике Һүрəн — буларның башындан аяғынача, Саялмыш башындан Кер ауылының, Ташкичеүдəн Ману йылғасындан Ялғыз өйəнкегəчə, Нуғай кичүе үтə Ер төбəкдəн Үксез төбəккəчə, юлҡамы рəүешле Үткелендəн, Ҡарағайдан, Керйыуардан, Ҡалмак башындан Сыуал тауынача, Саҡмар буйлаб Кейембирде түбəгенəчə, Таналыктың бөтөн буйы белə Жайыкның Буз тирəгенəчə, Яраҡлидан ҡара урман артсылы Ҡамышлауның Ҡуш Усағындан, Өйрөк Таудан Жим сыуынача — Үсəргəн, Ҡыпчак, Тамъян, Бөржəннеңдер. Андан сахра тарафы: түбəн чиге Сарайчыҡдан Өч Үзəннең сыу ағышы белəн чиге Дүрт Килигəчə — Бөржəннең асаба ерлəредер. Бу — башҡордларның мəшһүрəт белəн тигезлəп үлчəб бүленгəн ерлəредер. Бу Ҡазан шəһəренең кенəгəсенə теркəлмештер, һəм булар өчөн төлкө, сусар ясағы түлəнмеш.

Тарих 970 жөзәнең 29-ынчы көнөндә бу грамута ҡәғәзинең ахрына император Әғзәм хәзрәтләренең олуғ санатлары ҡул ҡуймыш: **Бобров, Степан Белагушин, Степан Соколов,** сәркәтиб **Михаил Белинский».**

Күренеүенсә, Бөрйән ырыуының элекке аҫаба ер-биләмәләре хәҙерге Рәсәй Федерацияһының Куйбышев, Саратов өлкәләрендә һәм Ҡаҙағстанда тороп ҡалған (ҡалдыҡтары әлегәсә шул аҫаба ерҙәрендә донъя көтә). Боронғораҡ (Туҡтамыш-хан заманы) бөрйәндәрҙең уғата көньяҡтараҡ – Каспий диңгеҙе буйындағы Маңғышлаҡ ярымутрауында төйәкләнеүе тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, 1994, 23-өнсө бит). Ә ҡыпсаҡтарҙың бер килкеһе был яҡтарға Килмәк-абыз Нурышов етәкселегендәге башҡорт ихтилалын баҫтырышырға батша ғәскәрҙәре сафында 1736 йылдың йәйендә хәҙерге Ырымбур арты далаларынан килеп төпләнеүе билдәле, ул хаҡта “Башҡорт ҡырылған урын” тигән хеҙмәтемдә йәки “Эскерһеҙҙең тормошо” тигән мемуарҙарымда ентеклерәк уҡырға мөмкин.

Билдәле булыуынса, үҫәргәндәр ерендә Ырымбур ҡәлғәһен ҡорҙортмаҫ өсөн ҡубынған был ҡоралды күтәрелеште 1735 йылда көнбайыш Башҡортостанда Аҡай-батыр Күсемов башлап ебәрһә, Үҫәргәндә уны Килмәк-абыз Нурышов менән Алғышай-батыр Наҙаров (иртә үлгән шағирыбыҙ Рифҡәт Алғышаевтың бабаһы) етәкләй. Баш күтәреүселәрҙең һуғыш юлдары ҡанлы, ә юл осо ҡот осорғос фажиғәле. Ихтилалсыларҙы баҫтырыуҙа ҡырғынсы ғәскәр сафтарында батша яҡлы төрлө милләт вәкилдәре менән бергә баяғы *ете йөҙ (700) башҡорт ҡыпсағы* ла ҡатнаша. Ихтилал етәкселәренең береһе яҙып ҡалдырған тәүәрихтә был хаҡта асыҡ әйтелгән: *“Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең урыҫтар яҡлы булыуынан маһайып,* Хоҙай уларға тыныслыҡ һәм бәхет килтерҙе, тип һананы һәм тамъяндарға (күтәрелеште тамъяндар башлап ебәргән -- Килмәк-абыҙ тамъян ырыуынан. – Й.С.) ҡаршы көрәште. Тамъяндарҙан үс алырға теләп, Һаҡмарға (йәғни хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ергә. — Й.С.) барып еткән урыҫтар менән берләшеп, тамъяндарға ябырылды. Һуңғылары үҙҙәренә ҡотолор урын таба алманы...

Улар (тамъяндар. — Й.С.), күсенергә теләп, ҡыпсаҡтарҙың тарафына (йәғни ҡыпсаҡтар менән үҫәргәндәр араһын сикләүсе Һаҡмар йылғаһы буйына – хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ергә. — Й.С.) килгәйне, ләкин көтмәгәндә ҡыпсаҡтарҙан булған һатлыҡ йәндәр Һаҡмарға килеүсе урыҫтарға хәбәр иткән улар хаҡында. Мосолмандар иһә бер ни ҙә белмәне. Һатлыҡ йәндәрҙең береһе... *Ҡорбанай...* мосолмандар йәшәгән урынды күрһәткән һәм урыҫтарҙы һуғыш хәйләһенә өйрәткән. Урыҫтар төндә үҙҙәренең туптарын килтерҙе лә иртәнсәк шуларҙан ата башланы. Бахыр башҡорттар, был атыуҙың ҡайҙан ҡупҡанлығын аңлай алмай, төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса башланы; күп ҡатындар балаларын ҡосоп йылғаға ташланды ...бәғзеләренең сабый балалары тирәк ботаҡтарына эленгән сәңгелдәктәрҙә ҡалды — бөтәһе лә шунда һәләк булды, сөнки әсәләре уларҙы үҙҙәре менән алырға өлгөрмәне. Яралылар ҙа йылғала һәләк булды. Был һуйышта Һаҙлыйылғала (хәҙерге Һунарсы ауылы аша аға. – Й.С.) мәйеттәрҙән күпер хасил булды. Ҡарттарҙы эт урынына таштар һәм күҫәктәр менән һуғып үлтерҙеләр, имсәк сабыйҙарын ҡылыстар менән тураҡланылар, гөманлы бисара ҡатындарҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәш-елкенсәкте мауығып үлтерҙеләр. Шәһиттәрҙең

мәйеттәрен ҡарғалар суҡыны һәм төлкөләр кимерҙе. Ошо көндә лә унда ул кешеләрҙең һөйәктәрен табырға мөмкин... Күксә-тархандың ҡатынын — Сураҡайҙың әсәһен — әлһерәп бөткән ҡарсыҡты, урталай яра сабып, юлдың ике яғына быраҡтырҙылар. Тамъяндан Ҡорманғолдо, Аҡмайҙың улын, был фетнәле көндә урыҫтар ҡамаған; үҙенең һөйләүенсә, ул, ике янды бер юлы матҡып алып, керешен бөтөрә тартып, шуларҙан уң яҡлап — урыҫтарға, һул яҡлап мишәрҙәргә атып, үҙенә юл ярған. Бер мишәр унын артынан: «Ах, ни эшләнең һин, яуыз башҡорт?! Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә тирәктәр ҙә етмәй бит!» — тип ҡысҡырып ҡалған... Һатлыҡ йәндәр көлдөләр һәм уларҙың ҡайғыһынан ҡыуандылар... Хатта шуға тиклем барып еттеләр: үҙ әтрәттәрен төҙөп, бахыр мосолмандарҙы ҙур тырышлыҡ менән ауланылар һәм уларҙы урыҫ ҡулдарына һаттылар... *улар көслөк менән башҡорт ерҙәрендә ҡалды һәм бөгөн дә күп әле улар*; башҡорт ауылдарында берәүҙе лә тере ҡалдырманылар"...

Рәсәй хөкүмәтенең рәсми документтарында былар҆ҙың барыһы дөрөҫләнә.

1736 йылдың 2 июнендә Ырымбур экспедицияһы башлығы И.К. Кирилов әбей батшаға кинәнесле хәбәрләй:

«Ее императорскому величеству, самодержице всероссийской всеподданнейшее в Кабинет доношение.

После всеподданнейших нижайшего раба репортов и отъезду отсюду генерала-лейтенанта и казанского губернатора Румянцева получил известие от майора *Останкова*, что яицкими казаками вступя от Сакмарска Нагайской дороги в Башкиры *19 мая*, ушедших с Демы реки воров, на которых *пришли внезапно*, в горах *между Ика и Сакмары рек*, добита *мужеска полу с 600, женска* ***немалое число,*** причем получено лошадей, скота и пожитку довольно...». Шул



Һүр. 1. Карталағы түңәрәк түртөклә пунктир -- Аҡһаҡтимер яуының юлы. Тәреле пунктир -- Кириловтың Ырымбур экспедицияһы юлы. Уҡлы һыҙыҡ -- батша ҡырғынсыларының Ҡасанҡый-Салаға (башҡорт яуының төбәгенә) уҙған юлы. 1. Сәнкем-Биктимер. 2. Ҡасанҡый-Сала -- батша ҡырғынсылары 1200 башҡортто ҡырған урын. 3. Ҡаҫмарт йылғаһының иҫке үҙәне. 4. Тәре-билдә -- Тирәкле йылғаһы янында Кирилов драгундары Килмәк-абыз яуы менән һуғышҡан урын. 5. Тәреле түңәрәк-билдә -- Аҡһаҡтимер һәм Туҡтамыш-хан ғәскәрҙәре бәрелешкән урын.

ҡырғында батша яҡлы ("доброжелательные башкирцы") башҡорт ҡыпсаҡтарының да ете йөҙ (700) кешелек отрәте ҡатнашлығын батшаға ентеклерәк итеп һуңғараҡ яҙылған хисапнапмәлә күрәбеҙ: "Майор Останков 2 сентября из Сакмары писал: ...собравший он, майор, доброжелательных башкирцев з 700 же человек да яицких казаков с 300 человек, отправил на вора Алгишея по другую сторону реки Сакмары, о котором де есть известие, что кочует на реке Космарке и Оняку (дөрөҫө Эйек. – Й.С. [Материалы по истории Башкортостана, том VI, автор-составитель Н.Ф. Демидова. Уфа – 2002, №312, 475-енсе бит])".

Иғтибар итегеҙ: 1736 йылдың 19 майында хәҙерге Һунарсы ауылы урынлашҡан ерҙә 600 ир-ат һәм ***унан да кәм булмаған һанда*** (тимәк, тағы 600) ҡатын-ҡыҙ, бала-саға — бөтәһе 1200 кеше, көтмәгәндә баҫып алынып, бер юлы үлтерелгән, һәм был ҡанлы фажиғә тап ошо беҙҙең төбәктә — Эйек менән Һаҡмар аралығындағы минең бабалар ауылы Ҡасанҡый-Сала ерендә булған (ауыл тулыһынса яндырылған – Иҫке Ҡый тигән ерҙә өй урындары беленә)... Ә Ырымбур экспедицияһының 1736 йыл 30 июндә яҙылған икенсе бер документында: «Майор *Останков* с яицкими казаками после первой над ворами победы *от 22* по 30 числа мая ходил по реку Яику, где воровских разорил и выжег 113 деревень, и с башкирцами, коих было 1000 человек, бились и побито больше двух сот...» — тип әйтелә. Тимәк, ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Салала ҡырғынсылар тарафынан 1200 ир-аттың, ҡатын-ҡыҙҙың, бала-сағаның яҙалап үлтерелеүе һәм ауылыбыҙҙың яндырылып юҡ ителеүе 1736 йылдың иҫке стиль менән 22 майында булған, был иһә Себер юлы Балыҡсы ылыҫы Сейәнтусы ауылы фажиғәһенән кәм түгел. Айырма шунда ғына: Тәфтиләү менән бергә йөрөгән П.И. Рычковтың яҙма-шаһәҙәтнамәһе арҡаһында ғына Сейәнтусы тарихҡа керһә, Ҡасанҡый-Сала фажиғәһе тарихтан ситтә ҡалған.

Был ҡанлы фажиғә урыны төбәгебеҙҙең һыҙмаһында (һүр. 1.) – тәре тамғаһы менән, ә Һаҡмарҙың һул ярынан ҡырғынсылар килгән юл уҡбашаҡлы һыҙыҡлап күрһәтелде. Ҡорбанай (йәки Ҡорбантай) тигән хыянатсы ҡырғынсыларҙы аҫтыртын үткәргән йәшерен юлды түртөклә пунктирҙар менән билдәләнек; шул кисеү һәм уның аръяғындағы төбәк хәҙер ҙә *Ҡормантай төбәге* тип атала. Хәҙерге Һунарсы ауылынан Сәнкем-Биктимергә табан Әселе үҙәкте сыҡҡас та, юлдың һул яғында һөргән ер эсендә (хәҙер инде һөрөлмәй — ауыл өйҙәре аҫтында ҡалып бара) эре-эре таштар менән буралған, арҡырыһы — биш, буйы ун метр самаһындағы оҙонса-түңәрәк (овальный) уба, ә уның ян-яҡтарында шулай уҡ таш бураулы бәләкәйерәк ике уба (ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға айырым-айырым өс ҡәбергә ерләнгән) бар ине — «Сәғир-Сағаид» зыяраты. Ҡайһы берәүҙәр уны, «Сағаид»ә һүҙен боҙоп әйтеп, «Сәғиҙә зыяраты» тип йөрөттө, шуға күрә унда, имеш, «атаһы менән ҡунаҡтан ҡайтып барышлайы юлда

үлеп ҡалмыш Сәғиҙә тигән ҡыҙ күмелгән», тип һөйләне (бер юлы өс зыяратҡамы?!.). Әммә зыяраттың бабаларыбыҙ ҡушып ҡалдырған ғәрәпсә исемендәге «Сәғир» — «ғазап уты», ә «Сағаид» — «бейек урын, уба» тигән һүҙ икән. Фани донъяла уҡ ғазап утында янып-язаланып үлеүселәрҙең — изге шәһиттәребеҙҙең уба-зыяраты, тимәк...

Мең дә ике йөҙ шәһит күмелгән был убаның эре-эре бура таштарын үткән быуаттың алтмышынсы йылдар уртаһында Хәмитов Миңнебай тигән кеше ташып алып, саҡ ҡына үрҙәрәк Әселе үҙәктең һул ярында өйөнөң нигеҙенә һалған, белекһеҙҙе берәү ҙә туҡтатмаған (башҡорт маңҡортҡа әүерелә -- ата-бабалар тарихын тойомламай). Шул йылдарҙа Һунарсы ауылы Әселе үҙәктең баяғы ҡанлы уң ярынаса ҙурайып китеп, шәһиттәрҙең изге зыяраттарына еткерә яҙып яңы йорттар төҙөлгән һәм улар, изге зыяраттар, бура таштарының урланып бөтөүе сәбәпле, ер менән тигеҙләнгән -- зыярат булыуынан туҡтаған. Ошо көндә ул урынды ауылдың бернисә ҡарты ғына (мәҫәлән, минең замандаштарым Сөйәрембәтев Фәсхетдин, Ҡыуатов Атауылла, Мостряков Алексей-Лүңке — ғүмерҙәре буйына шул зыяратты уратып үтеп ер һөргән тракторсылар) күрһәтеп бирә алыр ине (ул изге урынды 2003 йылдың июлендә ғаиләм менән ауылға ҡайтҡаныбыҙҙа баяғы уҙамандар менән берлектә урта тәңгәленә бүрәнә киҫкәһе һалып ваҡытлыса ғына билдәләп киткәйнек. Аҙаҡ 2008 йылда Фәсхетдин һәм Атауылла вафат булған тип ишеттем). Халҡыбыҙҙың ҡаны аҡҡан изге зыярат мотлаҡ тергеҙелергә һәм унда мәңгелек матәм һәйкәле ҡуйылырға тейешле, тип һанайым.

Һаҙлыйылға буйындағы ҡанлы еңеүенән рухланған секунд-майор Б.Л. Останков үҙенең ҡырғын әтрәте менән май айының аҙаҡҡы аҙнаһында үҫәргән ерҙәре буйлап Һаҡмар менән Яйыҡ аралығынан үрләп китә лә 113 башҡорт ауылын яндырып, 200 башҡорттоң башына етеп ҡайта. Ошондай ҡырғын өҙлөкһөҙ ҡоторона. Секунд-майор Останковтың хисапнамәләре буйынса, 1737 йылдың август аҙаҡтарында ул Ағиҙел аръяғынаса дөрөп, Нөгөш, Мәләүез йылғалары буйындағы ихтилалсы башҡорттарҙың ҡанын ҡоя. Һөҙөмтәлә был ерҙәрҙең үҫәргәндәре йә ҡырылып, йә төрлө яҡҡа һибелеп бөтөп, бик һирәкләнеп ҡала, урындарына баяғы батша яҡлы ҡәүемдәр төйәкләнә (хәҙер һәр ауылда, тип әйтерлек, ҡатнаш йәшәйбеҙ).

Һаҡмар һәм Ҡаҫмарт буйҙарындағы ауылдарҙы нигеҙләгән Үҫәргән башҡорттарының бер тармағы -- тарихи Солтанов – Боҫҡонов – Уралбаев (Аралбаев) фамилияларын биргән бабаларыбыҙ XII быуат баштарында (1200 йылда) уҡ ошо Ҡаҫмарт йылға тамағындағы Мөйтән-би ыҫтаны Ҡасанҡый-Салала (Урта Сәнкем тип тә йөрөтөлгән) донъя көтөп торғанлығы билдәле. Шул уҡ Үҫәргәндең икенсе бер тармағы -- хәҙерге Һунарсы (Үрге Сәнкем) ауылын нигеҙләгән Сунарчин, Тләүмбәтов, Сөйәрмбәтов, Мусаҡаев, Яугустин фамилиялары һәм Этбай (Үрге Ырыҫҡол), Ырыҫҡол, Солтанбай, Тирәкле ауылдарын нигеҙләүсе Этбаев, Ырыҫҡолов, Арыҫланов, Солтанбаев, Ярышев фамилияларының һәм, моғайын, Үҫәргән ырыуынан булмаған Биктимеров (Сәнкем-Биктимер ауылын нигеҙләүселәр), Баубаков, Байназаров фамилияларының бабалары, быуындан-быуынға тапшырылған риүәйәттәр

буйынса, был төбәккә һуңыраҡ – баяғы бер ҡәүем башҡорт-нуғайҙарҙың 1546 йылда Ҡубанға күсенеп китеүе осоронда Нөгөш йылғаһы буйынан килеп төпләнгән булырға тейеш. Үҫәргәндәрҙең ул яҡтағы биләмәләре тураһында тарихи мәғлүмәттәр бар: мәҫәлән, 1787 йылдың 3 сентябрендә Нуғай юлы Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы башҡорттарының Нөгөш йылғаһы буйындағы аҫаба ерҙәрен завод хужаһы Д.И. Пашковаға һатыуы тураһында килешеү ҡағыҙы бар; унда, башҡалар менән бергә, *Һунарсы Тләүмбәтов* (Елумбетов тип боҙоп яҙылған) Ишбулат Тләүмбәтов (Тляуф тип боҙоп яҙылған) ҡул ҡуйған (Материалы по истроии Башкирской АССР, V том, М., 1960, №220. – Артабан томдар ғына күрһәтелә). Тап беҙҙең төбәк үҫәргәндәрҙең исем-фамилиялары Тляумбет Явгостин (Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы старшинаһы), Абдрак Явгостин, Калмаҡ Явгостин, Суярымбет Явгостин, Буляк Тляумбетов, Урускул Кайбулатов, Урускул Айтаков, Аблай Урускулов, Казянь Урускулов, Давлет Урускулов, Унгар Урускулов, Юлтимир Урускулов, Ибрай Урускулов, Сакир Урускулов, Урускул Елдашев, Исергап Аллабердин (сотник), Яруш Сулеймановтар (IV томдың беренсе киҫәгендә 1754-70 йылдар ҡыҫаһындағы документтар: №47,167,181,298,302,311) һәм Калкаман Бускунов, Исергап Бекбовов, Ильчугул Таймасовтар (V томдың 1770 йылғы №317 һәм 1791 йылғы №321 документтары) теркәлгән сәхифәләр бар.

Инде төбәгебеҙ ауылдарының ҡыҫҡаса тарихына бер килке күҙ һалайыҡ.

Әйтеп үтелеүенсә, хәҙерге ауылдарыбыҙҙың әсәһе Ҡасанҡый-Сала (Мөйтән-биҙең ҡасанҡы – ҡышлау ҡасабаһы) хәҙерге Һунарсы ауылынан түбәндәрәк Иҫке Ҡый (иҫке ауыл урыны) тигән ерҙә булған; унан саҡ ҡына түбәндәрәк – Ҡамышлыҡолаҡ күтеренең ситендәге тәбәнәк тауҙа – шул ауылдың зыяраты. Бабабыҙ Мөйтән-биҙең ("Башҡорт батшалары" тигән китабымдың тышлығында уның ҡытай рәссамы яһаған һүрәте бирелде) 1207 йылда Бөрйән бәге Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә Сыңғыҙ-хан (император) итеп күтәрешкәнен һәм күп йылдар уның уң ҡулы булғанлығын (аҙаҡ дошманлашалар) беләбеҙ. Тимәк, урындағы халыҡ телендә уның "баш ҡалаһы" тип йөрөтөлгән Ҡасанҡый-Саланың йәшәү тарихын иң кәмендә ***1200 йылдан башлап*** һанай алабыҙ. Баяғы 1735 йылдың 19 майындағы оло фажиғәлә был сала (село) ҡырғынсылар тарафынан тулыһынса яндырылғас, тере ҡалғандарҙың береһе Биктимер ҡарт тап шул 1735 йылда ауылды түбәндәрәк – Ҡаҫмарт йылғаһы Һаҡмарға ҡойған урында тергеҙеп, йорт һалып ултыра, тере ҡалған башҡа ауылдаштары ла бер-бер артлы шунда ултыраҡланғандан һуң, ауыл инде Биктимер (аҙаҡ Сәнкем-Биктимер) исемләнә. 1795 йылғы V ревизия буйынса, ундағы 40 ғаилә-йортта 124 ир-ат, 102 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Был күрһәткестәр Солтанбайҙа (Һултамбайҙа) 24 һәм 42 – 50, Ырыҫҡолда 24 һәм 50 – 43, ә Һунарсыла 9 һәм 34 – 28 һандарында сағыла.

Ҡыҙыҡһынғандар өсөн йәнә:

Һунарсыла 1816 йылда 14 йорт, 44 ир-ат, 24 ҡатын-ҡыҙ; 1859 йылда 41, 96 – 90; 1866 йылда 35, 91 – 87.

Солтанбайҙа 1816 йылда 5, 26 – 24; 1859 йылда 25, 66 -- ?; 1866 йылда 22, 53 – 42.

Ырыҫҡолда 1816 йылда 22, 200 – 169; 1859 йылда 112, 311 – 304; 1866 йылда 102, 261 – 231.

Сәнкем-Биктимерҙә 1816 йылда 21, 105 – 76; 1859 йылда 95, 230 – 207; 1866 йылда 99, 226 – 211. Заманында гөрләп ауылыбыҙ большевиктарҙың 70 йыллыҡ хакимиәте осоронда ҡороп юғалды.

Инде Сәнкем-Биктимерҙән заманында яңы ауылдар бүленеп сығыуының сәбәбен ҡыҫҡаса аңлатайыҡ.

XVIII быуат урталарында батша самодержавиеһы тарафынан башҡорттарҙың Урта Азияға юлын быуыр һәм уларҙы ауыҙлыҡлап тотор өсөн Башҡортостан көньяғы Самаранан алып Орскиғаса хәрби ҡәлғәләр (крепостар) менән уратып алына. Ҡәлғәләрҙең бер өлөшө Һаҡмар йылғаһының һул яры буйлап та ҡорола, ә уң яҡ яр буйы, башҡорттар менән рәсми килешеү нигеҙендә, башҡорттарҙың һис кем ҡағылышһыҙ аҫаба ерҙәре итеп танила. Өфө янындағы Шишмә ҡасабаһынан килтерелеп Һаҡмарҙың һул яғында (хәҙерге Шишмә ауылы) урынлаштырылған Шишмә ландмилицияһы тигән ғәскәри төркөм кешеләренә (татарҙарға) бабаларыбыҙ йыл да, уң ярға сығып, Әселе йылғаһы тамағында бесән сабырға рөхсәт бирә.

Әбей батшаның 1767 йыл 1 июнь указына ярашлы, 1768 йылда Һаҡмар буйы ҡәлғәләренә хәрби казак рәүешендә 1044 нуғай Ҡазандан килтерелеп, Водвиженка ҡәлғәһенә, Никитин һәм Жултый редуттарына, Ҡундрау биҫтәһенә бүлеп ултыртыла. Шунан һуң был нуғайҙарҙың Һаҡмар аша башҡорт ерҙәренә ҡул һуҙыуы йонсота башлай, был йылдан-йыл көсәйә. Шуға сик ҡуйыр өсөн, Сәнкем-Биктимер ауылы башҡорттарының бер өлөшө Һаҡмар түбәнендә Никитин нуғайҙары зыянлыҡлаған үҙ аҫаба ерҙәренә күсенеп, яңы ауыл нигеҙләй, уға ла Биктимер исеме бирелә. Хәҙер ул ауыл башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, татарға әүерелгән. VII (1816 йыл) һәм IX (1859 йыл) ревизия мәғлүмәттәре был Биктимерҙәрҙең икеһендә лә байтаҡ ҡына бер үк фамилияларҙың (мәҫәлән, биктимеровтар, сиреүбаевтар, алтынбаевтар, мәсәғутовтар) булыуын күрһәтә. Шуныһы ҡыҙыҡ: Алтын(бай) Сиреүбаев ике ауылда ла теркәлгән – икеһендә лә аҫаба ер биләмәләренә эйә булыу маҡсатынандыр, бәлки.

Воздвиженка нуғайҙары һис бер тынғы бирмәгәс (улар хатта Әселе тамағын мишәрҙәргә 500 һумға һатып ебәрә), бабаларыбыҙ был ерҙәрен Ырымбур алпауыты Васильевка һатып ҡотола, ә Васильевтан поручик Петр Дмитриевич Крашенинников (атаҡлы яҙыусы Н.А.Крашенинниковтың ҡартатаһы, шундағы Петровское/Кершәнник ҡасабаһын нигеҙләүсе) һатып ала ла унын баяғы Әселе мишәрҙәрен үҙ биләмәләренән ҡыуҙыртыу өсөн күп йылдарға һуҙылған, аҙаҡ еңеүе менән осланған дәғүә-тартышы башлана.

Ҡундрау нуғайҙарының баҫҡынынан ҡотолоу өсөн, Ырыҫҡол ауылы башҡорто Юлғотло шул тәңгәлдә утарланып ултыра һәм ул төбәк башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, татарға әүерелмеш Юлғотло (Утар) ауылына әйләнә.

Башҡорттарҙың үҙ аҫаба ерҙәрен ҡурсалап ҡалыу өсөн өс тиҫтә йылға һуҙылған иң ҙур дәғүәле тартыш Ҡаҫмарт һыуының ике яғындағы оло байлыҡ -- Олобай сабынлығы өсөн була, ул эш батшаға барып етеп кенә башҡорттар файҙаһына хәл ителә; һәм Сәнкем-Биктимерҙән күснеүселәр тарафынан Һунарсы,

Яңы-Ғафар (Яңауыл) ауылдарының нигеҙләнеүе лә тап шул Олобайға бәйле. Архив документтарынан Һунарсының башланыу йылын асыҡлайыҡ.

Олобайҙы башҡорттар ҡулында һаҡлап ҡалыу өсөн яҙған ғаризаларында Ырымбур түрәләренән уҙып батшаға тиклем барып еткән уҙаман – хәҙерге Солтанов фамилиялыларҙың олатайҙарының береһе кенәздәрҙән тархан Боҫҡон Даянов (ҡағыҙҙарҙа Бускун Дуянов) ул. 1804 йылдың 28 майы менән тамғаланған ике ауыл ышаныҡтарының юлламаһы ла ҡыҙыҡлы, уға Сәнкем-Биктимерҙән Аҫылғужа Биктимеров, Абуталип Солтанморатов, Баубаҡ Байназаров, Бикйән Хоҙайназаров, Әлибай Биктимеров, Иҙелбай Сәғитов, Моҡанай Хәлилов, Ғайса Бикташев, Ишмөхәмәт Этйеймәсев, Ғүмәр Итчин уҙамандар, десятник Абдулла һәм бер килке ауылдаштар Баймөхәмәт, Ташбулат, Ҡотлогилде, кәсепсе Көбәк Ҡәҙербирҙин, ә Һунарсынан указлы мулла Өмөрҙаҡ Солтанморатов, кенәздәрҙән тархан Боҫҡон Дуянов, ***Һунарсы Тләүмбәтов*** (ауылды нигеҙләүсе), Илбул Ҡалмаҡов, Йәрмөхәмәт Ҡотлобаев, Айдарбәк Килдебаев, Килсембай Сөйәрембәтов, Әбйәлил Сунарчин уҙамандар ҡул ҡуйған.

Жултый нуғайҙарының ышаныҡы Кидрали Азяпов тигән бәндә Ҡаҫмарт йылғаһының ике яғын башҡорттарҙан арындырттыуҙы һорап 1804 йылдың 10 июнендә Ырымбур генерал-гөбөрнәтере Г.С.Волконскийға атҡарған шикәйәтендә башҡорттарҙың унда тәүҙә утар булып ултырыуын, шунан һуң "самовольно" ауыл барлыҡҡа килеүен; нуғайҙарҙың был ерҙәргә дәғүәһе Ырымбур Земский Суды тарафынан 1782, 1785, 1802 йылдарҙа ҡаралып та, һаман нуғайҙар файҙаһына хәл ителмәүен яҙа. Тимәк, Олобай сабынлығындағы башҡорт Һунарсы Теләүембәт улының утары нуғайҙар Жултыйға күсеп килгән 1768 йыл һәм Судта беренсе дәғүә ҡаралған 1782 (йәмғеһе 14 йыл) араһында булған. Эҙләнгән урталыҡ һан 14:2=7 тип алып, Һунарсы утарының нигеҙләнеү йылын яҡынса билдәләйбеҙ: 1768+7=1775. Ләкин ул 1775-тең ҡанҡойошло бола заманы икәнен һәм 1795 йылда Һунарсы ауылында 9 өй генә булыуын иҫәпкә алып, ул туғыҙ өйҙөң һигеҙе иң кәмендә 5 йыл дауамында ырағандыр тип һанаһаҡ, ***1790 йыл Һунарсы ауылының нигеҙләнеү йылы булып тора һымаҡ.*** Ләкин Һунарсы ауылы Ҡасанҡый-Саланың да, Сәнкем-Биктимерҙең дә туранан-тура дауамланышы икәнен ныҡ иҫтә тотоп, уның ысын тыуған йылын билдәләйбеҙ – Мөйтән-би үҙе нигеҙләгән ***1200 йыл.*** Тимәк, ошо юлдар яҙылған 2010 йылда ***Һунарсыға 810 йәш*** тулды.

Ләкин Һаҡмар аръяғы һөмһөҙҙәре һаман Олобайҙың арғы осонан баҫып кереп ыҙалағанлыҡтан, 1863 йылда Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдарының бер килке башҡорттары шул тәңгәлгә күсеп барып яңы ауыл нигеҙләй, беренсе булып нигеҙ һалған Һунарсы ауылы башҡорто Ғабдул-Ғафар (1812 йылда тыуған) Ғабдулсәләмов-Моратбаҡтыев (Моратов) уҙамандың исеменән ул ауыл рәсми ҡағыҙҙарҙа Ново-Гафарово тип яҙыла, ә ябай телдә Яңауыл тип йөрөтөлә (хәҙерге ваҡытта был ауылдың башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, тоташ татарға әүерелгән).

Ҡыҫҡаһы, Һунарсы ауылының ысын тыуған йылы ***1200.***

Һунарсы икенсе тыуған ауылым (сөнки Сәнкем-Биктимерҙең совет осоронда һирәкләнеп ҡалған һуңғы халҡы ла шунда күсенде) булғанлыҡтан, был ауылды нигеҙләгән ырыуҙашыбыҙ Һунарсы Тләүмбәт улының шәжәрәбеҙҙәге нәҫел бауын

ҡәҙерле ауылдаштарым һәм башҡаларҙың иғтибарына еткереүҙе изге бурысым һананым. Әммә бер иҫкәртеү яһарға кәрәк: һуңғы йылдарҙа үҫәргәндәрҙең “Туҡсаба” тигән ырыу оранын яңылыштырып, “ораны Мөйтән” тип яҙыусылар күренә, бының сәбәбе, моғайын, Ҡыпсаҡ ырыуының да ораны шундай уҡ булыуҙан сәйерһенеү ғәләмәтеләр. Ләкин быға һис аптырарға ярамай, сөнки боронғо заманда ҡыпсаҡтарҙың үҫәргәндән саталанып сығыуы билдәле, шуға күрә уларҙа ла Үҫәргән ырыуының ораны һаҡланған.

Шулай итеп, бисмилла:

## Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһенең һунарсы бауы

Ырыуы – **Үҫәргән.**
Ағасы – **Миләш.**
Ҡошо – **Торна.**
Ораны – **Туҡсаба.**

Тамғаһы – **Аҡа-Ай+Әсә-Көн>Ҡаяс-Көн>Ҡояшҡан (Ҡойошҡан):** .

**Оран һәм тамға атамаларыбыҙҙың килеп сығышы (этимологияһы):**

**ТУҠСАБА:** Ат-Аҡ (Ата-Аға)+Әс-Аба (Әсә-Апа йәки Аҫаба)=

1. Атаҡ – Таҡ – Тау (йәки Ир-Ер);

2. Әсаба – Әсә-Сауа (Һыу-Һауа) йәғни боронғо “төрөк-бөтөн” бабаларыбыҙ изгеләштереп табынған Ер һәм Һыу (Ер-Һыу) ул. “Төрөк” (тороҡ) атамаһы – Тороҡ-атау (Тора-тау) иленең (йәғни Башҡортостандың) кешеһе тигән һүҙ. Изге Тора-тау (боронғоса Тороҡ-атау) Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Ишембай районында урынлашҡан.

**ҠОЙОШҠАН:** Аҡ-Ай (Аға-Ай)+Әс-Көн (Әсә-Көн)= шул уҡ боронғо “төрөк-бөтөн” бабаларыбыҙ изгеләштереп табынған Ай һәм Көн (Ай-Көн) ул.

Иҫкәртмә: ошо Күк есемдәренең икеһенең дә Урта Донъялағы (Евразия ҡитғаһындағы) мифик енес күрһәткестәре (Ай – ата, Көн -- әсә) улар орбиталары буйынса Өҫкө Донъяға (Африка ҡитғаһына) һәм Аҫкы Донъяға (Америка ҡитғаһына) уҙған саҡта ҡапма-ҡаршы (Ай -- әсә, Көн – ата булып) үҙгәргән.

Тимәк, хәҙерге үҫәргәндәр – боронғо Орхон – Селенга ядкәрташтарындағы ырын (рун) яҙыуҙарында тәүәрихләнеп данланған, Айға һәм Көнгә, Ергә һәм Һыуға табынған “төрөк-бөтөн” халҡының туранан-тура тоҡомо, вариҫтары.

## Шәжәрә (Туҡсабанан башланған өҙөгө):

[1. Туҡсаба]. – 2. Мөйтән-би Туҡсаба улы. – 3. Шаҡмалы-би Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-би Шаҡмалы улы. – 5. Һеркә-би Бүрекәй улы. – 6. Манғут-би Һеркә улы. – 7. Урал-би Манғут улы. – 8. Арбан-би Урал улы. – 9. Тимерҡабыҡ-би Арбан улы (өҫтәлгән: “Бораҡ-хан заманында йәшәгән” йәғни 1422-27 йылдарҙа). – 10. Һарыбаш-би Тимерҡабыҡ улы. – 11. Һырыш-би Һарыбаш улы (өҫтәлгән: “Ҡасим-

хан заманында йәшәгән”). – 12. Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы (өҫтәлгән:”Ябынсы бабабыҙ батшаға хеҙмәт итеп, яҫауыллыҡ хәрби дәрәжәһе алған”). – 13. Үҫәргән Ябынсы улы (өҫтәлгән: “Кесе улы”). – 14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы. – 15. **Мусаҡай** Сөйәлғужа улы [Мусаҡаевтар фамилияһы]. – 16. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы [Яугүстиндар фамилияһы]. – 17. Иҫәнбирҙе Яукүсте улы [Иҫәнбирҙе улы Болаҡ батырҙан яҙыусы Йыһат Солтановты биргән нәҫел бауы дауамлана]. – 18. Таймасби (кенәз) Иҫәнбирҙе улы, уның улдары:

**А. Тләүмбәт Таймас улы Яугүстин** (Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы старшинаһы [1754 йылдың 6 июнендәге рәсми ҡағыҙға ҡул ҡуйған -- Тләүмбәтовтар фамилияһы]), уның улы **Һунарсы Тләүмбәт улы Тләүмбәтов** [Һунарсы ауылын нигеҙләгән инсан, 1787 йылдың 3 сентябрендәге һәм 1804 йылдың 28 майындағы рәсми ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйған – Сунарчиндар фамилияһы]. Уның улдары:

**I. Ғәбделяйыҡ Һунарсы улы Сунарчин,** 1757 йылда тыуған, уның улы Лот, 1794 йылда тыуған;

**II. Ғәбделйәлил Һунарсы улы Сунарчин** (йорт сотнигы), 1762 йылда тыуған. Уның улдары:

1) Сәйфулла Ғәбделйәлил улы, 1796 йылда тыуған;

2) Мөхәммәтколой Ғәбделйәлил улы, 1805 йылда тыуған, уның улдары:

*Ғатаулла Мөхәммәтколой улы, 1830 йылда тыуған, уның улы Сөләймән, 1853 йылда үлгән;

3) Ғәйнулла Ғәбделйәлил улы, 1813 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Асатулла Ғәйнулла улы, 1840 йылда тыуған (1860 йылда Себергә һөрөлгән), уның улы Ғиззәтулла Асатулла улы, 1857 йылда тыуған;

4) Мөхәммәтҡунафиә Ғәбделйәлил улы, 1822 йылда тыуған, уның улдары:

а) Мөхәммәтсафа Мөхәммәтҡунафиә улы, 1847 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Хөснулла Мөхәммәтсафа улы Сунарчин, 1898 йылда тыуған, уның балалары:

**Мәзит Хөснулла улы Сунарчин;

**Сафия Хөснулла ҡыҙы Сунарчина-Байназарова;

**Наилә Хөснулла ҡыҙы Сунарчина-Байназарова;

б) Мөхәммәтхан Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1855 йылда тыуған һәм йәнә:

б) Ғәлиулла Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1893 йылда тыуған, 1920 йылда иҫән;

в) Идрис Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1878 йылда тыуған;

г) Ерйеҫ Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1880 йылда тыуған;

д) Фәйзулла Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1890 йылда тыуған, уның балалары:

*Хаматулла Фәйзулла улы Сунарчин, 1924-42;

*Фатҡулла Фәйзулла улы Сунарчин;

*Фәррәх Фәйзулла улы Сунарчин;

*Маһира Фәйзулла ҡыҙы Сунарчина;

е) Баймөхәммәт Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1895 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Рамаҙан Баймөхәммәт улы Сунарчин, 1924 йылда тыуған, уның улы Йосоп Сунарчин;

*Фирҙәүес Баймөхәммәт ҡыҙы Сунарчина-Иҡсанова, уның улы Таһир Иҡсанов.

**III. Ғәбделрәхим Һунарсы улы Сунарчин,** 1771 йылда тыуған, уның нәҫеле:

1) Ишмөхәммәт Ғәбделрәхим улы, 1796 йылда тыуған, уның улы Хөснетдин -- указлы мәзин, 1823 йылда тыуған;

2) Шәрәфетдин Ғәбделрәхим улы, 1813 йылда тыуған;

3) Мөхәммәтсәхи Ғәбделрәхим улы, 1805 йылда тыуған.

**IV. Ғәбделрафиҡ Һунарсы улы Сунарчин,** 1775 йылда тыуған, уның нәҫеле:

1. Мерәҫ Ғәбделрафиҡ улы Мусаҡаев, 1793 йылда тыуған, уның нәҫеле:

а) Ғәбделвәли Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1822 йылда тыуған, уның улы Идрис, 1855 йылда үлгән;

б) Ғәбделғәлим Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1824 йылда тыуған, уның улдары:

*Мөхәммәтсәлим Ғәбделғәлим улы, 1853 йылда тыуған;

*Мөхәммәткәрим Ғәбделғәлим улы, 1856 йылда тыуған;

в) Мөхәммәтшәриф Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1827 йылда тыуған;

г) Шәрәфетдин Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1832 йылда тыуған, уның улы Мөхәммәтәмин, 1859 йылда үлгән;

д) Хисаметдин Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1837 йылда тыуған, уның улы Низаметдин Хисаметдин улы Мусаҡаев, 1902 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

*Сания Низаметдин ҡыҙы Мусаҡаева-Аҡманова;

*Роза Низаметдин ҡыҙы;

*Робес Низаметдин улы, 1941 йылда тыуған;

*Илдар Низаметдин улы, 1945 йылда тыуған;

*Шәриф Низаметдин улы, 1950 йылда тыуған.

е) Сәләхетдин Мерәҫ улы, 1871 йылда тыуған, уның улы Зәйнетдин Сәләхетдин улы Мусаҡаев, 1910 йылда тыуған, уның улдары (Мусаҡаевтар):

*Зәйнәғәбдин Зәйнетдин улы, 1925 йылда тыуған;

*Ғәпсәләм Зәйнетдин улы, 1931 йылда тыуған;

*Ғәлимйән Зәйнетдин улы, 1947 йылда тыуған.

ж) Ҡунаҡкужа Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1881 йылда тыуған, уның балаһы Ғәйникамал Ҡунаҡкужа ҡыҙы Мусаҡаева-Байназарова;

з) Толомғужа Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1885 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

*Дәүләткирәй Толомғужа улы, 1924-43;

*Әлимә Толомғужа ҡыҙы;

*Рауил Толомғужа улы, 1935 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

**Рәмил Рауил улы, 1960 йылда тыуған, уның улдары:

***Тимур Рәмил улы, 1984 йылда тыуған;

***Руслан Рәмил улы, 1988 йылда тыуған;

**Радик Рауил улы, 1964 йылда тыуған, уның улы Марат Радик улы, 1988 йылда тыуған.

2. Мөхәммәтғәли Ғәбделрафиҡ улы Мусаҡаев, 1805 йылда тыуған;

3. Әхмәтйән Ғәбделрафиҡ улы Тләүмбәтов, 1820 йылда тыуған, уның улдары:

*Мөхәммәтсадиҡ Әхмәтйән улы, 1849 йылда тыуған;

*Мөхәммәтлатиф Әхмәтйән улы, 1852 йылда тыуған;

*Абзалалетдин Әхмәтйән улы, 1861 йылда үлгән.

4. Мөхәммәтша Ғәбделрафиҡ улы Тләүмбәтов, 1809-1853, уның улы Хәлиулла Мөхәммәтша улы, 1848 йылда тыуған.

**V. Ғәбделнасир Һунарсы улы Тләүмбәтов,** уның улы Фәйзулла Ғәбделнасир улы Тләүмбәтов, 1795-1852.

**VI. Динмөхәммәт Һунарсы улы Сунарчин,** уның улы Шаһиәхмәт, 1836 йылда тыуған.

Таймас-бизең икенсе улына күсәбеҙ:

**Б. Сөйәрмбәт Таймас улы Яугүстин** [1754 йылдың 6 июнендәге рәсми ҡағыҙға ҡул ҡуйған -- Сөйәрмбәтовтар фамилияһы], уның улдары:

1) Килсебай Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1753 йылда тыуған, уның балаһы Баһауетдин Килсебай улы, уның улы Фәхретдин Баһауетдин улы, 1872 йылда тыуған, уның улдары (Сөйәрмбәтовтар):

*Ҡолмөхәммәт Фәхретдин улы, 1904-43, уның балалары (Сөйәрмбәтовтар):

**Фәсхетдин Ҡолмөхәммәт улы, 1930 йылда тыуған;

**Шәмсинур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы, 1932 йылда тыуған;

**Ғилминур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы;

**Маһинур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы;

**Алмира Ҡолмөхәммәт ҡыҙы.

*Нәбиулла Фәхретдин улы Сөйәрмбәтов, 1924-43.

Ошо урында үҙемдән остоҡ хәтирә: бер туғандар Ҡолмөхәммәт менән Нәбиулла һуғышта үлеп ҡалды. Һуғыш йылдары аслығында Ҡолмөхәммәттең биш балалы тол ҡатыны Ғәйнекамал еңгәй, балаларын астан үлтермәç өсөн, ырҙында эшләп йөрөгәнендә кеçәһенә һалып алған ҡушус бойҙай менән тотолоп, биш йылға хөкөм ителеп, уны Тоҙтүбә төрмәһенә алып киттеләр, фронтовиктың биш балаһы ҡартәсәләре Мәхмүзә инәй ҡулында ҡалды... “Таң нурҙары” тигән повесым шул ваҡиғаларға нигеҙләнгән.

Шәжәрәне дауам ҡылайыҡ:

2) Ялсыйән Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1785 йылда тыуған;

3) Хөсәйен Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1787 йылда тыуған;

4) Беләр Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1794 йылда тыуған;

5) Йосоп Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1801 йылда тыуған;

6) Әйүп Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1804 йылда тыуған;

7) Сәйет Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1805 йылда тыуған.

8) Абзан Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов [Абзан ауылын нигеҙләүсе?], уның улы Ғәбделсәләм Абзан улы, 1784 йылда тыуған, уның улы Ғәбделманнан Ғәбделсәләм улы, 1805 йылда тыуған...

Шәжәрә бауҙарының бөгөнгәсә еткерелмәгәндәрен уларҙың тоҡомдары үҙҙәре тикшереп ялғай алыр. Ә Солтановтар шәжәрәһенең алтмыш ете быуынын элегерәк төпсөнөп төҙөгәнмен.

26.01.2010

Инде ғәзизә ҡартәсәкәйем (атайымдың әсәһе) Бибилатифа Ямалитдин ҡыҙы Әбдрәшитованы тыуҙырған Мишәр ырыуының Сәнкем-Биктимер ауылы мишәрҙәре шәжәрәһен төҙөрҙән алда, уларҙың ауылыбыҙға күсеп килеү тарихын һәм шул осорҙағы уларға ла бәйле көсөргәнешле ауыл ваҡиғаларын ҡыҫҡасараҡ бәйән ҡылыу фарыздыр.

## Аҫаба ерҙәребеҙгә мәкерле ҡул һуҙыуҙар һәм аҫыл бабаларыбыҙҙың көрәше

«Ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙең һорауы» һәм әбей батша Анна Иоанновнаның 1734 йыл 1 май указы буйынса, 1735 йылдың 15 авгусында Яйыҡҡа һул яҡлап ҡойған Ур йылғаһы тамағында Ырымбур экспедицияһы башлығы статский советник Кирилов М.К. беренсе Ырымбур ҡәлғәһен нигеҙләүен (1743 йылдан башлап ул Орск ҡәлғәһе тип йөрөтөлә, ә ысын Ырымбур иһә шул йылда Ырымбур комиссияһы башлығы тайный советник һәм кавалер Неплюев И.И. тарафынан Яйыҡтың уң ярында Һаҡмар йылғаһы тамағында боронғо башҡорт ҡалаһы Аҡтүбә өҫтөнә ҡорола); шуға ҡаршы башҡорт халҡының Аҡай батыр — Килмәк-Абыҙ етәкселегендәге күтәрелешенең ҡайһы бер ҡанлы ваҡиғалары тап беҙҙең төбәктә булғанлығын бәйәнләгәйнек өҫтәрәк.

Беренсе Ырымбур ҡәлғәһе осоронда уҡ, тайный советник Татищев В.Н. менән Ырымбур комиссияһы башлығы генерал-лейтенант кенәз Урусов (боронғо башҡорт кенәзе Зартуш Һары Йософтоң суҡынмыш тоҡомо) әбей батшаға Һаҡмар йылғаһының башынан алып тамағынаса һул яры буйлап туғыҙ ҡәлғә ҡорорға ла ул ҡәлғәләрҙә Рәсәй ғәскәрҙәре файҙаһына игенселек менән шөғөлләнеүсе һәм башҡорттарҙы ауыҙлыҡлап тотоусы ландмилиция (ерле милиция) полктарын урынлаштырырға, тигән проект тапшырғас, 1739 йылда Анна Иоанновна шуны раҫлап указ сығара. Был указды тулыһынса бойомға ашырыу башҡорт халҡының ҡоралы яңы күтәрелеше менән янағанлыҡтан, Ырымбурҙағы яңы түрә Неплюев И.И. яңы Ырымбурҙан көнсығышҡа табан Һаҡмар буйына ике ҡәлғә ҡороу менән сикләнә (Ырымбурға кәрәк ағасты башҡорт урмандарынан һаллап ағыҙыу өсөн): Ырымбурҙан Һаҡмар ҡәлғәһе аша уҙғас 59-ынсы саҡрымда — Пречистинский, ә унан ары 47-нсе (Ырымбурҙан — 106) саҡрымда Эйек тамағы тәңгәлендә Воздвиженский ҡәлғәһе. Шул һуҙымда ике хәрби нығытма редут та эшләнә: Пречистинскийҙан 23-өнсө саҡрымда — Никитинский, ә Воздвиженскийҙан үрҙәрәк 30-ынсы саҡрымда Сурталы йылғаһы тамағында уны уң яҡлап — Жултый редуты.

Өфө янындағы хәҙерге Шишмә татар ҡасабаһында төҙөлгән, заманында Кирилов экспедицияһын башҡорт боласыларынан һаҡларға был яҡтарға ебәрелгән ландмилиция Шишмә драгун полкы һәм хәҙерге Алексеевский ҡасабаһында төҙөлгән Алексеевский полкының йәйәүле бер ротаһы Воздвиженский ҡәлғәһенә урынлаштырыла. Улар шунда үҙҙәре ер һөрөп, бесән

сабып хужалыҡ ҡылырға тейеш була. Шул уҡ шарт менән батшаға хеҙмәт итергә ялланған, ә элегерәк Әстерхан һәм Ҡубан араһында далала аҙып йөрөгән, шунан һуң Ҡазанға күсерелгән бер төркөм Ҡундырау нуғайҙарын (борон заманда Ҡубанға күсеп киткән һәм инде башҡортлоҡтарын оноткан Үҫәргән ярсыҡтарын) да килтерәләр, 1745 йылдан башлап улар Жултый редуты янындағы Сурталы йылғаһының һул яғында Ҡундырау нуғайҙары биҫтәһе (хәҙер Жултыйҙың Нуғай яғы) ҡороп ултыралар. Шуныһы бик мөһим: беҙҙең аҫаба башҡорт бабалар менән Неплюевтың һөйләшеп килешеүенсә, баяғы ҡәлғәләр тәңгәлендә Һаҡмар йылғаһының уң яғы башкөллөй башҡорт ерҙәре булып ҡала, һул ярҙағы ҡаҙна кешеләре ул ерҙәргә ҡул һуҙмаҫҡа — башҡорттарҙың рөхсәтенән тыш бер нәмәһенән дә файҙаланмаҫҡа тейеш була. Был — Һаҡмарҙы буйлатып ҡәлғәләр ҡороу мәсьәләһендә башҡорттарҙың төп шарты һәм батша администрацияһы тарафынан ҡабул ҡылынған шарты.

Әммә сусҡаның томшоғо һыйған тишектән бөтә кәүҙәһе керә, тигәндәре дөрөҫтөр. Һаҡмар һыуының бейек һул ярында көн күреүсе шул ҡаҙна кешеләре уң яҡтағы Эйек, Ҡаҫмарт, Әселе буйҙарындағы ҡалын үләнле һыубаҫар болондарға, ҡуйы урмандарға ҡарап күҙҙәре ныҡ ҡыҙа, Һаҡмарҙы кисеп сығып, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ бесән сабыу, ағас киҫеүҙәр йышая. Бабаларым, килмәшәктәрҙең көс ҡулланып баҫып алыуҙарына ҡарағанда, һөйләшеп килешеүҙе яҡшыраҡ күреп, Шишмә ландмилиция полкына Эйек, Әселе буйҙарынан йыл да бесән сабып алырға рөхсәт бирә. Заманалар уҙыу менән хәрби ҡәлғәләрҙең әһәмиәте юғалып, ландмилиция полктары һәм нуғайҙар ғәскәри казактарға әүерелгәс тә улар, әүәл заман ландмилиция башҡорттарҙың рөхсәте менән ваҡытлыса файҙаланған ул ерҙәрҙе инде башкөллөй үҙ биләмәләре һанап, һөмһөҙлөктөң сиген ашып китәләр. Шуға күрә, Эйек — Әселе буйҙарында Воздвиженский нуғайҙарынан һис бер тынғы ҡалмағас, Сәнкем-Биктимер, Күҙәш (шәжәрәбеҙҙәге 57-нсе быуын Муҫҡа бабаның улы Ҡуҙаш//Күҙәш бабаның йорто, ә икенсе исеме Әсеүташ; 1920 йылда ул — Асташ утары), Юлдыбай (Сураш), Сәнкем-Биктимер ауылдарының уртаҡ йәйләүе һәм сабынлыҡтары булған ул ерҙәрҙе шул ауылдарҙың халҡы, үҙ-ара килешеп, 1784 йылда Ырымбурҙағы бер түрәгә — титулярный советник Андрей Федорович Васильевҡа һатып ебәрәләр (шуға бәйле «Бейлеғош йәйләүе» тигән һағышлы йырҙы үҫәргәндәр әлегәсә йырлайҙар). Бүлешеп алынған аҡсаһын ҡайһы ауыл халҡы ҡайһылай файҙаланғандыр, әммә беҙҙең ауылдыҡылар тураһында мәрәкәле риүәйәттәр бар: кемдер берәү, сереп байыуын күрһәтер өсөн, өйөндә көпә-көндөҙ шәм яғып ултырған, ә икенсе береһе, ҡайыш ҡамыт, ҡойошҡанлап еккән атының ҡайыш дилбегәһен йәйге селләлә лә терһәгенәсә оҙон ҡунислы күн бирсәткә кейеп тотоп йөрөгән. Һәм ауылда, фәкир-фоҡор күршеләренең көлсә менән генә сәй эсеүҙәрен күреп: «Әсәй-әсәй, өрөкһөҙ ҙә сәй эсеп буламы икән ни ул?!» — тип ихлас ғәжәпләнеүсе ҡыҙыҡайыбыҙ ҙа булған... Әммә ер һатыуҙың ахыры бик күңелһеҙ барып ослана: йәйҙәрен киң сахраларға йәйләүгә сығыуҙар өҙөлөп, үкенестән баяғы «Бейлеғош йәйләүе»н йырлағандар...

Заманаһының ҡанунына ярашлы, башҡорттарҙың — һатыу, Ырымбур урыҫы Васильевтың һатып алыу шартнамәһе ҡануни ике йыл һынау үткәндән һуң

ғына йәғни 1886 йылда раҫланырға тейеш була. Воздвиженский нуғайҙары шул икеле-микеле араyыҡтан мәкерле файҙаланып, салғый аҫтынан аҫтыртын эш йөрөтөп, хәҙер инде Васильев еренең Әселе тамағы төбәген Һаҡмар һул яғындағы килмешәк Сиркәш ауылының ун алты йорт (60 йән) яҫаҡсы татарына биш йөҙ һумға һаталар, ә тегеләре тиҙ генә унда күсенеп тә ултыралар. 1811 йылғы иҫәпнамәлә был Әселе ауылында беҙҙең ауыл мишәрҙәре Әбдрәшитовтарҙың ағай-энеләре лә йәшәй: Әбделвахит Әбдрәшитов (1768) һәм уның улы Мөхәммәтғәли (1807).

Быға тиклем ул яҫаҡсы татарҙар тәүҙә Ырымбур өйәҙе (һуңынан Быҙаулыҡ өйәҙе) Яңы Үмәр ылыҫының Үмәр йылғаһы тамағындағы Яңы Үмәр ауылында ерһеҙлектән интегеп, Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙан тартып алып үҙләштергән «ҡаҙна ерҙәре»нән өлөш теләнә торғас, Һаҡмарҙың һул яғындағы шул Воздвиженскийға яҡын Сиркәш йылғаһы буйына күсерелгәндәр ҙә Сиркәш тигән ауылды нигеҙләгәндәр икән. Ерҙәре ифрат күп булһа ла, ҡылғанлы дала яғын мөрәхәтһенмәй, Һаҡмарҙың уң яғындағы аҫаба башҡорт биләмәләренә — бесәнгә лә, урманға ла бай Эйек, Әселе буйҙарына ҡомһоҙ күҙ аталар имеш. Воздвиженский нуғайҙары, шунан оҫта файҙаланып, баяғыса, Әселе тамағын уларға 500 һумға «осорғас», һатып алыусылар, Сиркәштәге биләмәләрен дә үҙҙәренең «дача»һы итеп ҡалдырып, Әселе тамағында шул Әселе исемле ауылды ҡора һалып ултырғандар, ә ул ерҙең һуңғы ҡануни хужаһы Васильев, моғайын, абайламай ҙа ҡалғандыр быны. Әммә ошо баҫҡынсылыҡ ерҙең элекке эйәләре башҡорттарҙың кеҫәһенә ныҡ ҡына һуғырға янай имеш, сөнки баяғы һатыу — алыу шартнамәһе буйынса, әгәр башҡорттар бер һатҡан ерҙәрен икенсе берәүгә һатһа (ә Воздвиженский нуғайҙары ул ер өсөн Әселе яҫаҡсы татарҙарынан «башҡорттар ҙа 140 һум алды», тип ялғанлай), Васильевҡа ҙур штраф түләргә тейеш була. Шуға күрә, барыһынан әүәл һиҫкәнеп, баяғы үҙе кенәз, үҙе тархан тоҡомло Боҫҡон Даянов бабабыҙ һөмһөҙ килмешәктәр (нуғайҙар) өҫтөнән Ырымбур Наместник идаралығына яҙма ялыу тапшыра. Ул идаралыҡ 1785 йылда гөбөрнә Земский суды аша уға белдерә: башҡорттар ул ерҙең аҫаба хужалары икәнлектәрен суд аша дәлилләһен, ә яҫаҡсы татарҙар шуға тиклем Әселелә тыныс йәшәй бирһендәр. Ләкин Васильев быға риза булмай, 1788 йылдың 18 сентябрендә гөбөрнә Граждандар палатаһына мөрәжәғәт иткәс, палата эште уның файҙаһына ҡарап, 1791 йылдың 30 сентябрендә Ырымбур Земский судына түбәндәгесә бойора: суд Әселе ауылы татарҙарына уларҙың Васильев еренә ҡанунһыҙ кереп ултырыуҙарын, шуға күрә икенсе яҡтағы ҡаҙна еренә күсеп китергә тейешлектәрен белдерһен.

Татарҙар был ҡарарҙы үтәмәгәс, палата 1792 йылдың 22 июнендә баяғы ҡарарын дөрөҫләп, татарҙар әгәр икенсе ергә үҙ ихтыярҙары менән күсеп китмәһә, көсләп күсереләсәктәр, тип белдерә. Ә 1797 йылдың 16 декабрендәге күрһәтмәһендә уларҙы, әгәр 1798 йылдың 15 ғинуарына тиклем башҡа урын табыуҙары тураһында килеп хәбәр итмәһәләр, баш тартыусылар сифатында Судҡа тарттырыласаҡтар, тип ҡаты киҫәтә.

Шул арала Әселе яҫаҡсы татарҙарының хәлдәре уғата мөшкөлләнә: беренсенән, быңдағы ерҙең көтмәгәндә ифрат ғауғалы икәне асыҡланһа,

икенсенән, Сиркәш буйында ҡалдырған «дача»ларына гөбөрнәтер ғали янаптары башҡа яһаҡсы татарҙарҙы күсергән: Яңы Үмерҙән — 48, Өҫкәлек йылғаһы тамағындағы Өҫкәлек ауылынан 90 йән эйәһен. Улар элекке сиркәштәрҙең иң яҡшы ерҙәрен үҙләштереп, Әселе тамағындағы хужаларына «дача»лыҡка тау-ташлы иң насар урындарҙы ҡалдырғандар ҙа Яңы Сиркәш (Ново-Черкасово) ауылын ҡороп ерекккәндәр...

1792 йылда Васильев әфәнде был ғауғалы биләмәһен алпауыт Петр Дмитриевич Крашенинниковҡа (билдәле яҙыусы Н.А. Крашенинниковтың ҡартатаһына) һатып ҡотола.

Яңы хужа П.Д. Крашенинников беренсе сиратта башҡорттар менән ике аралағы сикте нығыта — ауылыбыҙ янындағы баяғы тарихи Һаҙлыйылға башындараҡ йәмле бер төбәккә атаһы Дмитрий алпауытты крәҫтиәндәре менән бергә килтереп ултырта — беҙгә яҡын урындағы Дмитриевка (Митрский) урыҫ ауылы барлыҡҡа килә (хәҙер юҡ). Һаҙлыйылғаны шул урта биленән быуҙыртып, Ҡаҫмартҡаса түбән яғын ҡороталар (яҙҙарын һыу ташҡанда ғына аға). Ә Әселе йылғаһы буйында йәш алпауыттың үҙ исемендәге ҙур Петровский (Кершәнник) ҡасабаһы хасил була (таштан һалынған алпауыт йорто хәҙер ташландыҡ хәлдә емерелеп ултыра), беҙҙең бабалар аҙна һайын унда баҙарға йөрөй (Сәнкем-Биктимер ауылы һыртында зират эргәһенән «Кершәнник юлы» бар ине). 1801 йылда П.Д. Крашенинников күпләп күсереп килтергән урыҫ крәҫтиәндәре Әселе яҫаҡсы татарҙарын нык ҡыҫырыҡлай: бесәнлектәрен саба, һөргән ерҙәренә үҙ игенен сәсә, урмандарын киҫә, көтөүлектәрендә мал йөрөтә. Алпауыт үҙе иһә ҡәтғи рәүештә үҙ еренән килмешәктәрҙең күсеп китеүен даулай. П.Д. Крашенинников был талабын 1804 йылдың 12 майында Ырымбур хәрби гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға ирештергән оҙон текслы үтенес ҡағыҙында нығыта.

Жултый редуты йәнәшәһендәге Ҡундырау (хәҙерге Нуғай) биҫтәһе нуғайҙары иһә бабаларыбыҙҙың теңкәһенә иң нык тейгәндәре була. 1735 йылғы Аҡай — Килмәк-Абыҙ баш күтәреүендә берҙәм ҡатнашҡан, Алғушай батыр Наҙаров етәкләгән үҫәргәндәр яуҙарҙа нык ҡырылып, аралары һирәгәйеп, һөҙөмтәһе насар була: батша ҡырғын ғәскәрҙәре менән бергә башҡорт яуын баҫтырышҡан ҡәрҙәштәре ҡара-ҡыпсаҡтар Ҡаҫмарт буйына күпләп килеп ултыра; ҡанһыратылған төп ер хужалары үҫәргәндәр иһә ерҙәрен баҫып алыуҙарға ҡаршы тора алмай, әлбиттә. Шул сәбәпле үтә һөмһөҙләнгән Жултый Ҡундрауы нуғайҙары, үҙҙәренә тейеш булмаған Һаҡмар уң яғына сығып, бабаларыбыҙҙың Ҡаҫмарт һул яғындағы диңгеҙҙәй киң гүзәл сабынлығын — Олобайҙы баҫып алып, үҙҙәренеке итеп һанай башлайҙар. Шуны рәсми нығытырға, ер үлсәүсе урыҫ түрәләрен һатып алып, 1768 йылда үҙҙәренең ер планына беҙҙең Олобайҙы ла кереттертәләр. Ләкин башҡорттарҙың ялыуы һөҙөмтәһендә ул саҡтағы Ырымбур гөбөрнәтере Рейнсдроп был нахаҡ һәм ялған планды юҡ иттертеп (утҡа яҡтыртып), 1769 йылда ул ерҙәрҙең дөрөҫ планын төҙөп бирергә капитан Бреховты юлландыра, нуғайҙар капитан Бреховты ла һатып алыуға ирешә. Хәйләле яңы план нуғайҙарға алданыраҡ — 1769 йылда, башҡорттарға 1770 йылда тапшырыла. Ләкин ер өсөн башҡорттар менән нуғайҙар араһындағы иҫке ғауға ун йылдан һуң яңырып, капитан Брехов планында

башҡорттар һәм нуғайҙар араһындағы сик ҡапма-ҡаршы ике төрлө: башҡорттарға тапшырылған планда — Һаҡмар йылғаһын сик һыҙығы (Олобай башҡорттар яғында) итеп, ә нуғайҙарҙыҡында Һаҡмарҙың уң яғындағы уға ҡойған Ҡаҫмарт һыуының һул яғы (Олобайыбыҙ!..) нуғайҙарға ҡалдырылып һыҙылыуы фашланғас, 1780 йылда Ырымбур гөбөрнә чиновниктары, Рейнсдроп юҡ иттерткән 1768 йылғы ялған пландың бер нөсхәһен эҙләп табып, башҡорттар ҡулындағы Брехов планына ла шул ялған пландың сик һыҙығын күсертәләр ҙә башҡорттарға — Ҡаҫмарт йылғаһының Олобайһыҙ уң яғын, нуғайҙарға бөтә Олобайлы һул яғын биләргә бойоралар. Башҡорт-нуғай тартышы уғата көсөргәнешләнеп дауам итә, ә, ниһәйәт, хәлләнеп алған башҡорттар инде Олобайға нуғайҙы килтертмәйҙәр, бесәнен йыл да үҙҙәре сабып алалар. Хәҙерге Һунарсы ауылы урынында ҡара-ҡыпсаҡлы Һунарсы Теләүембәт улының (1804 йылда иҫән) ғына өйө була, шуға ла уны Һунарсы тип атайҙар (ундағы Һунарсиндар, Теләүембәтовтар — килмешәк ҡара-ҡыпсаҡлы Теләүембәт баба нәҫелдәре). Һөмһөҙ нуғай яҫҡаныуҙарына тере кәртә булып, Боҫҡон Даянов бабабыҙ унда, Һунарсыға, Солтановтарҙың бер өлөшө менән бергә күсенеп ултыра. Тора-бара Ҡолбәковтар, Биктимеровтар, Баубәков һәм Байназаровтар, Иҡсановтар, Ташбулатовтар ҙа Сәнкем-Биктимерҙән күсеп киләләр. Нуғайҙарҙың быға ҡаны бик ҡыҙа, юҡҡамы ни шул Жултый нуғайҙары исеменән Ҡыдрәли Әзәпев тигән берәү хәрби гөбөрнәтер Г.С. Волконскийға: «Тәүҙә утар ғына булып, һуңынан ауыл булып күсенеп ултырыусы башҡорттар беҙҙе ҡыҫа», — тип зарланып яҙа...

Бер эҫенеп алғас ни, нуғайҙар ул ерҙе даулап өҙлөкһөҙ эш ҡуҙғаталар, гөбөрнәтергә, хатта батшаға шикәйәттәрен яҙалар. Һөҙөмтәлә мәсьәләне энәһенән-ебенәсә тикшертеп, генерал-гөбөрнәтер барон Игельстром 1789 йылда Граждандар палатаһына ғауғасы нуғайҙар ҡулындағы 1768 һәм 1780-енсе йылғы ялған пландарҙы таптыртып алып юҡ итергә һәм 1770 йылғы пландың башҡорттар ҡулындағы нөсхәһен ҡануни тип танырға, ә нуғайҙарға башҡорт еренә башҡаса ҡул һуҙмаҫҡа, тип бойороҡ бирергә ҡуша. Ләкин бойороҡ еренә еткереп үтәлмәй, сөнки гөбөрнәтерҙәр алмашына, чиновниктар һатып алына тора.

1803 йылда бабабыҙ Боҫҡон Даянов, башҡорт ерҙәренә нуғай баҫҡынсылығын туҡтатыуҙы һорап, Рәсәй императорына хат яҙа; нуғайҙарҙың ышаныслыһы — Воздвиженский ҡәлғәһенең иллебашы Ғәни Телибәнев тә башҡорттарға ҡаршы яҙылған шундай уҡ хатты еткерә батшаға. Гөбөрнәтергә урында хәл күрергә ҡайтарылған нуғай хатын 1804 йылдың 7 майында Ырымбур граждан гөбөрнәтере, тейешле саралар күрергә, тип, Земский судҡа тапшыра. Земский суд иһә Крашенинниковтың үҙ еренән ҡанунлыҡһыҙ Әсеүле ауылын ҡыуырға юллауын махсус суд ултырышы ҡарамағына ҡалдырып, Ҡаҫмарт һул яғындағы Олобайҙы, нуғайҙарға һатылған дворян заседателе Полюдовтың барып тикшереү һөҙөмтәһен танып, нуғайҙарҙың биләмәһе тип һанарға һәм унда башҡорттар сабып өйгән 110 кәбәнде ҡанунға ҡаршы һәм нуғайҙарға зыян килтереп эшләнгән эш, тип белдерергә бойора. Ә Боҫҡон Даянов хатына яуап итеп Ырымбур хәрби гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға Петербурҙағы Юстиция

министрынан ебәрелгән хатта батша исеменән башҡорттарға ул ерҙәр тураһындағы мәсьәләнең хөкүмәт сенатында ҡаралып хәл ҡылыныуын көтөргә ҡушыла.

Һәм шул йылдың майында уҡ Земский суд тәфтишсеһе Жултый редуты нуғайҙарының, Сәнкем-Биктимер, Һунарсы, Күҙәш ауылдары башҡорттарының, Әселе ауылы татарҙарының вәкилдәрен тейешенсә “өгөтләп”, ғауғалы мәсьәлә хөкүмәт сенатында хәл ҡылынғанға тиклем, үҙ-ара ыҙғышмаҫҡа, булған ерҙәрҙән әүәлгесә файҙаланып, тыныслыҡ һаҡларға һүҙ биреүҙәре тураһында яҙылған ҡағыҙҙарға ҡултамғалар ҡуйҙыртып ала. Ләкин ике-ара көсөргәнеш ҡырҡыулаша, күҙҙәрен ҡан баҫҡан һикһән нуғай өйөрө Олобайға ябырылып, бесән эшләп йөрөүсе бабаларыбыҙға һөжүм итеп ҡан ҡоя. Һәм бына тағы Боҫҡон Даянов бабамдан батшаға мөрәжәғәт:

***1805 йылдың 4 февралендә ҡабул ҡылынған. №1328/288.***

*Сиятельнейший князь,*

*Премилостивейший Государь!*

*За неполучением от местного начальства в Оренбургской губернии должного защищения, вынудили меня прибегнуть к стопам Вашего Сиятельства и просить: отрите слезы плачущих в предобидности и раззорении нашей, которая состоит в нижеследующем.*

*1-ое, в оной Оренбургской губернии правительству в разные присутственные места довольно чрез подаваемые от меня жалобы с изъяснением с прочими одновотчинниками моими башкирцами Кипчатской волости имею по течению реки Сакмары при самой оной на правой стороне на жалованной предкам нашим От Царей и Великих Князей Михайлы Федоровича и Алексея Михайловича земле по данным От Их Величеств Грамотам и владенным правам на жительствующие против наших деревень по течению оной реки Сакмары на левой стороне в Воздвиженской крепости и в Желтом редуте нагайцы самовольно переезжая реку Сакмару в наши дачи усильством своим в летние времена выкашивают траву и пасут свои конские табуны, а в зимнее время без ращетно губят лес, чем самым всему нашему обществу делают нестерпимую обиду и разорение и с чего ясно в ниже описанных обстоятельствах обнаруживается, когда самовластно и без дозволения на то от правительства, живущие в крепости Воздвиженской нагайцами из разных мест сшедшие ясачные татара в числе шестнадцати душ допустили на правую сторону реки Сакмары во внутрь к башкирским селениям при речке Асселю разстоянием же от крепости в 15-и верста, на котором напред сего места нами ежегодно производилось сенокошение, поселиться деревнею под названием Асселя со взятием с них нагайцами 500 руб. Каковой допуск учинен несоответственной с правилами, а кольми паче и без предписания Казенной палаты, которые проживание свое имели до пятой ревизии безгласными.*

*2-е, а как наш башкирский народ предвидя таковое присвоение вотчинной нашей земли, то принужденными нашлись ту часть земли в 788 году по согласию всех разных волостей вотчинников продать титулярному советнику (кой ныне надворный) Васильеву. А оной учинил перепродажу порутчику Петру Крашенинникову, которой за*

*собою узаконенным порядком справил и отказал и переведя крестьян заселил, тем самым ласкал себя быть удовлетворительными, но вместо того открылись разные чрез происки нагайцев и ясашных татар а паче за взятые за припуске 500 руб. денег, хотя и довольно находимы они были в затаенности несправедливыми, но не оставляли как прежде так и ныне доводить нас до бесконечного разорения и убытка, во избежание сего входил я Всеподданнейшим моим к — Его императорскому Величеству от 7 июля прошлого 1803-го года прошением о заступлении нас, на что хотя и последовало Монаршее благоволение со всевозможным поспешением о скорейшей окончательности нашего дела, но как Межевая Оренбургская Контора, Межевому Сената Департаменту донесение учинила, что башкирские земли за великостию оной межеванием некончены, а когда вся окружность нашего владения будет кончена тогда и дело просимое нами решится, а посему и нет нам надежды получить скорого решения.*

*2-е*[65]*, а между тем как припущенные нагайцами ясашные татары так и сами нагайцы без всякой бережливости чинят вырубку дельного и дровяного нам принадлежащего леса и как нас так и порутчика Крашенинникова крестьян тесня, к подлежащему пользованию не допускают, а тем самым причиняют весьма немалый убыток, которой должны мы неминуемо впредь заплатить ему сполна, ибо есть такова наша обязанность в данной Васильеву купчей, а посему сверх случившегося нам по производству в присутственной об оном деле немалого убытка и можем и должны быть до бесконечного разорения и несостояния отправлять должную Его императорскому Величеству службу, кою мы содержанием линии всегда исправляем посредством своего иждивения, не имея ни от коль определенного какового либо жалованья, провианта и фуража. —*

*3-е, предвидим же и ту нерешимость долговременную легко могущую произойти и от сего что при собирании производств из гражданских судов в Оренбургскую Межевую Контору и в рассмотрении дел в оной казалось бы быть уже незачем когда межевание учинено еще прошлого 1800-го года, при коем и подлежащие о спорной части земли от нас, нагайских татар и от порутчика Крашенинникова крепостные права отобраны с прописанием чего о происходимом напредь сего по делу о проданной нами помянутому покупщику земли Васильеву, и по перепродаже им порутчику Крашенинникову донесено мною в прошлом 803 году в феврале месяце чрез почту Его Сиятельству Господину Министру Внутренних Дел. И прошено в оудовлетворение объясненные мною обстоятельств о справедливом иску нашем на нагайских татар взойти в рассмотрение, на что последовало От Его Императорского Величества к бывшему Оренбургскому военному губернатору и кавалеру Бахметеву Повеление. Которой по оному учинил свое донесение и поднеся при оном в подробностях экстракт в которою оправдательные нас издавна решительные судебными местами на удовлетворение резоны Его императорскому Величеству Всеподданнейше поднес с предстательствующим и с прошением Всевысочайшего Соизволения по решениям судебных мест о припущенных нагайцами татар на землю проданную нами Васильеву, а от него Крашенинникову, перевести с оной на порезжую казенную землю коей в здешней губернии и в самом Оренбургском уезде отыскаться довольно может и что Казенная Палата троекратно в Земский суд еще, до происходимого в здешней губернии Генерального Межевания о своде с*

---

[65] Документтың нумерланышы шундай.

*проданной — нами земли указами предписаний последовали. — Между чего припущенные нагайцами ясашные татара нарочито ежегодно как у нас башкирцов так и у порутчика Крашенинникова чрез выпускаемой скот на поля хлеб и сенные покосы вытаптывают без малейшей пощады, о чем просил Оренбургского Земского суда дабы оной учинил в том воздержание. На место того*

*4-е, прошлого 1803 года июля 3-го числа реченного Земского суда дворянской заседатель Полюдов приехав на спорные места*[66] *с собранными им вроде понятых не из самоближайшей по смежности селений, а из дальных крепостей Пречистинской, Красногорской и Верхнеозерной и Кондуровской слободы с нагайцами и отборными людьми кои имеют дружеское между собой обхождение и со оными, состоящими с нами в споре нагайцами и ясашными татарами подлого поведения, как то обращающихся во всегдашнем пьянстве и сам будучи не в трезвом же виде вызвал наших жителей и порутчика Крашенинникова к себе. Объявил сперва словесно, что по Имянному Его Императорского Величества Соизволению состоящей у нагайцев и Ассельских татар спорной с нами и порутчиком Крашенинниковым земли Оренбургское губернское правление Земскому суду Указом предписало нам и оному Крашенинникову сенокошение производить воспретить, причем спрашивал кто до последнего генерального обмежевания владел теми местами на кой объявлены были ландмилицкие Шешминской драгунской и Алексеевской пехотной полки коему хотя наши жители и порутчик Крашенинников изъявили, что захват оной простирался и далее, но по причине той что они наедино-временное расположение находились и так как бы на постое, а ныне у первых нас по правам, а у последнего по крепости и отказной книге то самое количество кое в те права и крепостя явствует и как мы, так и Крашенинников в непринадлежащее владение до самого Межевого конторою обмежевания никогда не вступили, а что при оном межевание нагайскими и деревни Асселя татарами хотя им и было воспрещение напредь оного; но по вкоренившемуся в них против начальства упрямству и по донесть оного не покидают, и тем самым, —*

*5-е, в прошлом 1804-ом году в июле месяце при начатии нами сенокошения по речке Касмарке, означенного Желтого редута нагайцы с юртовым старшиной Абыком Кильмеметевым, пятисотенным ясаулом юртовым сотником и походным старшиной — не в малом количестве нагайцев приехали и с кой многие были не в трезвом виде, и приглася с собою Земского суда реченного заседателя Полюдова, а с ним находились два подъячий, из коих один Янов, по найму старшиной Абыка Кильмеметева, а последней Сапожников при Полюдове, все они были в не трезвом пьянстве, но не приглася к себе никаких посторонних людей, дабы могли быть всему свидетелями, но заседатель же Полюдов, видно подстрекатаемостью нагайцев так был азартен, что кричал необычно с ознначенными двумя писарями к нагайцам: «Что вы смотрите? Принимайтесь и бейте их досмерти!», — а с сим самым словом вначале и приступили из нагайских начальников, пятисотенной ясаул Янтемиров и юртовой старшина Кильмеметев, сотник Чиянов и походной старшина Уразманов, а за ними все бывшие последовали в каковой наглой дерзости, полагали мы быть из нас совершенно убитыми, а какие именно причинили увечьи и раны нам башкирцам — о том привезенном в Оренбургский Земский суд, в коем по учиненному чрез штаб-лекаря Быстринского*

---

[66] Олобайға.

*Свидетельству оказалось и мне поверенному Дуянову от великих ударов глазные яблоки кровью так сильно обливши были, что несколько дней от того был слеп и около обоих глаз багровые с опухолью пятна, на спине пониже левой лопатки и на локте от побои синие пятна, на правом плече прошибина раною; башкирца Ярмухамет Кутлубаева на лице на левой щеке багровые пятна, на левой лопатке и руке синие пятна, а на спине ранами прошибы, на правом плече синие с прогибом да раны на правой ноге и пояснице синие знаки; у башкира Абдряшева на голове кожа от удара разсечена, на лице Щапика, на правой плече и руке синие с опухолью пятна, на спине в трех местах кровавые знаки, на левой руке на локте боявые знаки. Да чрез судебного заседателя Полюдова поступок причинено оставшимся на том сенокошении башкирцам, писарем Яновым, который бросясь с имеющимся в руках его кинжалом на башкирца Кускилду Адчимазова и разсек ему левую руку подле кисти до самой кобри, который крайне был избит, что в жизни отчаянной находился; башкирец Абуталип Султанбратов также сильно избит, что на месте был обравлен в чаянии мертвого, которой и поныне не имея от ран и побой облегчение; и башкирца Ахмера Ильчина также был не меньше, первый из двух сильно избит, да сверх того три башкирские избиты женщины, при чем самим пятисотенной ясаул Янтемиров сорвал с меня Дуянова с шеи бумажник, в коем было денег ассигнациями 55 руб., у башкирца Ермухаммета нагаец Умрали Салтыков отнял косу и тюбетейку в четырех да дву лошадей и с кой одну с седлом ценою в 75 руб.; с жены моей сорвана с головы кажбав ценою во 100 руб., с другой женки Ербики Шамкиной часть кажбавы ценою в 35 руб., а по причине сего ко освидетельствованию были присланы от кантонного Начальника Куватова юртовой сотник Ерали Янгузин, старшинской писарь Бекбулат Бикбаев, юртовой выборной — сотник Исмаил Сулейманов да и протчие из башкир старики, при оном свидетельстве находились в каковых содействиях заседателя Полюдова, я по выздоровления от побои сходил Оренбургскому генералу военному губернатору от кавалерии генералу князю и кавалеру Григорию Семеновичу прошением. Которой на то хотя и учинил Земскому суду свое предложение, но оной суд нимало в подробность разбирательством не входил, а только несколько от нагайцев да и то самую малую часть вещей обратно получили, а что до преступления касалось, то сие осталось в туне.*

*6-е, сверх всего сего к сущему нашему разорению Оренбургской Земской суд прибыв в Желтый редут созвал нас из деревень Сунарчиной и Бектемировой башкирцев, объявил нам от 10-го числа декабря прошлого 1804 года Оренбургского губернского правления в Земской суд последовавшей Указ, состоящей в споре с живущими в здешнем уезде разных селений нагайскими татарами и башкирцами, по речке Касмарке по обе оной стороны сенные покосы выдать во владение Желтого редута нагайцам, а по свидетельству тем судом оказалось, что по течению речки Касмарки состоит накошенного и оставленного деревень Сунарчиной и Бектемировой у башкирцов Желтого редута с нагайцами спорных лугах по обе оной стороны сена и именно двести стогов, а по правую двенадцать целых, а початых двенадцать же, а всего с початыми двести двадцать четыре стога, каковое сено помянутой Земской суд нагайцам свести в селение приказал, что они в два дня и исполнили. Чем причинил нам несносное разорение, так что по истинной цене полагая целые по восьми рублей, а початые с полы — на тысячу семьсот пятьдесят четыре рубли, от чего в обоих наших башкирских*

*деревнях от бескормицы без малого до двух тысяч скотин совершенно могут свалиться и что по несостоянию ныне здесь господина военного губернатора, не имеем нигде себе в здешней губернии о покровительстве защищения и от насильственного присвоения нагайцев и Ассельских ясашных татар удаления «в несправедливом присвоении», как только осмелился от Вашего Сиятельства представляя все выше писанные с нами случившиеся, как прежние так и нынешние стесненные обстоятельства, и с кой довольно усмотреть соизволите что салатанаульские нагайцы и ясашные татары чинят нам великие наглости чрез последство послаблямое от Оренбургского Земского суда нежели не получил Вашего Сиятельства заказ Вашего предстательства и не будет вскоре нам для продовольствия скота воизворот сена, также ежели нагайские татара не удержутся от буйства, а ясашные татара с речки Асселя на казенную землю сведены не будут, то мы опасаясь с нас по обязанности продажи земли понесенных убытков принуждены будем просить на житьбе в другие губернии, а посему и ожидаем нетерпеливо Вашего Сиятельства предстательства, а потому более и то что по предписанию от Господина Министра Внутренних Дел Графа Виктора Павловича Оренбургскому Гражданскому губернатору которой в прошлом 1804-м году в ноябре месяце для рассмотрения о принадлежности нам неоспоримость сверх древнего в праве башкирского в землеведения основано на содержании Указа Правительствующего Сената 19 сентября 1744-го года о поселении под городкой Оренбургской Сеитовской слободы и на самом том 7-го августа 1768-го года определении бывшего Оренбургского губернатора Князя Путятина, по которому нагайцы из Казанской губернии Оренбургскую переселены, а затем и план 1740 года в разрешении наших споров на владение башкирское от бывшей губернской канцелярии ко успокоению от всех волокит и тяжестей дан. В рассуждении чего всенижайше прошу по толь Великой Вашей должности за бедной наш народ вступясь удостоить прозорливым оком свое благорассмотрительное предположение.*

*Сиятельнейший Князь Высокомилостивейший Государь — всенижайший слуга Оренбургской губернии и уезда 9-го Башкирского кантона Чанким-Кипчатской волости деревни Бектемировой от мирских людей поверенной башкирец* ***из князей тархан*** *Бускун Дуянов тамгу свою приложил таковую*[67]*:*

*Со слов переводил талмач Алексей Сергеев.*

*Оренбург, 1805 года генваря 17-го дня.*

Боҫҡон Даянов бабаның талмас Алексей Сергеев ҡулынан ошолай оҙон итеп яҙылған, уның ҡатмарлы йөмләләрен, һөйләү стилен хәҙерге уҡыусылар өсөн аңлауы ҡыйыныраҡ булған ошо үтенеснамәһен Петербур батша һарайындағы аҡыллы баш уҙаман мөмкин тиклем ҡыҫҡа һәм аңлайышлы, ләкин йөкмәткеһе төҙөк инша рәүешендә килтереп һала батша алдына:

***Дело по прошению поверенного от башкирцев Тархан Бускун Дуянова, жалующегося на неправильное отнятие крепостных их земель ясашными татарами по реке Сакмаре. 1805 г.***

---

[67] Минең ата-бабаларымдың батшалыҡ тамғаһы — Донъя Ҡуласаһы (Свастика) ишараты (өлөшләтә) ҡуйылған.

*Оренбургской губернии и уезда 9-го Башкирского кантона Чанким-Кипчатской волости деревни Биктемировой от Мирских людей поверенный башкирец из Князей тархан Бускун Дуянов в просьбе Вашей Светлости изъясняет, что верители его башкирцы Кипчатской волости имеют заселение на правой стороне по течению реки Сакмары на пожалованной предкам их от царей и великих князей земле по данным грамотам и владеным правам. Жительствующие против их деревень по левую сторону реки Сакмары Воздвиженской крепости и в Желтом редуте нагайцы усиленно завладели их сенными и лесными угодиями, допустили без всякого от начальства позволения, пришедших из разных мест ясашных татар в числе 60 душ поселения в их Башкирских дачах деревнею под названием Асиля, со изъятием с них нагайцами 500 руб. — Они Башкирцы претерпели таковое от нагайцев притестнение входили в 803 году со всеподданнейшим о заступлении их к Государю императору, на что хотя и последовало высочайшее повеление о скорейшем окончании в Оренбургской Межевой конторе дела о землях; но они не имеют надежды получить скорого решения, поелику контора донесла межевому Сената департаменту, что Башкирские земли за великостью их межеванием еще не кончены.*

*Они Башкирцы просили о своде оных татар с их дач на другие земли; но вместо того объявлен им от Оренбургского Земского суда Указ Губернского правления, о воспрещении им, Башкирцам, производить на спорных дачах сенокошение. А в июле месяце прошлого 1804 года, когда они начали в означенных своих дачах сенокошение, то соперники их нагайцы приехав с заседателем Земского суда Полюдовым, произвели драку, прибили много Башкирцев, отняли разные вещи, а у некоторых и деньги.*

*На сей их нагайцев дерзкий поступок, приносили они Башкирцы жалобу Оренбургскому военному губернатору Князю Волконскому, по предписанию которого, хотя им некоторые вещи и возвращены, но о поступке нагайцев оставлено без исследования.*

*А в декабре месяце прошлого 1804 года Земский суд объявил им Указ Губернского правления предписывающей спорные сенные покосы отдать во владение Желтого редута нагайцам, приказать сим свести к себе скошенное Башкирцами и поставленные в стога сено, которого всего 224 стога ценою на 1454 руб. ими свезено, через что они и лишились всех способов к продовольствию скота — и по не состоянию ныне там военного Губернатора, не имели ни от кого защиты, просить Вашу Светлость о покровительстве и доставлении им защиты.*

Шуның артынса уҡ Рәсәй батшаһы Ырымбур гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға яҙа:

*Милостивый Государь мой Князь Григорий Семенович!*

*Повторенной от Башкирцев 9-го кантона Чанким-Кипчатской волости тархан Бускун Дуянов жалуется мне на несправедливое у них отнятие крепостных их земель с накошенным на оных ими сеном, которое Оренбургским Земским судом по предписанию Губернского правления отданы живущим с ними в соседстве нагайцам, через что они лишены всех способов прокормлению скота.*

*Не имея точного сведения о деле просителей, я долгом поставил просьбу их препроводить к Вашему Сиятельству и покорнейше просить Вас, Милостивый Государь мой, ежели оной справедлива, доставить просителям законную защиту.*

*Имею честь быть с истынным почтением и преданностию.*

*Милостивый Государь мой Вашего Сиятельства. Февраля 14 дня 1805 года.*

*Его Сиятельству — Кн. Г.С. Волконскому.*

Хәрби гөбөрнәтер Г.С. Волконский үҙ сиратында 1805 йылдың 17 апрелендә Ырымбур Земский судына ҡәтғи йөкмәткеле әмернамә бирә: эште тикшерергә һәм ғәйеплеләрҙе ҡануни хөкөмгә тарттырырға. Шуға яуап булып, 1805 йылдың 30 июнендә Г.С. Волконскийға Ырымбур Өйәҙ судынан рапорт атҡарыла. Суд әһелдәре был эшкә бәйле ваҡиғаларҙың һәм ялыу-волокиталарҙың барыһын тиң энәһенән ебенәсә тикшереп һәм тасуирлап, Олобайҙағы баяғы ҡанлы тартыштан һуңғы хәлдәрҙе лә өҫтәкләй: 9 ноябрҙә Жултый редуты нуғайы Хәсән Йомалин 12 кешелек шайкаһы менән килеп, Һунарсы ауылы көтөүлегенән 41 һыйырҙы ҡыуып алып киткән... Кантон башлығы Буранғол Ҡыуатов хәрби гөбөрнәтергә яҙған рапортында Земский суд чиновниктарының мәсьәләне ғәҙел хәл ҡылыуына башҡорттарҙың өмөтө өҙөлөүен һәм ышанмауҙарын белдереп, нуғайҙарҙың һөмһөҙ яҫҡаныуына туранан-тура гөбөрнәтер үҙе сик ҡуйыуын һораған...

Әммә Земский суд һаман ҡәтғи ҡарар сығармай — мәсьәләне хәл ҡылыуҙы киләсәккә ҡалдыра: әгәр башҡорт Даяновтың үтенесе һәм кантон башлығы Ҡыуатовтың рапорты ғәҙел икәнлеге раҫланһа, Земский суд уларҙы ярлыҡаясаҡ, шуға күрә башҡорттар дүрт аҙна араһында Губернское Правлениеға мөрәжәғәт ҡылырға тейештәр (Боҫҡон Даянов иҫкәртелгән был хаҡта)...

Күренеүенсә, ғауғалы эште хәл итеү һаман һуҙыла: эт — эткә, ә ул эт — ҡойроҡҡа һылтанып тайшана.

Олобай өсөн дәғүәләрҙең һүрелмәүен Ырымбур хәрби гөбөрнәтере кәнсәләрендә 1817 йылдың 24 июлендә башланған һәм 1828 йылдың 28 июлендә генә тамамланған эш ҡағыҙҙары күрһәтә: «О спорной земле Воздвиженской крепости с башкирцами Кара-Кипчатской и Усерганской волостей и нагайцами». 95 табаҡлыҡ был папка башҡорттарҙың һаман ғәҙелһеҙлек кисереүен аңлатыуы менән асыла:

***Его превосходительству господину генерал-лейтенанту — Оренбургскому военному губернатору, Управляющему по сей губернии Гражданскою частию и Кавалеру Петру Кирилловичу Эссену***

***9-го Башкирского кантона начальника майора и кавалера Куватова***

***РАПОРТ***

*Поданное ко мне прошение сего июля 19-го числа от поверенного деревни Бектемировой тархана Бускуна Дуянова находя с своей стороны описанные в нем обстоятельствы во всем справедливыми, осмеливаюсь при сем представить оное на благорассмотрение Вашего Превосходительства и покорнейше просить взойтить в бедственное положение башкирцов, а нагайцев Желтого редута и Воздвиженской крепости от неправильного и усильного владения башкирскою землею по правую*

*сторону реки Сакмары лежащую, которая никогда казне не принадлежала и ныне не принадлежит. По данной Вашему Превосходительству Начальственной власти удержать, предоставить им пользоваться оною согласно решению всех судебных мест и господ начальников губернии, а особенно по постановлению Устроителя Края Оренбургского Тайного Советника и Кавалера Неплюева утвержденному самим Правительствующим Сенатом по левой стороне той реки Сакмары. — И тем справедливой стороне башкирской — оказать начальственное Вашего Превосходительства защищение и покровительство, на что буду иметь счастие ожидать в разрешение повеление. 19 июля 1817 года.*

Яңы гөбөрнәтер П.К. Эссендың яңы кантон башлығы (әүәлге кантон Буранғолдоң улы) Ҡәһәрмән Ҡыуатовҡа 31 июлдәге яуабында Ырымбур гөбөрнә идаралығына был бәхәсле эш буйынса бөтә материалдарҙы йыйып алып өйрәнергә ҡушыуын, ә ыҙғышыусылар иһә, мәсьәләне хәл ҡылғанға тиклем, ул ерҙәрҙе нисек бар — шулай файҙалана торорға һәм тынысыҡ һаҡларға тейешлектәрен яҙа. Ошондай уҡ йөкмәткеле ҡағыҙ Земский судҡа ла ебәрелә. Хөкүмәт Сенатынан да П.К. Эссенға император исеменән шуға оҡшаш йөкмәткеле указ килә: башҡорттарҙың батшаға үтенес ҡағыҙында күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙе тикшереп һәм йыйып, Хөкүмәт Сенатына атҡарырға ла хәл ҡылыуын көтөргә — чиновниктарҙың волокитаһы бер рәүешле өр-яңынан башлана...

Ләкин П.К. Эссен эште тиҙләтергә тырыша: 1820 йылдың 17 июлендә 1695-енсе фарманы менән Ырымбур Войсковой Кәнсәләренә һәм Земский судҡа бойора: ***Жултый биҫтәһендә һәм редутында йәшәүсе нуғайҙарҙың Һаҡмар уң яғындағы башҡорт аҫаба ерҙәренә башҡорттарҙың рөхсәтенән тыш аяҡ баҫырға хаҡтары юҡлығын башҡорттарға һәм нуғайҙарға ҡаты киҫәтеп раҫларға, ә төптө үҙҙәренеке түгел кеше урманын ҡарауылларға ҡуйылған нуғай ҡарауылсылары вазифаһын бөтөрөргә, шулай уҡ Межевой Контораның ул ерҙәрҙең башҡорттарҙыҡы икәнлеген күрһәтеүсе планын Земский судта раҫларға ла шул хаҡта аҫаба башҡорттарға һәм улар менән ыҙғышыусы нуғайҙарға мәғлүм ҡылырға.*** Әммә был ҡарар ҙа бойомға ашырылмай — бюрократияның туҙанлы өҫтәл буҫтауҙары аҫтында ҡапланып ҡала килә.

Булып үткән ваҡиғаларҙы, ике яҡтың ялыуҙарын һәм уларға ҡарата сығарылған ҡарарҙарҙы ысынлап та энәһенән ебенәсә ҡабат тикшереү башлана, чиновниктарҙың был эше биш йыл буйына һуҙылып, 1822 йылдың 28 июлендә П.К. Эссенға яҙылған йылғалай оҙон аңлатма менән ослана. Башҡорт ҡалъяһын тартып алып һоғоноуҙан өмөттәре өҙөлмәгән Жултый нуғайҙары был ҡалъяны инде яңы гөбөрнәтер ҡулы аша алырға яҫҡанып, үҙҙәренең юллаусыһы итеп был юлы ике башҡортто — Аҡъюл Юлъяҡшинды һәм Һунарсы ауылы ҡара-ҡыпсағы Үтәгән ҡарттың улы Бикмөхәммәт Үтәгәневте яллайҙар. (Был бәндәнең ике туған ҡустыһы Ҡолмөхәммәт Күсмөхәммәт улы Үтәгәнев һуңынан, ағаһының ҡылығынан оялып, буғай, хәҙерге Күгәрсен районындағы Сәнкем-Тәүәкән ауылына күсеп китә). Уларҙың ялыунамәһен П.К. Эссен 1824 йылдың 23 июлендә Ырымбур Земский судына юлландыра ла бер юлы Ҡәһәрмән Ҡыуатовҡа, нуғай

баҫҡынсыларын башҡорт ерҙәренә ебәрмәҫкә, тигән бойороғо өсөн шелтә иғлан итеп, бынан һуң ер эштәренә ҡыҫылмаҫҡа — суд аша ғына эш йөрөтөргә ҡуша.

Шул уҡ 1824 йылдың 19 сентябрендә П.К. Эссен ҡулына Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдары халҡының һайлап ҡуйылған ышаныслыһы Аҡдәүләт Килдебаевтан[68] баяғы Аҡъюл Юлъяҡшин һәм Бикмөхәммәт Үтәгәнев хөсөтөнә ҡаршы йүнәлтелгән үтенеснамә килеп төшә, унда ***мәсьәләнең асылы аңлатылып, Ырымбур Межевой Конторaһы бәхәсле ерҙәрҙең башҡорттарҙыҡы икәнлеген дөрөҫләп, бөтә сиктәрҙе күрһәтеп план төҙөп биреүе, ә нуғайҙар ҡулындағы ялған пландың кире ҡағылыуы; гөбөрнәтер генерал-майор Бахметев заманында уҡ Ырымбур Граждандар Палатаһы ул ерҙәрҙең башҡорт аҫаба ерҙәре булыуын раҫлауы әйтелә***. Баҡтиһәң, 1818 йылда Ырымбур һәм Эстәрлетамаҡ форштмейстеры Максимов Ҡаҫмарт буйындағы урманды тикшереп, уны йырҡкыстарса ҡырҡыуҙы сикләр өсөн, ике яҡтан да — башҡорттарҙан да, нуғайҙарҙан да урман һаҡсылары тәғәйенләп киткән булған, ә нуғайҙар шуны мәкерле файҙаланып, нуғай ҡарауылсы булғас, тимәк, ул урмандар нуғайҙарҙыҡы, тип, Ҡаҫмарт буйҙарына яңынан ҡыҙышып ҡул һуҙа башлағандар.

